# ТУҒАН ӘҘӘБИӘТ

# 5





Башҡорттағы намыҫ, иман менән
Ярһып тибә Зәки йөрәге,
Ҡолаҡ асма дошман ҡотҡоһона!
Зәки — Башҡортостан терәге!

*Шәйехзада Бабич*



83.3(Баш)я421
Т75
РОНО
597/10

# ТУҒАН ӘҘӘБИӘТ

**Урта мәктәптең**
**5 синыф уҡыусылары өсөн**
**дәреслек-хрестоматия**

Автор-төҙөүселәре:

**М. Х. Иҙелбаев, Ә. М. Сөләймәнов, М. Б. Юлмөхәмәтов**

Дүртенсе баҫма

*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы тарафынан*
*раҫланды*

КИТАП

ӨФӨ — 2003

УДК 82 (512.141)
ББК 83.3 (2 Рәс-Баш) я 721
Т 75

**Туған әҙәбиәт.** Урта мәктәптең 5 синыф уҡыусылары өсөн
Т 75 дәреслек-хрестоматия / Авт.-төҙ.: М. Х. Иҙелбаев, Ә. М. Сөләйманов, М. Б. Юлмөхәмәтов. — Дүртенсе баҫма. — Өфө: «Китап», 2003. — Һүрәттәре менән 240 бит; төҫлө йәбештермә һүрәттәр 8 бит.

ISBN 5-295-03181-0

**УДК 82 (512.141)**
**ББК 83.3 (2 Рәс-Баш) я 721**

© Авт.-төҙөүселәре: М. Х. Иҙелбаев, Ә. М. Сөләймәнов, М. Б. Юлмөхәмәтов, 1991
© Авт.-төҙөүселәре: М. Х. Иҙелбаев, Ә. М. Сөләймәнов, М. Б. Юлмөхәмәтов, 1999, үҙгәрешле

**ТП — 35**

**ISBN 5-295-03181-0**

# Беренсе бүлек



*Йәмле йәй үткән, һәм бына*
*Көҙ айы инә икән.*
*Дәреслектәр битен асып,*
*Сентябрь килә икән.*

**Рәшит НИҒМӘТИ**

**1909—1959**

«Рәшит Ниғмәтиҙең йөҙәрләгән шиғырҙары, ундан артыҡ поэмаһы, пьесалары һәм проза әҫәрҙәре өс томлыҡ һайланмаға тупланғандар. Әммә уның әҫәрҙәре кешеләргә биргән илһамды, дәртте, күңел емештәрен бер ниндәй томдарға ла һыйҙырыу мөмкин түгел. Уның ижады башҡорт халҡының рухи байлығына әйләнде. Шуға күрә лә халыҡ уны үҙенеке — Халыҡ шағиры тип атаны...» *Мостай Кәрим.*

## ХӘЙЕРЛЕ ЮЛ ҺЕҘГӘ!

Беренсе сентябрь көнө,
Ә ҡояш әле ҡайнар.
Беренсе сентябрь үҙе,
Ағастар һаман байҙар.

Япраҡтар ҡойолмағандар
Япраҡтар әле йәшел.
Ямғыр ҙа быйыл аҙ яуа,
Ялт та йолт итмәй йәшен.

Мәктәптәр матур биҙәлгән,
Мәктәптәр ишеге асыҡ.
Балалар мәктәпкә бара,
Шатланып, дәртле баҫып.

## Мәктәпкә

Хеҙмәттә, походта, ялда...
Ҡайҙа булмаһын, улар, —
Беренсе сентябрь көнөн
Һис тә онотманылар.

Бына ул көн!
Бөтә бала
Һағынды өҙөлөп һине,
Балалыҡ менән йәшлектең
Иң гүзәл яҡты көнө!

Урамдан малайҙар үтә,
Яңы костюмдар кейеп,
Осраған бөтә олоға
Хөрмәтле сәләм биреп.
Үтәләр урамдан ҡыҙҙар,
Бәйләп алъяпҡыс ағын.
Ҡулдарындағы букеттар
Алалар күҙҙең яуын...

Коридор.
Балалар.
Шау-шыу.
Гөр килә мәктәп бөгөн.

Берәүҙәр күрешә, берәүҙәр
Дәртләнеп һөйләй һүҙен.
— Походта булдыҡ, — ти берәү,
— Колхозда булдыҡ, — яуап.
— Һыу, урман күрҙек, — ти берәү,
— Беҙ ураҡ урҙыҡ, — яуап.
— Йәнлектәр, ҡоштар күҙәттек.
— Тап диңгеҙ кеүек иген...
— Ботаник булыр инем мин.
— Комбайнер булыр инем.
Шат йөҙҙәр.
Күңелдәр көрҙәр.
Гөрләшеү. Тәбрик. Сәләм.
Бик яҡшы: йәмле йәй көнө
Үтмәгән икән әрәм.

## Уҡытыусыбыҙ

Һәм ҡапыл йөрәккә инде,
Яңғыраны матур тауыш,
Һағынылған, оҙаҡ көтөлгән,
Һөйөлгән баҡыр тауыш.
Тын океан ярҙарында ла,
Карпаттау ҡырында ла,
Мәңге туң төньяҡта ла,
Мәңге йәй Ҡырымда ла, —
Ошо ҡыңғырау, ҡыңғырап,
Башланы уҡыу йылын,
Яҡты синыфтарға саҡырҙы
Ватандың улын, ҡыҙын.
...Һәм алда, һәйкәл шикелле,
Уҡытыусы баҫып тора,
Ул ҡотлау һүҙе әйтергә
Уң ҡулын алға һуҙа...
Уҡытыусыбыҙ!
                    Ниндәй ҡайнар
Мөхәббәт сорнай һине!
Ул һөйөү — сыуаҡ[1] һәм тәрән,
Уйҙар етмәҫлек ине.
Ҙур хөрмәт һиңә,
Уҡытыусы!
Бергәләп һинең менән
Үтербеҙ бергә беҙ әле
Аяҡ баҫмаған ерҙән.
Бик оҙаҡ бергә барырға,
Бик оҙон беҙҙең юлдар.
Һәм яңы көстәр бирерһең,
Талған саҡтарҙа ҡулдар.
Фәндәр тауына менгәндә,
Ҡуйырһың юлға маяҡ.
Һин яңы көс бирерһең,
Талған саҡтарҙа аяҡ.
Үткән быуаттар байлығын
Барларбыҙ бергә-бергә.

---

[1] *Сыуаҡ* — яҡты, ҡояшлы көн (шиғырҙа был һүҙ күсмә мәғәнәлә алынған).

Барырбыҙ
Арина[1] менән
Пушкин дуҫ булған көнгә.
Тыңларбыҙ яңы йыр итеп,
Ул яңғырар йылдар үтә:
«Буря мглою небо кроет,
Вихри снежные крутя»...
Эй ҡәҙерле уҡытыусыбыҙ,
Йөрәк һүҙебеҙ ошо:
Дан һиңә, мөхәббәт һиңә,
О, беҙҙең йәшлек дуҫы!

## Башланды

Һәм уҡытыусы,
саф күңелдән
Барын да тәбрик итеп:
— Балалар, асығыҙ, — тине, —
Китаптың тәүге битен.
Асылды китап. Был китап
Нимәләр һөйләр тағы?
Асылырмы өр-яңы ерҙәр?
Табылырмы алтын тауы?
Белерҙәр:
борон донъяла
Миклухо-Маклай[2] торған.
Һыуҙар, утрауҙар һәм ерҙәр
Ул аса торған булған.
Балалар, Маклай шикелле,
Маңлайҙан түгеп тирҙәр,
Китаптың һәр бите һайын
Асырҙар яңы ерҙәр.
Ниндәй тиңһеҙ шатлыҡ та һуң
Белмәгәндәрҙе белеү,
Парта артында көйөнсә
Донъяны гиҙеп йөрөү!

---

[1] *Арина* — А. С. Пушкиндың бағыусыһы (тәрбиәсеһе, ҡараусыһы)

[2] *Миклухо-Маклай* (1846—1888) — урыҫ сәйәхәтсе-географы. Ул Тымыҡ океан утрауҙарын һәм Яңы Гвинеяны башлап өйрәнеүселәрҙең береһе.

...Дуҫтарым!
Һеҙҙең ҡаршыла
Фән тауы ҡалҡып тора.
Шул тауҙың иң-иң түбәһе
Яҡтырып, балҡып тора.
Юҡ унда шымарған юлдар,
Тик ташлы һуҡмаҡ ҡына.
Тауҙың үренә ҡыйыуҙар
Тырышып-тырмашып менә.
Тышта көҙ. Һалҡынса елдәр.
Күңелдә һеҙҙең йылы.
Ил теләй:
    Һәр бер баланың
Хәйерле булһын юлы!

?

1. Беренсе сентябрь көнө шиғырҙа нисек һүрәтләнә? Ул ысынбарлыҡҡа тап киләме? Шул урынды табып уҡып күрһәтегеҙ.
2. Беренсе сентябрь тураһында һүҙ алып барғанда, шағир уның ниндәй билдәләренә генә иғтибар иттерә? Ни өсөн? Ул билдәләр аша ниндәй хис, кисерештәр әйтелә?
3. Ни өсөн шағир уҡытыусыға мөрәжәғәт итеп: «Дан һиңә, мөхәббәт һиңә!..» тип өндәшә? Шиғырҙа уҡытыусының роле нисек асыла?
4. Әгәр ҙә һеҙгә уҡытыусылар көнөнә арналған кисәлә сығыш яһарға ҡушһалар, һеҙ был шиғырҙан ниндәй юлдарҙы файҙаланыр инегеҙ?
5. Үҙегеҙҙең йәйге каникулды нисек үткәреүегеҙ тураһында һөйләп бирегеҙ. «Йәйҙең бер көнө», «Йәйге хәтирәләр», «Сәйәхәтнамә», «Ауылда йәй», «Көтөүлектә», «Урманда» һ. б. шуның кеүек темалар буйынса хикәйә яҙып ҡарағыҙ. Хикәйәнең үҙәгендә берәй ваҡиғаны тасуирлағыҙ. Ваҡиға тигәндә, үҙегеҙҙең башығыҙҙан үткән хәлде, берәй урынға (йылға, күл, ҡая, урман һ. б., уларҙың исеменә) бәйле легенда, риүәйәтте күҙ уңында тоторға була. Мәҫәлән, бар донъяға билдәле Шүлгән мәмерйәһенә барҙығыҙ, ти. Ул сәйәхәт хаҡындағы хикәйәгеҙҙе шулай башлап китергә мөмкин. «...Оҙаҡламай самолетыбыҙ кәйелеп түбән төшә башланы. Аҫта Бөрйән. Беҙ, аҫылынып тик торабыҙ. Бөтә Бөрйән тауҙары, ҡая-ташы, урманы, Ағиҙеле беҙҙең ҡаршыға йүгерә кеүек...

Машиналарға тейәлешеп, Шүлгән мәмерйәһенә ҡарай йүнәлдек. Юлыбыҙ урман ярып һалынған. Әле бейек тауҙарға үрләй, әле атылып түбәнгә төшә...
Алда әрәмәлек күренде.
— Йылҡысыҡҡанкүл! — тине кемдер тулҡынланып...»
**6.** Шиғырҙың «Мәктәпкә» тигән бүлеген ятлағыҙ.

* * *

Төндә
    ҡарап торҙом,
        уйҙарымды
Йыраҡ йондоҙҙарға оҙатып.
Уйҙар
    ярты юлдан кире ҡайтты,
Үтелмәйсә ҡалды йыраҡ юл.
Мин уйланым:
    — Ниҙәр йәшәй икән
Ошо йондоҙҙарҙан бейектә?
Беҙгә күренмәгән ҡояшмы икән,
Беҙгә күренмәгән ерме икән?
Астрономдар әйтте:
        —Был донъяла
Ерҙә тыуған оло тойғо бар.
Беҙ күрәбеҙ уны.
        Ошо ҙур хис
Юғарыраҡ барлыҡ йондоҙҙан.

?

1. Шағир был шиғырында нимә әйтергә теләй?
2. «Ерҙә тыуған оло тойғо» нимә ул?
3. Р. Ниғмәтиҙең тағы ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ?



**Баязит БИКБАЙ**

**1909—1968**

«Баязит Бикбай бөтә жанрҙа ла берҙәй ҡыҙыҡһыныу, дәрт-теләк менән эшләй торғайны. Ул талантлы шағир ҙа, драматург та, романист та... Баязит Бикбайҙың бик оҫта либреттист булғанын айырып әйтер инем. Ул «Ҡарлуғас», «Салауат Юлаев», «Шәүрә», «Замандаштар», «Азат» опералары һәм «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы либреттоларының авторы». *Хөсәйен Әхмәтов.*

## ТУҒАН ТЕЛ

Ерҙә кеше һөйәгенән
Убалар үҫкән...
Тел — тере шишмә — үлмәгән,
Бөгөнгә еткән!
Шул тел менән тыуҙым, үҫтем,
Торам бөгөн дә.
Аңлай мине ғәзиз халҡым
Туған телендә.
Минең телем — тыуған ерем,
Әсәм тауышы,
Халҡымдың бай хазинаһы,
Таҙа намыҫы!
Ерҙә халыҡ йәшәй икән, —
Теле лә йәшәй.
Телен асҡанда һәр бала
Әйтәсәк: «Әсәй!»

?

1. Туған телде ни өсөн хөрмәт итәбеҙ? «Тел — тере шишмә — үлмәгән, бөгөнгә еткән», «Туған тел — халыҡтың бай хазинаһы» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
2. «Туған телем — иркә гөлөм» темаһына кисә үткәреүгә әҙерлек маҡсатында туған тел тураһында шиғырҙар һәм әҫәрҙәрҙән өҙөктәр, мәҡәлдәр, әйтемдәр йыя башлағыҙ.

## РУС ТЕЛЕ

Толя, Анатолий...
Балалыҡ дуҫым ҡайҙа?..
Ул өйрәткән ине дүрт һүҙ:
Ер. Ут. Һыу. Һауа.
Толя — тимерсе ҡарт улы,
Ә мин — игенсе,
Уға тик һигеҙ йәш булыр,
Миңә етенсе.
Юшатыр[1] буйында уйнап,
Йөрөнөк һыу инеп,
Ул минеңсә, мин уныңса
Аңламай инек.
Ләкин беҙгә уртаҡ ине
Балалыҡ хисе:
Бер төрлө тойҙоҡ һауаны,
Үләндәр еҫен.
Ғорурлыҡ уянды миндә,
Шатланам, көләм:
— Ер! Ут! Һыу! Һауа!..
Их, Толя, һинеңсә беләм!
Ошо тәү өйрәнгән һүҙҙәр
Асты киң юлдар,
Мине сикһеҙ ҙур тормошҡа
Алып барҙылар.
Толя, Анатолий...
Балалыҡ дуҫым ҡайҙа?
Ниндәй ҙә гүзәл беҙҙең ер
Һәм зәңгәр һауа!

---

[1] *Юшатыр* — Башҡортостандағы йылға исеме.

Тыуған ер, һыу, һауа ҡәҙерен
Тағы ла ныҡ белдек,
Шуларҙы дошмандан яҡлап,
Уттарға индек.
Толя, Анатолий!
Хәҙер һин ҡайҙа?..
Ниндәй гүзәл беҙҙең ер,
Онотолмаҫ һауа!

?

1. Малайҙың дуҫтары күбәйеүгә нимә сәбәпсе була? Яуапты шиғыр юлдарынан табып уҡығыҙ.
2. Милләттәр араһындағы дуҫлыҡ шиғырҙың ниндәй юлдарында бирелгән?
3. Шиғырҙа бер үк һүҙҙәрҙең һәм юлдарҙың ҡабатланған урындарын табығыҙ. Ни өсөн ҡабатланғанын аңлатығыҙ.
4. Баязит Бикбайҙың «Тере шишмәләр» әҫәрен уҡып сығығыҙ һәм «Рус теле» шиғырының яҙылыу тарихына иғтибар итегеҙ.
5. Шиғырҙы ятлағыҙ.

Рәми Ғарипов

## ТУҒАН ТЕЛ

*И туған тел, и матур тел,*
*Атам-әсәмдең теле!*

*Ғ. Туҡай.*

Мин халҡымдың сәскә күңеленән,
Бал ҡортондай, ынйы йыямын,
Йыямын да — йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел —
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер тик уны кәм күңел!..

Халҡым теле миңә — хаҡлыҡ теле, —
Унан башҡа минең илем юҡ:

Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә — сәсән теле, —
Унан башҡа минең халҡым юҡ:
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

?
1. Беренсе строфаның мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
2. Шағир туған телгә ниндәй баһа бирә?
3. Шағирҙың туған телен яратыуы ҡайһы юлдарҙа сағыла?
4. Өсөнсө строфаның аҙаҡҡы ике юлының мәғәнәһен аңлатығыҙ.
5. Шиғырҙы ятлағыҙ.
6. «Әсәм теле — сәсән теле» тигән темаға инша яҙығыҙ.

* * *

### Атайҙар һүҙе — аҡылдың үҙе

Кеше күрке — йөҙ, йөҙҙөң күрке күҙ,
Уйҙың күрке — тел, телдең күрке — һүҙ.
Тел — күңелдең көҙгөһө.
Тәмле тел — дарыу, әсе тел — ағыу.
Әйткән һүҙ — атҡан уҡ.
Белем алыу — энә менән ҡойо ҡаҙыу.
Белгәнгә яҡты, белмәгәнгә ҡараңғы.
Белеме барҙың ҡәҙере бар.
Кеше белем менән, ер яуын менән йәшәрер.

* * *

Һәр саҡ уҡырға, бөтәһен дә белергә! Күп белгән һайын көслөрәк була бараһың.

*М. Горький*

# Икенсе бүлек

*Нурлы минең ҡырҙарым,*
*Ҡояштан күҙ сағыла.*
*Ишелеп иген тулҡыны*
*Баҫыуҙарҙан сайпыла.*

Т. Йосопов

Ғилемдар Рамазанов

## УРАҠ ӨҪТӨ

Тағы килде тыуған яҡҡа,
Көтөп алған ҡунаҡ төҫлө,
Хеҙмәт, бәхет, муллыҡ мәле —
Ураҡ өҫтө, ураҡ өҫтө!

Алтын бойҙай тулҡынлана
Алтын ҡырҙар киңлегендә,
Бураларға һыймаҫ шатлыҡ
Игенсенең күңелендә.

Ваҡытында яуҙы ямғыр,
Ваҡытында елдәр иҫте,
Тап Туҡайса килде быйыл
Ураҡ өҫтө, ураҡ өҫтө!

Ил ҡеүәте, именлеге —
Алтындан да ҡиммәт иген,
Таңдан тороп баҫыуҙарға
Республикам сыға бөгөн.

Ил ҡыуана, мин шатланам:
— Иген ҡалай берҙәм үҫте!
Ташып, ярһып тыуа йырым —
Ураҡ өҫтө, ураҡ өҫтө!

Етһен бөгөн ҡотлау һүҙе
Һалдат һымаҡ ҡыйыу иргә,
Муллыҡ яулаусы батырға —
Тынғы белмәҫ комбайнерға!

Әйҙә күрһен бөтә донъя
Берҙәмлектә күркәм көстө,
Саҡыра сикһеҙ ҡырҙарға
Ураҡ өҫтө, ураҡ өҫтө!

? 1. Шағир ураҡ өҫтөн нисек һүрәтләй? Ҡайһы юлдарҙа көҙгө эштәрҙең әһәмиәте, шатлығы бигерәк тә асыҡ сағылдырыла?
2. «Алтын бойҙай тулҡынлана алтын ҡырҙар киңлегендә» тигән юлдарҙы аңлатығыҙ. *Алтын* һүҙе был осраҡта ниндәй мәғәнәлә ҡулланылған?
3. Көҙгө уңыш йыйыу күренешен был шиғырҙа автор, һеҙҙеңсә, тулыһынса һүрәтләүгә ирешә алғанмы? Үҙегеҙ «Алтын көҙ» темаһына телдән хикәйә төҙөп ҡарағыҙ.

Зөһрә Ҡотлогилдина

## ИГЕНСЕ

Халҡым бөгөн ғилем күктәрендә
Ниҙәр асмай, ниҙәр яһамай.
Әммә бер кем, хатта йыһанда ла,
Йәшәй алмай икмәк ашамай.

Кешелектең мең-мең йылдар буйы
Асыштарын теҙеп һалғанда,
Иң ҙур мөғжизәнең береһе булып
Ҡала килер икмәк һаман да.

Игенсенең ҡулы ҡаралһа ла,
Ҡара эштән — иген иккәндә,
Күңелдәре тик яҡтыра бара
Илгә биргән ап-аҡ икмәктән.

? Шиғырҙың аҙаҡҡы дүрт юлының мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ.



## Али КАРНАЙ

**1904—1943**

Али Карнай 1904 йылда Башҡортостандың хәҙерге Мишкә районы Ҙур Шады ауылында тыуған. Уның ижады утыҙынсы йылдарға тура килә. Али Карнай — очерк оҫтаһы. «Далалағы уттар», «Ишембай» исемле ҙур очерк китаптарын яҙҙы. Ә «Беҙ ҡайтырбыҙ» повесы Башҡортостанда 1917—1919 йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләй. Али Карнайҙың балалар өсөн яҙылған хикәйәләре лә бар.

## УРМАНДА

Бер ваҡыт мин көҙ көнө, ғәҙәтемсә, урманға сәтләүек йыйырға барҙым. Был ваҡытта йүкә, саған япраҡтары һарғая башлаған була. Тик имән ағасы ғына һаман да әле, йәй көнөндәге кеүек, йәп-йәшел япраҡтарға күмелеп ултыра. Шулай ҙа һиҙелә: оҙаҡламай имәндең йәшел япраҡтары һарғаясаҡ, юҡҡа ғына ул эреләнеп ултыра. Ана сәтләүек тә инде ҡойола башлаған. Сәтләүек ҡойола башланымы — ысынлап та көҙ етте тип бел.

Мин сәтләүек йыйып йөрөйөм. Сәтләүек ҡыуаҡтары башына ла, ергә лә ҡарайым. Ҡайҙа ғына ҡарама — сәтләүек һарғайып күренә. Сәтләүек хәҙер шундай матур, шундай тәмле, әйтерһең, тик май ғына тултырылған.

Бигерәк тә ерҙә ятҡан сәтләүек яҡшы була. Иң яҡшы өлгөргән, туҡ, ауыр сәтләүектәр генә ергә төшәләр. Шуға күрә мин күберәк ергә ҡарайым.

Оҙаҡ ҡына ваҡыт мин шулай ҡалын урман эсендә йырлай-йырлай сәтләүек йыйып йөрөнөм. Мин урманда яңғыҙым ғына ла ҡурҡмайым. Нимәнән ҡурҡырға? Бүренәнме? Айыуҙанмы? Кеше тауышынан ҡурҡалар улар барыһы ла. Әгәр инде килеп сығалар икән, бысаҡты ниңә тығып йөрөйөм мин? Бер тауыш-тынһыҙ өҫкә ташланмаҫ бит әле ул! Айыу йәки бүре килә башлаһа, ҡыуаҡтар, урман шаулар йә булмаһа вәхши хайуан олорға тотонор. Шул арала уға һөжүм итергә әҙерләнеп булмаҫмы ни?! Күп булһалар инде — эш башҡа. Ул ваҡытта имән башына менеп ҡасырға тура килер ине. Ә бер-ике бүре йәки айыуҙан ғына ҡурҡып булмаҫ инде.

Шулай урманда сәтләүек йыйып йөрөйөм. Урманда бик күңелле. Төрлө-төрлө ҡоштар һайрай. Алыҫ та түгел урман шишмәһе сылтырап ағып ята. Мин йырлауымдан туҡтайым. Шишмә йырлағанда, ни өсөн миңә йырларға?! Шишмәнең йыры миңә үҙемдең йырға ҡарағанда матурыраҡ тойола. Шуға күрә ерҙәге һары сәтләүектәрҙе сүпләп, мин һалҡын шишмә йырын тыңлайым.

Бер ваҡыт янымда ғына япраҡ ҡыштырлаған кеүек була. Тәүҙә мин иғтибар итмәйем. «Урманда төрлө ҡыштырлау аҙмы ни?!» — тип уйлайым һәм, шишмә сылтырауын тыңлап, һаман да сәтләүек йыйыуымды дауам итәм. Ләкин ҡыштырлау һаман ишетелә. Мин, ирекһеҙҙән ҡолаҡ һалып, тыңларға мәжбүр булам. Ҡыштырлау яҡын ғына, бына был сәтләүек ҡыуағы артында ғына, ишетелгән һымаҡ тойола. Мин, аҡрын ғына ҡыуаҡлыҡты айырып, арыраҡ ҡарайым. Ҡыштырлау тиктәҫкә булмаған икән шул: мин айырып ҡараған ҡыуаҡ артында бер тейен сәтләүек йыйып йөрөй. Тейенде мин ғүмеремдә беренсе тапҡыр күрә инем. Уның матурлығына һоҡландым да ҡалдым. Башы бәләкәй генә, мороно осло, күҙҙәре бик матур ҡарайҙар, ҡолаҡтары ослайып баҫып торалар. Кәүҙәһе оҙон ғына һәм иң ҡыҙығы — уның оҙон, ҡабарып һәм юғарыға ҡарай күтәрелеп торған ҡойроғо ине.

Мин уға оҙаҡ ҡарап торҙом. Ул, минең кеүек, ергә төшкән һап-һары сәтләүектәрҙе ауыҙына йыйып йөрөй. Ләкин тейен миңә ҡарағанда оҫтараҡ булып сыҡты, ул, ерҙә ятҡан сәтләүекте тапҡас, уны бер аяғы менән типкеләп, әйләндереп ҡарай. Мин һуңынан белдем: тейен

һуҡыр сәтләүектәрҙе алмай икән! Мин, бахыр, ерҙә йәки ағас башында сәтләүек күрҙемме, уның яҡшымы, насармы икәнен тикшереп тә тормайым, тоҡсайыма һала бирәм. Ә тейен һайлай, ҡорт ашаған сәтләүектәрҙе ул алмай...

Мин, үҙемдең барлығымды белдерерлек итеп, тынымды тауышланыбыраҡ алдым, ахыры, әллә башҡа берәй төрлө тауыш сығарҙыммы — тейен ҡапыл ғына минең яҡҡа боролоп ҡараны һәм, кескәй генә, ләкин бик үткер түңәрәк күҙҙәре минең ҡарашымды осратып, ҡалтыранып алды һәм күҙ асып йомғансы шул урында үҫеп ултырған йыуан имән буйлап юғары менеп китте. Ул ҡарт имән ағасының бер ҡыуыш урынында үҙенә ҡышлыҡҡа аҙыҡ әҙерләй ине.

Тейенде ҡыҙғандым. Ни өсөн инде уны ҡурҡытырға, ни өсөн уға үҙенә ҡышлыҡ аҙыҡ әҙерләргә ҡамасауларға?!

Мин, уны тыныслыҡта ҡалдырып, үҙ юлым менән китмәксе булдым. Ләкин шул ваҡытта икенсе бер хәл минең иғтибарымды үҙенә тартты. Минең аяҡ аҫтымда, соҡор ҡаҙығанда өйөп ҡуйыла торған балсыҡ кеүек, бер өйөм яңы балсыҡ тора ине. Әйтерһең, кемдер аҙлап ҡына балсыҡты матурлап өйөп ҡуйған да үҙе киткән. Мин шикләнмәнем — был алйырҙан эше икән. Тимәк, бында алйырҙан ояһы булырға тейеш.

Оҙаҡ та үтмәне, уйҙарымды дөрөҫләгән кеүек, яҡында ғына ергә ҡойолған япраҡтарҙың ҡыштырлау тауышы ишетелде. Һәм шунда уҡ алйырҙан үҙе күренде. Уның ауыҙы тулы сәтләүек икәне әллә ҡайҙан уҡ күренеп тора. Алйырҙан туп-тура әлеге балсыҡ өйөмө янына килде һәм өйөмдөң бер яҡ ситенән ергә инеп юғалды.

Алйырҙан ояһы булыу һәм алйырҙандың, ҡышлыҡҡа оя яһап, шунда сәтләүек йәки башҡа берәй төрлө аҙыҡ йыйыуы менән өсөн ят түгел ине. Ләкин мине икенсе бер күренеш ғәжәпләндерҙе.

Бер ваҡыт баяғы тейен имән башынан төштө, алйырҙан үҙ ояһынан сыҡты. Улар бер-береһенә ҡапма-ҡаршы осраштылар.

Күрәһең, алйырҙан тейенде дошман күрә: ул, тейенде күреү менән уның өҫтөнә ташланды. Барып тейендең муйынын сәйнәмәксе булды. Ләкин тейен еңел генә

ситкә һикерҙе. Алйырҙан уның артынан йүгерҙе. Тейен һикерҙе. Алйырҙан сыйылданы, кире үҙенең тупраҡ өйөмө янына килде. Күренеп тора: алйырҙан тейенде дошман күрә. «Мин йыя торған аҙыҡты йыя, миңә аҙыҡ ҡалмаҫ әле», — тип уйлай, күрәһең, ҡомһоҙ алйырҙан.

Тейен менән алйырҙан араһында дуҫлыҡ булмаһа ла ғәжәп түгел шул. Улар икеһе ике яҡҡа, береһе өҫкә, береһе түбәнгә, ынтыла. Тейен — уңған йәнлек ул. Тейен йәшен тиҙлеге менән ағас башына йүгереп менеп китә ала. Шаяра, һикерә. Үҙе матур. Тейен ул, ут кеүек янып, күҙҙең яуын алып тора.

Ә алйырҙандың ни матурлығы, ни яҡшылығы бар? Ул ҡыҫҡа ғына аяҡтары менән шыбырлап ерҙә йөрөргә генә белә. Ерҙән юғарыраҡ күтәрелә алмай, тик аҫҡа, түбәнгә генә төшә белә. Ғүмеренең күберәген ҡараңғыла үткәрә.

Күрәһең, алйырҙан тейендең һикергеләп, шаярып йөрөүен, әллә ҡайҙа юғарыға менә алыуын яратмай. Уны үҙенең дошманы итеп күрә.

«Ҡара һин уны, ни эшләгән була бит! Ағас башына йүгереп менеп китһенме? Һикергеләп шаярып йөрөһөнмө? Минең кеүек, ерҙә, гел генә түбәндә йәшәһә ни булған? Ниңә инде алйырҙандан айырым йәшәргә?» — шулай тип уйлай торғандыр әле алйырҙан.

Оҙаҡламай мин үҙемдең был уйым дөрөҫ булыуына бик ныҡ ышана алдым.

Алйырҙанды һәм тейенде ҡалдырып, үҙ юлыма китергә торғанда, мин өсөнсө йән эйәһен осраттым. Был — саға торған һоро йылан ине. Миңә ғәжәпләнергә тура килде: йылан менән алйырҙан, аттар иҫәнләшкәндәге кеүек, бер-береһенә баштарын тейҙерҙеләр. Тейен тағы ла яҡында ғына сәтләүек йыйып йөрөй ине. Һәр кемдең үҙенә күрә дуҫы була бит. Йылан менән алйырҙан да дуҫ инеләр, күрәһең. Алйырҙан, үҙ ҡулынан килмәгәс, тейендән үс алыуҙы йыланға тапшырҙы, буғай. Һис көтмәгәндә һоро йылан тейен өҫтөнә ташланды. Ул бик асыулы ине, әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе, йөрәк жыу итеп китте. Күрәһең, тейен бындай һөжүмдәргә өйрәнгән — ул бер-ике метр самаһы ситкә һикерҙе лә әлеге имән башына менеп тә китте.

Алйырҙан имәнгә менә алмаһа ла, йылан уға ҡарағанда уңғаныраҡ булып сыҡты. Ул тейен артынан ботаҡтан

ботаҡҡа юғарыға үрмәләне. Мин, йыланға асыуланып, ҡулыма бер ағас алдым һәм уны һуғып төшөрөргә әҙерләндем. Ләкин күҙ асып йомғансы булып үткән ваҡиға мине хәрәкәтһеҙ ҡалырға мәжбүр итте.

Тейен юғарыға, имәндең башына уҡ, менеп китте. Йылан да унан ҡалышманы. Ул тейенде бына-бына ҡыуып етергә тейеш ине. Тейен ҡапыл ғына бер ботаҡтан ҙур ғына алыҫлыҡта торған икенсе ботаҡҡа һикерҙе. Йылан да, ҡалышмаҫҡа теләп, тейен артынан ташланғайны, шунда уҡ ергә йығылды ла төштө. Ул гөп итеп ҡалды. Әмәлгә ҡалғандай, алйырҙан һаман да шул тирәлә йөрөп ята икән. Йылан алйырҙан өҫтөнә килеп төштө һәм, күрәһең, тейенде ҡыуып еттем, тип уйлағандыр инде, алйырҙандың елкәһенә йәбеште. Улар икәүһе лә ҡалтырандылар, алйырҙан бер сыйылдап ҡуйҙы һәм шунда уҡ, салҡан төшөп, тибенергә тотондо. Күп тә үтмәне, алйырҙан да, йылан да хәрәкәтһеҙ ҡалдылар. Улар үлделәр.

Ә тейен бейектә, көслө имән ботаҡтары араһында, һаман да һикергеләп йөрөнө, оҙаҡламай ул, ергә төшөп, тағы ла сәтләүек йыйырға тотондо. Мин шул тиклем яраттым шунда тейенде, шул тиклем яраттым — барып ҡулыма алырға, һөйөргә теләнем...

?

1. Көҙ етеүен яҙыусы ниндәй билдәләр ярҙамында әйтеп бирә?
2. Тейендең сәтләүек йыйыуын, йәнлектәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен күҙәтеп, сәтләүек йыйыусы (хикәйәсе) үҙе өсөн ниндәй яңылыҡтар аса?
3. Алйырҙан менән йылан дуҫлығы һәм уларҙың икәүләшеп тейенде күрә алмауҙары тураһында һөйләгеҙ. Шул мөнәсәбәттәрҙең сәбәптәрен аңлатығыҙ.
4. Алйырҙан менән йылан үлеменә нимә сәбәпсе була?
5. Һеҙгә йәнлектәрҙең ҡайһыһы оҡшаны? Ни өсөн? Үҙегеҙ уҡыған башҡа әҫәрҙәргә, тормошта күҙәткәндәрегеҙгә таянып, уңғанлыҡ, матурлыҡ, көнләшеүсәнлек, әшәкелек кеүек күренештәр тураһында һығымта яһағыҙ.
6. Урманға сәтләүек йыйырға барған кеше (хикәйәсе) хаҡында һеҙҙә ниндәй фекер тыуҙы?
7. Хикәйәнең беренсе абзацы — бер һөйләмдән, бишенсе абзацы тәүге ике һөйләмдән тора икән, тип күҙ алдына килтерегеҙ. Бындай саҡта әҫәр нисегерәк ҡабул ителер ине?

## Тасуирлау тураһында

Әҫәрҙә һүҙ барған ваҡиғаларҙа ҡатнашыусыларҙың (персонаждарҙың) тышҡы ҡиәфәтен, кисерештәрен, көнкүреш шарттарын, йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт күренештәрен һүрәтләп биреүҙе **тасуирлау** тип атайҙар.

Тасуирлау әҙәби әҫәрҙә бер нисә һөйләмде йәки абзацты үҙ эсенә алырға мөмкин. «Урманда» хикәйәһендә А. Карнай көҙгө урман күренештәрен, йәнлектәрҙең тышҡы ҡиәфәттәрен һәм хәрәкәттәрен тасуирлай. Мәҫәлән: «Урманда бик күңелле. Төрлө-төрлө ҡоштар һайрай. Алыҫ та түгел урман шишмәһе сылтырап ағып ята... Шишмәнең йыры миңә үҙемдең йырға ҡарағанда матурыраҡ тойола...

Уның (тейендең) матурлығына һоҡландым да ҡалдым. Башы бәләкәй генә, мороно осло, күҙҙәре бик матур ҡарайҙар, ҡолаҡтары ослайып баҫып торалар. Кәүҙәһе оҙон ғына һәм иң ҡыҙығы — уның оҙон, ҡабарып һәм юғарыға ҡарай күтәрелеп торған ҡойроғо ине».

Тасуирлау ярҙамында яҙыусы теге йәки был әйбер һәм күренештәрҙең сифаттарын төрлө яҡлап күҙ алдына баҫтыра. Күреүегеҙсә, беренсе миҫалда яҙыусы «урманда күңелле» тигән һүҙҙәр менән генә сикләнмәгән, унда ни өсөн күңелле икәнен дә асҡан. Бының өсөн ул тасуирлау алымын ҡулланған. Икенсе миҫалда нимәнең ниндәй сифаты нисек тасуирланыуын үҙегеҙ аңлатығыҙ.

?

1. «Урманда» хикәйәһенән тасуирлауға тағы миҫалдар табығыҙ һәм уларға аңлатма бирегеҙ.
2. Урманға (ҡырға, паркка) экскурсияға барығыҙ. Үҙегеҙ күргән күренештәрҙе, шул күренештәр тыуҙырған кисерештәрегеҙҙе тасуирлағыҙ. Һеҙҙең яҡта көҙҙөң килеп етеүен белдергән билдәләрҙе табырға тырышығыҙ.

Кәтибә Кинйәбулатова

## КӨҘ ЕТКӘС

Килеп етте тағы көҙ көнө,
Ябай түгел — көҙҙөң алтыны.
Саған ағастары ғәжәйеп
Яна ялҡын төҫлө талпынып.

Һары, йәшел тәңкә ҡойола
Талғын ғына йомшаҡ елдә лә,
Көҙ һаман да көҙ ул, күрәһең,
Япраҡ төшә сыуаҡ көндә лә.

Сағандарға теклəп ҡарағас,
Һоҡланыуҙан уйлап ҡуяһың:
Тәлгәш-тәлгәш утлы суҡтарың,
Уны ла һин ни тип ҡояһың?

Ошо ваҡыт бөтә япраҡтар
Шыбырланы минең ҡолаҡҡа:
— Османыҡ бит бына йыраҡҡа,
Түшәлдек тик тыуған тупраҡҡа.

? 1. Алтын көҙҙөң йәме нимәлә? Яуапты шиғыр юлдарынан килтерегеҙ.
2. *Алтын көҙ, йәшел тәңкә, йомшаҡ ел, утлы суҡ* һүҙҙәрен индереп, көҙгө күренештәрҙе телдән тасуирлағыҙ.
3. Шиғырҙың аҙаҡҡы ике юлына ниндәй мәғәнә һалынған?

Шәйехзада Бабич

## БЕҘҘЕҢ БАҠСА

Беҙҙең, иптәш, баҡсабыҙ бар, иллә һәйбәт, шәп тә һуң,
Төрлө буяу менән һырлаттыҡ матур рәшәткәһен.

Аҡ, ҡыҙыл, зәңгәрле сәскә баҡсабыҙҙың гөлдәре,
Ялтырап, һыҙылып ята һуҡмаҡтары һәм юлдары.

Баҡсабыҙ бар: сейә, алма, шоморт ағастары,
Ҡып-ҡыҙыл булып тора һалынып миләш тәлгәштәре.

Ыршы, нараттар[1] тағы ла баҡсаны йәмләндерә,
Уртаһында ике нараттың яһалған һәндерә.[2]

Ул үләндәр тип-тигеҙ, тик бер ҡарыш һәм теп-текә,
Йомшаҡ иҫкән ел үләнде аҡрын-аҡрын һелкетә.

---

[1] *Нарат* — ҡарағай.
[2] *Һәндерә* — ял итеү өсөн таҡтанан эшләнгән урын.

Сут[1] та юҡ, бик күп еләк, күп, мин һиңә әйтһәм, төрләнән.
Донъяла бөткөл түгел ул, ҡарлыған һәм бөрлөгән.

Ул йәшелсә — барсаһы бар, кишер, ҡарбуз, ҡабаҡ,
Көн һайын торһаң алып бөтмәҫ ҡыярҙы йөҙ табаҡ.

Ҡыш үтеп, яҙ айҙары килһә, керәм шул баҡсаға,
Сыҡмайым, шунда ятам мин, ҡапланам да сәскәгә.

?
1. Баҡсала сәскәләрҙең, емештәрҙең, йәшелсәләрҙең ниндәйҙәре үҫә?
2. Ни өсөн был баҡсаның уңышы мул була, тип уйлайһығыҙ?
3. Һеҙҙең мәктәп баҡсаһында нимәләр үҫә? Унан мул уңыш алыр өсөн ниндәй хәстәрлектәр күрәһегеҙ?
4. Шағир ни өсөн үҙ баҡсаһына һоҡлана? Үҙегеҙҙең өйөгөҙ янындағы баҡсаның матурлығын һүрәтләгеҙ.

Нәжиб Иҙелбай

## ДҮРТ МИҘГЕЛ

Яҙһылыуҙы алмаштырған
Йәмле йәй ҙә үтә икән,
Ерҙең йөҙөн алтынлаған
Аҫыл көҙ ҙә етә икән.

Күктән ҡарап Ҡояш апай
Һаман алсаҡ көлә икән.
Атланып аҡбуҙ атына,
Ҡыш бабай ҙа килә икән.

Йәшел, һары, ҡара ялан
Таң атҡансы ап-аҡ булған.
Ҡарар күҙҙең яуын алып,
Биҙәкләнеп тәҙрә туңған.

Инде тәү күргәндәй, быға
Иҫ-аҡылың китә икән:
Ер, сумып татлы йоҡоға,
Йәнә яҙҙы көтә икән.

---

[1] *Сут* — иҫәп-һан (*счет һүҙенән*).

? 1. Шиғырҙа йыл миҙгелдәренең ниндәй билгеләре телгә алына?
2. Һеҙ йәшәгән яҡта тәбиғәткә көҙ ниндәй үҙгәрештәр алып килә? Шуларҙы иҫкә төшөрөп, һанап бирегеҙ.

## Сағыштырыу тураһында

Бер әйберҙе икенсеһенә оҡшатып әйтеү **сағыштырыу** тип атала.

Сағыштырыу күбеһенсә *һымаҡ, кеүек, төҫлө, шикелле* һүҙҙәре менән бергә килә.

Миҫал өсөн Ғ. Рамазановтың «Ураҡ өҫтө» шиғырынан түбәндәге юлдарҙы алайыҡ:

Тағы килде тыуған яҡҡа,
Көтөп алған ҡунаҡ төҫлө,
Хеҙмәт, бәхет, муллыҡ мәле —
Ураҡ өҫтө, ураҡ өҫтө!

Оҡшатыу, сағыштырыу арҡаһында әйберҙәрҙе беҙ асығыраҡ һәм тулыраҡ итеп күҙ алдына баҫтыра алабыҙ.

? 1. Көҙ тураһындағы шиғырҙарҙан сағыштырыуҙарҙы табығыҙ.
2. Көҙгө тәбиғәтте күҙәтегеҙ, урманда, яланда, баҫыуҙа булған үҙгәрештәр тураһында шиғыр, кескәй хикәйә яҙып ҡарағыҙ. Һөйләмдәрегеҙҙә тасуирлау һәм сағыштырыуҙар булһын.

* * *

## Иген төбө — ҡыуаныс

Бойҙай сәсһәң, башағын йый, шалҡан сәсһәң, тамырын йый.

Вайымһыҙ йөрөһәң йәй көнө, алымһыҙ булырһың көҙ көнө.

Ҡырҙағы ашлыҡ байлыҡ түгел, амбарҙағы ашлыҡ байлыҡ.

Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың.

# Өсөнсө бүлек

*Һүҙ сәнғәтенең башы — фольклорҙа.*

М. Горький

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

Һеҙ ололарҙан, тиҫтерҙәрегеҙҙән әленән-әле әкиәт, легенда, йомаҡ, мәҡәл ишетә тораһығыҙ. Ундай әҫәрҙәрҙе уҡып та беләһегеҙ. Улар һүҙгә оҫта, хыялға бай кешеләр тарафынан ҡасандыр ижад ителгән дә башҡалар хәтеренә күскән. Шулай телдән телгә, быуындан быуынға, урындан урынға күсә торғас, шымара-шымара беҙҙең көндәргә лә килеп еткән.

Тимәк, телдән тыуып, телдән башҡарыла торған әҫәрҙәрҙе камиллаштырыуҙа күмәк кеше, тотош халыҡ ҡатнашҡан.

Баштан уҡ күмәкләшеп ижад ителгән әҫәрҙәр ҙә була. «Төрөк һуғышы бәйете» мәҫәлән, был хаҡта шулай ти:

Был бәйетте беҙ сығарҙыҡ,
Нисә һалдат йыйылып.
Көнө-төнө һуғыш-киҫеш —
Бөттө йәндәр ҡыйылып.

Бына шулай күмәк кеше ҡатнашлығында телдән ижад ителгән, телдән таралған әҫәрҙәрҙе халыҡтың ауыҙ-тел ижады тип йөрөтәләр ҙә инде.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ифрат күп яҡлы һәм ғәжәп бай. Беҙҙә эпостар, әкиәттәр ҙә, легенда, риүәйәттәр ҙә, йыр, таҡмаҡтар ҙа, мәҡәл, әйтем, йомаҡтар ҙа, башҡаһы ла күп. Халыҡ ижады тормоштоң бөтә яҡтарына ла ҡағыла. Унда халыҡ үҙ башынан үткән боронғо хәлдәрҙе лә, бөгөнгөһөн дә, яҡты киләсәк тураһындағы хыял һәм өмөттәрен дә сағылдыра. Ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрендә халыҡтың донъяға ҡарашы ла әйтелә: тормоштоң матурлыҡтары данлана, кәмселектәре фашлана, ҡаһарман традициялар, ғәҙеллек хуп-

лана, ғөмүмән, кешенең иң күркәм сифаттарының асылы күрһәтелә.

Ауыҙ-тел ижадын халыҡтың яҙылмаған тарихы, тормош фәлсәфәһе тип баһаларға ла була.

Шуға ла тыуған ереңде, ғәзиз илеңде, үҙ халҡыңды һөйәһең икән, һин ошо ер, ошо ил хаҡында халыҡтың сығарған ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәрен ҡәҙерләп өйрәнергә, яратырға, ишәйтергә, килер быуындарға еткерергә бурыслыһың.

? 1. «Халыҡтың ауыҙ-тел ижады» тигәндә һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Сәсән, яҙыусы ижад иткән әҫәрҙәрҙе ауыҙ-тел ижадына индереп буламы?

2. Ни өсөн халыҡ ижадын «халыҡтың яҙылмаған тарихы», «тормош фәлсәфәһе» тип атарға мөмкин? Яуабығыҙҙы тыуған яғығыҙҙың тарихына бәйле әҫәрҙәр менән нигеҙләгеҙ. Быны өсөн тәүҙә ололарҙан һорашып, ауыл, урам, тирә-йүндәге башҡа урындарға бәйле легенда, риүәйәт, йыр, таҡмаҡ һ. б. яҙып алығыҙ, дөйөм альбом төҙөгөҙ.

## Әкиәттәр

## ҠАМЫР БАТЫР

Борон-борон заманда, ҡарға команда, һайыҫҡан һалдат сағында, турғай түрә булғанда, йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларҙың көнкүрештәре бик ауыр булған. Бабай иртәнән кискәсә бай алдында бил бөккән, һалабаш сереткән, йүкә ишкән, септә һуҡҡан, балыҡҡа йөрөгән; әбей еп иләгән, йөн теткән, бай ҡыҙҙарына биҙәкләп кейеҙ итек теккән, ә эшләп тапҡан икмәктәре аҙнаның өс көнөндә ашарға ғына еткән. Ас та булмағандар, туҡ та булмағандар, өйрәнгәс, бошоноп та ҡалмағандар, башҡалар кеүек йәшәп өйрәнгәндәр. Тик әбей генә ҡайһы саҡта әсенеп, зарланып ала торған булған.

— Атаһы, исмаһам, улдарыбыҙ ҙа юҡ бит. Уландар булып, ҡул аҫтына инеп эшләй башлаһалар, әллә был тиклем ауыр ҙа тормаҫ инек, — тип зарланған әбей.

— Ҡайғырма, әсәһе, күреп тор, бына тигән улыбыҙ булыр әле, — тип йыуатҡан бабай.

Шунан ул балыҡҡа барып ҡайтҡан. Өйгә инһә, ул бала тәрбиәләп йөрөгән әбейен күргән, ти.

Ҡарсығы бабай балыҡҡа киткәс ни булғанын һөйләп биргән:

— Һин балыҡҡа сығып китеүең менән ҡамыр баҫтым да, малай яһап, һандыҡҡа һалдым, — тигән әбей, — шул арала үҙем ишек алдына сығып әйләндем. Килеп инһәм, ҡолағыма бала илаған тауыш салынғандай булды. Ипләберәк тыңлаһам, тауыш һандыҡ эсенән килә. Һандыҡты асып ебәргәйнем, шаҡ ҡаттым: минең бая һалып ҡуйған малайыма йән ингән!

Бабай сәңгелдәктә тәпәйҙәре менән уйнап, көлөп ятҡан бәпес янына барған да, уның сөсө ҡамыр кеүек тығыҙ беләктәренән тотоп һөйөп:

— Әй, ҡамыр батыр, нихәл? Үҫәһеңме? — тигән.

Бабайҙың шаярып әйткән был һүҙе әбейгә оҡшап ҡалған.

— Ҡара әле, атаһы, ҡайһылай матур итеп әйттең дә ҡуйҙың да баһа. Йә, улыбыҙға ысынлап та шул исемде ҡушайыҡ. Ҡамыр кеүек һығылмалы, бөгөлмәле булһын, һуғышҡанда, көрәшкәндә, бер ере лә һынмаһын, — тигән.

— Әйҙә, шулай булһын, — тигән бабай.

Әбей менән бабайҙың яңғыҙ улдары Ҡамыр батыр, бөтә тирә-яҡты таңға ҡалдырып, ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып етешкән. Уны бөрәү ҙә, хатта айыу ҙа, бүре лә еңә алмаған.

Тап ошо ваҡытта ил өҫтөнә оло бәлә килгән. Дейеү батша илдең бөтә байлығын һурып йота башлаған. Ил бөтөнләй емерек хәлгә килгән. Кешеләр ҡайғынан, аслыҡтан ҡырыла башлағандар. Ләкин күҙгә күренмәҫ хәйләкәр дейеүҙе эҙләп табырға, уға ҡаршы һуғыш асырға бер кемдең дә батырлығы етмәгән. Шул саҡта Ҡамыр батыр бер үҙе дошманға ҡаршы яуға сығырға булған һәм был турала ата-әсәһенә:

— Мин дошманды эҙләп табырмын, илде бәхетле итермен, — тигән.

Атаһы менән әсәһе илашҡандар: яңғыҙ улдарын яуға ебәреү ауыр булған. Шулай ҙа:

— Бар, улым, дошманды тап та илдең бәхетен ҡайтар, үҙең генә һәләк була күрмә, — тигәндәр.

— Ярай, мин сығып китәйем, донъяла ниҙәр барын, ниҙәр юғын беләйем, дошманға ҡаршы бергәләп һуғышҡа сығырлыҡ ирҙәрҙе эҙләп табайым. Ил бөтмәһә, батыр бөтмәҫ, иптәштәр табылыр, — тигән Ҡамыр батыр.

Быны ишеткән атаһы:

— Афарин[1], балам, афарин! Ир ҡанаты — ат булыр, тигәндәр. Фәлән тауҙы үткәс, бер ҙур күл булыр. Шунда ҡолонсаҡтарын сыңғыратып, ҡыңғырауҙарын ҡыңғыратып, йылҡы көтөүе йөрөр. Шул йылҡы араһына ин дә ҡойошҡаныңды[2] ҡылтырат, йүгәнеңде шылтырат, шунда һиңә ҡайһы ат боролоп ҡараһа, шуны эйәрлә, — тигән.

Ҡамыр батыр йылҡы өйөрөн тапҡан. Унда бер арыу ғына ҡола бейә менән алама тай икән. Ҡамыр батыр ҡойошҡанын ҡылтыратҡан, йүгәнен шылтыратҡан. Уға баҡтаһын ҡуймаған теге алама тай әйләнеп ҡараған. Ҡамыр батыр ҡамсы менән уның һырт буйына бик ҡаты итеп бер һелтәгән дә йүгәнен ҡайтанан шылтыратҡан. Уның теге ҡола бейәне эйәрләгеһе килгән. Тик уға тағы шул алама тай боролоп ҡараған. Ҡамыр батыр бик ныҡ асыуланған һәм алама тайға тағы бер-ике тапҡыр һуғып ебәргән. Унан йүгәнен ҡайтанан шылтыратҡан. Ләкин был юлы ла шул тай боролоп ҡараған.

— Миңә яҙғаны, күрәһең, ошолор инде, — тип уйлаған Ҡамыр батыр һәм теләмәй генә тайға йүгәнен кейҙергән. Йүгәнде кейеү менән, тай бер һелкенгән дә бөтә баҡтаһын ҡойған. Арҡаһына эйәр һалғас, тай бик матур ҡонанға[3] әйләнгән. Ә инде эйәр өҫтөнә эйәһе менеп ултырғас, улар икеһе бергә ҡапыл үҫеп, нығынып киткәндәр. Тай толпарға, егет еңелмәҫ батырға әйләнгән. Бынан һуң Ҡамыр батыр ата-әсәһе менән хушлашҡан да дейеүҙе эҙләп сығып киткән.

— Һау бул, һөйөклө әсәйем, — тигән ул.

— Хуш, балаҡайым, бәхетле бул, — тигән әсәһе.

— Хуш бул, ҡәҙерле атайым, — тигән Ҡамыр батыр.

---

[1] *Афарин* — «бик яҡшы» мәғәнәһендәге хуплау һүҙе.
[2] *Ҡойошҡан* — тауҙан төшкәндә, эйәрҙе алға шыуыуҙан һаҡлаусы ҡайыш.
[3] *Ҡонан* — 3 йәшлек ат.

Шул китеүҙән Ҡамыр батыр ай киткән, йыл киткән, бара торғас, бер ҡара урманға барып еткән. Унда, ботаҡтары ҡояшты ҡаплап торған ҡарт имән төбөндә, бер егет баҫып торғанын күргән. Егеттең ҡулында уҡ-һаҙаҡ, үҙе күктән күҙен алмай, ә янындағы күк арғымағы имән ҡайырыһын кимереп бөтөп аяғының аҫтын саңға әйләндергән.

— Һаумы, егет! Ни эшләп тораһың бында? — тип һораған Ҡамыр батыр.

— Бынан өс көн элек күккә уҡ атҡайным. Шуның кире килеп төшкәнен көтөп торам, — тигән егет.

— Исемең нисек?

— Минең исемем Уғатар батыр була. Мин өс көнлөк юл алыҫлығындағы ҡарсығаға уҡ атып тейҙерә алам. Тик бына ни өсөндөр дейеү батшаға тейҙерә алмай ҡалдым. Ул бөтә ырыуҙы ҡырып китте. Ә һин үҙең кем булаһың? Ҡайҙа былай китеп бараһың?

— Мин Ҡамыр батыр булам. Мин дә шул дейеүҙе эҙләп китеп барам. Үҙе күренмәй, ә донъяны ҡорота бит, яуыз, — тип яуап биргән Ҡамыр батыр.

— Мине лә үҙең менән ал, минең дә ҡанмаҫ үсем бар унда. Күрәһеңме, бына бөтә ырыуҙан бер үҙем ҡалдым,— тигән егет.

— Әйҙә, бе́рәүҙән икәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр, шатланып.

Улар икәүләп китеп барғандар. Ай киткәндәр, йыл киткәндәр, бара торғас, киң бер далаға барып сыҡҡандар. Унда бер аяғын күтәреп бәйләп, һыңар аяғы менән генә һикереп йөрөгән бер кешене күргәндәр һәм, янына барып, сәләм биргәндәр:

— Сәләм, егет кеше! Һин кем булаһың, ниңә былай йөрөйһөң?

— Мин Йүгерек батыр булам. Ҡуяндар тоторға китеп барам, ике аяҡ менән йүгерһәм, мин уларҙы тапап уҙып китәм. Шуға күрә бер аяғымды бәйләп ҡуйҙым.

— Ҡуян тотоп ҡына батыр булыу шәп нәмә түгел, — тигән Ҡамыр батыр.

— Дөрөҫ! — тигән Йүгерек батыр. — Ләкин мин был исемде дейеүгә ҡаршы һуғышта алдым. Тик һуңғы һуғышта бер үҙем тере ҡалдым.

— Улай булғас, урынһыҙ һүҙем өсөн ғәфү ит, егет, — тигән Ҡамыр батыр, — әйткән һүҙемде кире алам.

— Ә һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ һуң? — тип һораған Йүгерек батыр.

— Мин Ҡамыр батыр, ә был егет — минең юлдашым. Уғатар батыр була, — тигән Ҡамыр батыр.

— Ҡайһы ерҙәргә табан юл тотаһығыҙ?

— Дейеү батшаға ҡаршы һуғышҡа китеп барабыҙ.

— Мине лә алығыҙ, улай булғас, — тигән Йүгерек батыр, — минең дә унан үс алаһым бар.

— Әйҙә, икәүҙән өсәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

Егеттәр өсәүләп китеп барғандар. Бара торғас бер туғайлыҡҡа барып еткәндәр. Туғайлыҡта бик күп күлдәр ялтырап ята. Ә шул күлдәр араһында бер егет йөрөй. Ул бер нисә күлде бергә уртлап ала ла икенсе бер урынға илтеп ҡоя икән. Батырҙар был ғәжәп егеткә, хөрмәт менән баш эйеп, сәләм биргәндәр.

— Һаумы, батыр ир?

— Бик шәп кенә, егеттәр!

— Һин ниндәй кеше?

— Мин Күлуртлар батыр булам. Урынһыҙ ятҡан ваҡ күлдәрҙе бергә ҡушып, уртлап алам да, кәрәкле урынға алып барып ҡойоп, ҙур бер күл яһайым. Һөнәрем шул. Әгәр дейеү батша килеп, ауылға ут төртһә, мин ошо ҙур күлде бер юлы уртлап алам да утҡа һибәм. Ауылды ҡотҡарам. Дейеү асыулана, ҡоторона, ләкин минең ырыуға бер ни ҙә эшләй алмай. Үҙегеҙ кемдәр? — тигән ул.

— Беҙ Ҡамыр батыр, Уғатар батыр, Йүгерек батырҙар булабыҙ.

— Ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

— Дошманды асыуландырып ҡына ебәреү етмәй, уны юҡ итергә, халыҡҡа тыныслыҡты, бәхетте яулап алып бирергә кәрәк, — тигән Ҡамыр батыр.

— Беҙ шуның өсөн китеп барабыҙ, — тигәндәр егеттәр.

— Мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ, — тигән Күлуртлар батыр. — Һуғышта минең дә кәрәгем булыр.

— Әйҙә! Өсәүҙән дүртәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

Арғымаҡтарға атланған дүрт батыр йырлай-йырлай артабан китеп барғандар. Күп ҡырҙар, тауҙар, һыуҙар, урмандар үткәндәр. Ахырҙа бер бейек тау итәгенә барып еткәндәр. Ә унда ниндәйҙер бер егет йүгереп йөрөй, тау

итәгенең төрлә еренә ятып ниҙер тыңлай икән. Егеттәр сәләм биргәндәр һәм һораша башлағандар.

— Һин кем булаһың, егет? Ерҙән ни ишетәһең?

— Мин Ертыңлар батыр булам. Ергә ятып, ете диңгеҙ артындағы дейеүҙең һөйләшкәнен ишетәм. Дейеү ил таларға сығыу менән, халыҡҡа хәбәр итәм. Дейеү килгәнсе, халыҡ малын да йәшерә, үҙе лә йәшеренә. Дейеү, бер ни таба алмай, әрләшә лә китә. Шулай итеп, минең ырыу һис тә дейеүгә бирешмәй йәшәп килә, — тигән егет.

— Дейеүҙән ҡасып ҡалғансы, уны юҡ итеү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

— Дөрөҫ! — тигән Ертыңлар батыр. — Тик һеҙ кемдәр булаһығыҙ?

— Беҙ Ҡамыр батыр, Уғатар батыр, Йүгерек батыр, Күлуртлар батыр тигән егеттәр булабыҙ. Дейеүгә ҡаршы һуғыш асырға китеп барабыҙ, — тигәндәр егеттәр.

— Мине лә эйәртегеҙ, — тигән Ертыңлар батыр.

— Әйҙә, дүртәүҙән бишәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

Батырҙар бишәүләп китеп барғандар. Арғымаҡтарға атланған был биш батыр, дейеүҙе эҙләп, ер йөҙөнөң бөтә мөйөштәрендә булғандар. Бөтә ерҙә уның ҡанлы ҡулының эҙен күргәндәр, халыҡтың аһ-зарын ишеткәндәр, ләкин дейеүҙең эҙенә төшә алмағандар. Ахырҙа бик ҙур бер ҡалаға барып ингәндәр. Ҡала ситендәге бәләкәй генә өйгә ҡунырға төшкәндәр. Өй хужаһы әбей юлсы егеттәрҙе хөрмәтләп ҡаршы алған. Шунда уҡ еҙ самауырын ҡайнатып, урындыҡҡа килтереп ултыртҡан. Егеттәр көләшә-көләшә сәй эсергә керешкәндәр. Әбейҙән ҡала хәлдәрен һорашҡандар.

— Йә, инәй, һөйләп ебәр әле, ҡалағыҙҙа ниндәй ҡыҙыҡлы хәлдәр бар? — тигәндәр улар.

— Һорашмағыҙ ҙа инде, балаҡайҙарым. Ҡалала бер ҡыҙыҡ та юҡ. Тик үлем дә үлем, — тигән әбей, зарланып.

— Бер ҙә тыуым юҡмы ни, инәй? — тип шаяртҡандар егеттәр.

— Тыуым бар ҙа бит, үлем күберәк шул. Бына өс йыл инде ҡала яны һеҙҙең кеүек һылыу-һылыу йәп-йәш егеттәрҙең мәйеттәре менән тулы. Дейеү батша һылыу ҡыҙға әйләнде лә бөтә егеттәрҙең башын әйләндерә башланы. Ҡуй инде, балалар, һөйләмәйек, бәлә булды был...

— Йә, инәй, асығыраҡ һөйләп аңлатсы. Нисек инде ул үлем? — тигән Ҡамыр батыр, түҙемһеҙләнеп.

— Ҡыҙ батша кейәү һайлай. Өс йыл үтте. Ундай шартты үтәрлек батыр табылғаны юҡ әле. Килгән береһе үлеп кенә тора. Кешеләрҙе ҡыралар ғына... Һылыу ҡыҙ булып күренеп, егеттәрҙе үҙенә ғашиҡ итә. Меҫкен егет уның шартына күнә лә — үлә лә...

— Шарттары ниндәй икән һуң уның? — тип ҡыҙыҡһынғандар егеттәр.

— Нисек булһын инде, балаҡайҙар, үтәй алмаҫлыҡ тип әйттем бит инде.

— Шулай ҙа, инәй, шарттарын әйт әле. Ҡыҙыҡ бит...

— Нимәһе ҡыҙыҡ булһын уның? Беренсе шарты — ҡыҙ батшаның йүгерек әбейе менән өс көнлөк юлда йырышыу.

— Мөмкин, — тигән Йүгерек батыр.

— Икенсе шарты — мөлдөрәмә тулы бер балғалаҡ балды өс көнлөк юл оҙонлоғондағы бағана буйлап сайпылтмай алып менеү.

— Була, — тигән Ҡамыр батыр.

— Өсөнсө шарты — ҡыҙҙырылған суйын өйҙә ҡуныу.

— Мөмкин эш, — тигән Күлуртлар егет.

— Дүртенсе шарты — һылыулыҡта, көслөлөктә тиңе булмаған ҡыҙ батшаның үҙен көрәштә еңеү.

— Быныһын да булдырып була, — тигән Ҡамыр батыр. Әбей, асыуланып, ярһып киткән.

— Нимә була? Береһе лә булмай. Үлем генә була. Шулай, булдырам, тип, аҙмы егеттәр баштарын һалдылар. Юҡ уйҙы башығыҙға ла килтермәгеҙ, балалар!

— Ҡурҡма, инәй, беҙ күмәк, — тигән Ҡамыр батыр.

— Эйе, күмәкләп булдырабыҙ уны!

— Бына күрерһең, инәй, ул ҡан эскес һылыу батшағыҙҙың көлө күккә осор!

— Дөрөҫ!

— Ай, юҡты ғына һөйләйһегеҙ бит, балалар! — тип көйөнгән әбей.

Егеттәр үҙҙәре эҙләп йөрөгән дейеү батшаның ошо юха[1] ҡыҙ икәнлегенә төшөнәләр ҙә уны бергәләп юҡ

---

[1] *Юха* — мең йыл йәшәгән йылан. Ул төрлө ҡиәфәткә инә ала (йөҙ йәшлеген аждаһа тиҙәр).

итергә ҡарар итәләр. Шул уй менән, иртүк тороп, батша һарайына киткәндәр улар. Барып еткәс, батшаға:

— Бына беҙҙең Ҡамыр батыр тигән иптәшебеҙ һеҙҙең шарттарығыҙҙы үтәп ҡарарға уйлай, — тип белдергәндәр. Ҡанға һыуһап торған дейеү батша кинәнеп риза булған.

Был егеттәр бишеһе лә, буйға бер тигеҙ, ҙур, мыҡты кәүҙәле, һылыу йөҙлө йәш бәһлеүәндәр булғанлыҡтан, алмашлап бер кейемде кейгәндәр, уларҙы бер кем дә бер-береһенән айыра алмаған. Улар бер-береһенә, ике тамсы һыу кеүек, бик оҡшаған булғандар. Күп тә үтмәй, Йүгерек батыр, батша күрмәгәндә генә Ҡамыр батырҙың кейемдәрен кейгән дә, беренсе шарт буйынса, батшаның йүгерек әбейе менән ярышыу өсөн, өс көнлөк юлға сығып киткән. Иптәштәре майҙанда тороп ҡалған. Ертыңлар батыр, ергә ятып тыңлап, ярыштың барышын хәбәр итеп торған.

— Йә, нисек унда эштәр?

— Йүгерек батыр һаман һыңар аяҡ менән генә йүгереп килә. Әбей инде хәлдән тайған. «Ял итеп, йоҡлап алайыҡ», — тип ялына. «Бер көнлөк юлды үттек бит инде, ял кәрәк», — ти.

— Беҙҙең батыр ни ти һуң?

— Мин арыуҙы уйлағаным да юҡ. Әйҙә инде, һин арығас, ял итәйек, булмаһа, ти.

— Тыңла, тыңла, тағы ни һөйләшерҙәр?

— Туҡтанылар... Ашайҙар... Йоҡларға яттылар...

— Улар йоҡлағанда, беҙ ҙә ял итеп алайыҡ, егеттәр, төн бит инде, — ти Ҡамыр батыр.

— Әйҙәгеҙ, — тиҙәр егеттәр.

Батырҙар ҡайтып китәләр. Ә батшаның йүгерек әбейе, Йүгерек батыр йоҡлап киткәс тә, уның башына оҙаҡ йоҡлата торған сүлмәк ҡаплай ҙа үҙе йүгереп ҡайтып китә. Йүгерек батырҙың иптәштәре, йоҡо туйҙырып, иртә менән майҙанға килгән саҡта, әбей инде тағы бер көнлөк юлды үтеп өлгөргән була.

— Эш шәптән түгел, егеттәр, — тип хәбәр иткән Ертыңлар батыр, — беҙҙең батыр һаман кисәге урында йоҡлап ята, ә әбей инде йүгереп етеп килә.

Егеттәр аптырашып ҡалғандар:

— Нисек һуң ул шулай ҡаты йоҡлай?

— Башына берәй нәмә ҡапланған, моғайын. Тын алышы саҡ-саҡ ишетелә.

— Тыныс булығыҙ, егеттәр, хәҙер уятабыҙ уны, — тигән Уғатар батыр һәм, һаҙағынан йәһәт кенә уҡ ала һалып, төҙәп атып ебәргән. Ул Йүгерек батырҙың башына ҡапланған сүлмәккә барып тейеп, уны селпәрәмә килтергән.

— Әһә, — тип ҡысҡырып ебәргән Ертыңлар батыр, — беҙҙең батыр уянды. Ике аяғы менән йүгерә башланы.

— Шулаймы? Рәхмәт, мәргән уҡсы! — тигән Ҡамыр батыр, еңел һулап.

— Әбей ни эшләй?

— Уның бер аяғы алға баҫһа, икенсеһе артҡа баҫа...

— Хәйлә менән уҙып өйрәнгән икән, яуыз...

— Бына Йүгерек батыр ҡыуып та етте. Яуыз әбейҙе түкмәстерә һуҡты ла уҙып китте.

Күп тә үтмәй, Йүгерек батыр майҙанға килеп тә еткән.

Дуҫтары уны күтәреп алып, күккә сөйгәндәр. Ҡыҙ батшаның һөмһөрө ҡойолған. Аҡһап-туҡһап бер тәүлектән һуң килеп еткән йүгерек әбейенең шунда уҡ башын сабып өҙҙөргән.

Ҡамыр батыр менән Йүгерек батыр ул арала өҫтәрен алмаштырып кейеп өлгөргәндәр. Икенсе шартты үтәр өсөн, мөлдөрәмә тулы итеп бал һалынған балғалаҡты тешләп, Ҡамыр батыр бағана буйлап менеп киткән. Был балды, һис бер сайпылтмай, өс көнлөк юл оҙонлоғондағы бағананың иң осона алып менгән. Болоттарға олғашҡан бағана башынан ул тирә-яҡты ҡарай башлаған һәм алыҫта, томандар араһында, үҙ ауылының етемһерәп ятҡанын күргән. Ул шунда, ауылын, ата-әсәһен йәлләп, илап ебәргән. Күҙ йәше бағана аҫтына түшәлгән аҡ кейеҙгә тамған. Батшаның вәзире ҡыуанысынан ҡотороноп ҡысҡырына башлаған:

— Балды тамыҙҙың! Тиҙерәк төш! Башыңды киҫәм!

— Бал түгел, күҙ йәше. Ышанмаһағыҙ, ялап ҡарағыҙ,— тигән Ҡамыр батыр.

Уртәкә[1] күҙ йәше тамған урынға тел осон тейҙереп ҡараған да:

---

[1] *Уртәкә* — хөкөм сығарыусы, хөкөмдар (судья).

— Күҙ йәше был, вәзир йәнәптәре! Бал булһа, татлы булыр ине, ә был әсе, — тигән.

Вәзир, ышанмай, үҙе ялап ҡараған һәм ысынлап та күҙ йәше икәнлегенә ышанырға мәжбүр булған. Бынан һуң Ҡамыр батыр, балды мөлдөрәмә тулы көйө алып төшөп, уртәкәгә тапшырған. Иптәштәре уны күтәреп алғандар.

— Йәшә, батыр, һынатманың!

— Ҡыуанырға ашыҡмағыҙ, — тип иҫкәрткән вәзир, зәһәрләнеп, — алдығыҙҙа ҡыҙған суйын өй тора!

Уртәкә лә көлөп:

— Эйе, төшкө аштан һуң рәхим ит, егет, суйын өйгә, унда бик-бик йылы булыр, һөйәктәреңә тиклем янып, көл булырһың, — тигән.

— Уныһын күрербеҙ, — тигән Ҡамыр батыр.

Батырҙар бөтәһе лә бик ҙур кәүҙәле, бөтәһе лә йәш һәм бер-береһенә оҡшаған булғанлыҡтан, вәзир ҙә, судья ла уларҙы кейемдәренә ҡарап ҡына айырғандар. Күлуртлар батыр суйын өйгә бер нисә ҙур күлде уртлап алып ингән. Батырҙы суйын өйгә бикләгәс, батшаның башкиҫәрҙәре өйҙө ҡырҡ әрҙәнә утын менән күмеп, ут төрткәндәр. Суйын өй, ут тауына әйләнеп, дәһшәтле ялҡындарын күктәргә һуҙып, дөрләп яна башлаған. Ә Күлуртлар батыр бирешмәгән. Ул ут кеүек ҡыҙған өйгә һыу бөркөп торған. Һыу менән бергә балыҡтар ҙа бөркөлгәндәр һәм ҡурылып бешкәндәр. Бына бер ваҡыт ҡырҡ сажин утын янып бөткән. Төн үткән. Иртә менән батша вәзирен ебәргән.

— Бар, көлөн күккә осороп ҡайт, — тигән ул. Вәзир ҙә, бының шулай булыуына һис тә шикләнмәй, суйын өйҙөң ишек йоҙағын асып, эскә ингән. Ләкин ни күҙе менән күрһен... егет көлә-көлә ҡурылған балыҡ ашап ултыра икән.

— Әйҙүк, вәзир, балыҡ ашарға рәхим итегеҙ! Ҡайһы балыҡты теләйһегеҙ: табан балыҡтымы, суртан балыҡтымы?

Вәзир аптырауҙан бер ни ҙә әйтә алмай, һарайға йүгергән. Ул күргәндәрен батшаға һөйләп биргән.

— Алдайһың, ялғансы!.. — тип ҡысҡырған батша, асыуына сыҙай алмай, һәм вәзирҙең башын сабып өҙгән. Унан һуң икенсе вәзирен ебәргән. Уныһы ла шул уҡ хәбәрҙе ҡайтып әйткәс, уның да башын өҙгән дә суйын

өйҙә ҡарарға үҙе киткән һәм егеттең терелеген үҙ күҙе менән күргән.

Бынан һуң дүртенсе шартты үтәү өсөн, Ҡамыр батыр ҡыҙ батшаның көрәш урынына киткән. Иптәштәре уны оҙатып барғандар. Ҡыҙ батша ҡала ситендәге бер ҡая тау башында сатыр ҡороп ята икән. Ҡамыр батыр иптәштәре менән арғымағын тау итәгендә ҡалдырған.

— Өс көндән әйләнеп ҡайтмаһам, эҙләп, тауға менерһегеҙ, — тигән дә үҙе тауға йәйәүләп менеп киткән.

Тау итәге мәйеттәр менән ҡапланған. Улар өҫтөндә туп-туп ҡоҙғондар осоп йөрөй. Ҡамыр батыр, ҡоҙғондарҙы өркөтөп мәйеттәр аша баҫа-баҫа, һаман алға, тау түбәһенә табан атлаған. Кис яҡынлашыуға ҡая түбәһенә менеп еткән. Унда, ҡыҙарып бешкән алмалары ергә эйелеп ултырған ҡарт алмағастар араһына ҡоролған ебәк сатыр эсендә, үҙенең йөҙләгән хеҙмәтсе ҡыҙҙары менән ҡыҙ батша күңел асып ултыра икән. Ул Ҡамыр батырҙы күреү менән урынынан һикереп торған да, үҙенең һылыулығы менән уны арбап, хәлдән тайҙырыу өсөн, көлөп, ҡыланып, алдына килеп баҫҡан. Ә Ҡамыр батыр уның һылыулығы тураһында түгел, уның арҡаһында һәләк булған йөҙәрләгән йәш егеттәр тураһында, уның илгә эшләгән яуызлыҡтары тураһында уйлаған һәм ҡыҙға һис тә иҫе китмәгән.

— Һаумы, батыр егет! Килдеңме? Мин һине күптән зарығып көтә инем, — тигән ҡыҙ, наҙланып.

— Һау ғынамы, һылыу ҡыҙ? Мин дә, күптән бирле һине эҙләп йөрөп, көскә килеп таптым, — тигән Ҡамыр батыр.

— Йә, улайһа, көс һынашып ҡарайыҡ, көрәштә еңһәң, мин һинеке булырмын...

— Мин көрәшкә әҙер!

— Юҡ, ашыҡма, егет! Элек һин бынау ташты күтәреп ҡара. Шуға көсөң етһә генә, мин һинең менән көрәшәсәкмен. Әгәр көсөң етмәһә, үлемең минән булыр. Йә, күтәреп ҡара әле...

— Тәүҙә үҙең күтәреп ҡара, һылыу ҡыҙ!

— Минме? Рәхим ит!..

Ҡыҙ батша өй ҙурлығы бер ташты ике ҡуллап баш осона саҡ-саҡ күтәргән дә кире урынына ҡуйған. Ә Ҡамыр батыр ул ташты етеҙ генә күтәреп алып, тау

аҫтына уҡ ырғытып ебәргән. Таш тәгәрәп төшкән, тау дер һелкенеп торған.

— Бына яҡшы, — тигән ҡыҙ, ҡыуанған булып, — һинең менән көрәшергә лә ярай, исмаһам. Ул ташты ҡуҙғата алырлыҡ батыр килгәне юҡ ине әле...

— Йә, көрәште башлайыҡ, — тигән Ҡамыр батыр, сабырһыҙланып.

— Ашыҡма, егет. Үлергә өлгөрөрһөң әле, — тигән ҡыҙ, зәһәр көлөп.

— Мин йәшәргә өлгөрөргә ашығам, — тигән егет, ҡаты итеп.

— Һин йәшәү тураһында уйларға батырсылыҡ итәһеңме? Ха-ха-ха!..

— Эйе, йәшәү тураһында уйларға батырсылыҡ итәм.

— Ярай, ҡарап ҡарайыҡ.

Шунан улар көрәшә башлағандар. Көрәш өс көн, өс төн барған. Дүртенсе көндө Ҡамыр батыр ҡыҙҙы биленән ҡыҫып алып, баш осона күтәргән. Ошо ваҡытта батырҙың аяғы тубығына тиклем ергә батҡан. Бынан һуң ул ҡыҙҙы ергә атып бәргән. Ҡыҙ барып төшкән ер уйылып ҡалған һәм ҡыҙҙың йәнселгән үлек кәүҙәһе ятҡан урында тоҙло, ағыулы һыулы тәрән күл барлыҡҡа килгән. Ә егеттең ике аяғы батҡан урындан ике йылға атылып сыҡҡан да, шаулап-гөрләп, тау аҫтына табан ағып киткән. Был йылғалар, ағып барышлай, тау биттәрен йыуып, мәйеттәрҙән таҙартҡандар һәм түбәнгә төшкән һайын ағымдары көсәйә, ташҡынлана барып, туп-тура батша һарайына барып төшкәндәр. Улар йыуып үткән бар ер хәтфәләй йәшел үләндәр, сәскәләр менән ҡаплана барған. Бына бер ваҡыт йылғалар батша һарайын бөтә вәзирҙәре һәм башкиҫәрҙәре менән бергә, ер йөҙөнән йыуып, ағыҙып алып киткәндәр. Ҡамыр батырҙың иптәштәре йылғалар буйлап тау түбәһенә табан йүгергәндәр һәм батырҙы йылға яры ситендә йоҡлап ятҡан хәлдә тапҡандар. Ҡамыр батыр йылға ярында күпереп үҫкән үләндәр өҫтөндә йоҡлап ятҡан, сәскәләр уның ауыҙына татлы һуттарын тамыҙғандар, зәңгәр күбәләктәр, ҡанаттарын елпеп, еләҫ яһап, уның өҫтөндә осҡандар. Оҙаҡ, ауыр көрәштән ҡаты арыған Ҡамыр батыр шул ятыуҙан өс көн, өс төн уянмай йоҡлаған. Иптәштәре, уның уянғанын көтөп, керпек ҡаҡмай,

янында һаҡлап ултырғандар. Бына өс көн, өс төн уҙып киткән, һәм Ҡамыр батыр, элеккенән дә шатыраҡ, көсләрәк, матурыраҡ булып, йоҡонан уянған. Бынан һуң дуҫтар арғымаҡтарына атланғандар ҙа, күңелле йырҙар йырлай-йырлай, тағы алға, дейеүҙән ҡотолған бәхетле донъяны күреп йөрөргә китеп барғандар. Бөтә урында халыҡ, үҙҙәрен был ҡан эскес батшанан ҡотҡарған батырҙарҙы хөрмәтләп, оҙатып ҡалған.

?

1. Әбей менән бабай нисек көн иткән? Әкиәттә был турала ни тип әйтелә?
2. Ни өсөн бабай үҙенең улына Ҡамыр батыр тигән исем бирә?
3. Ҡамыр батыр ниндәй маҡсат менән юлға сыға?
4. Уға ниндәй юлдаштар осрай?
5. Ни өсөн әкиәт батырҙарҙың берәр һөнәренә айырыуса ныҡ иғтибар иттерә?
6. Ҡамыр батыр бағана башына менгәс, ни өсөн уның күҙенән йәш тама?
7. Ҡыҙ батша батырҙар алдына ниндәй шарттар ҡуя? Ул шарттарҙы Ҡамыр батыр бер үҙе үтәй алыр инеме? Шунан сығып, әкиәттә ни өсөн уға шундай юлдаштар осрауын аңлатығыҙ. Берҙәмлек, тоғролоҡ тураһындағы мәҡәлдәрҙән миҫалдар килтерегеҙ.
8. Ҡыҙ батша ҡиәфәтенә ингән дейеү үлгән ерҙә ағыулы күл, Ҡамыр батырҙың аяғы батҡан ерҙән ике саф һыулы йылға сығыуын, шуларҙың тирә-йүнде таҙартыуын тасуирлаған урынды табып уҡығыҙ. Уға ниндәй мәғәнә һалыныуын аңлатығыҙ.
9. Халыҡ үҙенең батырҙарын ниндәй итеп күрергә теләй? Батырҙарҙың ҡайһыһы һеҙгә ныҡыраҡ оҡшаны һәм ни өсөн? Әкиәттә халыҡтың ниндәй хыялдары сағылыш тапҡан?

## ӘМИНБӘК

Борон-борон заманда бер ауылда бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Уларҙың Әминбәк исемле бер улдары булған. Ата-әсәһе Әминбәкте бай һатыусы итергә теләгән.

Бер көндө атаһы Әминбәкте янына саҡырып алған да:

— Улым, һин инде ир етеп киләһең, ә ҡулыңда бер һөнәрең юҡ. Һөнәрһеҙ ир — ҡанатһыҙ ҡош ул. Бына

һиңә йөҙ һум аҡса, шуны ал да, ҡалаға барып, һатыусы булырға өйрәнеп ҡайт, — тигән.

Әминбәк тоҡсайын арҡаһына аҫҡан да, йөҙ һум аҡсаһын алып, юлға сығып киткән. Бер көн барған, ике көн барған Әминбәк. Шунан ул бер ҡалаға барып еткән. Фатир алып ҡунған да, таң менән ҡапҡа алдына сығып ултырһа, урамда бер кеше:

— Кем дә кем һөнәр өйрәнергә теләй, шул кеше фәлән ерҙәге фәлән йортҡа барһын! — тип ҡысҡырып, хәбәр һалып йөрөй икән.

Әминбәк күп уйлап тормаған, тотҡан да шул йортҡа киткән. Барып тәҙрәһенән ҡараһа, өй эсендә, йөрәкте өҙҙөрөп, скрипка уйнайҙар икән. Скрипкалары шундай матур, күҙҙең яуын алып тора, ти; үҙенең бер ҡылы алтын, бер ҡылы көмөш икән, ти. Әминбәк өйҙөң эсенә инә. Скрипка һөнәренә өйрәтеүсе уға:

— Йөҙ һум түләйһең дә бер йыл өйрәнәһең, — тигән. Әминбәк йөҙ һумын биргән дә скрипка уйнарға өйрәнә башлаған.

Бер йыл тулғанда, ул шат кешенең шатлығын арттырырлыҡ, ҡайғылының ҡайғыһын таратырлыҡ, ауырыуҙы түшәгенән ҡалҡытырлыҡ итеп, скрипка уйнарға өйрәнгән. Шуға ул бик шатланып, ата-әсәһе янына ҡайтырға ашыҡҡан. Ҡайтҡас, атаһы:

— Йә, улым, ниндәй һөнәр өйрәнеп ҡайттың? — тип һораған.

— Мин скрипка уйнарға өйрәндем. Шат кешене тағы ла нығыраҡ шатландырам, ҡайғылының ҡайғыһын таратам, ауырыуҙы түшәктән торғоҙам! — тигән Әминбәк.

«Скрипка уйнау ҙа булғанмы һөнәр!» — тип ата менән әсә бик ҡайғырышҡандар. Шунан, күрше-күлән белеп ҡалмаҫ борон, Әминбәккә тағы ла йөҙ һум аҡса биргәндәр ҙә, ысын һөнәргә өйрән тип, икенсе ҡалаға ебәргәндәр.

Был ҡалала ла Әминбәк үҙе ҡунған бер йорттоң ҡапҡа төбөнә таң менән сығып ултырһа, урам буйлап бер кеше ҡысҡырып килә икән:

— Кем дә кем һөнәр өйрәнергә теләй, шул кеше фәлән ерҙәге фәлән йортҡа барһын! — тип хәбәр һалып йөрөй икән теге кеше.

Әминбәк күп уйлап тормаған, тотҡан да шул йортҡа киткән. Барып тәҙрәһенән ҡараһа, өй эсендә яҙырға өйрәнәләр икән. Һәр кем алдына матур өҫтәл ҡуйылған, өҫтәл өҫтөндә көмөш ҡара һауыты, ҡауырһын ҡәләм икән. Әминбәк өйгә ингәс, яҙыу-һыҙыуға өйрәтеүсе кеше уға:

— Йөҙ һум түләйһең дә бер йыл өйрәнәһең, — тигән.

Әминбәк йөҙ һумын сығарып биргән дә яҙыу яҙырға өйрәнә башлаған.

Бер йыл тулғанда, ул шундай оҫта яҙыу яҙыусы булып киткән, кем булып яҙырға теләһә, шул булып яҙа белә икән. Шуға ул, бик шатланып, тиҙерәк ата-әсәһе янына ҡайтырға ашыҡҡан. Ҡайтҡас, атаһы:

— Йә, улым, ниндәй һөнәр өйрәнеп ҡайттың? — тип һораған.

— Мин яҙыу яҙырға өйрәндем. Шундай оҫта яҙам, кем булып яҙырға теләһәм, шул булып яҙа алам, — тигән Әминбәк.

«Яҙыу яҙыу ниңә кәрәк ул?» — тип ата менән әсә бик ҡайғырышҡандар. Шунан Әминбәктең атаһы былай тигән:

— Бөлгән баш бөлгән инде, бына һиңә, улым, аҙаҡҡы йөҙ һум. Инде лә йүнле һөнәр өйрәнеп ҡайтмаһаң, күҙемә күренәһе булма! Кеше-фәлән күргеләгәнсе, китеп ҡал, — тигән ул.

Әминбәк өсөнсө ҡалаға киткән. Бында ла ул таң менән ҡапҡа төбөнә сығып ултырһа, урам буйлап бер кеше һөрән һалып килә икән:

— Кем дә кем һөнәр өйрәнергә теләй, шул кеше фәлән ерҙәге фәлән йортҡа барһын! — ти икән.

Әминбәк күп уйлап тормаған, тотҡан да шул йортҡа киткән. Барып тәҙрәһенән ҡараһа, өй эсендә сатраш уйнарға өйрәнәләр икән. Семәрле өҫтәлдәр өҫтөндәге сатраш таҡталарының яртыһы алтындан, яртыһы көмөштән икән. Йөрөтә торған һындарҙың да ун алтыһы алтындан, ун алтыһы көмөштән икән. Әминбәк, ата-әсәһенән ҡурҡһа ла, сыҙар тәҡәте ҡалмағас, өйгә ингән. Сатраш өйрәтеүсе кеше уға:

— Йөҙ һум түләйһең дә бер йыл өйрәнәһең, — тигән.

Әминбәк йөҙ һумын сығарып биргән дә сатраш уйыны өйрәнә башлаған.

Бер йыл тигәндә ул сатрашты шундай оҫта итеп уйнарға өйрәнгән, хатта өйрәтеүсенең үҙен дә ота ла ҡуя икән...

Был юлы инде ата-әсәһе янына көпә-көндөҙ ҡайтып инергә баҙнат итмәгән. Ҡараңғы төшкәнсе, ауыл эргәһендәге ҡыуаҡлыҡ араһында ятҡан. Кис булғас ҡына өйгә ҡайтып ингән.

Сәй эсеп ултырған атаһы:

— Йә, улым, һөнәрҙең аҫылына өйрәнгәнһеңдер инде, һөйлә! — тигән.

— Мин, атай, был юлы сатраш уйнарға өйрәндем, хатта өйрәтеүсенең үҙен дә еңәм, — тигән Әминбәк.

— Теткәнһең икән, улым! Сатраш та булдымы һөнәр! Шайтан уйыны бит ул! Бөлдөрҙөң, харап иттең бит беҙҙе! Хәҙер инде бөтөнләй хәйерсе булып ҡалдыҡ. Кеше күҙенә күренеп йәшәр хәл ҡалманы, — тигән атаһы, ҡайғырып. Шунан ул уйлап торған, торған да: — Бөгөн төндә үк бынан күсеп китәбеҙ, — тигән.

Әминбәктең атаһы ҡалған-боҫҡан мал-тыуарын, йорт-ерен һатҡан да, ваҡ-төйәк заттарын арбаға тейәп, бисәһе менән Әминбәкте алып, ауылдан сығып та киткән.

Төш етер алдынан улар бер ҡалаға яҡынлашҡандар. Ошо ерҙә атты туғарып, Әминбәктең атаһы ҡалаға барып, аҙыҡ-түлек һатып алып килергә булған. Шунан ул арбалағы ваҡ-төйәк заттар араһына ҡыҫтырылған аҡсаһын алайым тиһә, аҡса табылмаған, ул юлда төшөп ҡалған булған. Ни эшләргә? Тегеләй йүгергәндәр, былай йүгергәндәр, ә аҡсаның еҫе-еле лә юҡ. Былар бөтөнләй ас ҡалғандар. Әминбәктең әсәһе сеңләп илай башлаған. Ә атаһы менән Әминбәк ҡайғыға төшкәндәр.

Ошо ваҡытта быларҙан алыҫ түгел ерҙән бер ҙур каруан үтеп бара икән. Әминбәк шул каруанға ҡарап торған да:

— Атай, әсәй, һеҙҙең ошо көнгә ҡалыуығыҙға мин ғәйепле. Һеҙ мине анау үтеп барған каруан башлығына һатығыҙ ҙа шул аҡса менән көн күрегеҙ. Яҙған булһа, күрешербеҙ әле, — тигән.

Улар, каруан башлығы менән һөйләшеп, Әминбәкте һатып ебәргәндәр. Үҙҙәре илай-илай улдарынан айырылып тороп ҡалғандар.

Был каруан бик алыҫтан килгән каруан икән. Бер нисә көн үткәс, каруандың юлға алған һыуы бөткән. Кешеләр генә түгел, хатта дөйәләр ҙә һыуһыҙлыктан интегә башлағандар. Өтөп алып барған ҡояшта бөтөнләй хәлдән тайған кешеләр алыҫта бер ҡара нөктә күргәндәр. Бөтә көстәрен һалып, улар шул нөктәгә табан киткәндәр. Барһалар — ҡоҙоҡ икән. Бауға бәйләп, тиҙ генә силәк төшөргәндәр. Тартһалар, ҡоро силәк килеп сыҡҡан. Ни эшләргә? Шунан каруан башлығы былай тигән:

— Кем дә кем ошо ҡоҙоҡҡа төшөп, һыу табып сығара, шул кешегә ошо каруан байлығының яртыһын бирәм, — тигән.

— Мин төшәм, — тигән Әминбәк.

Уны силәк тағылған бауға бәйләгәндәр ҙә ҡоҙоҡҡа төшөрөп ебәргәндәр.

Ҡоҙоҡ ғәләмәт тәрән булған. Бына Әминбәк ҡоҙоҡ төбөнә төшөп еткән. Ҡоҙоҡ төбө ҡоп-ҡоро, үҙе дөм ҡараңғы икән. Күҙе күнеккәс ни күрә: бер ҙур бүлмәлә тора имеш. Шунда ул бүлмәнең бер мөйөшөндә йымылдап ятҡан хазина күргән. Абайлабыраҡ ҡараһа — алтын икән. Ул алтынды силәккә тултырған да: «Тартығыҙ!» — тип ҡысҡырған. Өҫтәгеләр һыу күтәреп торғанда алтын күргәс, һуштарынан яҙа яҙғандар. Улар силәкте ҡоҙоҡҡа тағы төшөргәндәр. Әминбәк уға тағы ла алтын тултырған да баяғыса: «Тартығыҙ!» — тип ҡысҡырған. Силәкте өҫкә тартып алғандар. Шулай итеп, Әминбәк өҫкә ҡырҡ силәк алтын сығарған. Шунан ул:

— Алтын бөттө, мине сығарығыҙ! — тип ҡысҡырған.

Әминбәкте бау менән күтәрә башлағандар. Шул ваҡыт каруансыларҙың береһе каруан башлығына:

— Ниңә уны сығараһығыҙ? Алтындың яртыһын үҙенә һорар бит, — тигән.

Каруан башлығы уйлап-уйлап торған да Әминбәкте өҫкә сығармаҫҡа булған, бауҙы ҡырҡып ебәргән. Әминбәк дөбөр-шатыр ҡоҙоҡ төбөнә төшөп киткән.

Бер талай иҫенән яҙып ятҡандан һуң, Әминбәк тороп ултырған. «Бау өҙөлөп китте, ахыры», — тип уйлаған ул һәм тағы бау төшөрөрҙәр әле тип көткән. Иллә-мәгәр бау төшмәгән. Шунан уның башына ҡылт итеп бер уй килгән: «Былар минең бауҙы ҡырҡып ҡына шылманымы икән!» Бауҙың осон табып, ҡараһа, ысын: ҡырҡып

киткәндәр. Шунан Әминбәк иларға тотонған. Илаған, илаған да: «Юҡ, былай илап файҙа сыҡмаҫ. Берәй әмәлен күрергә кәрәк», — тип, ҡараңғыла стеналарҙы һәрмәп йөрөй башлаған. Шулай һәрмәнеп йөрөй торғас, ҡулы бер ишек тотҡаһы кеүек нәмәгә тейгән. Ҡапыл тартып асып ебәреүгә, Әминбәктең ҡото оса яҙған: өй эсендә бер ҡарт дейеү аңҡы-тиңке килеп, бер уң яҡҡа, бер һул яҡҡа сайҡалып ултыра икән. Әминбәк ни эшләһен, ҡасыр урын юҡ, ана шул өй кеүек ергә ингән дә ҡарт дейеүгә оҙаҡ ҡына ҡарап ултырған. Дейеү уға бер һүҙ ҙә өндәшмәгән. Шул ваҡыт Әминбәк стенала элеүле торған бер скрипканы күреп ҡалған. Уның уйнағыһы килеп киткән. Шунан ул, бар ҡыйыулығын йыйып, ымлап, скрипка уйнарға дейеүҙән рөхсәт һораған. Дейеү ым менән рөхсәт биргән. Әминбәк скрипканы алған да, өҫтөнә ҡунған саңды кәзәкей сабыуы менән һөртөп, бушап бөткән ҡылдарын тартҡылай башлаған. Шунан, скрипканы бына тигән иттереп көйләп алғас, ул яңғыратып уйнап ебәргән. Шулай итеп, ул уйнаған да уйнаған, уйнаған да уйнаған. Ә ҡарт дейеү, был уйнаған һайын йәнләнә бара икән. Тора-бара ул сайҡалыуҙан туҡтаған, аҙаҡ бөтөнләй йүнгә ингән. Шунан ул егеттең кем булыуын, ни эшләп бында төшөүен һорашҡан. Егет бер нәмәһен дә йәшермәй һөйләп биргән, ҡырҡ силәк алтын сығарыуын да әйткән. Дейеү уға бик ҡайғырған.

— Ул алтын минеке ине, егет. Һин мине бөлдөргәнһең, — тигән дейеү. — Шулай ҙа мин һине ғәфү итәм, һин мине үлемдән ҡотҡарҙың, — тигән. — Мин һәләк булған улымдың ҡайғыһынан үҙем үлеп бара инем, һин, скрипка уйнап, миңә йән индерҙең. Йә, ни теләгең бар, шуны үтәйем, — тигән.

— Мине өҫкә сығар ҙа каруан артынан еткер, — тигән Әминбәк.

Шунда уҡ дейеү Әминбәкте ҡоҙоҡтан осортоп алып сыҡҡан да каруанға еткереп ҡуйған.

Каруан кешеләре Әминбәкте күреп таң ҡалғандар, был ҡалай сыҡты икән, тип аптырағандар.

Шунан каруан башлығы тағы бер хәйлә ҡорған. Ҡалала торған ҡатынына хат яҙған да, алдан барып һөйөнсө алырға, тип, атҡа мендереп, Әминбәкте ебәргән. Әминбәк атын саптырып барған-барған да: «Туҡта әле,

был нимә яҙҙы икән?» — тип, атын туҡтатып, хатты асып ҡараған. Ҡараһа: «Мин ҡайтҡансы, ошо малайҙы үлтертеп, кәүҙәһен кеше тапмаҫ ергә йәшереп ҡуй», — тип яҙылған, ти.

Әминбәк был хатты йыртып ташлаған да, нәҡ каруан хужаһы яҙған кеүек итеп: «Мин ҡайтыуға, ошо егеткә ҡыҙыбыҙҙы биреп, кейәү итеп ҡуй», — тип яңы хат яҙған. Бер-ике көндән ул хужа ҡалаһына барып еткән, хатты хужа ҡатынға тапшырған. Хужа ҡатын, тиҙ генә таныш-белештәрен саҡырып, һимеҙ ҡуй һуйып, ҡунаҡ һыйлап, егетте кейәү итеп ҡуйған.

Төндә ҡаланың бөтә йорттарында ла ут һүнгән булған, тик бер генә йортта ут балҡып янып торған. Әминбәк шул утты күргән дә кәләшенән:

— Анау ниткән йорт ул, ниңә унда һаман ут яна? — тип һораған. Кәләше уға:

— Ул батша йорто. Батша сатраш уйнай, кем дә кем уны бер рәттән өс тапҡыр ота, шул кешегә үҙенең батшалығын бирә, инде үҙе өс тапҡыр отһа, отолғандың башын ҡырҡа, — тигән.

Әминбәк батша янына барған. Батша уға:

— Эй, егет! Ошо көнгә тиклем мине сатраштa отҡан кеше булманы. Башың һау саҡта, ҡайтып кит! — тигән.

— Юҡ, уйнайым! — тигән Әминбәк.

Улар сатраш уйнай башлағандар. Бер-ике рәт йөрөп тә өлгөрмәгәндәр, батша Әминбәкте бикләгән. Шунан батша тағы ла:

— Егет, башыңды әрәм итмә, һау сағыңда ҡайтып ҡал, — тигән.

Әминбәк риза булмаған. Улар тағы уйнай башлағандар. Был юлы Әминбәк бик тырышып уйнаһа ла, батша уны тағы ла бикләгән. Ул тағы ла:

— Егет, бер генә уйын ҡалды, шунан башыңды киҫәм, һау саҡта өйөңә ҡайтып кит, — тигән.

Әминбәк тағы ла риза булмаған. Батша алмас ҡылысын ҡынынан сығарып әҙерләп ҡуйған. Улар тағы уйнай башлағандар. Был юлы бер-ике рәт йөрөп тә өлгөрмәгәндәр, Әминбәк батшаны бикләгән. Уйын тағы башланған. Әминбәк батшаны тағы бикләгән. Шунан ул:

— Батша ҡылысыңды ҡыныңа тыҡ, — тигән. Батша ҡылысын ҡынына тығып ҡуйған.

Былар тағы уйнай башлағандар. Әминбәк батшаны тағы бикләгән.

Ошо ерҙә батша бөтә вәзирҙәрен саҡырып алған, бөтә ҡала халҡын йоҡонан уятҡан, барабан ҡаҡтырып, музыка уйнатып, байрам яһаған да Әминбәкте тәхеткә мендереп ултыртҡан, ти. Әминбәк батша булып алған.

Таң атыуға, Әминбәк вәзирҙәрен саҡырып алған да:

— Фәлән ерҙә фәләнсә каруан килә. Шул каруанды юлда туҡтатып, фәлән байлығын һанап, зәҡәт[1] алып ҡайтығыҙ, — тигән.

Батша кешеләре, каруанға ҡаршы сығып, уны юлда туҡтатҡандар. Каруан башлығы уларҙан:

— Һеҙ кем булаһығыҙ мине туҡтатырға? — тип һораған.

Былар:

— Беҙ батша кешеләре, батша әмере менән һинән зәҡәт алабыҙ, — тигәндәр.

Ошонда каруандың мал-мөлкәтен һанап, бик күбеһен зәкәткә алып киткәндәр.

Каруан ҡалаға килеп ингән. Каруан башлығы өйөнә ҡайтҡан да ҡатынынан:

— Йә, ҡатын, теге мин ебәргән малайҙы ни эшләттең?— тип һораған.

— Ни эшләтәйем, — тигән ҡатыны, — үҙең ҡушҡанса эшләнем. Ҡуй һуйып, ҡыҙҙы биреп, кейәү итеп ҡуйҙым.

— Алйот бисә, мин һиңә, уны үлтертеп, кеше тапмаҫ ергә йәшертеп ҡуй, тип яҙҙым бит!

Ҡатыны аптырауҙа ҡалған да ире яҙған хатты алып биргән. Ире хатты алып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, ул үҙ ҡулы менән: «Мин ҡайтыуға, ошо егеткә ҡыҙыбыҙҙы биреп, кейәү итеп ҡуй», — тип яҙған. Шунан ул:

— Һуң ул ҡәһәр һуҡҡан кейәүең ҡайҙа? — тип ҡысҡырған.

Ҡатыны ҡото осоп:

— Һин ауыҙыңды ипләберәк ас, хәҙер ул батшабыҙ бит! — тип аңлатҡан.

---

[1] *Зәҡәт* — дини һалым.

Каруан башлығы иҫенән яҙа яҙған. Шунан ул, батша алдына барып, тубыҡланып ғәфү үтенгән. Әминбәк уны ғәфү иткән.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, Әминбәк, үҙенең ата-әсәһен таптырып, үҙ янына күсереп алған. Улар ғүмерҙәре бөткәнгә тиклем рәхәт көн күргәндәр.

? 1. Әминбәк ниндәй һөнәрҙәргә өйрәнгән?
2. Ул һөнәрҙәрҙе алыуы еңел булғанмы?
3. Алған һөнәрҙәре менән белеменең файҙаһын Әминбәк нисек күрә?
4. Әминбәк менән каруан башлығы ниндәй тәьҫирҙәр ҡалдырҙы?
5. Текстан әкиәткә генә хас булған урындарҙы табып уҡығыҙ.
6. Халҡыбыҙҙың ниндәй музыка ҡоралдарын beләһегеҙ?

### Өҫтәмә уҡыу буйынса эш

1. Әкиәттәргә арнап әҙәби кисә үткәрегеҙ. Кисәлә әкиәттәрҙе текстҡа яҡын итеп һөйләгеҙ, өҙөктәрҙе ятлағыҙ һәм ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Бер үк әкиәтте төрлөгөҙ төрлөсә һөйләп ҡарағыҙ.
2. Кисәлә башҡа халыҡтарҙың һәм илдәрҙең әкиәт китаптарынан һәм үҙегеҙ яҙып алған әкиәттәрҙән күргәҙмә ойоштороғоҙ.
3. «Хәйләкәр итексе» әкиәтенең үҙегеҙгә оҡшаған өлөшөн алып, сәхнәлә уйнауҙы ойоштороғоҙ. Кейемдәрҙе үҙегеҙ әҙерләгеҙ. Был әкиәтте «Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр» (4-се китап, Өфө, 1981. 301 — 304 биттәр) китабынан табырға мөмкин.

## Синонимдар һәм омонимдар

«Әминбәк» әкиәте «борон-борон заманда бер ауылда бер бабай менән әбей йәшәгән» тигән һүҙҙәр менән башланып китә. Шул уҡ һөйләмде башҡа төрлө һүҙҙәрҙән төҙөп булыр ине. Мәҫәлән: «Элек-элекке дәүерҙә бер ауылда бер ҡарт менән ҡарсыҡ торған». *Заман* һәм *дәүер* һүҙҙәре, тимәк, бер үк мәғәнәне аңлаталар икән. *Борон* һәм *элек, бабай* һәм *ҡарт, әбей* һәм *ҡарсыҡ, йәшәгән* һәм *торған* һүҙҙәренә ҡарата ла шуны уҡ әйтергә мөмкин.

Әйтелештәре яғынан төрлө булып, бер үк йәки яҡын мәғәнә аңлатҡан бындай һүҙҙәр синонимдар тип атала.

Телмәр байлығын үҫтереүҙә синонимдарҙың әһәмиәте бик ҙур. Улар әйбер һәм күренештәрҙең мәғәнә нескәлектәрен дөрөҫ сағылдырырға ярҙам итә. Һөйләшкәндә йәки яҙғанда беҙ синонимдарҙың иң әһәмиәтлеләрен һайлап алабыҙ.

Синонимдарға миҫалдар:

1) *ваҡыт, заман, осор, дәүер, эпоха, миҙгел, мәл;*

2) *батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, фиҙаҡәрлек, ҡаһарманлыҡ, йөрәклелек, ажарлылыҡ, ауанлыҡ, тәүәккәллек, баҙнатлылыҡ, айбарлылыҡ;*

3) *ҙур, оло, өлкән, дәү, мөһабәт;*

4) *эшлекле, егәрле, уңған, сос, эшсән, булдыҡлы, һәләтле.*

Әминбәктең өйрәнеп ҡайтҡан һөнәрен оҡшатмаған, уның ата-әсәһе: «Яҙыу яҙыу ниңә кәрәк ул?» — тип ҡайғырышҡандар. Был миҫалдан күренеүенсә, бер төрлө яҙылһа ла, яҙыу һүҙе ике мәғәнә аңлата ала икән. Уның беренсе мәғәнәһе эштең исемен белдерә (уҡыу, һыҙыу тигәндәге һымаҡ). Икенсе мәғәнәһе эштең башҡарылыуын аңлата.

Әйтелештәре яғынан бер үк төрлө булып та, төрлө мәғәнә аңлатҡан бындай һүҙҙәр **омонимдар** була.

Омонимдарға миҫалдар:

1) *Яҙ* (йыл миҙгеле), *яҙ* (хат яҙ мәғәнәһендә), *яҙ* (бөклә, төр һүҙҙәрененең киреһе: ашъяулыҡты яҙыбыраҡ ҡуй), *яҙ* (май яҙыу);

2) *йөҙ* (һан), *йөҙ* (кешенең бите), *йөҙ* (өҫ мәғәнәһендә: Ер йөҙө), *йөҙ* (ҡолас ташлап йөҙ);

3) *ат* (ерән ат), *ат* (мәргән ат), *ат* (исем һүҙенең синонимы: уның аты булыр Салауат);

4) *ҡаҙ* (ҡош), *ҡаҙ* (соҡор ҡаҙ);

5) *тартма* (өҫтәл тартмаһы), *тартма* (тәмәке тартма), *тартма* (дилбегәне тартма);

6) *ҡара* (бында ҡара), *ҡара* (ҡара төҫ), *ҡара* (яҙа торған ҡара).

**?**

1. Түбәндәге һүҙҙәрҙең ниндәй мәғәнәләрҙә ҡулланыла алғанын аңлатығыҙ: *иң, йыш, йөҙ, гүзәл, һал, сәс, иш.*
2. Түбәндәге синоним һүҙҙәрҙе мәғәнәләренә ҡарап, төркөмдәргә бүлеп яҙығыҙ: *ҙур, ҡырағай, яҡшы, һимеҙ, сыҙамлы, арыҡ, кейек, оло, көр, сабыр, ҡаҡса, өлкән, түҙемле, ябыҡ.*

## ҠӘМӘН МЕНӘН СӘМӘН, КАРТУФ СӘСКӘН СӘЛМӘН

Борон-борон заманда, һайыҫҡандар ала саҡта, олатайҙар бала саҡта, булған, ти, Аҡбулат тигән бер бабай менән Һылыубикә тигән бер әбей. Уларҙың булған, ти, өс улы.

Аҡбулат ҡарт ғүмере буйы сажин ҡырҡҡан да ҡыуғын ҡыуған, ҡарағай йыҡҡан да тыранаса ярған, туҙ һыҙырған да дегет яҡҡан, ерек ҡырҡҡан да күмер күсергән. Ошолай бик күп йылдар үтеп, улдары ир етеүгә, бабай менән әбей ҡартайып киткән, ти.

Быларҙың өлкән ике улы, Ҡәмән менән Сәмән, һүҙгә һүрән, эшкә һүлпән, йомош ҡушһаң, елкәләрен тырнаусан, ашарға тигәндә йүгереп килеүсән, етәкләшеп бергә йөрөүсән, береһе эшләгәндә, икенсеһе ҡул ҡаушырып, ауыҙ асып ҡарап тороусан булғандар, ти. Кинйә улдары Сәлмән эшкә сапсан, йомошҡа егәрле, һүҙгә үткер, уйға зирәк булған. Тотонған бер эшен ҡарап туйғыһыҙ итеп эшләр булған. Бесән сабырға тотондомо, һә тигәнсе бер күбә бесәнең сабып та ҡуйылған, утын ҡырҡырға тотондомо, алды-артыңа ҡарағансы, бер йөк утын өйөп тә ҡуйылған.

Бабай менән әбей кинйә улдарына кинәнеп бөтә алмағандар. Сәлмәндең былай булыуы Ҡәмән менән Сәмәнгә бер ҙә оҡшамаған. Уларҙың көнсөллөгө килгән.

Сәлмәндең башында ике бармаҡ баҫымындай ялтыр урын булған. Көнсөл ағалары өсөн был етә ҡалған. Улар ҡустыларын гел генә:

— Сәлмән таҙ, ялтыр баш! — тип үсекләр булғандар. Ә Сәлмән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Таҙ кеше тапҡыр була, маңлай өҫтө таҡыр була, башы ялтыр була, ә аҡылы алтын була, — тип йылмайып ҡына ҡуя торған булған.

Бер көндө Аҡбулат бабай ауырып киткән дә улдарын үҙ янына саҡырып алған. Ул үҙе иҫән-һау саҡта барлыюҡлы мөлкәтен улдарына бүлеп бирмәксе булған: өлкән улы Ҡәмәнгә — балта, уртансы улы Сәмәнгә — бысҡы, кинйә улы Сәлмәнгә — кәйлә тейгән.

Күп тә тормаҫтан, Аҡбулат ҡарт үлеп киткән. Улдары, әсәләре менән бергәләп, үҙҙәре генә донъя көтә башлағандар. Берҙән-бер көндө әсәләре:

— Балаларым, бер ағас та утын ҡалмаған икән дәһә. Утынға барып ҡайтыр инегеҙ, — тигән.

Сәлмән, шунда уҡ һикереп тороп, йәһәт кенә сәкмәнен кейеп, билен һыға быуған да ағаларына ҡараған. Ә Ҡәмән менән Сәмәндең тиҙ генә ҡуҙғалғыһы килмәй тора икән. Улар тик әсәләренең күҙ ҡарашынан оялып ҡына кирелгәндәр, һуҙылғандар ҙа, Сәлмәнгә ҡарап:

— Һин бысҡы менән балтаны ал да атлай тор, беҙ һине ҡыуып етербеҙ, — тигәндәр.

— Ярар, — тигән дә Сәлмән, балтаны биленә ҡыҫтырып, бысҡыны яурынына һалып, кәйләһен ҡулына тотоп, сығып та киткән.

Йыр артынан йыр башлап, йырлап-көйләп бара торғас, Сәлмән урманға килеп еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалған, ти. Сисенеп ташлаған да һырғыйыраҡ ағастарҙы һайлап, берәм-берәм йығырға керешеп тә киткән, ти, был. Йығып ебәрә лә шунда уҡ ботап, бысып, ярып, өйөп ҡуя бара, ти.

Бер тына эшләгән был. Ике тына эшләгән. Төш ауып киткән. Ағалары һаман юҡ та юҡ. Тағы бер тына эшләп алыуға Ҡәмән менән Сәмән, алпан-толпан атлап, ах та ух килеп, бер киҫкәгә барып ултырғандар, ти. Ҡараһалар, Сәлмән емереп эшләп ташлаған. Быларҙың эстәре бошоп киткән.

— Эй, ялтыр баш, ялтыр баш! Беҙҙең балта менән бысҡыға хужа булып та алғанһың икән! Үтмәҫләп тә бөтөргәнһеңдер әле, бир үҙебеҙгә! Шәп булһаң, ағасты ана кәйләң менән йыҡ! — тип ҡысҡыралар, ти, былар.

Шунда улар Сәлмәндән балта менән бысҡыны, аҙыҡ төрөлгән төйөнсөктө тартып алдылар ҙа әллә ҡайҙа китеп тә юғалдылар, ти. Сәлмән кәйләһен тотоп торҙо ла ҡалды, ти.

Шулай ҙа аптырап тормаған: йығылған йүкә ағастарының ҡабығын кәйләһе менән һыҙыра башлаған: «Һалабаш төшөрөрмөн дә арҡан ишермен, септә һуғырмын», — тип уйлаған ул.

Ҡәмән менән Сәмән, шыр бешәлек араһына инеп, төйөнсөктәге аҙыҡты ашап бөтөргәндәр ҙә йәнә Сәлмән эргәһенә килгәндәр.

— Их һин, алйот, — тиҙәр икән улар, — бәләгә юлыктырҙың бит беҙҙе! Бысҡы менән балтаны эштән сығарып, үтмәҫләп бөтөргәнһең! Таш киҫтеңме әллә? Быса-быса ҡулдарыбыҙ ҡабарып бөттө, билдәребеҙ һына яҙҙы. Үлер хәлебеҙ юҡ инде, ҡайтып китәбеҙ. Утынды иртәгә килеп алырбыҙ әле.

Балта менән бысҡыны Сәлмәнгә ташлап ҡалдырып, Ҡәмән менән Сәмән ҡайтып киткәндәр. Сәлмән, бер үҙе ҡалып, йәнә бик күп утын ҡырҡып өйгән дә эңер төшкәс кенә ҡайтып киткән, ти.

Эштән арып ҡайтҡан Сәлмән йоҡларға ятҡас та, Ҡәмән менән Сәмән, бер үгеҙҙең мөгөҙөнән тотоп алып, ике тәртә араһына ҡыҫтырҙылар ҙа, ҡыҫҡа күкрәк арбаға йәнәш ултырып, үгеҙҙең ҡабырғаһына шап-шоп һуғып, урманға китеп барҙылар, ти. Килеп етһәләр, аптырап ҡалдылар, ти, былар. Сәлмән эшләгән ерҙә ун-ун биш йөккә лә һыймаҫлыҡ утын өйөлөп ята икән. Ҡәмән менән Сәмән әҙер утынды, тауҙай итеп, арбаны шығырлатҡансы тейәп алдылар, ә өйөүле утын кәмемәне лә, ти. Быны күреп, был ике эшлекһеҙҙең асыуы ҡабара башланы, ти.

— Сәлмән үҙе килһә, утынды икәүебеҙҙән дә күберәк алып ҡайтыр. Әсәйебеҙ беҙҙе түгел, уны маҡтар. Берәй аҡыл уйлап табырға кәрәк, — тиҙәр былар. Шунан: — Туҡта, ҡылайыҡ әле ҡылыҡты! — тип кәңәш беркетәләр ҙә ҡустыларының утынын үртәп китергә булалар. Ут төртөп яндырып бөтөрәләр ҙә ҡайтып китәләр. Ә ҡайтҡас:

— Әсәй, бына беҙ күпме утын ҡырҡҡанбыҙ! Утындың бына ниндәйен алып ҡайтырға кәрәк ул! — тип маҡтаналар.

Иртәгеһен таң менән Сәлмән дә, һыртаҡ үгеҙҙе егеп, урманға бара. Ҡараһа, өйөп киткән утын урынында күгәреп ятҡан көл өйөмөнән башҡа бер нәмә лә юҡ, ти. Ни хәл итмәк кәрәк? Әрәм булған утын өсөн бошоноуын бошонған, ти, Сәлмән. Ләкин яңынан утын ҡырҡып тормаған. Көлдөң үҙен йыйып алып, арбаһына өйөп тейәгән дә ҡайтҡан да киткән, ти.

Үгеҙ, ҡәһәрең, ашығыуҙың ни икәнен дә белмәй — ығып ҡына, атлайыммы, атламайыммы тигәндәй итеп кенә баҫа, ти, аяҡтарын. Сәлмән, көл өҫтөнә түшәлгән

сәкмәненә салҡан ятып, оҙон көйҙәр көйләп барғанда, бер заман үгеҙ шып туҡтаны ла ҡуйҙы, ти. Сәлмән башын ҡалҡытып ҡараһа, һыртаҡ үгеҙҙең бер ҡапҡа алдында торғанын күрҙе, ти. Абайлабыраҡ ҡараһа, был ҡапҡа күрше урыҫ ауылындағы белешенеке булып сыҡты, ти.

Сәлмән ни эшләргә лә белмәй торғанда, йорт хужаһы, асмалы тәҙрәһенән башын тығып:

— Әйҙә, әйҙә, Сәлмән знаком, рәхим ит! — тип ҡысҡырҙы, ти. Ә Сәлмән:

— Мөмкин булһа, үгеҙҙе көйшәндереп алырға ине, — тигән була, ти.

Йорт хужаһы, йүгереп сығып, ҡапҡаһын асты ла, бүркен һалып, башын эйеп, Сәлмәнде хөрмәтләп ҡаршы алды, ти.

Инеп, сәй эсеп, картуф ашап, хәл-әхүәл һорашып ултырғанда Сәлмәндең белеше:

— Көлдө ҡайҙа алып бараһың? — тип һораны, ти.

Сәлмән эштең ҡалай булғанын энәнән-ептән һөйләп бирҙе, ти. Белеше, уны йәлләп:

— Көлдө анау кәртә артына түк тә арбаңа картуф тейә, — тип әйтте, — ти. — Әсәйеңә ашатырһың, оҡшаһа, ултыртып та ҡарарһың. Бәхетең булһа, үҫеп тә китер.

Сәлмән көлдө белешенең кәртә янына алып барып ауҙарҙы ла картуф тейәп алды, ти. Шунан ул, белешенә күп рәхмәт әйтеп, оҙон ғүмер теләп, ҡайтып та китте, ти.

Сәлмән, белешенән күрмәксе, һәйбәтләп картуф сәсеп ебәреү тураһында юл буйына уйлап ҡайтты, ти.

Ярай, Сәлмән Ҡыҙыл һыуындай оҙон-оҙон уйҙар уйлап, үгеҙен ыҡтырып ҡайта торһон, ә беҙ уның белешенә әйләнеп киләйек.

Сәлмәндең белеш урыҫы иртәгеһенә иртә менән Сәлмән ауҙарып киткән көлдө баҡсаһына таратып сыҡҡан. Шунан ерҙе һөрөп, бик һәйбәтләп, йомшартып, картуф ултыртҡан. Көҙгә инде уның картуфы йәнә емерелеп уңған, ти. Хатта ҡуйыр урын да тапмай аптырап бөткән, ти. Шул арҡала тирә-яҡта уның даны киткән, ти. Барыһы ла киләләр, һорашалар, белешәләр, ти, ә ул эштең хикмәте ниҙә булыуын һөйләп, аңлатып бирә икән, ти...

Ярай, ул һөйләй, аңлата торһон, күрше-күләне тыңлай торһон, ә беҙ йәнә Сәлмәнгә киләйек.

Сәлмән ҡайтып еткәс, әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешереп ебәргән, ти. Уны, дүртәүләп ултырып, бик яратып ашанылар, ти. Шунан Сәлмән баҡсаны ҡаҙырға сығып китте, ти. Сәлмән эшләй, тирләп-бешеп ҡаҙына, ә Ҡәмән менән Сәмән ҡояшта ҡыҙына, ти. Шулай ҡыҙынып яттылар-яттылар ҙа, ти, был икәү, Сәлмән янына килеп, һорашмаҡ булдылар, ти.

— Әйт әле, Сәлмән ҡусты, һин ни эшләп утын алырға барып, картуф тейәп ҡайттың әле? — тинеләр, ти, улар.

— Тәүҙә көл тейәнем. Шунан көлдө картуфҡа алмаштырҙым, — тип һөйләп китте, ти, Сәлмән, ағаларын шаяртып. — Утынды алып ҡайтайым тип барһам, бәй, утыным урынында көл өйөлөп ята. Әллә ҡайһы һармағы үртәп киткән, — тигән булды, ти. — Бөтөнләй ҡайғыға ҡалдым, — тип үк ебәрҙе, ти. — Урманға барып буш ҡайтыу әҙәм көлкөһө бит инде. Түҙә алманым, ҡайғынан да, гәрлектән дә тигәндәй, көлгә ятып аунай башланым. Үҙем аунайым, үҙем үкереп илайым. Шунан, туҡта әле, мин әйтәм, күпме генә аунап илаһам да, был көлдән файҙа сыҡмаç. Булмаһа, шул көлдөң үҙен тейәп алайым да ҡайтайым тигән уй килде башыма. Ә урманды сыҡҡас, ни эшләп үҙебеҙҙең ауылға көл тарттырып йөрөйөм һуң әле мин, күрше ауылға алып барып, картуфҡа алмашайым үҙен, тигән аҡыл килеп төшмәһенме башыма. Үгеҙҙе икенсе юлға бороп ебәрә һалып, күрше ауылға барып индем дә:

— Кем көлгә картуф алмаштыра!? Көлдөң иң шәбе бар! — тип өс тапҡыр ҡысҡырғайным, биҙрә-биҙрә картуф күтәргән бисә-сәсәләр арбамды һырып та алдылар. Тәүҙә көлдөң сортын тикшереп ҡаранылар. Шунан бер бисә:

— Көлөң һәйбәт кенә икән дә һәйбәтлеген, тик миңә кеше ятып аунағаны кәрәк ине шул, — ти.

— Был һин теләгән көлдөң тап үҙе инде, — мин әйтәм.— Өҫтөндә үҙем аунаным. Ышанмаһаң, бына өҫ-башымды, бөтә тәнемде ҡара, көл теймәгән ерем бармы? — тинем тегегә.

Ышандылар, ышанмай ҡайҙа бараһың, ятып аунауың ысын булғас. Кеше аунаған көл был ауылда ҡыйбат

йөрөй икән: уның бер биҙрәһенә ике биҙрә картуф бирәләр, ә кеше аунамағанына — бер генә биҙрә. Шулай итеп, мин туғыҙ биҙрә көлгә ун һигеҙ биҙрә картуф алып ҡайттым...

Шулай тине лә Сәлмән тағы эшкә керешге, ти. Ә Ҡәмән менән Сәмән, берәүгә лә һиҙҙермәйенсә, Сәлмәнгә лә әйтмәйенсә урманға китеп барҙылар, ти. Улар өс көн буйына утын ҡырҡтылар ҙа өйөп үртәнеләр, ҡырҡтылар ҙа өйөп үртәнеләр, ти. Шунан, дүртенсе көнгә сыҡҡас, былар көл өйөмө янында уйға ҡалдылар, ти.

— Көлгә ятып, аунауын аунап булыр инде уның, ә бына илауын нисек иларбыҙ? Бер ҙә илағы килмәй бит әле?— ти икән Ҡәмән.

— Иламаһаҡ та ярайҙыр. Беҙҙең өсөн Сәлмән илаған бит инде. Көл өҫтөндә илай-илай аунап ятырға беҙҙең ни ҡайғыбыҙ бар? — ти икән Сәмән.

Шунан улар, көлдө борҡолдоғо сығарып, ятып аунанылар ҙа, көлдө тейәп, күрше ауылға киттеләр, ти. Ауылға барып инеү менән:

— Кем көлгә картуф алмаштыра? Көлдөң иң яҡшыһы, икәүләп ятып аунағаны бар! — тип өс тапҡыр ҡысҡырҙылар, ти.

Башта был ауыл кешеләре уларға, шаяртып ҡысҡыраларҙыр тип, көлөп ҡарағандар. Ләкин тегеләрҙең бер туҡтамай урам буйлап ҡолаҡты ярырҙай итеп һөрәнләп барыуҙарын күргәс, асыуҙары килеп, урамға йүгереп сыҡҡандар:

— Был ниндәй алйот бәндәләр? Башында аҙыраҡ аҡылы булған кеше көлгә картуф алмаштыралыр шул!

— Ауылыбыҙҙа картуф ултыртыусы аҙ булғанлыҡтан көлөп, беҙҙе мыҫҡыл итеп йөрөйҙәр улар! — тип, Ҡәмән менән Сәмәнде тотоп алалар ҙа, уңлы-һуллы бәргеләп, көл тейәгән арбаларына һуҙып һалып, ҡайтарып ебәрәләр.

Кеше күҙенә күренергә оялып, Ҡәмән менән Сәмән күҙ бәйләнгәс кенә үҙ ауылдарына ҡайтып инделәр, ти. Ҡайтһалар, Сәлмән баҡсаһындағы бөтә ерен ҡаҙып бөтөргән, хатта ҡул тырмаһы менән тырматып, иртәгә иртүк картуф ултыртырға әҙерләп ҡуйған.

Төндә, ай яҡтыһында, Ҡәмән менән Сәмән: «Был таҙ беҙҙе әҙәм көлкөһөнә ҡалдырып хур итте. Үҙен дә шыма ғына итеп төп башына ултыртайыҡ әле!» — тип кәңәш ҡорҙолар, ти. Шунан улар алып ҡайтҡан көлдәрен баҡсаға таратып тороп түктеләр ҙә, Сәлмән һиҙмәһен тип, көлдө тупраҡҡа аралаштырып, бөтә ҡаҙылған ерҙе, Сәлмәндең үҙе кеүек итеп, ҡул тырмаһы менән тырматып сыҡтылар, ти.

— Һемәйттек тегене! — тип ҡыуанышалар икән былар. — Бына үҫһен инде картуфың! Көл ипләп кенә картуфыңдың тамырын ҡырҡһын әле! — тип көлөшәләр, ти, үҙҙәре.

Былай ҙа туҡмалып ҡайтҡан Ҡәмән менән Сәмәнгә баҡсала эшләү етә ҡалды. Йыуынып, өйгә инеп йоҡларлыҡ та хәлдәре ҡалмай быларҙың: соланға ғына инеп йығылалар.

Иртәгеһен Сәлмән таңдан тороп сыға ла баҡса тултырып картуф ултырта. Эште бөтөрөп өйгә инеп барғанда, бер нәмә белмәй йоҡлап ятҡан ағаларын күреп, шарҡылдап көлөп ебәрә. Көлмәҫлек тә түгел шул — тегеләрҙең тештәре генә йылтырап күренә, үҙҙәре баштан-аяҡ көл-күмер менән бысранып бөткән, ти.

Ағалары уянып китәләр ҙә:

— Ниңә көләһең, таҙ? — тиҙәр. Үҙен туҡмап ташларға иҫәптәре бар ҙа, хәлдәре юҡ, ти, быларҙың.

Сәлмән һүҙҙе икенсегә бора. «Быларға ышанһаң, йә ултыртылған картуфты ултыртҡан еренән сүпләп алып сығырҙар», — тип уйлай. Шуның өсөн ағаларын алдан иҫкәртеп ҡуймаҡ була.

— Бер төш күрҙем. Шуға көләм, — ти Сәлмән.

— Ниндәй төш? Таҙ кеше төш күрәме ни ул?

— Күрә икән шул. Һеҙ миңә асыу итеп, әсәйем дә, үҙегеҙ ҙә ашаясаҡ картуфты йолҡоп ташларға булғанһығыҙ икән, тим. Мин быны ситтән генә ҡарап торам, имеш, тим. Шунан һин, Ҡәмән ағайым, ә һинең артыңдан Сәмән ағайым икегеҙ ике картуфты һабағынан тотоп тартыуығыҙ булды — ҡаҙ йомортҡаһы ҙурлығы ике картуф, ерҙән атылып килеп сығып, икегеҙҙең дә маңлайығыҙға шап итеп килеп ултырыуы булды. Икегеҙ ҙә, бына, әлеге һымаҡ, иҫегеҙ китеп, хәлһеҙләнеп яттығыҙ... Бына шундай төш күргәйнем, шуға көләм.

— Таҙҙың төшө таҙса булыр инде уның! — тиештеләр, ти, Ҡәмән менән Сәмән. Ләкин үҙҙәре: «Сәлмәнгә асыу итеп картуфты йолҡор булһаҡ, ана шулай булыуы ла бар шул», — тигән уйға килделәр, ти.

Шунан Ҡәмән менән Сәмән һикереп торҙолар ҙа Сәлмәнде яғалап та алдылар, ти.

— Һинән күрмәксе, көл биреп картуф алырға барып, әҙәм көлкөһөнә ҡалып ҡайттыҡ. Енеңде сығарабыҙ хәҙер үҙеңдең, — тип, тегене бөрөп кенә алып баралар, ти, былар.

— Ғәйеп үҙегеҙҙәлер әле. Мин эшләгәнсә эшләмәгәнһегеҙҙер, моғайын, — тигән булды, ти, Сәлмән. — Хәҙер тикшереп ҡарайыҡ. Урманға барҙығыҙмы?

— Барҙыҡ.

— Утын үртәп, көл яһанығыҙмы?

— Яһаныҡ.

— Көлгә ятып аунанығыҙмы?

— Аунаныҡ.

— Аунағанда, күҙ йәшегеҙҙе сығарып иланығыҙмы?

— Юҡ, илап булманы. Уның урынына көл менән күрше ауылға барғас иланыҡ, — тиҙәр тегеләр. Ә Сәлмән:

— Унынһы иҫәпкә инмәй. Ғәйеп үҙегеҙҙә. Көлдө тейәрҙән элек өҫтөндә аунап иламағас, үҙегеҙҙе ауылда илатҡандар, — ти.

Ҡәмән менән Сәмән бер-береһенә ҡарашты ла:

— Ғәйеп үҙебеҙҙә булған икән шул, — тинеләр, ти.

Көҙ көнө Сәлмән баҡсанан быйма башындай эре-эре картуф йыйып алды, ти. Әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешерҙе, ти. Ә Ҡәмән менән Сәмән картуф ашарға ултырырға ҡыймайыраҡ торалар икән, ти.

Шунда Сәлмән:

— Ултырығыҙ, ағайҙар. Был картуфтың былай уңыуына һеҙ ҙә тырышлыҡ күрһәттегеҙ бит. Урманда өс көн буйы көс түгеп утын киҫеп, шунан күрше ауылда ҡолаҡ төбөгөҙгә ала-ала, бер йөк көл килтерҙегеҙ. Көлдө, миңә һиҙҙермәҫкә тырышып, төндә баҡсаға һиптегеҙ. Ә картуфты уңдырыр өсөн көл бик кәрәк аҙыҡ икән ул, — тип һөйләп аңлатып бирҙе, ти.

Шул көндән бирле Ҡәмән менән Сәмән ҡустыларына ылығып, өс туған иң яҡын дуҫ булып, өсөһө лә берҙәй

эшлекле, берҙәй уңған булып китте, ти. Шул көндән башлап Сәлмәндең тирә-яҡта даны таралып, уны картуф сәскән Сәлмән тип йөрөтә башлағандар, ти.

?

1. Һеҙгә әкиәттә кем оҡшаны? Ни өсөн?
2. Әкиәт халыҡты нимәгә саҡыра? Әкиәттә халыҡ ниндәй кешеләрҙе хуплай, кемдәрҙән көлә?
3. Йөкмәткеһе яғынан әкиәтте өлөштәргә бүлегеҙ. Һәр өлөшкә исем ҡушығыҙ.
4. Әкиәттә Ҡәмән менән Сәмән һәм Сәлмәндең ниндәй һыҙаттары асыла?
5. Ни өсөн Сәлмәндең эше гел уң була, ә ағайҙары гел уңайһыҙ хәлдә ҡала?
6. Әкиәт ялҡауҙарҙан нисегерәк көлә?
7. Өс туғандың татыулашыуына Сәлмәндең ниндәй яғы ярҙам итә?

## Антонимдар

Әкиәттә Сәлмәндең ағаларына оҡшамауы, уңған булыуы тураһында әйтелә. Ҡәмән менән Сәмән эшкә *һүлпән*, Сәлмән, киреһенсә, эшкә *сапсан*. Ағалары *ялҡау*, Сәлмән *егәрле*. Ағалары *аңра*, Сәлмән *зирәк*.

Ҡапма-ҡаршы мәғәнәне белдереүсе былдай һүҙҙәр **антонимдар** тип атала. Антонимдар бер әйберҙең икенсеһенән киҫкен айырылыуын белдереү өсөн ҡулланылалар.

Антонимдарға миҫалдар: *көн — төн, аҡ — ҡара, ҡаты — йомшаҡ, алыҫ — яҡын, аҙ — күп, батырлыҡ — ҡурҡаҡлыҡ, барыу — ҡайтыу.*

Түбәндәге һүҙҙәрҙең антонимдарын табығыҙ: *үткер, бейек, иртә, оҙон, ҡыш, йомартлыҡ, етеҙ, ауырлыҡ, тыныслыҡ, оло.*

## Әкиәттәр тураһында

**Әкиәт** — халыҡ ижадының бер төрө; ул сәсмә телдә ижад ителә, йыш ҡына тылсымлы, ысынбарлыҡта булмаҫтай хәл-ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала.

Әкиәттәр бик борон, тәүтормош йәмғиәтендә үк, барлыҡҡа килгәндәр ҙә артабан камиллаша барғандар.

Башланғыс синыфтарҙа һеҙ геройҙары төрлө-төрлө йәнлектәр булған әкиәттәр менән танышҡайнығыҙ. Ундай әкиәттәрҙе хайуандар тураһындағы әкиәттәр тип йөрөтәләр. Ә бына «Ҡамыр батыр» ишеләрен батырҙар тураһындағы әкиәттәр төркөмөнә индерәләр. Бындай әкиәттәрҙең геройы, ғәҙәттә, мөғжизә ярҙамындараҡ донъяға килеп, ай үҫәһен көн үҫеп, тиҙ арала ғәйрәтле батыр булып етешә. Ул Уғатар, Йүгерек, Күлуртлар, Тау, Урман батырҙар һымаҡ юлдаштары ярҙамында илен, халҡын яман көстәрҙән ҡотҡара.

«Әминбәк», «Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәттәрендә, белеүегеҙсә, мөғжизәлелек юҡ. Әминбәк тә, Ҡәмән менән Сәмән дә, Сәлмән дә — ҡәҙимге кешеләр, ҡәҙимге шарттарҙа йәшәйҙәр. Ә инде «Әминбәк» әкиәтендәге дейеү бары Әминбәктең скрипкала ни тиклем оҫта уйнауын аңлатыу өсөн генә хеҙмәт итә. Скрипка моңо үлеп барған дейеүгә йән бирә. Тимәк, Әминбәк скрипкала шул тиклем оҫта, шул тиклем моңло итеп уйнай белә. Бына шулай тормошто тормошсан сағылдырған әкиәттәрҙе тормош-көнкүреш әкиәттәре тип атайҙар.

Әкиәттәрҙең бөтәһендә лә ыңғай һәм кире геройҙар бер-береһенә ҡырҡа ҡаршы ҡуйыла. Ыңғай геройҙар ғәҙеллек, хәҡиҡәт өсөн көрәшәләр һәм, ғәҙәттә, өс төрлө һынау, өс төрлө ҡыйынлыҡ үтеп, маҡсаттарына мотлаҡ ирешәләр.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары араһында әкиәттәр күренекле урын алып тора.

?

1. Әкиәттәр тормошто нисегерәк һүрәтләй?
2. Тормош-көнкүреш әкиәттәренә миҫалдар килтерегеҙ. Уларға хас үҙенсәлектәрҙе әйтегеҙ.
3. Был әкиәттәрҙән батырҙар тураһындағы әкиәттәр ниндәй яғы менән айырыла?

## Йомаҡтар

Йомаҡ — йөкмәткеһе буйынса яуабы уйлап табырға тейеш булған образлы һөйләм. Ул йыш ҡына

һорау йә башваткыс рәүешендә бирелә. Шиғри үлсәмгә һалынған йомаҡтар ҙа була.

Йомаҡтар — халыҡ ижадының үҙенсәлекле бер төрө. Боронғо замандарҙа йомаҡтар кешеләрҙә зирәклек, тапҡырлыҡ сифаттары тәрбиәләү өсөн ҡулланылған. Хәҙерге ваҡытта улар күбеһенсә мәктәп йәшендәге балалар араһында ял сәғәттәрендә әйтеләләр.

Көтөлә торған яуап йомаҡта йомолоп, ситләтелеп әйтелә. (Уның исеме лә ана шул уй йомоуҙан алынған.) Ситләтелгән ошо билдәләр буйынса фекер йөрөтөп, кеше йомаҡтың яуабын табырға тейеш була. Мәҫәлән: «Башы — тараҡ, ҡойроғо — ураҡ». Ысынлап та, әтәстең кикреге тараҡҡа, ҡойроғо ураҡҡа оҡшап тора.

Йомаҡтарҙы түбәндәге төркөмдәргә бүлеп ҡарарға мөмкин.

### I. Тәбиғәт күренештәре тураһындағы йомаҡтар

1. Бер ҡарттың ун ике улы бар,
Шуларҙың өсәүһе һоро көпө кейә,
Өсәүһе йәшел күлдәк кейә,
Өсәүһе һары сәкмән кейә,
Өсәүһе аҡ тун кейә.

2. Шәкәр тиһәң, шәкәр түгел,
Һөт тә түгел — үҙе аҡ.
Мамыҡ тиһәң — мамыҡ түгел,
Йә, был нимә? Уйлап тап.

3. Оло юлдан күс килә,
Иртән килә, кис килә.
Үр яратмай, әйләнә,
Арты өҙөлмәй бәйләнә.

4. Ағас бөгә — ҡулы юҡ,
Йөрөй торған юлы юҡ.
Асыуланһа һыҙғыра,
Туҙандарҙы туҙҙыра.

5. Аяғы юҡ — ил гиҙә.
Күҙҙәре юҡ — йәш түгә.

## II. Хайуандар донъяһы тураһындағы йомаҡтар

1. Әйтәйем һиңә бер йомаҡ:
   Йәйен һоро, ҡышын аҡ.
   Ҡыҫҡа ҡойроҡ, ҙур ҡолаҡ.

2. Муйыны — дуға,
   Арҡаһы — эйәр.

3. Ҡойроғон ҡайсылап,
   Ауыҙын тамсылап,
   Ағасһыҙ, мөйөшһөҙ
   Өй һалды еүешләп.

4. Аяғы юҡ — йөрөй,
   Ҡанаты бар — оса алмай.

5. Өҫтөндәге кейеменең
   Ямауы бар, йөйө юҡ.

6. Тырҡындыҡ, мырҡылдыҡ,
   Мырҡылдашып ер һөрҙөк,
   Һаҙға баттыҡ, тик яттыҡ.

## III. Кеше һәм уның көнкүреше тураһындағы йомаҡтар

1. Иртәнсәк — аяғы дүртәү,
   Көндөҙ — икәү, кисен — өсәү.

2. Һурпаһын эсәләр,
   Итен түгәләр.

3. Бәләкәй генә бер көсөк,
   Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә.

4. Эсе ҡара, күмер кеүек,
   Тышы һары, шалҡан кеүек.
   Ултырыуы мулла кеүек,
   Һыҙғырыуы шайтан кеүек.

5. Алтын бишек, төбө тишек.

## IV. Хеҙмәт тураһындағы йомаҡтар

1. Ана бара, юлы ҡара.
2. Айыу үкерә, йөнө ҡойола.
3. Ере аҡ, орлоғо ҡара,
   Ҡул менән сәсәләр,
   Ауыҙ менән йыялар.
4. Тешен батыра бара,
   Сәйнәп төкөрә бара.
5. Арҡан ураным,
   Бура бураным,
   Йылыһына ҡыуандым.
6. Өй урата арҡан иштем.

## V. Аң-белем тураһындағы йомаҡтар

1. Юҡ ауыҙы, юҡ күҙе,
   Һөйләй, өйрәтә үҙе.
   Телгә унан оҫта юҡ,
   Унан яҡын дуҫ та юҡ.
2. Аҡ яланда ҡара малай
   Ҡыҙыу йөрөп эҙ яһай,
   Эҙ яһамай, һүҙ яһай.
3. Ҡалаһы бар, халҡы юҡ,
   Диңгеҙе бар, һыуы юҡ.

## VI. Фән һәм техника тураһындағы йомаҡтар

1. Ат түгел, кешнәмәй,
   Йөҙ аттан кәм эшләмәй.
2. Әй ат саба, ат саба,
   Һығыла билгенәһе.
   Тояҡтары резинка,
   Тимерҙән дилбегәһе.
3. Ҡанаты бар — йөнө юҡ,
   Күккә менһә, тиңе юҡ.

4. Дилбегә юҡ, йүгән юҡ,
Ҡамыт кәрәк тигән юҡ.
Ҡара айғырҙы ектеләр,
Ултырҙылар киттеләр.

5. Үҙе һөйләй — күренмәй.

?

1. Йомаҡтарҙың яуабы нисек табыла? «Бабай ҡат-ҡат тун кейгән, сисендерһәң иларһың» тигән йомаҡтың яуабын табыуға ярҙам иткән билдәләрҙе аңлатығыҙ.
2. Юғарылағы йомаҡтарҙың ҡайһыһында иҫке ауыл тормошо, ә ҡайһыларында яңы тормош сағыла?
3. Үҙегеҙ теләгән темаларға, уйлап, йомаҡтар төҙөгөҙ (ҡояш, юл, китап, мәктәп, комбайн, һөт һ. б.).
4. Үҙегеҙ белгән, ишеткән йомаҡтарҙы дәфтәрегеҙгә яҙып килегеҙ. Йомаҡтарға арнап, «Булһаң зирәк — әйт тиҙерәк» тигән темаға конкурс үткәрегеҙ.

## Мәҡәлдәр

Мәҡәлдәр — халыҡ ижадының бер төрө. Улар ҡыҫҡа, ләкин тәрән мәғәнәле була. Һөйләгәндә ҡулланыла, әйтелгән фекерҙе матур итеп дәлилләү сараһы булып тора. Мәҫәлән, Тыуған илде яратыу тураһында һүҙ барғанда, берәй кеше үҙенең һүҙҙәрен шундай мәҡәлдәр менән матурлап һәм нығытып ҡуйырға мөмкин: «Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуып-үҫкән ил артыҡ», «Кеше илендә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул», «Үҙ илең — алтын бишек».

Ҡайһы бер мәҡәлдәрҙе тура мәғәнәһендә генә аңлатырға ярамай. Миҫал өсөн «Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың» тигән мәҡәлде алайыҡ. Ул иген игеүселәргә ҡарата ғына әйтелгән һымаҡ. Ләкин уның мәғәнәһе киңерәк. Мәҡәл «Эште ваҡытында башҡарып ҡалмаһаң, һуңынан үкенерһең» тигәнде аңлата һәм бөтә һөнәр кешеләренә ҡарата ла әйтелә.

Мәҡәлдәр тормош тәжрибәһе нигеҙендә тыуа, улар халыҡтың зирәклеген, тапҡырлығын күрһәтә.

Мәҡәлдәр бик күп төрлө мәсьәләләргә арнала. Уларҙы түбәндәгесә төркөмләп ҡарарға мөмкин.

### Тәбиғәт тураһындағы мәҡәлдәр

1. Ҡояштың да табы бар.
2. Төндөң күҙе юҡ.
3. Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй.
4. Көҙгө боҙ көҙгө ҡалынлығы булһа ла ышан, яҙғы боҙ яҫтыҡ ҡалынлығы булһа ла ышанма.
5. Йөрөгән таш шымарыр, ятҡан таш мүкләнер.

### Хеҙмәт тураһындағы мәҡәлдәр

1. Әҙәм эше менән, ағас емеше менән.
2. Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен.
3. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.
4. Егәрленең ҡулы ете.
5. Матурлыҡ туйҙа кәрәк, уңғанлыҡ көн дә кәрәк.
6. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.
7. Хәрәкәттә — бәрәкәт.

### Тыуған ил тураһындағы мәҡәлдәр

1. Ат — туйған ерендә, ир — тыуған илендә.
2. Ил өҫтөндә сәпсек үлмәҫ.
3. Ирҙән ашмаҡ бар, илдән ашмаҡ юҡ.
4. Үҙ илең — алтын бишек.
5. Ир аҡылы — бер алтын, ил аҡылы — мең алтын.
6. Аҙашһаң да, ил менән аҙаш.

### Көнкүреш тураһындағы мәҡәлдәр

1. Атаңа ни ҡылһаң, алдыңа шул килер.
2. Атың барҙа ер таны, атаң барҙа ир таны.
3. Берлектә — тереклек.
4. Юрғаныңа ҡарап аяғың һуҙ.
5. Терпе лә балаһын «йомшағым» тип һөйөр.
6. Яҡшылыҡ эшлә лә һыуға ташла — халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер.

Мәҡәлдәр үҙҙәренең төҙөлөшө яғынан бай, тәрән мәғәнәле, ҡыҫҡа һәм тапҡыр фекерле һөйләмдәрҙән тора. Ике өлөштән тороп, күпселек мәҡәлдәрҙә шул ике

өлөштөң аҙағындағы һүҙҙәр үҙ-ара оҡшашып (рифмалашып) килә. Мәҫәлән: «Тура әйткән **ҡотолор**, алдап әйткән **тотолор**».

Мәҡәлдәрҙә бер үк өн һүҙҙәрҙең күбеһендә ҡабатланып килергә мөмкин:

**Һигеҙ һыйыр аҫрағансы, һимеҙ һыйыр аҫра.**

**Алтмыш аҙым алға атла, алты тапҡыр артыңа ҡара.**

?

1. Тыуған ил тураһындағы мәҡәлдәрҙе яттан әйтеп сығығыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
2. Фән, белем, дуҫлыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәлдәр яҙып алығыҙ.
3. «Берлектә — тереклек» тигән мәҡәлгә нигеҙләнеп, хикәйә яҙығыҙ.
4. Мәҡәл һәм йомаҡтар йыйып, альбом төҙөгөҙ.

## Башҡорт халыҡ йырҙары

**Йыр** — көйгә һалып башҡарыла торған шиғри әҫәр.

Йырҙар халыҡтың күңел кисерештәрен, уй-ҡараштарын сағылдыра.

Ата-бабаларыбыҙ борон-борондан үҙҙәренсә шатлыҡ-ҡыуаныстарын, ҡайғы-хәсрәттәрен көйгә һалған, тыуған ерҙе, ил батырҙарын данлап, әһәмиәтле хәл-ваҡиғалар, үткән ғүмерҙе хәтерләп йырлаған. Йырҙарҙа төп фекер, ғәҙәттә, куплеттың һуңғы ике юлында әйтелә. Халыҡ ижадында оҙон, ҡыҫҡа көйлө йырҙар, таҡмаҡтар бар.

Йырҙар шағирҙар тарафынан да сығарыла. Уларҙы композиторҙар көйгә һала. Мәҫәлән, Салауат Юлаев, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Яҡуп Ҡолмой, Сафуан Әлибаев, Гөлфиә Юнысова һ. б. шағирҙар һүҙҙәренә бик күп йырҙар яҙылған.

### Оҙон көйлө йырҙарҙан

Атҡа ғына менһәң, ай, ат яҡшы,
Ергә генә төшһәң, ер яҡшы.
Алтын ғына көмөш яуған ерҙән
Тыуып та ғына үҫкән ил яҡшы.

* * *

Беҙҙең генә илдең, ай, ҡурайы,
Моңландырып ҡына тартырға.
Илгенәйем бигерәк йәмле ине,
Моңланам бит шунда ҡайтырға.

* * *

Бурай ғына бурай ҡарҙар яуа,
Бойоҡмай микән болан балаһы.
Бойоҡмай ҙа болан, ай, балаһы,
Бигерәк матур башҡорт далаһы.

**Ҡыҫҡа көйлө йырҙарҙан**

Аҡбуҙ атымды ебәрҙем
Урман араларына.
Донъя күрмәй, аҡыл кермәй
Ата балаларына.

* * *

Беҙ үҫкәндә үҫкән инек,
Тал тамырҙары кеүек.
Үҫеп еткәс, таралыштыҡ,
Ҡош балалары кеүек.

* * *

Үрмә гөлдәр үҫә икән,
Бер-береһенә бәйләнеп.
Үткән рәхәт йәш ғүмерең
Бер килһәсе әйләнеп.

**Таҡмаҡтар**

Ағиҙелгә баҫма һалдым
Ҡайынын һайлап ҡына.
Килеп китһәң ниҙәр була
Ҡош булып һайрап ҡына.

* * *

Аҡ ҡуяндың балаһын
Ебәрегеҙ, уйнаһын.
Уйнап-көлөп ултырғанды
Ғәйепләүсе булмаһын.

* * *

Аяғындағы итегең,
Олтандары еҙ икән.
Һикереп төшөп бейеүҙәрең
Үҙе бер ғүмер икән.

? Түбәндәге план буйынса йыр кисәһе үткәрегеҙ.

1. «Беҙ йыр менән йәшәйбеҙ» тигән темаға әңгәмә.
2. Тыуған ил тураһындағы йырҙарҙы хор менән йырлау.
3. Башҡортостан йылғаларына бағышланған йырҙар (өс-дүрт уҡыусы башҡарыуында).
4. Хеҙмәт, дуҫлыҡ тураһындағы йырҙар (яңғыҙ башҡарыу).
5. Халыҡ йырҙарының көйөн тыңлау (магнитофон таҫмаһында йәки берәй музыка ҡоралында).
6. Урындағы халыҡ йырҙарын ололарҙан яҙып алып, альбом төҙөү.
7. Кисәгә халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы һәүәҫкәр йырсыларҙы саҡырыу.
8. Түбәндәге юлдарҙы файҙаланып һәм шулар өлгөһөндә үҙегеҙ уйлап, синыф тормошон сағылдырған таҡмаҡтар сығарығыҙ.

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Кәримә...

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Сәлимә...

Исемдәре, исемдәре
Исемдәре Фәниә...

Ағиҙелдән ағып килә
Ҡайын менән ҡарағай...

Үҙегеҙ сығарған төртмә таҡмаҡтарҙы ҡара-ҡаршы әйтешеп, бәйге үткәрегеҙ. Ҡайһы команда, туҡтап тормай, күберәк әйтә, шул еңеүсе була.

* * *

## Бүлектәге йомаҡтарҙың яуаптары

I. 1. *Йыл миҙгелдәре, айҙар.* 2. *Ҡар.* 3. *Йылға.* 4. *Ел.* 5. *Болот.*
II. 1. *Ҡуян.* 2. *Дөйә.* 3. *Ҡарлуғас.* 4. *Балыҡ.* 5. *Ала һыйыр.* 6. *Сусҡа.*
III. 1. *Кеше бала сағында, үҫкәс һәм ҡартайғас.* 2. *Сәй.* 3. *Йоҙаҡ.* 4. *Самауыр.* 5. *Иләк.*
IV. 1. *Һабан һөрөү.* 2. *Тирмән.* 3. *Яҙыу һәм уҡыу.* 4. *Бысҡы.* 5. *Ойоҡ, бейәләй бәйләү.* 6. *Мүк тығыу.*
V. 1. *Китап.* 2. *Ҡәләм.* 3. *Географик карта.*
VI. 1. *Трактор.* 2. *Автомобиль.* 3. *Самолёт.* 4. *Поезд, паровоз.* 5. *Радио.*

# Дүртенсе бүлек

*Шағир — бер тамсыһы икән үҙ*
*халҡының,*
*Тамсы һөйләй диңгеҙ хаҡында.*
*Шағир — шаңдағы ул замананың,*
*Һәм көсө лә уның халҡында.*

Р. Ғарипов



**Салауат ЮЛАЕВ**

**1754—1800**

«Салауаттың тарихи ҡаһарманлығы шиғырҙарын онотмаҫҡа, ә шиғырҙары иһә уның исемен һәр саҡ хәтерләргә мәжбүр иткән...» *Мостай Кәрим.*

## ҠАЙТЫП КИЛӘМ

Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып,
Ҡайтып киләм, тауҙар артылып.
Эй, һағындым, йәнем, ер еләгем,
Күҙ алдымдан китмәй балҡыуың.

Таңдарымда миңә ҡояш баҡты,
Юл күрһәтте йондоҙ төндәрҙә.
Көнөн-төнөн сабам тынғы белмәй —
Иҫән-һауҙар микән илдәрҙә?

Әминәкәй көтөп ҡаршы алыр,
Рамазаны булыр ҡулында.
— Һаумы, улым, һаумы, Рамазаным,
Һин тип йәндәр аттым юлымда.

? Салауаттың тыуған яҡтарын һағынып ҡайтыуын шиғырҙың ниндәй юлдарынан күреп була?

## ЯУҘА ЯРАЛАНҒАС...

Һауаларҙа осҡан, ай, ягылбай
Ҡыялап та оса, ҡош күрһә.
Яуҙарҙан да ҡалған батыр егет
Ҡыуана ла икән, төш күрһә.

Өйөрө генә йылҡы араһынан
Һөйөп менгән атым бүртә ине.
Дошман яуҙарына сапҡан саҡта
Ҡайғыларым бары бөтә ине.

Ыласын да оса, күсте ҡыя,
Ҡанаттары талғас, бер төшә.
Ыласындай төçлө батырҙар ҙа
Бер төшмәһә аттан бер төшә.

? Салауаттың был шиғырында ни өсөн төшөнкөлөк өçтөнлөк итә тип уйлайһығыҙ?

## ЙЫРҘАРҘАН

Әйҙәнем дә, һай, әйҙәнем,
Әй буйына сығып йәйләнем.
Ҡаршы ла килгән дошман яуын
Ҡуй һарығы кеүек әйҙәнем.

* * *

Эçем буйҡайҙарында һары ҡамыш,
Екән дә генә башы бер ҡарыш.
Эçем буйҡайҙарын баяр басты,
Йөрәккәйем шуға ла зар-һағыш.

* * *

Атайым да тиһәм, уғым аҙ,
Сабайым да тиһәм, алдым һаҙ.
Ян-яҡтарыма ҡараны иһәм,
Йән-юлдашҡайҙарым минең аҙ.

* * *

Һауаларҙа осҡан ағуна,
Ҡанаттары талып, ҡағына.
Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ,
Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла.

? 1. Ни өсөн Салауаттың шиғырҙарында, йырҙарында тәбиғәт күренештәре, ҡош исемдәре йыш осрай?
2. Аҙаҡҡы йырҙың һуңғы ике юлын нисек аңлайһығыҙ?
3. Салауаттың йырҙарын алда өйрәнгән халыҡ йырҙары менән сағыштырып, төҙөлөшө, йөкмәткеһе буйынса уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын табырға тырышығыҙ.

Ғәбдрәхим Усман

## ЕГЕТ БУЛҺАҢ...

Егет булһаң, егетлек күрһәт илгә.
Мөһабәтлек билбауын бәйлә билгә.

Ярҙам итеп бир һәр саҡ саҙаҡаны,
Һиңә күрше кешеләр булһа ярлы.

Ғәҙеллек ҡыл, тороусы бул һүҙеңдә,
Туҙан хәтле яфа ҡылма бер кемгә.

Әйтмә һис бер кешегә һин әсе тел,
Кеше әйтһә, уларға һин бары көл.

Байҙар ҙа бар донъяла, бар ярлы ла,
Диуана бар, тулылар бар аҡылға.

Барыһы туған булып донъя көтмәһә,
Үҙ-үҙенә күптең аҡылы етмәһә,

Көтәр ҡайһыһы донъя — бәхете барға,
Көтәр ҡайһыһы уны — аҡылы барға.

? 1. Шағир егет кешелә ниндәй сифаттарҙы күрергә теләй?
2. Нисек уйлайһығыҙ, «аҡыл» һүҙе әҫәрҙә ни өсөн бер нисә тапҡыр ҡабатлана?

## ҠАРМАСАН МЕНӘН СӘРМӘСӘН

(«Һуңғы һартай» әҫәренән өҙөк)

Барыһын да уйлай башлаһам, башым яна! Шулай ҙа мин бөтә булғанды һөйләп бирергә телемде мәжбүр итермен.

Бөтәгеҙ ҙә тыңлағыҙ!

Исемем Ялыҡ! Ташҡай улы Бурнаҡтың улымын. Һартай ырыуынан. Тамғам — төлкө ҡойроғо. Ҡасандыр мин дә һуңғы яу түгел инем. Эйе. Мине аҡһаҡал тип тә, бей тип тә йөрөтәләр ине. Элек мин дә шәп йәшәнем. Минең тирмәм бейек Сейәлетүбә эргәһендә ине.

* * *

Тыңлағыҙ барығыҙ ҙа!

Һеҙгә балаларым хаҡында һөйләйем. Улар икәү ине. Икеһе лә ул ине. Тәүгеһе тыуғас, мин уға Ҡармасан тип исем ҡуштым. Икенсеһен атайымдың ағасы иҫтәлегенә Сәрмәсән тип атаным.

Хәҙер юҡ инде улар.

Улар яҡты донъянан китте. Ә исемдәре йөрәгемә ут менән яҙылып ҡалды!

Үлем — бер ҡапҡа ул, һәр кем унан инергә тейеш! Илаһи! Уларҙың ҡәберен рәхмәтең илә тултыр!

Мин әйтәйем, Өлкән тигән бер әсә балалары булһалар ҙа, улар һис тә бер-береһенә оҡшамағандар ине. Олоһо энеһенән бер ҡарышҡа бейек ине, күҙҙәре уның ямғырға сыланған сөм ҡара ҡарағат төҫлө ине. Ул яралы бөркөт кеүек ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ батыр булды.

Аҙаҡ күрҙем: Тимер барластары уның менгән атын йыҡты. Ҡотлобәк мырҙаның боғалы муйынына төшкән ерҙән ул ырғып тороп, Ҡотлобәкте матҡып тотоп алды ла ҡаянан һыуға һикерҙе.

Уның киҫтәне атабәктәрҙең тимер торҡа кейгән баштарын бешкән сәтләүектәй итеп онтаны. Үҙ ғүмерендә уның алты ғына уғы яҙа китте. Ул егет ине.

Инде — Сәрмәсән!

Эй, ағайҙарым! Йылға буйында үҫкән йәш күрәнде күргәнегеҙ бармы? Ул шундай төҙ, зифа. Эйе. Ел иҫкәндә лә ул талғын ғына сайҡалып китә. Ул һәр ваҡыт һылыу.

Шулай. Бына шуның кеүек ине минең Сәрмәсәнем. Ул ҡурайға оҫта ине, йырлап йөрәгемде ойота ине. Ул йырсы ла, ҡурҡыу белмәҫ яу ҙа булды. Был да яҡшы. Уны яраттым. Икеһен дә ярата инем мин уларҙың. Улар минең балаларым, данлы батырҙарым булды, исемдәре лә мәңгегә ҡалды. Йә хоҙай! Уларға рәхмәтең киң ҡыл!

Тыңлағыҙ!

Аҡһаҡал Ҡара Абыздың йәйге йылы айҙан да һылыу бер ҡыҙы бар ине. Ҡоҙғон ҡанатынан да ҡара ине уның сәстәре. Ә йөҙө һарыҡ һөтөнән яһалған йәш ҡороттан да аҡ ине. Күтәрелеп бер ҡараһа, күҙҙәренән нур сәсә ине.

Хур ҡыҙы!

Исеме уның Айбикә ине. Ул ҡашына һөрмә тартмай, тырнағына ҡына яҡмай ине. Йәш тә, матур ҙа ине.

Уны күргәс, улым Ҡармасанға:

— Улым, — тинем, — энең әле йәш. Һин Аҡһыу арьяғында аҡһаҡал Ҡара Абыз торғанын беләһең. Уның Айбикә тигән ҡыҙы бар. Үҙенә донъяла иш ҡалдырыу өсөн, ҡатындан тыуған йән ҡатын эҙләр! — тинем.

Ҡармасанға мин шулай тинем. Ул мине аңланы. «Белмәйем» тип торманы. «Кәрәкмәй» тип тә әйтмәне. Ул бит минең улым ине.

Шунан...

Мин Ҡара Абызға өс көтөү һарыҡ, ярты өйөр бейә ебәрҙем. Ҡармасанға кәләш алып бирҙем.

Ҙур итеп туй яһаным. Ҡунаҡтар бал эсте, ҡымыҙ эсте, төрлө йыр йырлашты. Шунан сапҡынсы килеп төштө.

Йә хоҙай, сабырлыҡ бир!

Ҡорсаңғы аттың еүеш ҡойроғо кеүек, уйҙарым сейәлә. Әммә миңә түҙергә, бөткәнсе һөйләргә кәрәк.

Шулай итеп беҙ бал, ҡымыҙ эсеп, туй итеп ултырабыҙ. Бик һәйбәт. Кис булды. Йыр тынған арала ҡайҙалыр сыңлатып бейә һауғандары, сиңерткә сырылдағаны ишетелә. Торҙом да тышҡа сыҡтым. Тып-тыныс. Күккә ҡараным — салт аяҙ. Бейектә, түңкәреп ҡуйған ижау һымаҡ ҡына булып, Етегән йондоҙ йымылдай. Сәрсәк оҫталары ҡылыс һабына ҡуйған аҡыҡ таштар һымаҡ, йондоҙҙар яна. Эйе, тирә-яҡ тын, ә мин ниҙер көтәм, ниҙәндер шомланам.

Көткәнем килде. Тәүге сапҡынсы. Хәтеремдә: менгән айғыры арыған, бауырынан әсе күбек аға.

Бына ни тине был сапҡынсы:

— Түрә! — тине. — Ябыҡ Ҡарағай һырты эргәһендәге Бараҡ аймағынан мин. Хәбәр алып килдем. Абау! Тимер хан, күҙе сыҡҡыры, төшлөк яҡтан бында килә. Сарбаздары, барластары бик күп. Эйе. Йәйге эҫелә себен ни тиклем булһа, былар ҙа шул тиклем. Эргәһендә уның мырҙалары, атабәктәре. Улар тауҙар аша артылып килә. Йәшел байраҡтар Яйыҡтың был яғында күренә башлаған.

Бына ниндәй хәбәр ишеттем мин унан. Был меҫкен сапҡынсыға мин асыуланманым, уға утлы күҙҙәрем менән ҡараманым. Насар хәбәр өсөн телен ҡырҡып алып муйынына тағырға бойороҡ бирмәнем.

Юҡ! Мин уны тирмәмә алып индем, ашаттым. Ҡунаҡ иттем. Яҡшы эшләнем.

Дөрөҫ! Сапҡынсы бушты һөйләмәгән. Ысынлап та шулай булды. Улар килде.

Был хәл урмандағы ояһыҙ кәкүктең һаҡауланған сағында булды.

**Һартай** — башҡорттарҙың һарт ырыуы
**Яу** — яугир, һуғышсы
**Барлас** — Аҡһаҡ Тимерҙең һуғышсылары
**Аҡһаҡ Тимер (Тамерлан)** — Урта Азияның дәүләт эшмәкәре, хәрби етәксе, әмир. 1336—1405 йылдарҙа йәшәгән
**Киҫтән** — һуғыш ҡоралы, суҡмарҙың бер төрө
**Торҡа** — хәрби баш кейеме, шлем
**Сәрсәк** — Үзбәкстандағы Черчек ҡалаһы

?

1. Әҫәр бынан 5—6 быуат самаһы элек яҙылған. Уның телен бөгөнгө йәнле һөйләү теле менән сағыштырып ҡарағыҙ. Айырма ҙурмы?
2. Әҫәрҙә Ҡармасан менән Сәрмәсәнгә бирелгән характеристика аша аталарының (Ялыҡ Бурнаҡ улының) уларға ҡарата мөнәсәбәтен белеп буламы?
3. Башҡорттарҙың яуҙа ҡулланған кәрәк-яраҡтарының һәм ҡоралдарының исемдәренә иғтибар итегеҙ. Был хаҡта ни әйтә алаһығыҙ?

Сафуан Яҡшығолов

## ДИМ БУЙЫНДА ЯҘҒЫ ТАҢ

Иртә таң ваҡытында барһаң туғайға яҙ көнө,
Шунда күрерһең ҡөҙрәт һәм тәбиғәт күркен(е).

Иҫмәй ел, шауламай ағастар, шундай тып-тын һауа,
Сәскә, япраҡ өҫтәренә ялтырап ысыҡ яуа.

Ер шарының бер ҡырынан нурланып ҡояш тыуа,
Яҡтыһына ҡыр һәм сәхрә, тау-таш нурға тула.

Был ваҡытта барса ҡош-ҡорт ер йөҙөндә ҡуҙғала,
Һыуҙа — баҡа, тал төбөндә тартай ауазын һала.

Ҡараһаң ян-яҡҡа, хәтфә кеүек йәшел ялан,
Атҡан ап-аҡ сәскәләр муйыл ағасы һәм балан.

Төрлө ҡоштар, яңғыратып туғайҙы һайрай моңайып,
Һайрай-һайрай, быуа буҙ турғай була күҙҙән гәйеп.

Һары, ҡыҙыл һәм сыбар төҫлө күбәләктәр осоп,
Төрлө сәскәгә ҡунып шатланалар үбеп, осоп.

Гөжләшеп бал ҡорттары пыр-пыр оса башлай тамам,
Күтәреп ҡырмыҫҡа ташый ояһына сүп, һалам.

Барса йәнлек, шатланышып, алланың рәхмәтенә,
Йән-тән менән керешәләр һәр бере хеҙмәтенә.

? **Шағир файҙаланған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү сараларын ҡулланып, үҙегеҙҙең яҡтың яҙғы таңын тасуирлап бирегеҙ.**

Ямалетдин Юмаев

## ШӘКЕРТ

Иртә менән таң атып килгән ваҡыт,
Мәҙрәсәгә барам тип, торған шәкерт[1].

---

[1] *Шәкерт* — уҡыусы.

Һабын менән бит-күҙҙәрен йыуғандан һуң,
Көҙгөгә ҡарап торған бер аҙ ваҡыт.

Берәм-берәм ҡулға алды китаптарын,
Өҫтәлгә теҙеп ҡуйҙы йыйнап барын.
Уйға ҡалды ҡулын ҡуйып яңағына,
Беләһеңме эсендә ни иҫәп барын?

Әйткәне шул: «Мәҙрәсәгә барамын мин,
Хәлфәләрҙән[1] серҙәрен аламын мин.
Башҡаларға ҡайҙа һуң бындай бәхет,
Был йыһанда иң бәхетле бала мин.

Эҙләйем ғилем, йөрөһәм дә ерҙә генә,
Уйым минең милләт диндә генә.
Милләт менән сәғәҙәтле[2] булһам да мин,
Милләттең дә сәғәҙәте миндә генә!»

?
1. Ни өсөн шәкерт үҙен иң бәхетле бала, тип һанай?
2. «Милләттең дә сәғәҙәте миндә генә!» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?

Был бүлеккә башҡорт әҙәбиәтенең элеккерәк дәүерҙәрҙәге өлгөләре индерелде. Салауат Юлаевтың кем икәнлеген, ҡасан йәшәгәнлеген яҡшы беләһегеҙ — ул 1773—1775 йылдарҙағы азатлыҡ яуында ҡатнашҡан башҡорттарҙың юлбашсыһы, сәсән-шағир, милли геройыбыҙ. Ғәбдрәхим Усман (ҡушаматы — Утыҙ Имәни) — уның замандашы. 1752 йылда тыуған, үҙебеҙҙең яҡтарҙа уҡығандан һуң, Хорезм, Бохара, Сәмәрҡәнд, Ҡабул ҡалаларында белем ала, аҙаҡ Башҡортостанға ҡайтып, балалар уҡыта. Арҙаҡлы ғалим һәм шағир.

«Һуңғы һартай» әҫәре башҡорт ерендә XIV—XV быуаттарҙа булып үткән хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләй. Ҡомартҡы үҙе лә шул ваҡыттарҙа ижад ителгән булырға тейеш. Дәреслектә уның тәүге өлөшө генә бирелә. Арта-

[1] *Хәлфә* — мәҙрәсә уҡытыусыһы.
[2] *Сәғәҙәт* — бәхет.

бан иһә башҡорттарҙың Аҡһаҡ Тимер ғәскәренә ҡаршы тороуы, батырлыҡтары һүрәтләнә.

Сафуан Яҡшығолов менән Ямалетдин Юмаевтың шиғырҙары XX быуат башында яҙылған. Юғарыраҡ синыфтарҙа һеҙ уларҙың исемдәре менән ҡабат осрашырһығыҙ, элекке әҙәбиәтебеҙҙән тағы күп кенә яҙыусыларҙы белерһегеҙ.

* * *

Башҡорт әҙәбиәтенең боронғо замандарҙан алып бөгөнгө көнгә тиклемге үҫеш этаптары, үткәндәге һәм хәҙерге уңыштары, күренекле әҙиптәре ижады менән ҡыҙыҡһыныу йылдан-йыл арта бара, башҡорт әҙәбиәте мәктәптәрҙә, педагогия училищеларында, институттарҙа, университетта уҡытыла, ғалимдар уның буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре менән шөғөлләнә.

*Ғ. Хөсәйенов*

# Бишенсе бүлек

*Яҙ, ғәзиз улым; ҡара таҡтаға һыҙ ағбур менән!*
*Үҙеңдең күңелеңдә ялт иттер һыҙып аҡ нур менән!*



**Ғабдулла ТУҠАЙ**

**1886—1913**

## ИҪЕМДӘ ҠАЛҒАНДАР[1]

### I

Минең атайым Мөхәммәтғариф, Ҡушлауыс ауылында Мөхәммәтғәлим исемле мулланың улы булып, 14—15 йәштәрендә Ҡышҡар мәҙрәсәһенә китеп, унда хәтме көтөп ҡылырға[2] ғәҙәттә нисә йыл кәрәк булған булһа, шул тиклем тороп, олатаһы тере ваҡытта уҡ ауылыбыҙ Ҡушлауысҡа ҡайтып, мулла булған.

Мулла булғас та өйләнеп, ҡатыны менән бер нисә йылдар торғас, ҡатыны үлеп, бер ир һәм бер ҡыҙ балаһы ҡала.

Бынан һуң атайым, икенсе тапҡыр өйләнеүе булараҡ, Өсөйлө ауылы Зиннәтулла хәҙрәттең Мәмдүҙә исемле ҡыҙын (минең әсәйемде) алған.

Әсәйем менән йыл ярым самаһы торғас, беренсе бала булып, мин донъяға килгәнмен.

Минең тыуыуыма биш ай самаһы үткәс, атайым аҙ ғына ваҡыт ауырып, үлеп киткән.

Тол ҡалған әсәйем янында мин бер ни тиклем ваҡыт торғас, әсәйем мине ауылыбыҙҙағы Шәрифә исемле бер ярлы ҡарсыҡҡа ваҡытлыса аҫрарға биреп ҡалдырып, үҙе Сасна ауылының муллаһына кейәүгә сыҡҡан.

---

[1] Ҡыҫҡартып алынды.

[2] *Хәтме көтөп ҡылырға* — уҡып бөтөрөргә.

Был ваҡытта атайымдың ата-әсәһе (олатай һәм өләсәй) күптән үлеп, ауылда башҡа туғандарым булмағанлыҡтан, мин был ҡарсыҡ өйөндә ҡәҙерһеҙ, артыҡ бер бала булғанлыҡтан, ул мине, әлбиттә, тәрбиәләмәгән, тәрбиәләү түгел, йәш балаларға кәрәк булған асыҡ йөҙҙө лә күрһәтмәгән.

Мин үҙем ул ҡарсыҡ ҡулында үткән замандың нисек булғанын белмәйем. Ул ваҡытта мин ике-ике ярым йәштә генә булғанмын тип уйлайым.

Хәҙер ауылда минең бала ваҡытымды күргән ҡарсыҡ һәм ҡатындар тәрбиәләүсе ҡарсығымдың миңә бик насар ҡарашта булғанлығын үҙемә һөйләйҙәр.

Шуларҙың береһе.

Мин ҡыш көндәрендә төндә ялан аяҡ, күлдәксән көйө тышҡа сығам икән дә, бер аҙҙан инмәксе булып, ишеккә киләм икән. Ҡыш көнө ауыл өйҙәренең ишектәрен асыу балаға түгел, шаҡтай үҫмер кешеләргә лә мәшәҡәт һәм көс булғанлыҡтан, тәбиғи, мин ишекте аса алмайым һәм ишек төбөндә аяҡтарым боҙға йәбешеп ҡатҡансы көтөп торам икән. Ҡарсыҡ иһә үҙенең: «Ҡаҙалмаҫ әле, килмешәк!» — тигән «шәфҡәтле» һүҙҙәре менән мине үҙе теләгән ваҡытта ороша-ороша индерә икән.

Ул ҡарсыҡ үлгән инде.

Мин был ҡарсыҡта торған ваҡытта, әсәйем дә теге муллаға үҙләшеп еткән булырға кәрәк. Ул бер ваҡыт мине үҙ янына Саснаға алырға аттар ебәрткән.

Мине был аттар, әлбиттә, Саснаға алып киткәндәр.

Хәйер, алып киткәндәр генә түгел, ул атҡа ултырып киткән ваҡытта, мин дә, бала булһам да, бер аҙ аңлай башлағанмынмылыр, нисектер, мин хәҙер ҙә атта ултырып Саснаға барғанымды, үҙемде бер киң рәхәтлектә хис иткәнемде, юлда барғанда, күҙ алдымда әллә ниндәй нурҙар уйнағанын онотмаған шикелле булам.

Саснаға барып еткәнмен. Нисек, ни рәүештә барҙым, мине кемдәр ҡаршыланы — уныһын белмәйем, ләкин үгәй атайымдың мине һөйөүе, миңә сәй янында кәрәҙле балды аҡ күмәскә яғып биреүе, минең шунда ҡыуанғандарым, биш минутлыҡ төш кеүек кенә, әле лә булһа хәтеремдә.

Ләкин был рәхәтлек оҙаҡҡа бармаған. Минең әсәйем был муллала бер йыл самаһымы, күпмелер торғас, белмәйем, ниндәй ауырыуҙандыр, үлеп киткән...

Әсәй ҙә үлгәс, мин бөтөнләй етем булып еткәнгә, мин был Сасна муллаһы өйөнә лә һыймағанға, ул мулла мине Өсөйлө ауылындағы әсәйемдең атаһы булған олатайға ҡайтарып биргән.

Минең әсәйемдең әсәһе булған үҙ өләсәйем әсәйем ҡыҙ саҡта уҡ үлгән булғанға, олатай ҡайһы мулланандыр тол ҡалған бер ҡатынды уға эйәреп килгән алты балаһы менән алған булған.

Өсөйлө (исеменән дә мәғлүм) бик бәләкәй һәм ярлы бер ауыл булғанға, шуның өҫтөнә, мин етем ҡалған йылдарҙа ул яҡтарҙа ҡаты аслыҡ булғанға, олатайымдың көнкүреше бик насар булған.

Бына шул ярлы һәм шуның өҫтөнә әллә нисә ауыҙлы булған ғаилә эсенә мин етем бала булып килеп ингәнмен.

Үгәй әбейҙең алты күгәрсене араһында мин бер сәүкә булғанға, мин илаһам — йыуатыусы, иркәләнәйем тиһәм — һөйөүсе, ашағым , эскем килһә — ҡыҙғаныусы берәү ҙә булмаған, мине эткәндәр ҙә төрткәндәр.

Был ғаилә эсендә ярлылыҡ шул тиклем дәрәжәгә еткән булырға кәрәк ки, мин хәҙер ҙә булһа олатайымдың күрше байыраҡ ауылдарҙан икмәк һыныҡтары теләнеп ҡайтҡанын иҫемдә тотам.

Шул рәүешле көндәр үткән, мин, бында торғанда, сәсәк менән дә ауырығанмын, башҡа әллә ниндәй ауырыуҙар ҙа күргәнмен, тамам зәғифләнгәнмен.

Был ғаиләлә бөтәһе лә (бер етеп килә торған Сажиҙә исемле ҡыҙҙан башҡаһы) минең ауырыуыма: «Исмаһам, сәнселһә, бер тамаҡ кәмер ине», — тип кенә ҡарағандар.

Мин Сажиҙә апайҙың, үгәй әбейҙән йәшереп кенә, мине йыуатҡанын һәм һөйгәнен, әбей килә башлағас та, минең менән эше юҡ кеше шикелле, үҙенә икенсе ҡиәфәт биргәнен һаман хәтеремдә һаҡлайым.

Бына шул ваҡыттан бирле ул апай минең күңелемдә, фәрештә кеүек булып, ултырған да ҡалған. Күңелем уны уйлай башлаһа, хәҙер күҙемә ап-аҡ саф бер фәрештә күренә.

Ни күрһәм дә күргәнмен, ни булһа ла булған, нисек кенә булмаһын, мин был ғаиләгә һыймағанмын. Бер көндө олатай, үгәй әбейҙең кәңәше менән булһа кәрәк, ауылыбыҙҙан Ҡазанға бара торған бер ямщикка мине ултыртып, Ҡазанға оҙатҡан.

Ямщик, Ҡазанға килеп еткәс (беҙҙең ауыл Ҡазандан алтмыш ҡына саҡрым), Бесән баҙарында: «Аҫрарға бала бирәм, кем ала?» — тип ҡысҡырып йөрөгәндә, халыҡ араһынан бер кеше сығып, мине ямщиктан алған. Ул мине, аҫрау бала итеп, өйөнә алып ҡайтҡан.

Мин бында торғанымды ярты йомоҡ күҙ менән күргән шикелле генә беләм. Мәҫәлән, бер мәл әллә ниндәй ауырыуҙан күҙем ауырыған ваҡытта, мине бер ҡарсыҡҡа алып барғандарын, ул минең күҙгә шәкәр һалғанын, үҙемдең һалдырмаҫҡа аҙапланғанымды, тартышҡанымды хәтерләйем.

Был яңы атай-әсәйемдең дә хәлен бер аҙ яҙып китәйем әле.

Миңә атай булғаны Мөхәммәтвәли исемле булып, әсәй булғаны Ғәзизә исемле ине. Тороуҙары Яңы биҫтәлә ине. Атай толчокта[1] һатыу итә инеме, әллә тиресе инеме шунда — унынын яҡшы белмәйем. Әсәй, бер ҙә арымай-талмай, баҙарға кәләпүш[2] эшләп сығара ине.

Әсәй, Бесән баҙарына кәләпүш сығарғанда йәки бер хеҙмәт менән байҙарҙың өйөнә барғанда, ҡайһы ваҡыт мине лә эйәртеп барғылай ине.

Мин байҙар йорто эсенең матурлығын, иҙәндән түшәмгә тиклем торған ҙур көҙгөләрен, сиркәү кеүек һуға торған сәғәттәрен һәм һандыҡ тиклем ҙур органдарын[3] күреп, быларҙы ожмахта тораларҙыр тип уйлай инем.

Бер ваҡыт шулай байҙарға барғанда, ишек алдында әллә ниндәй биҙәкле һәм алтынлы ҡойроғон ҡояшҡа ҡаршы ялтыратып йөрөгән тауисты[4] күреп, бигерәк тә һоҡландым.

Был атай-әсәйем икеһе лә эш кешеләре булғанлыҡтан, бында миңә ас торорға тура килмәй ине.

Ҡайһы саҡта әсәй менән Ташаяҡ[5] баҙарына барып, ундағы уйынсыҡ баҙарына ҡыҙығып һәм самокаттарға, шатланып-шатланып аттарға атланған малайҙарға ҡарап, көнләшә инем. Мин дә атланыр инем — аҡсам юҡ. Әсәйҙән һорарға ҡурҡам, ул үҙе белеп бирмәй ине.

---

[1] *Толчок* — иҫке-моҫҡо әйберҙәр һата торған баҙар.

[2] *Кәләпүш* — түбәтәй.

[3] *Орган* — музыка ҡоралы.

[4] *Тауис* — мамыҡ-йөндәре йәшелле-зәңгәрле төҫтә йылҡылдап торған ҙур ҡойроҡло матур ҡош.

[5] *Ташаяҡ* — Ҡазандағы баҙар исеме.

Шулай итеп, мин кеше рәхәтенә генә ҡыҙығып ҡайта инем.

Унан һуң йәй көнө ике биҫтә араһындағы йәшел үлән өҫтөндә малайҙар менән ҡаҙ йөндәре ҡыуып йөрөгәнемдә, арыған, хан мәсетенә йүнәлеп, сиҙәмдә ятып ял иткәнемдә бер ҙә онотмайым.

Мин был атай-әсәйемдә ике йылмы, күпмелер торғас, атай ҙа, әсәй ҙә — икеһе бер юлы ауырый башлағандар. Улар, үҙҙәренең үләсәктәренән ҡурҡып: «Беҙ үлһәк, был бала кем ҡулына ҡала, исмаһам, ауылына ҡайтарайыҡ», — тип, теге мине Ҡазанға килтергән ямщикты табып, мине тағы ла уға ултыртып, Өсөйлө ауылына ебәргәндәр.

Инде минән мәңгелеккә ҡотолдоҡ тип уйлаған был ғаиләнең мине нисек ҡаршы алғандарын уйлап белергә мөмкин.

Мин ҡайтып, бер аҙ торғас та, өләсәй менән олатай, инде мине ҡалаға ебәреүҙән өмөт өҙөп, ҡайҙа булһа ла бер сит ауылға аҫрарға бирергә уйлағандар. Улар Өсөйлөгә килгән һәр бер сит ауыл кешеһенә үҙҙәрендә аҫрарға бирергә бер етем бала барлығын һөйләгәндәр. Шулай мәшәҡәтләнә торғас, беҙҙән ете генә саҡрым Ҡырлай исемле ауылдан ир балаһыҙ Сәғди исемле бер кеше килеп, мине үҙенә алып киткән.

## II

Олатайҙар өйөнән сығып, Сәғди ағайҙың арбаһына ултырҙым. Олатай менән өләсәй (Сәғди ағайҙан яҡшыһынмай ғына булырға кәрәк) мине оҙатырға сыҡтылар. Тағы ла минең китеүемде ҡыҙыҡ күргән ялан аяҡлы малайҙар ҙа арба тирәһендә йүгергеләп йөрөйҙәр ине.

Арба ҡуҙғалды. Сәғди ағай менән бер ҡатарҙан ултырып киттек. Ул юлда миңә: «Бына хәҙер Ҡырлайға ҡайтып етәбеҙ, унда әсәйең ҡаршы сығып көтөп тора торғандыр. Аллаһы бойорһа, беҙҙә ҡатыҡ, һөт, икмәк күп — теләгәнсә ашарһың», — тип, барып етергә ике-өс саҡрым ҡалғас, төрлө бәхеттәр менән мине йыуатып бара ине. Мин дә, асыҡ йөҙҙәрҙе бик күптән күрмәгәнгә күрә, эсемдән бик шатлана инем.

Был ваҡыт йәйҙең матур саҡтары булғанға, тирә-яҡтағы йәшел сиҙәмдәр һәм урмандар, икенсе яҡтан, артыҡ эҫе булмайынса, үҙенең нурҙары менән һөйөп кенә торған ҡояш тағы рәхәтләндерә ине.

Бара торғас, Ҡырлайға барып индек. Сәғди ағайҙың йорто, баҫыу ҡапҡаһынан ингәс, күп алыҫ түгел икән, аҙ ғына барғас, ҡоймаһы ситәндән булған тәпәш кенә һалам түбәле бер өйгә туҡтаныҡ.

Юлда Сәғди ағай әйткәнсә, минең әсәй ҡаршы сыҡҡан икән, ул ҡапҡаны асты: мине асыҡ йөҙ менән ҡаршы алып, арбанан күтәреп төшөрөп, өйгә лә алып инде.

Тыштағы эштәрен ҡараштырғылағас, атын туғарғас, атай ҙа өйгә инде. Ингәс тә, әсәйгә ҡарап: «Ҡатын, бар, балаға ҡатыҡ менән икмәк килтереп бир!» — тип әмер итте. Әсәй ҙә шунда уҡ баҙҙан ҡатыҡ алып менеп, миңә ҙур ғына икмәк телеменең яртыһын тотторҙо. Мин иһә, Ҡазандан ҡайтҡандан бирле йүнләп аш йөҙөн күрмәгәнгә күрә, икмәк менән ҡатыҡты ялт иттерҙем. Тамаҡ туйғас, әсәйемдең рөхсәте менән урамға сыҡтым...

Өйгә ҡайтып инһәм, ике еткән ҡыҙ күрҙем. Быларҙың береһе таҙа ғына кәүҙәле, ҡыҙыл йөҙлө, ҡултығында ағас таяҡтары булған аҡһаҡ бер ҡыҙ ине.

Әсәйем миңә: «Бына былар — апайҙарың: береһе Сажиҙә апайың, береһе Сабира апайың, күреш!» — тигәс, мин, әкрен генә барып, ҡулымды һуҙҙым. Былар Сәғди ағайҙың ҡыҙҙары булып, аҡһағы Сажиҙә исемле икән. Шулай итеп, мин бында яҡшы ғына тора башланым. Ауыл малайҙары менән таныштым.

Сәғди ағайҙың юлда әйткәненсә, ысындан да, бында ҡатыҡ, һөт күп, шулай уҡ картуфҡа ла мохтажлыҡ юҡ ине.

Мин барып бер айлы, күпмелер торғас, ураҡ ваҡыты етте. Атай, әсәй һәм ике апай ураҡҡа китә башланылар. Мин иһә ураҡҡа бармай инем, иптәш малайҙар менән ауыл буйында йөрөй һәм болонлоҡтарҙа көн буйы аунай инем. Әгәр көндөҙ ҡайһы ваҡыт уйын араһында асыҡһам, тиҙ генә өйгә ҡайтып, тәҙрәнән генә өйгә инеп, әсәйемдең минең өлөшкә ҡалдырған бер ямаяҡ картуфы менән бер телем икмәген ашай инем. Улар көндөҙгө аштан һуң ишекте бикләһәләр ҙә, минең ашарға ҡайтырымды белеп, тәҙрәне эстән бикләмәй китәләр ине...

## III

Шулай итеп, урак бөттө, көҙ етте. Ашлыктар эшен бөтөргәс, баксаға сығып, картуф казырға ваҡыт етте. Был картуф казыу ваҡытында миңә, урак ваҡытындағы кеүек, уйнап йөрөргә тура килмәне. Миңә казып сығарылған картуфтарҙы тоҡка тултырырға куштылар. Мин дә эшемде яҡшы ғына үтәнем.

Был ваҡыт көҙ көнөнөң һалкын ваҡыттары булһа ла, мин ялан аяк инем. Аяктарым туңғанға, мин уларҙы балсыкка күмеп ултыра инем. Бер ваҡыт шулай аякты балсыкка күмеп картуф сүпләгән сағымда, теге картуф казыусы акһак Сажиҙә апай яңылыш минең аякка тимер көрәк менән сапты. Аяк шактай тәрән йәрәхәтләнде, мин дә урынымдан һикереп тороп, бер аҙ ситкә барып ултырып иланым да, һуңынан йәрәхәткә балсык һибеп, тағы ла эшемде дауам иттем. Ләкин был юлы аяктарым ни тиклем туңһалар ҙа, балсыкка күмергә ҡурҡтым.

«Быны ни өсөн яҙҙың?» — тиерҙәр.

Ни өсөн яҙҙым? Шул ваҡытта аяғым бик ауыртканға һәм хәҙер ҙә аяғымда шул йәрәхәттең эҙе булғанға, тоттом да яҙҙым.

Бара торғас, бакса эштәре лә бөттө.

Бер көндө кис менән атай менән әсәй иртәгә иртүк мине абыстайға уҡырға бирмәкселәрен миңә белдерҙеләр.

Таң атты, кояш сыкмаҫ борон уҡ, сәй эстек. Сәйҙе йыйыштырғас, әсәй мине ҡулымдан етәкләне лә үҙебеҙҙән биш-алты аҙым булған Фәтхерахман хәҙрәт өйөнә алып барҙы. Унда барып индек, мине уҡытасак абыстай ҡулына сыбык тотоп ултырған: уның тирә-яғында минең йәшемдәге кескәй кыҙҙар ҙа бар ине. Улар араһында, бойҙай араһындағы бер нисә борсак кеүек, бер нисә минең шикелле ир бала бар ине. Әсәй иң элек ике бөтөн икмәк менән бер тинме, ике тинме аҡсаһын абыстайға тотторғас, улар ҙа, бөтә шәкерттәр ҙә бик оҙаҡ доға кылдык.

Шул рәүешсә, «әлеп, би, ти, си»ҙе бер нисә көн такмаклағас, миңә «Иман шарты[1]» ла тотторҙолар. Был

---

[1] *«Иман шарты»* — дини китап.

«Иман шарты»ның ижеге менән сүрәһе[1] миңә ҡыш буйына етте, буғай. Мин был ҡышта һаман шул ҡыҫҡа ғына «Иман шарты» тирәһендә әйләнеүҙән уҙа алманым.

## IV

Был Ҡырлайҙағы беренсе ҡышым үтте. Яҙ етеп, ҡарҙар ирей башланы. Оҙаҡламай ҡырҙар, игенлектәр, тамам ҡарҙан яланғас ҡалып, ҡарая башланылар...

Көҙ етте. Ғәҙәттәге картуф хеҙмәтемдә үтәгәс, мине был юлы (ҡыҙҙар менән бергә абыстайға түгел) мәҙрәсәгә бирҙеләр.

Мин мәҙрәсәлә «Һәфтиәк»[2] ижеген һәм сүрәһен бик тиҙ белгәс, «Бәдуам»[2], «Киҫекбаш»[2] тарға индем; үҙемдең һабағымды бик тиҙ белеп, күп ваҡыт тик торорға тура килгәнгә, миңә өйрәтергә минән наҙаныраҡ балаларҙы ла бирә башланылар.

Шул балалар араһында ауылыбыҙҙың бер бай балаһы ла булып, ул мине, хәлфәһе кеүек, сәйгә һәм эсенә борай ярмаһы тултырған бәлеш ашарға саҡырғылай ине.

Бер яҡтан, мин һабағымды яҡшы белһәм, икенсе яҡтан, аҙ булһа ла, өй эштәренә лә ярай башланым. Мәҫәлән, иртә менән менеп мөрйә асыу, унан һуң мөрйә ябыу, мейескә яғыр өсөн һалам көлтәләре бәйләү, һыйырҙы көтөүгә сығарыу, кис ҡаршы алыу кеүек эштәрҙең бөтәһе лә минең ҡулымдан килә ине. Ҡайһы ваҡытта атайым менән Әтнә баҙарына бара инек. Ул үҙ эштәре менән баҙар араһында йөрөгәндә, мин атты тотоп тора инем...

Бер ваҡыт, көҙ көнө, өйләнән һуң, атайым менән әсәйем ырҙында ине, мин тәҙрә төбөндә «Рисаләи Ғәзизә»[3] уҡып ултыра инем: беҙҙең ҡапҡаға бер арбалы кеше килеп туҡтаны.

Был кеше, атын ҡуйып, өйгә инде лә миңә: «Атайың, әсәйең ҡайҙа?» — тине.

---

[1] *Сүрә* — ҡөрьәндең айырым бүлеге.

[2] *«Һәфтиәк», «Бәдуам», «Киҫекбаш»* — Урта быуаттарҙа Урал-Волга буйында таралған китаптар.

[3] *«Рисаләи Ғәзизә»* — XVIII быуаттың икенсе яртыһында — XIX быуат баштарында йәшәгән күренекле башҡорт яҙыусыһы һәм ғалимы Тажетдин Ялсығоловтың китабы.

Мин: «Ырҙында», — тинем. Был кеше: «Бар, саҡырып ҡайт», — тигәс, мин тиҙ генә ырҙынға йүгереп барып: «Өйгә әллә ниндәй бер кеше килгән, һеҙҙе саҡыра», — тигәс, улар хәҙер ҡайтырға булдылар.

Бер аҙҙан ишектән атайым менән әсәйем килеп инделәр, юлсы менән күрештеләр.

Сәй ҡуйылды. Был юлы, ҡунаҡ булһа ла, сәй янына, ниңәлер, мине лә ултырттылар һәм, ғәҙәткә ҡаршы булараҡ, минең алдыма бер шаҡмаҡ шәкәр ҙә ҡуйҙылар.

Атайымдың: «Ни хеҙмәт менән килдегеҙ?» — тигән һорауына ҡаршы юлсы: «Бына был баланы алырға килдем», — тине.

Был һүҙҙән атайым, бик ғәжәпкә ҡалып: «Нисек ул? Ниңә һин алырға килдең?» — тип һорауҙар бирә башлағас, юлсы был рәүешсә һүҙ башланы:

— Мин — Ҡушлауыс кешеһе. Был бала ауылыбыҙҙың имамының[1] балаһы. Беҙ, уны нисә йылдарҙан бирле юғалтып, ҡайҙа икәнлеген белмәнек, бына хәҙер таптыҡ. Ул һеҙҙә икән. Яйыҡ[2] ҡалаһында уның атаһы менән бер туған апаһын алған еҙнәһе бар. Бына шул еҙнәһе, ҡәйнешенең былай ҡара кешеләр ҡулында йөрөүен ишетеп, уны Яйыҡҡа үҙ янына саҡырмаҡсы була. Бына мин быйыл Яйыҡтан, уның ҡушыуы буйынса, был баланы эҙләргә сыҡтым, бына хәҙер алып китәм,— тине.

Юлсының был һүҙенә атайымдың да, әсәйемдең дә бик кәйефтәре китте.

— Ярар, бына, беҙ уны иген ҡиммәт ваҡытта 3—4 йыл ашатып тотайыҡ, хәҙер эшкә ярар ваҡыты еткәс, һиңә биреп ебәрәйек, имеш. Юҡ, булмаç. Әгәр ул туғаны булһа, ниңә уны элек күрмәгән, — кеүек һүҙҙәр менән ныҡ тартыштылар.

Ара-тирә әсәйем дә: «Юҡ, беҙҙә кешегә бирә торған бала юҡ!» — тип ҡуйғылай ине.

Юлсы Бәҙретдин ағай:

— Юҡ, һеҙ не имеешь право кеше балаһын тотоп торорға, мин хәҙер урядникка әйтәм, әле беҙ уны таба алмай йөрөһәк, ул һеҙҙә икән. Мин һеҙҙе подсуд ебәрер-

---

[1] *Имам* — был урында дин башлығы мәғәнәһендә.
[2] *Яйыҡ* — Уральск ҡалаһы.

мен, — тип, ауыл халҡын ҡурҡытырлыҡ итеп һөйләгәс, бисара атайым да, әсәйем дә йомшарҙылар.

Бер аҙҙан риза булмай торған әсәйем: «Йә, атаһы, бирәйек инде, ахыры, кеше балаһы беҙгә булмаҫ, алла һаҡлаһын, әллә ниҙәр күрербеҙ», — тип үкереп илап та ебәрҙе.

Оҙаҡламай, ел баҫылғандан һуң бер аҙ тулҡынланып торған диңгеҙ кеүек, аҡтыҡ һәм йомшаҡ тартышыу менән генә тартышҡас, атайым да риза булды.

Иҫке-моҫҡо бишмәттәремде, тишек кейеҙ ҡаталарымды кейҙереп, күп тә үтмәй, мине арбаға сығарып ултырттылар.

Атайым да, әсәйем дә, һәр икеһе илаған хәлдә, мине баҫыу ҡапҡаһына тиклем оҙата барҙылар.

Ахырҙа әсәй: «Онотма беҙҙе, онотма! Беҙҙе онотһаң, тамуҡ киҫәүе булырһың», — тип һуңғы һүҙен ҡысҡырҙы ла, беҙ ауылдан сығып киттек.

* * *

1895 йылда тыуыҙ йәшлек Ғабдулланы Уральск ҡалаһындағы апаһы менән еҙнәһе үҙ тәрбиәләренә алалар. Уны мәҙрәсәгә бирәләр, урыҫса ла уҡырға өйрәтәләр. Еҙнәһе үлгәс, уның тормошо ауырлаша. Уҡыуын дауам иттергән арала ул төрлө эштәр эшләп көн күрергә мәжбүр була.

Ғабдулла Туҡай Уральск ҡалаһында 11 йыл йәшәгәс, 1907 йылда Ҡазанға килә. «Пар ат» тигән шиғырында ул ошо сәйәхәттә тыуған уй-хистәрен, кисерештәрен сағылдыра.

Татар халҡының бөйөк шағиры Ғ. Туҡай үҙе йәшәгән осорҙағы ауыл һәм ҡала ярлыларының ҡыҙғаныс тормошта интегеүҙәрен күрә. Бигерәк тә ярлы халыҡ балаларының наҙан ҡалыуҙарына көйөнә. Шуның өсөн дә ул үҙенең бик күп шиғырҙарында эшсән халыҡты уҡырға, белем алырға саҡыра, бер ваҡытта ла ялҡауланмаҫҡа өндәй. Үҙенең бер шиғырында ул былай ти:

Иртә торғас та, йыуын да дәресең уҡырға тотон.

Тынма, эшлә, торма тик, тынһаң тынырһың йома көн. Ә икенсе бер шиғырында:

Ҙур бәхеттәр ең һыҙғанып эшкә бирелгәндән килә.

Аһ, оят, хурлыҡ, түбәнлектәр иренгәндән килә, — ти ул. Кеше көсөнән файҙаланыусы байҙарҙы ул яратмай. Үҙенең шиғырҙарында ундай кешеләрҙең ҡәбәхәтлектәрен эшсән халыҡҡа аңлатып бирә. Шуның өсөн дә Туҡайҙы халыҡ ярата, уны үҙенең шағиры — халыҡ шағиры — тип ҡарай.

Ғ. Туҡай 1913 йылдың 15 апрелендә Ҡазан ҡалаһында туберкулез ауырыуынан үлә.

Шағирҙың әҫәрҙәрен үҙе иҫән саҡта уҡ Башҡортостанда ла яратып уҡыйҙар. Туҡайҙың әсәһе Мәмдүҙә башҡорт ҡыҙы булған.

1996 йылдың апрелендә Ғ. Туҡайҙың тыуыуына 110 йыл тулып үтте. Ошо уңай менән илебеҙ һәм донъя йәмәғәтселеге уның ҙур юбилейын уҙғарҙы.

**?**

1. Ғ. Туҡайҙың бала сағы ниндәй заманға тура килә?
2. Уның ғазаплы үткән балалыҡ йылдары тураһында түбәндәге план буйынса һөйләп бирегеҙ:
   а) Ғ. Туҡайҙың Шәрифә ҡарсыҡтағы тормошо.
   б) Ғ. Туҡай — Сасна ауылында.
   в) Өсөйлө ауылында «алты күгәрсен араһында бер сәүкә». Сажиҙә апайҙың йылы ҡарашы.
   г) Ғ. Туҡай — Мөхәммәтвәли ғаиләһендә.
   д) Ғ. Туҡай — Ҡырлай ауылында.
   е) Ғ. Туҡайҙы Уральск ҡалаһына оҙатыу.
3. Әҫәрҙә ауыл ярлыларының тормошо нисек һүрәтләнә?

## Биография һәм автобиография

Күренекле кешеләрҙең тормошон, ижад һәм хеҙмәт юлын тасуирлап сығыу **биография** тип атала.

Теге йәки был кешенең үҙе тарафынан яҙылған тормош юлы **автобиография** була. Художестволы һүрәтләү саралары менән яҙыусының үҙе хаҡында яҙған әҫәрҙе **автобиографик** әҫәр тиҙәр. Ғабдулла Туҡайҙың «Иҫемдә ҡалғандар»ы автобиографик әҫәргә лайыҡ миҫал була ала.

## ШҮРӘЛЕ

### I

Тап Ҡазан артында барҙыр бер ауыл — «Ҡырлай», тиҙәр,
Йырлағанда, көй өсөн, «тауыҡтары йырлай», тиҙәр.
Гәрсә унда тыумаһам да, мин бер аҙ торған инем;
Ерҙе аҙ-маҙ тырмалап, сәскән инем, урған инем.
Ул ауылдың, һис онотмайым, һәр яғы урман ине;
Ул болон, йәшел үләндәр хәтфәнән юрған ине.
Ҙурмы, тиһәң, ҙур түгелдер, был ауыл бик кескенә;
Халҡының эскән һыуы бик кескенә инеш кенә.
Унда бик һалҡын һәм бик эҫе түгел, урта һауа;
Ел дә ваҡытында иҫеп, ямғыр ҙа ваҡытында яуа.
Урманында ҡып-ҡыҙыл ҡурай еләк тә ер еләк;
Күҙ асып йомғансы, һис шикһеҙ, йыйырһың бер силәк.
Бик хозур![1] Рәт-рәт тора, ғәскәр кеүек, шыршы, нарат;
Төптәрендә ятҡаным бар, хәл йыйып, күккә ҡарап.
Йүкә, ҡайындар төбөндә ҡуҙғалаҡтар, бәшмәктәр
Берлә[2] бергә үҫә аллы-гөллө гөлдәр, ғәнжәләр[3].
Аҡ, ҡыҙыл, ал, һап-һары, зәңгәр, йәшелдән сәскәләр;
Һәр тарафҡа тәмле еҫтәр сәскеләй был сәскәләр.
Үпкеләйҙәр сәскәләрҙе төрлө төҫлө күбәләктәр,
Килеп киткән булып, тағы ла шунда сүгәләп.
Бер ваҡыт, сут-сут итеп, һайрай хоҙайҙың ҡоштары,
Китә йәндәрҙе киҫеп, ярып садаи хушлары[4].
Бында бульварҙар, клуб һәм танцевальня, цирк та шул,
Бында оркестр, театрҙар ҙа шул, концерт та шул...

### II

Йәй көнөн яҙҙым бер аҙ — яҙмайым әле ҡыш, көҙҙәрен,
Алһыу йөҙлө, ҡара ҡашлы, ҡара күҙле ҡыҙҙарын.
Был ауылдың мин йыйын, майҙан һәм һабантуйҙарын
Яҙмайым, ҡурҡып, алыҫтарға китер, тип, уйҙарым!..
Туҡта, мин юлдан аҙашҡанмын икән бит, күр әле,
Әллә ник иҫтән дә сыҡҡан, һүҙ башым бит — «Шүрәле».

---

[1] *Хозур* — күңелле.
[2] *Берлә* — менән.
[3] *Ғәнжәләр* — япраҡтары асылып бөтмәгән гөл-сәскәләр.
[4] *Садаи хушлары* — матур тауыштары.

Аҙ ғына сабыр ит әле, ҡәриэм![1] Хәҙер яҙам;
Уйлаһам ауылымды, аҡылымдан да мин хәҙер яҙам.

### III

Билдәле, был ҡап-ҡара урманда һәр йыртҡыс та бар,
Юҡ түгел айыу, бүре, төлкө — йыһан ҡоротҡос та бар.
Һәм дә бар бында ҡуян, ирлән, тейен, йомран, мышы,
Осрата аусы булып урманда күп йөрөгән кеше.
Бик ҡуйы булғанға, бында ен-пәрейҙәр бар, тиҙәр,
Төрлө албаҫты, убырҙар, шүрәлеләр бар, тиҙәр.
Һис ғәжәп юҡ. Булһа булыр, бик ҡалын, бик күп бит ул.
Күктә ни булмаҫ, тиһең, осһоҙ-ҡырыйһыҙ күк бит ул!

### IV

Шул турала аҙ ғына, биш-алты һүҙ һөйләйем әле,
Ғәҙәтемсә аҙ ғына йырлайым әле, көйләйем әле.
Бик матур бер айлы кистә был ауылдан бер егет
Киткән урманға утынға, яңғыҙы бер ат егеп.
Тиҙ барып еткән егет, эшкә тотонған барғас уҡ,
Киҫә башлаған утынды балта менән «туҡ» та «туҡ»!
Йәйге төндөң ғәҙәтенсә, төн бер аҙ һалҡын икән;
Барса ҡош-ҡорт йоҡлаған булғанға, урман тын икән
Шундай тын, яҡшы һауала беҙҙең утынсы иһә,
Алды-артты, уңды-һулды белмәйенсә, утын киҫә.
Балтаһы ҡулда, егет эштән бер аҙ туҡтап тора;
Туҡта, сеү! Йәмһеҙ тауышлы әллә нәмә ҡысҡыра.
Һиҫкәнеп, беҙҙең егет ҡатып ҡала аяҡ үрә,
Аңламаҫтан ҡаршыһында әллә ниндәй «ят» күрә.
Нимә был? Ҡасҡынмы, енме? Йә өрәкме, нимә был?
Ҡот осорлоҡ, бик килешһеҙ, әллә ниндәй нәмә был!
Мороно кәп-кәкре бөгөлгәндер, тамам ҡармаҡ кеүек,
Төҙ түгел ҡулдар, аяҡтар ҙа, ботаҡ-тармаҡ кеүек.
Йылтырай, ялт-йолт киләлер эскә батҡан күҙҙәре;
Ҡот осор, күрһәң әгәр, төндә түгел — көндөҙҙәре.
Яп-яланғас, нәп-нәҙек, ләкин кеше төҫлө үҙе;
Урта бармаҡ буйлығы бар маңлайында мөгөҙө.
Кәкре түгелдер, быны бармаҡтары — бик төҙ-төҙөн,
Тик килешһеҙ: һәр бере лә ярты аршындан оҙон.

---

[1] *Ҡәриэм* — уҡыусым.

## V

Бик оҙаҡ торғас ҡарашып, күҙҙе күҙгә ныҡ терәп,
Өндәшә батыр утынсы: «Һиңә минән ни кәрәк?»
— Бер ҙә шикләнмә, егет, һин, мин ҡараҡ-уғры түгел;
Юл да баҫмайым, шулай ҙа мин бик үк тоғро түгел.
Ғәҙәтем: яңғыҙ кешеләрҙе ҡытыҡлап үлтерәм;
Мин әле, күргәс һине, шатлығымдан үкерәм.
Тик ҡытыҡларға яралғандыр минең бармаҡтарым,
Булғылайҙыр, көлдөрөп, әҙәм үлтергән саҡтарым.
Кил әле һин дә бер аҙ бармаҡтарыңды һелкет, эй
Йәш егет! Килсе, икәү уйнайыҡ бер аҙ кети-кети.
— Яҡшы, яҡшы, һүҙ ҙә юҡтыр, мин ҡарышмай уйнайым.
Тик һине шартыма күнмәҫһең, тип мин уйлайым.
— Нимә шартың, һөйлә, әй бисара әҙәмгенәм!
Тик тиҙ үк уйнайыҡсы, зинһар, нимә ҡушһаң да күнәм.
— Һөйләйем шартымды һиңә, тыңлап тор, ана
Шунда бар бит бик оҙон һәм бик йыуан бер бүрәнә.
Мин дә көс-ярҙам бирермен, әйҙә, иптәш, ҡуҙғалайыҡ;
Шул ағасты бергә-бергә ошбу арбаға һалайыҡ.
Бүрәнәнең бер осонда бар асылған ярығы,
Шул еренән ныҡ ҡына һин тот, эй урман һарығы!
Был кәңәшкә шүрәле лә күнде, килмәйенсә кире,
Китте ҡушҡан ергә, атлап аҙымын эре-эре.
Ҡуйҙы илтеп ауыҙын асҡан бүрәнәгә бармағын, —
Ҡәриэм, күрҙеңме инде йәш егеттең ҡармағын?
Һуҡҡылайҙыр балта менән ҡыҫтырылған сөйгә был,
Хәйләһене аҡрын-аҡрын килтерәлер көйгә был.
Шүрәле тыҡҡан ҡулын, һелкенмәйҙер, ҡуҙғалмайҙыр;
Белмәй инсан[1] хәйләһен, һис балтаға күҙ һалмайҙыр,
Һуҡҡылай торғас, ахырҙа сөй сығып, бушап китеп,
Шүрәленең бармағы ҡалды, ҡыҫылды шап итеп.
Һиҙҙе эште шүрәле лә, ҡысҡыра ла баҡыра;
Һыҙлана һәм ярҙамына шүрәлеләр саҡыра.
Хәҙер инде шүрәле беҙҙең егеткә ялына,
Тәүбә итә эштәренән, изгелеккә һалына:
— Һин бер аҙ ҡыҙған мине, ҡотҡарсы, эй әҙәмгенәм;
Бынан ары үҙеңә, улыңа, нәҫелеңә теймәм.

---

[1] *Инсан* — кеше.

Башҡаларҙан да тейҙертмәм, ул минең дуҫым, тиеп,
Уға урманда йөрөргә мин үҙем ҡуштым, тиеп.
Бик ауырта ҡулдарым, дуҫым, ебәр, зинһар, ебәр;
Шүрәлене рәнйетеүҙән нимә бар һиңә, ни бар?
Тибрәнә лә йолҡона, бисара, аҡылынан шаша,
Шул арала йәш егет өйгә китергә маташа.
Ат башынан тотҡан ул, был шүрәлене белмәй ҙә.
Ул быны фөрьяттарын[1] асла[2] ҡолаҡҡа элмәй ҙә.
— Эй егет, һис юҡ икәндер, мәрхәмәт[3] хисең һинең,
Әйтсе, зинһар, мәрхәмәтһеҙ! Кем һин? Исемең кем һинең?
Иртәгә килгәнсе дуҫтар, тәндә йәнем торһа әгәр,
«Шул фәлән атлы[4] кеше ҡыҫты», — тиермен, һораһалар.
— Әйтһәм әйтәйем, һин белеп ҡал! Ысын атым «Былтыр»
минең,
Был егет абзаң булыр ул, бик белеп тор һин, энем!
Шүрәле фөрьят итәлер, ауҙан ысҡынмаҡ була;
Һәм дә, ысҡынғас, егеткә бер-бер эш ҡылмаҡ була.
Ҡысҡыра: «Ҡыҫты, харап итте яуыз «Былтыр» мине;
Аһ, үләм бит, был бәләнән кем килеп йолҡор мине?»
Иртәгеһен шүрәләләр был фәҡирҙе тиргәйҙәр:
«Һин йүләрһең, һин ҡоторған, һин тилергәнһең», — тиҙәр.
Әйтәләр: «Ҡысҡырма һин, тиҙ яҡшылыҡ берлән тыйыл!
Эй алйот, ҡыҫҡанға былтыр, ҡысҡыралармы быйыл!»

? 1. «Шүрәле» әҫәренең беренсе бүлеге буйынса Ҡырлай ауылының тәбиғәтен тасуирлап бирегеҙ.
2. Шүрәленең ҡиәфәтен автор нисек тасуирлай?
3. Шүрәле ни өсөн еңелә?
4. Егеттең ҡыйыулығы һәм зирәклеге ниҙә күренә?
5. Шиғырҙың беренсе бүлеген ятлағыҙ.
6. Ятланған бүлектән һүҙҙәрҙе ҡулланып, тыуған ауылығыҙ йәки ҡалағыҙ тураһында инша яҙығыҙ.

## Халыҡ ижады һәм әҙәбиәт

Телдән ижад ителеп, быуындан быуынға телдән еткерелә килгәнлектән, халыҡ ижады әҫәрҙәрен башта кем

[1] *Фөрьят* — аһ-зар.
[2] *Асла* — бөтөнләй.
[3] *Мәрхәмәт* — ҡыҙғаныу, яҡшылыҡ эшләү.
[4] *Ат* — исем.

уйлап сығарыуы билдәле булмай. Авторы билдәле булмағанға, телдән таралғанға күрә, бер үк халыҡ ижады әҫәрен төрлө кеше төрлөсә башҡара ала. Ә бына әҙәби әҫәрҙәр телдән йәки яҙма рәүештә айырым кеше тарафынан ижад ителә. Шуға ла уларҙың авторы билдәле була, текстарын башҡа кешеләр үҙгәртә алмай.

Яҙыусылар үҙҙәренең ижадтарында халыҡ әҫәрҙәрен дә файҙаланыусандар. Мәжит Ғафури, Рәшит Ниғмәти, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Жәлил Кейекбаев кеүек күренекле яҙыусыларҙың байтаҡ әҫәрҙәре шулай ижад ителгән.

Халыҡ араһында фантастик зат — шүрәле тураһында әкиәттәр, легендалар ныҡ таралған. Шуларҙан хәйләкәр кешенең яуыз уйлы шүрәлене төп башына ултыртыуын хикәйәләүсе әҫәр киң билдәле. Ул, асылда, хәйләкәрҙәр тураһындағы тормош-көнкүреш әкиәттәре төркөмөнә ҡарай. Туғандаш татар халҡының бөйөк шағиры Ғабдулла Туҡай үҙенең «Шүрәле» тигән әҫәрендә шул әкиәтте ижади файҙаланған. Бындай әҫәрҙәрҙе **әҙәби әкиәттәр** тип йөрөтәләр.

?
1. Халыҡ ижады әҫәрҙәренән әҙәби әҫәрҙәр ни яғы менән айырыла?
2. Ниндәй әкиәттәрҙе әҙәби әкиәттәр тип йөрөтәләр? Үҙегеҙ уҡыған әҙәби әкиәттәрҙе хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ.

* * *

## Аҡыллыға — ишара...

Иҫәр менән бал ашағансы, аҡыллы менән таш ташы.
Көс менән ала алмағанды аҡыл менән алалар.
Алйот еңдем тиер, аҡыллы ҡуйҙым тиер.
Аҡылдың юлдашы — бәхет.
Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән.
Аҡыллыға һүҙ әйттем —
уйланы ла белде,
Аҡылһыҙға һүҙ әйттем —
тыңланы ла көлдө.

# Алтынсы бүлек

*Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы,*
*Ҡайҙа моңлолар була,*
*Мин шулар янында булам —*
*Улар менән килешеп була.*



**Мәжит ҒАФУРИ**

**1880—1934**

Мәжит Ғафури 1880 йылда Башҡортостандың Ғафури (элекке Красноусол) районы Еҙем-Ҡаран ауылында тыуған. Шиғыр һәм хикәйәләрендә Мәжит Ғафури тормоштағы ғәҙелһеҙлектәр тураһында яҙҙы. Хеҙмәт кешеләрен яҡланы, уларҙы ирекле һәм бәхетле итеп күрергә теләне.

«Шағирҙың алтын приискыһында», «Беҙҙең әйберҙәрҙе һатҡанда», «Ҡара йөҙҙәр» кеүек әҫәрҙәрендә Мәжит Ғафури батша заманындағы тормоштоң ауырлыҡтарын һүрәтләне.

Мәжит Ғафури 1923 йылда яҙыусыларҙан беренсе булып Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән оло исем алды. Ул 1934 йылда Өфөлә үлде. Шағирҙың исемен мәңгеләштереү маҡсатында, уның тыуған районына, Өфө ҡалаһының бер урамына, Өфөнөң ҙур баҡсаларының береһенә, Башҡорт академия драма театрына Мәжит Ғафури исеме бирелде.

Халыҡ шағирының тыуыуына йөҙ йыл тулған көндәрҙә Өфөлә уға һәйкәл асылды.

## ҺАРЫҠТЫ КЕМ АШАҒАН?

(Мәҫәл)

Бер аусының бер һарығы ҡырҙа ҡалған,
Эҙләп тә тапмағандар, ул юғалған.

Бер-ике көн үтеп киткәс, беҙҙең аусы:
«Бүре ашаған һарыҡты», — тип хәбәр алған.

Быны ишеткәс, аусы сикһеҙ асыуланды,
Йыртҡыстарҙың был эшенә көйҙө, янды.
— Һарыҡтың үсен алмай ҡалмамын, — тип,
Януарҙарға ошолай тип хәбәр һалды:

«Ҡыҙғаныып тора инем үҙем һеҙҙе,
Асыуланһам, ҡалдырмамын берегеҙҙе,
Һарығымды кем ашаһа, шул кешене
Талап итәм миңә тотоп биреүегеҙҙе».

Аусыны белә урманда һәр бер януар,
Был хәбәрҙе ишеткәс тә, таң ҡалдылар.
«Аусыны тиҙерәк риза итәйек», — тип,
Кәңәш өсөн бер урынға йыйылдылар.

Мәжлестә Төлкө кәтип[1], Бүре рәйес[2],
Рәйес, һүҙ башлап әйтте: «Был ниндәй эш!..
Аусының һарығын кем ашаны?
Танмайынса, ошо ерҙә әйтеү тейеш.

Шул эш өсөн саҡырҙым мин бында һеҙҙе.
Асыуланһа, аусы ҡырыр һәммәбеҙҙе.
Кем ашаһа, шуны биреп ҡотолайыҡ.
Тоғролоҡтан айырмағыҙ үҙегеҙҙе».

Әүәл Бүре: «Ашаманым», — тине, танды,
Төлкө лә тоғролоғон һөйләп алды.
Һәммә йыртҡыс үҙҙәрен сафланылар.
Бер яҡ ситтә йыртҡыс түгел, Ҡуян ҡалды.

Тине Бүре: «Ситтә тороп яңғыҙ үҙең,
Бур кешенең күҙе төҫлө ике күҙең.
Һарыҡты ашаған кеше һин түгелме?
Әйтеп ҡал, бында килеп, әйтер һүҙең!»

Ҡуян меҫкен ҡурҡыуынан ҡалтыранды:
«Ашаусы мин түгел», — тип саҡ әйтә алды.

---

[1] *Кәтип* — секретарь.
[2] *Рәйес* — председатель.



Ул шикле кеше һымаҡ ҡына яуап биргәс,
Бөтә йыртҡыс: «Ашаусы шул!» — тип һөрән һалды.
(Ашамай ҡуян һис бер ваҡытта ит.)
Әйтә алманы, ашаған мин түгел, тип.
«Һарыҡты ашаған дуңғыҙ ошо икән, —
Тине бүре, — килтерегеҙ бәйләргә еп!»

Шул сәғәттә әллә ҡайҙан еп таптылар,
Ҡуяндың муйынына еп таҡтылар,
«Уҫаллығың язаһын тарт бына инде!» — тип,
Аусының ауылына оҙаттылар.

Бүре төҫлө йыртҡыстарға киңдер йыһан[1],
Һәр ҡайҙа золом[2] күрер меҫкен Ҡуян.
Зарарлы бәндә булып күренерһең,
Башҡаларға ҡылмаһаң да һис бер зыян.

? 1. Түбәндәге юлдарҙы аңлатығыҙ: «Ҡуян меҫкен ҡурҡыуынан ҡалтыранды: «Ашаусы мин түгел», — тип саҡ әйтә алды»; «Уҫаллығың язаһын тарт бына инде!» — тип, аусының ауылына оҙаттылар».

---

[1] *Йыһан* — донъя.
[2] *Золом* — яфа.

2. Әҫәрҙә һүрәтләнгән төп ғәҙелһеҙлек нимәлә күренә?
3. Мәҫәлдең һуңғы дүрт юлын уҡығыҙ һәм аңлатып бирегеҙ?
4. Бүре, Төлкө һәм башҡа йыртҡыстар йөҙөндә М. Ғафури ниндәй кешеләрҙе күрһәткән?
5. Мәҫәлде сәхнәләштерегеҙ. Бының өсөн:
а) Бүре, Ҡуян, автор ролдәрен башҡарасаҡ кешеләрҙе алдан билдәләгеҙ;
б) дөрөҫ итеп уҡырға өйрәнегеҙ;
6. Әҫәрҙе уҡығанда паузаны, баҫымды дөрөҫ яһарға, тейешле тауыш менән, тейешле тиҙлек менән әйтергә өйрәнегеҙ.

| Һөйләмдәр | Тауыш | Уҡыуҙың йүгереклеге |
|---|---|---|
| Ҡуян меҫкен \| ҡурҡыуынан ҡалтыранды, ‖ «Ашаусы \| мин түгел», — ‖ тип \| саҡ әйтә алды. ‖ | уртаса ҡурҡыулы, көсһөҙ | ашыҡмайынса әкрен генә |
| Ул шикле кеше һымаҡ ҡына яуап биргәс, | уртаса | ҡыҙыуыраҡ |
| Бөтә йыртҡыс: \| «Ашаусы шул!» — ‖ тип һөрән һалды. | асыулы, көслө | әкрен һәм өҙөк-өҙөк |

Иғтибар итегеҙ: кескәй пауза бер һыҙыҡ менән, ҙур пауза ике һыҙыҡ менән, баҫым төшкән һүҙ дуға һыҙыҡ менән билдәләнә.

Ролдәрҙе башҡарған ваҡытта ниндәй хәрәкәттәр яһарға кәрәклеген билдәләгеҙ.

7. Мәҫәлде ятлағыҙ.

## АТ МЕНӘН ЭТ

(Мәҫәл)

Ҡыҙҙыра ҡояш ер өҫтөн,
Көн бөгөн сикһеҙ эҫе;
Шул ваҡыт һабан һөрәлер
Яңғыҙ атлы бер кеше.
Тирләгән Ат, өҫтәүенә
Серәкәй, күгәүен йонсота.

Ат хужаһы көн эҫелек-
тән һаман да ут йота.
Хәл йыйырға туҡтағанда,
Ат янына Эт килә —
Башта рәтләп һүҙ ҙә ҡушмай,
Йылмайып, Аттан көлә.
«Ник көләһең?» — тип һорай Ат.
Эт шуға яуап биреп,
Ти: «Көләм, әй, бисара Ат!
Һинең хәлеңде күреп.
Ниңә йөрөргә был эҫелә
Интегеп һабан һөрөп?
Булмаймы, минең кеүек,
Ҡырҙа һиңә лә тик йөрөп.
Йәм-йәшел ерҙе ҡарайтып,
Тот та ерҙе һөр, имеш!..
Һүҙ ҙә әйтмәҫ, көлмәҫ инем,
Булһа ла бер файҙалы эш».
Эткә Ат яуап бирә:
«Һүҙең урынлы, бик дөрөҫ,
Эт күҙе менән ҡараған
Саҡта был файҙаһыҙ эш.
Көҙгәрәк күрһәң ине
Был ерҙә нимә үҫкәнен,
Бөтәбеҙҙе туйҙыра торған
Игендең бешкәнен.
Әйтмәҫ инең: «Эҫелә —
Нишләп йөрөйһөң бында?» — тип,
Көлмәҫ инең, эштең асылын
Белмәйенсә, ауыҙ йәйеп».

? 1. Мәҫәлде ролдәргә бүлеп, дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ.
2. Эт атты нимәгә өндәй?
3. Ни өсөн ат, эҫе көндә тиргә батып эшләһә лә, эттең һүҙҙәрен кире ҡаға?
4. Был мәҫәлдә һүрәтләнгән геройҙар бөгөн беҙҙең тормошта осрамаймы?

## Аллегория һәм мәҫәл тураһында

Мәҫәлдә, ғәҙәттә, хайуандар, ҡоштар, үҫемлектәр тураһында һөйләнә. Ләкин улар йөҙөндә беҙ кешеләрҙе аңлайбыҙ.

«Һарыҡты кем ашаған?» мәҫәлен алып ҡарайыҡ. Унда бер ваҡытта ла ит ашамай торған ҡуян йыртҡыстар тарафынан һарыҡты ашауҙа ғәйепләнә. Ләкин мәҫәлдең ысын мәғәнәһе кешеләр араһындағы яуызлыҡты һәм көслөләрҙең көсһеҙҙәрҙе йәберләүен фашлай. Хайуандар аша кешеләр тормошон ошо рәүешле ситләтеп һүрәтләү алымы **аллегория** тип атала.

Аллегория алымы менән яҙылған кескәй шиғри әҫәр **мәҫәл** (басня) була.

Мәҫәл, ғәҙәттә, тормоштағы етешһеҙлектәрҙе тәнҡит итеүгә йүнәлтелә. Автор шул кәмселектәргә ҡаршы көрәшергә өйрәтә һәм ғәҙеллекте яҡларға саҡыра. Бындай өгөт-нәсихәт (мораль) әҫәрҙең башында йә аҙағында бирелә. Мәҫәлән:

Бүре төҫлө йыртҡыстарға киңдер йыһан,
Һәр ҡайҙа золом күрер меҫкен Ҡуян.
Зарарлы бәндә булып күренерһең,
Башҡаларға ҡылмаһаң да һис бер зыян.

Мәҫәлдәр үткер һәм тапҡыр тел менән яҙыла.

* * *

Яуызлыҡтың ҙуры-бәләкәйе булмай.

*Эзоп*

Яуыз уйлы кешеләрҙең ғүмере һәр ваҡыт тынысһыҙлыҡта үтә.

*Д. Дидро*

Ҡыйыш уҡ, атҡан менән, туры китмәҫ,
Күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ.

*М. Аҡмулла*

# Етенсе бүлек

*Ҡая таштар ҡанға буялһа ла,*
*Мәғрур Урал башын эймәгән.*
*Үҙ ҡуйынында тыуып-үҫкән улын*
*Үҙ ҡуйынына үҙе ерләгән.*

*Я. Ҡолмой*



## Дауыт ЮЛТЫЙ

## 1893—1938

«Күренекле башҡорт яҙыусыһы һәм йәмәғәт эшмәкәре Дауыт Юлтый 1893 йылдың 18 апрелендә элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙенә ҡараған (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Красногвардеец районы) Юлтый ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған... Дауыт Юлтыйҙың шиғырҙарында ярлыларҙың ауыр тормоштарын тасуирлау, яҙмышты ҡәһәрләү, ғәҙелһеҙлекте күреп әрнеү, әсенеү хистәре өҫтөнлөк итә. Уның күп әҫәрҙәре моң-зар, ҡайғы-хәсрәт менән тулы». *Ғайса Хөсәйенов.*

### БӘЛӘКӘЙ ҠОТОШ

### I

Завод мөрйәләре таңғы гудоктарын ҡысҡыртҡанда, таң яҡтылығы, ҡараңғылыҡты телгеләп, күк йөҙөнә һуҙыла башлаған мәлдәрҙә, атайым һалмаҡ ҡына кейенә лә, төрөпкәһен toҡандырып, ишектән сыға; әсәйем, бәләкәй шәм яндырып, иҫке-моҫҡоларҙы ямарға тотона ине. Был мәлдәрҙә мин күберәк ваҡыт йоҡлап ҡала торған булһам да, ҡайһы бер уяу ятҡан көндәрем хәтеремдә бик ныҡ урынлашып ҡалғандар.

Башҡа саҡтарҙа, йоҡонан торғас та, әсәйем минең тамағымды туйҙыра, унан һуң күрше Ғәләүҙәргә ҡалдыра ла, ҡултығына әллә ниндәй төйөнсөктәр ҡыҫтырып, ҡайҙалыр сығып китә торғайны. Баҫҡыстар менән түбән

төшкән беҙҙең подвал ишегендә көндәр буйы йоҙаҡ эленеп тора, ә мин көндө Ғәләү ағайҙарҙа йәки урамда йөрөп уҙғара инем. Әсәйем күп ваҡыт ҡараңғы төшкәс кенә ҡайта. Ҡайһы ваҡытта ул миңә тәмле икмәк һыныҡтары йәки бәлеш киҫәктәре алып ҡайтҡылай. Шуға күрә лә мин әсәйемдең ҡайтыуын, ишектәге йоҙаҡтың шалтырауын сабырһыҙлыҡ менән көтөп ала торғайным. Атайым ҡайтҡан саҡта инде, мин һәр ваҡыт йоҡола булам. Шул сәбәпле уның өйгә ни рәүешле ҡайтып инеүен һис тә хәтерләй алмайым.

## II

Мин бер көн йоҡонан торғанда, атайым, һикелә аяҡтарын һалындырып, иҙеүҙәрен ысҡындырып, төрөпкәһен тартып ултыра ине. Ғәҙәттә, ул байрам көндәрендә лә өйҙә булмай торғайны. Уның бөгөн өйҙә булыуы бик мәрәкә тойолдо. Мин, шым ғына барып, уның эргәһенә ултырҙым да төрөпкәһенән төрөлөп-төрөлөп сыҡҡан төтөндәргә ҡараным, унан һуң йөҙөнә күҙ төшөрҙөм. Уның эскәрәк батып торған ҡыҫыҡ ҡара күҙҙәрендә, йыйырсыҡланып торған йөҙөндә әллә ниндәй үҙгәреш бар ине. Биттәрендә, күҙ төптәрендә йыйырсыҡтар ҙа, бүтән көндәргә ҡарағанда, күберәк күренә ине. Мин уның йөҙөнә оҙаҡ ҡарай алманым. Йәһәт кенә күҙемде алдым да әсәйем янына бармаҡсы булдым. Ул мейес эргәһендә әллә нәмәкәй ҡыҙҙырып, бешереп маташа ине.

Әсәйем эш араһында, атайыма ҡарамайынса ғына:

— Старшылар менән үҙең боҙолошҡанһыңдыр әле, — тине.

Атайым быға ҡаршы яуап та ҡайтарманы, ауыҙ эсенән генә мығырлап ҡуйҙы. Уның һүҙҙәре әсәйемә лә, миңә лә ишетелмәне. Әсәйем дә башҡа һүҙ ҡайтарып әйтмәне.

Ул көн, ашап-эскәс тә, әсәйем, көндәге ғәҙәте буйынса, сығып китте. Атайым менән беҙ икәү өйҙә ҡалдыҡ.

## III

Иртәгеһен атайым әллә ниндәй асыулы төҫ менән ҡайтып инде. Уның ундай ҡиәфәттә ҡайтыуын беренсе тапҡыр күрҙем мин: уның күҙҙәре ҡаймаҡланған,

кәүҙәһе ҡалтырай, урыҫсалап әллә кемдәрҙе һүгә, ҙур ҡаты ҡулдары менән өҫтәлгә һуғып:

— «Ун һигеҙ йыл мастер булып эшләгән» тиҙәр. Неправда!.. Бөгөн булмаһа, иртәгә боғаҙығыҙҙан алырбыҙ,— тип кемдәрҙелер әрләй. Әсәйем бер ишек төбөнә бара, бер тәҙрәнән барып ҡарай, бер атайым янына килә, уны көйләй ине.

Күп тә үтмәне, атайым менән бергә бер заводта эшләй торған бер ағай килеп инде. Ул да атайымдың ҡыланышына ҡарап торҙо ла, эскәмйәгә ултырҙы, яйлап ҡына тәмәке төрҙө. Тәмәкеһен тоҡандырғас, атайыма:

— Ҡайғырма, Ҡотош ағай. Беспокоиться нечего... Эш табылмаҫ, тип беләһеңме ни? Бында булмаһа, шахтаға китербеҙ, — тине һәм иҙән буйынса ҡыҙыу-ҡыҙыу йөрөй башланы. Атайым ҡапыл ғына тынды ла, өҫтәл мөйөшөнә ҡарап, уйға ҡалды.

Шунан һуң ғына мин атайымдың заводтан ҡыуылғанын белдем.

? 1. Ҡотош ағай ҡайҙа эшләгән?
2. Эштән ул ни өсөн күңелһеҙ ҡайта?
3. Һеҙҙеңсә, Ҡотош үҙ алдына кемдәрҙе әрләй?

## IV

Мин бер көн йоҡонан торғанда, атайым да, әсәйем дә өйҙә юҡ ине. Миңә был күренеш бик яманһыу тойолдо. Ары һуғылдым, бире һуғылдым, ишеккә барҙым — асылманы: тыштан йоҙаҡ һалынған икән. Ишектәге йоҙаҡтың шалтырауы асыуымды килтерҙе. Уның асылмауын белә тороп, тағы тарттым, ныҡ көсәнеп тарттым. Йоҙаҡтың ҡаты шалтырауы мине үсекләгән төҫлө булды, күңелем тулып китте, күҙгә ҡапыл килеп тығылған йәштәрҙе тыя алманым, үксәләрҙе һике йөҙлөгөнә бәреп, тоҡ-томалға аҡырып-аҡырып илай башланым. Бик оҙаҡ иланым. Ләкин минең тауышымды бер кем дә ишетмәне, бер кем дә килмәне.

Шулай бик оҙаҡ илап тынғандан һуң, подвалдан йортҡа ҡараған тәҙрә төбөнә килдем. Һандыҡҡа баҫып, тышҡа ҡарай башланым, тышта һибәләп ямғыр яуа, йорттағы соҡор-саҡырға һыу йыйылған. Беҙҙең тәҙрәнең

яртыһынан юғары торған асфальт буйлап тәҙрә төбөнә һыу ағып төшә. Йортта ике ломовой извозчиктың егеүле аттары тора. Ике сәпсек балаһы, ямғырҙан ҡасып, беҙҙең тәҙрә төбөнә килеп ҡунды. Ә мин уларҙы ҡурҡытып осороп ебәрҙем. Мин уларҙы тағы ла килмәҫме икән тип көтһәм дә, кире килмәнеләр.

Кискә ҡарай ямғыр шәбәйгәндән-шәбәйҙе. Тимер түбәләргә, таштарға, асфальттарға, тәҙрәләргә шыбырлап бәрелгән ямғыр тамсылары мине бәүеткән шикелле тойолдо: ҡапыл бөтә кәүҙәмде ауырлыҡ баҫты, күҙҙәрем йомола башланы. Бөршәйеп кенә һандыҡ өҫтөнә яттым. Бер аҙҙан һуң сәңгелдәктә бәүелеп киткән һымаҡ булдым. Шул бәүелеү араһында, ямғыр тауышын тыңлап, йоҡоға киткәнмен.

## V

Әсәйем мине уятҡанда, төн ине. Миңә таң кеүек тойолдо. Ул, минең башымдан һыйпап:

— Һуңғарып киттем шул, асығып, илап бөткәнһеңдер инде, балаҡайым, — тип, ситкә ҡарап, күҙҙәрен һөртөп алды. Минең тәнем бик ауырайған төҫлө ине. Аҡрын ғына һандыҡ өҫтөнән төштөм дә һикегә килдем. Әсәйем алдыма ике һыныҡ күмәс менән бер стакан һөт ҡуйҙы. Ҡапҡан күмәс ауыҙымда көлгә әйләнде. Тәмен белер өсөн, бик ҡаты сәйнәргә керештем, яңаҡ һөйәге сатнап киткән төҫлө булды, ҡолаҡтарым геүләп китте. Күмәс валсыҡтары теш төптәренә һылашты, тамаҡҡа ҡоро көл тәмдәре йүгерҙе. Мин әсәйемә:

— Башым ауырта бит!.. — тинем. Ул ҡалтыранып һалҡын ҡулдары менән башымды баҫып ҡараны ла:

— Ауырыйһыңмы әллә, балаҡайым? Башың ут кеүек ҡыҙыу бит, — тине.

Һикенең бер мөйөшөнә йәһәт кенә урын йәйҙе лә атайымдың майлы бишмәтен өҫтөмә япты. Мин, бер аҙ ятҡас, үҙемде түбәлә шикелле күрҙем:

— Йығылдым, йығылдым!.. — тип ҡысҡырып ебәрҙем, тәндә әллә ниндәй уттар йүгергән һымаҡ булды, ул тағы һалҡын менән аралашты. Өшөп киткән төҫлө булдым. Шунан һуң үҙемде ҙур ҡалын тәгәрмәстәр араһында күрҙем, шулар араһында атайым да әллә ни эшләп

йөрөй. Ул тәгәрмәстәр минең өҫкә киләләр. Мин, уларҙан ҡурҡып:

— Тапайҙар!.. Мине тапайҙар!.. — тип атайыма ҡысҡырам. Ул мине ишетмәй, башын түбән һалып, һаман эшләй бирә. Мин һаман ҡысҡырам: «Тапайҙар мине!.. Тапайҙар!..»

Унан һуң күҙ алдым томанға әйләнде, тәндәрем ауырайҙы. Тар ҡабыҡ эрйәлә ятҡан кеүек булдым.

Мин иртә менән баш ҡалҡытҡанда, әсәйем һаман минең баш осомда ултыра ине. Мәғүзә әбей ингәс, әсәйем:

— Бөгөн төнө буйы Апушым ауырып сыҡты. Шуның эргәһендә ултырып, керпек тә ҡаҡҡаным юҡ әле, — тине. Был һүҙҙәр минең ҡолағыма тоноҡ ҡына булып ишетелделәр. Ләкин улар миндә һис бер тәьҫир ҡалдырманылар, юрғанға һөйләгән кеүек тойолдолар. Шул ваҡыт әллә ниңә атайымды күргем килде: «Әсәй, атайым ҡайҙа?» — тинем. Ул миңә яуап ҡайтарманы. Башын икенсе яҡҡа борҙо ла, кисәге шикелле, күҙҙәрен һөртөп алды. Әсәйемдең был ҡыланышына Мәғүзә әбейҙең төҫө үҙгәрҙе. «Эсәһе ризыҡтары шундалыр шул, балаҡайым», — тине. Минең башым ул һүҙҙәргә мәғәнә бирә алманы. Башым тағы ла сатнап китте, тәнде тағы ҡыҙыулыҡ ҡапланы, тағы түбәгә мендем, тағы тәгәрмәстәр араһына ҡыҫылдым, тағы ҡысҡырҙым, тағы әсәйемде баш осонда күрҙем...

Мин ауырый инем.

## VI

Мин терелгәйнем инде. Әсәйем әллә ҡайҙан ашығып ҡайтты ла:

— Күсенәбеҙ, балаҡайым, — тине. Мин аптырап ҡалдым. Ҡайҙа күсенәбеҙ?.. Ниңә күсенәбеҙ?.. Атайым өйҙә юҡ, ә әсәйем менән беҙ икәү күсенәбеҙ, имеш!.. Мин шул һорауҙарға яуап ҡайтарып бөтә алманым, әсәйем йыйына ла башланы.

Иҫке бишмәтемде кейеп, тышҡа сыҡҡанда, бөтә әйберҙәр бәләкәй арбаға тейәлеп ҡуйылғайны. Әсәйем теге мин өҫтөндә йоҡлай торған ҙур һандыҡты ғына һөйрәп тышҡа сығарып маташа ине. Бәләкәй арбаны

тартып ҡапҡанан сыҡҡанда, атайым иҫкә төштө, беҙ юҡта ҡайтыр ҙа асыуланыр төҫлө тойолдо.

Урамға сыҡҡас, тротуар эргәһендәге канау буйлап киттек. Башта бәләкәй арба артынан бер ҙә ҡалышмай барһам да, магазин тәҙрәләренән күренеп торған төрлө матур әйберҙәр минең уйҙарымды бөтөнләй башҡа яҡҡа тартып алып киткәндәр, күрәһең, әсәйем, бер тыҡрыҡтан ҡайырылғанда, туҡтап:

— Апуш!.. Апуш!.. — ти миңә ҡысҡыра ине.

Беҙ ауыр итеп асылған тимер ҡапҡаның бәләкәй ишегенән индек тә, һулға боролоп, бер мунса төҫлө бәләкәй генә тәҙрәле өйгә туҡталдыҡ.

Беҙ килгән йорт Шәмсетдин бай йорто ине.

Әсәйемдең кухарка булып килеүен бер аҙнанан һуң ғына белдем, сөнки мине бында кухарка малайы тип йөрөтәләр ине. Тик әсәйем генә Апуш тип өндәшә торғайны.

**?**

1. Апуштың ауырып китеүенә нимә сәбәп була?
2. Уның атаһы ҡайҙа, тип уйлайһығыҙ?
3. Атаһы ҡулға алынғас, Апуштың әсәһе ҡайҙа, ниндәй эшкә урынлаша?

## VII

Бер көн, йорттағы шау-шыуҙы ишетеп, йүгереп сыҡһам, Шәмсетдин байҙың ҡарт ҡатыны әсәйемде әрләп ята:

— Хәйерсе, аристан бисәһе, беҙгә килгәс кенә тамағың туйҙы бит!..

Әсәйем, был һүҙгә ҡаршы бер һүҙ ҙә өндәшмәй башын түбән һалып, тик кенә тора ине. Мин сыҡҡас:

— Үксәңде күтәр, малайың менән хәҙер үк тейәнеп сығып кит, күҙемә күренмә, хәйерсе! — тип бармағын янаны ла, ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап, коридорға менеп китте.

Мин ҡарап торҙом да әсәйемде барып ҡосаҡланым. Ул, мине ҡосаҡлап алып, үкһеп иларға тотондо.

Бер көн дворник Ғәйнетдин малайын, мине мыҫҡыллаған өсөн, таш менән бәреп илатҡайным. Әсәйемде әрләгән өсөн теге бай ҡатынының да ауыҙына бәрерҙәй булдым, ләкин бәрә алманым. Әллә ниҙән күңелем шикләнде.

Иртәгеһен, тағы тейәнеп, кире теге подвалға ҡайттыҡ. Беҙ ҡайтҡанда, унда ирле-ҡатынлы бер ғаилә тора ине. Ишек төбөнә әйберҙәрҙе ҡуйҙыҡ та мейес эргәһенә урынлаштыҡ. Ҡайтып бер-ике көн торғас та, әсәйем ауырый башланы.

## VIII

Беҙҙең фатирҙашыбыҙ Һибәт ағай типографияла хәреф йыйыусы ине. Әсәйем үлгәс тә, ул мине типографияға алып барҙы, ҡулымдан етәкләп контораға алып инде. Унда киң ҡыҙыл битле, йыуан ҡорһаҡлы бер урыҫ менән һөйләште лә мине хәреф йыйыу бүлегенә алып инде. Тегендәге эшселәргә:

— Бына был теге Ҡотош ағайҙың улы була инде. Ул үҙе Себергә һөрөлдө, бисәһе яңы ғына вафат булды, хәҙер был малайҙың бер кеме лә юҡ, — тине. Реал[1] артына баҫҡан кешеләрҙең барыһы ла миңә әйләнеп ҡаранылар. Бер нисәһе, ҡулдарындағы верстаткаларын[2] ташлап, беҙҙең янға килделәр ҙә мине әйләндереп алдылар. Бер тәбәнәк кенә ҡара эшсе:

— Ҡотош малайы, тиген, ә!.. — тип башын сайҡаны ла арҡамдан һыйпап ҡуйҙы. Уның ҡыланышы миңә бик яғымлы тойолдо. Уның муйынына аҫылынып, бөтә эс серемде һөйләгем һәм илағым килде.

Иртәгеһенә, бик иртә тороп, Һибәт ағай менән типографияға киттек. Минең йоҡо ла йүнләп туймағайны. Юл буйынса иҫәңгерәп килдем. Беҙ килеп ингәндә, типографияла эшселәр күп ине. Мине бер мөйөшкә килтерҙеләр ҙә туҙылған хәрефтәрҙе, квадраттарҙы, линейкаларҙы рәтләргә ҡуштылар. Тәүҙә был эш миңә бик ят тойолһа ла, һуңға табан өйрәнеп киттем. Бер урында сәғәттәр буйынса бер ҡуҙғалмай эшләй инем. Таң ҡараңғыһынан төн ҡараңғыһына тиклем минең эш шул туҙылған хәрефтәр өҫтөндә ине. Күп ваҡытта минең эш иртә бөтһә лә, Һибәт ағайҙы көтөп, төнгө сәғәт 10—11-гә тиклем уның эргәһендә болара инем, сөнки фатир бик алыҫ. Миңә яңғыҙ ҡайтыуы ҡурҡыныс, икәү ҡайтыуы күңеллерәк тә була ине.

---

[1] *Реал* — типографияла ҡулланыла торған өҫтәл-шкаф.

[2] *Верстатка* — типографияла хәреф йыйғанда ҡулланыла торған инструмент.

Мин типография эшселәренә тамам үҙләшеп киттем. Улар мине «Бәләкәй Ҡотош» тип йөрөтәләр.

Бер байрам көндө беҙгә миңә таныш булмаған бер кеше килде. Уның сәстәре оҙон, төҫөнә, йәшенә ҡарағанда, һаҡал-мыйыҡтары йөҙөнә бер ҙә ятып бөтмәй, бик мәҙәк кенә тойола ине. Ул, Һибәт ағай менән аҙыраҡ һөйләшкәндән һуң:

— Был — Ҡотош ағайҙың малайы буламы ни инде? — тип миңә табан бер һөҙөп ҡарап алды. Был һүҙгә Һибәт ағайҙың йөҙөндә йылмайыу күренде.

— Мин бит уны үҙ малайым кеүек күрәм, — тине, бер миңә, бер уға ҡарап, теге кешенән яуап көткән шикелле, һүҙһеҙ ҡалды.

Теге кеше тағы ла миңә бер һөҙөп ҡараны ла:

— Был булдырыр, тиһеңме инде? — тип урындыҡҡа яртылаш ҡырын ятты, бармағы менән һаҡалын тарарға тотондо. Уның күҙҙәре түшәмгә ҡарап торалар ине. Һибәт ағай, өҫтәлгә иңкәйә төшөп:

— Улмы?.. Улмы?.. — тип һүҙен бөтөрмәҫтән, янсығын алып, тәмәке төрөргә тотондо. Бик ҡыҙыу төрөп, ирене менән уны сылатҡандан һуң, бармағы менән шымартып: — Ҡотош малайы тиҙәр уны, — тип тәмәкеһен тоҡандыра башланы. Ул кеше беҙҙән төн урталарында ғына китте.

Бер байрам көндө йортта малайҙар менән бура уйнап йөрөй инек, Һибәт ағай мине саҡырып индерҙе лә бер төргәк ҡағыҙ күрһәтте:

— Бына һин ошо ҡағыҙҙарҙы ал да, баҡсаға барып, кешенең күп йөрөгән еренә берәм-берәм ташлап кит! — тине.

— Ул ҡағыҙҙарҙы ниңә унда ташларға? — тинем.

Ул:

— Шаулама, әйткәнде тыңла, унан һуң молодец булырһың һин! — тине.

Мин ҡағыҙҙарҙы ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып барғанда, ҡараңғы төшкән, баҡсаның төрлө урындарында ҙур-ҙур фонарҙар яҡтыртылған, бөтә баҡсаны халыҡ тулҡыны баҫҡайны. Уларҙың әйтеүенсә, был ҡағыҙҙарҙы аҙлап-аҙлап эскәмйә аҫтында ҡалдырырға, ҡалғандарын урам мөйөштәренә ырғытып китергә ине. Мин быларҙы бер нисә минут эсендә таратып бөттөм. Мин ҡайтырға

әйләнгәндә, таратылған йәшелле-ҡыҙыллы бәләкәй ҡағыҙ киҫәктәре бик күп кешеләрҙең ҡулдарында күренә ине. Ул арала полицейскийҙар йүгергеләй башланы. Мин, быларҙы күреү менән, баҡсанан тиҙ генә сығып тайҙым. Ҡалған ҡағыҙҙарҙы бер ҡараңғы мөйөштә ырғытып ҡалдырҙым. Ҡайтып, подвалға ингәндә, әлеге мыйыҡлы, һаҡаллы кеше менән Һибәт ағай баҫҡыс төбөндә мине ҡосаҡлап ҡаршы алдылар.

— Вот молодец, действительно Ҡотоштоң копияһы икән! — тип мине күтәреп өйгә индерҙеләр.

?

1. Һибәт ағай Апуш тураһында ниндәй хәстәрлек күрә?
2. Типография эшселәре уны нисек ҡабул итә?
3. Апуштың революцион эштәге тәүге аҙымы ни менән башлана?
4. «Вот молодец, действительно Ҡотоштоң копияһы икән!» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? Ни өсөн Апушҡа улай тип әйтәләр?

## IX

Немецтар менән Рәсәй батшаһы араһындағы һуғыштың иң ҡыҙған миҙгелдәре ине. Теге мыйыҡ-һаҡал тағып йөрөүсе Бәҙри ағай менән дә беҙ күптән дуҫлашып алғайныҡ инде, сөнки мин уларҙың күп йомоштарын башҡара, күп ҡағыҙҙарын тарата инем. Хатта типографиянан хәрефтәр ташыу, заводтарға барып, йәшерен прокламация таратыу кеүек ҡыйын эштәрҙе лә өҫтөмә алған саҡтарым була ине. Шул арҡала эшселәр биҫтәһендә мине белмәгән бер кеше лә юҡ ине. Ҡайҙа ғына барһам да, мине аулаҡ мөйөштәргә алып китәләр, бөтә яңылыҡтарҙы, справкаларҙы минән алалар ине. Шундай йомоштар арҡаһында бер-ике көн мин хеҙмәткә бара алманым. Шуның өсөн теге ҡыҙыл битле йыуан кеше, саҡырып, миңә расчет бирҙе: типографиянан сығарылдым. Был миңә бик ҡыйын булды. Өйрәнгән эштән бер ҙә айырылып торғом килмәне, бер аҙнанан һуң Һибәт ағай мине гәзит идаралығына алып барҙы. Унда бер ябыҡ ҡына һары йөҙлө, шаҙра кеше менән һөйләшеп, миңә бер нисә номер гәзит алып бирҙе:

— Был нимә? — тине.

Мин ҡағыҙға оҙаҡ ҡарап торҙом да:

— Листовка, — тинем.

— Кем бирҙе.

— Кассир.

— Кассир?..

Шулай тине лә, мине ҡалдырып, сығып китте. Тыштан ишек шалтырап бикләнде. Мин айнып етә алманым, теге полицейский менән кассир инделәр. Минең яңаҡтар ут шикелле яна, аяҡтар ҡалтырай ине. Прокламацияны кассирға күрһәтте:

— Быларҙы һин бирҙеңме? — тине. Кассир, текләп ҡарап, күҙ йөрөттө лә:

— Юҡ, һис... — тине, йөҙө ап-аҡ ҡағыҙ шикелле булды, миңә ҡарап аптырап ҡалды.

Бер нисә минуттан беҙ часта булдыҡ. Улар минән күп һорашып торманылар, исем-фамилиямды, адресымды яҙҙылар ҙа ҡайтарып ебәрҙеләр. Мин частан сыҡтым да туп-тура өйгә йүгерҙем. Мин бер ҡараңғы урамдың тыҡрығынан әйләнгәндә, артымдан ҡара халатлы бер кеше ҡыҙыу-ҡыҙыу атлай ине.

## X

Мин, ҡайтып, ишекте тиҙ генә асып ингәндә, Бәҙри ағай менән Һибәт ағай әллә ниндәй ҡағыҙҙар аҡтарып ултыралар ине.

— Эш насар, һиҙҙеләр!.. — тип урталарына атылдым. Бәҙри ағай:

— Ниңә тура бында ҡайттың? — тип минең муйынымдан тотоп һелкетте лә таратып ташлаған ҡағыҙҙарын тиҙ генә йыйып мейескә ырғыта башланы. Һибәт ағай ут төртөп маташа ине. Минең башымдан: «Ниңә тура бында ҡайттым икән?» — тигән уй йүгерҙе, бөтә тәнем ҡалтырай ине. Шул арала берәү килеп, ишек ҡаҡты, урыҫсалап:

— Асығыҙ! — тине. Әллә ниндәй ҡарлыҡҡан, иләмһеҙ бер тауыш ине. Бәҙри ағайҙар бер урында ҡатып ҡалдылар.

— Ни эшләргә, ҡайҙа барырға? — Мин бер мөйөшкә һыйындым. Шул ваҡыт Бәҙри ағайҙың йөҙөндә әллә ниндәй бер ҡурҡыныслы асыу уйнай ине. Ул, барып,

Һибәт ағайҙы тотто ла ҡолағына ғына: «Ни булһа ла булһын, асырға кәрәк. Бөтә ғәйепте мин үҙ өҫтөмә алам, тик комитеттың ҡайҙалығын ғына белдермәгеҙ!» — тине. Әллә ниндәй көс менән ишек келәһенә йәбеште лә шатырлатып асып ебәрҙе. Йәшен тиҙлеге менән халатлы өс кеше килеп инде...

Төн уртаһында барыбыҙ ҙа жандармский управлениела инек.

?
1. Апуш полицейский ҡулына нисек эләгә?
2. Ни өсөн полицейскийҙар Апушты кире ҡайтарып ебәрәләр? Уның хатаһы нимәгә килтерә?
3. Ошондай хәлдә һеҙ ни эшләр инегеҙ?

## XI

Сәрби еңгәм шул төндә үк ҡайтып китте. Мине бер аҙ торғандан һуң сығарҙылар.

Һибәт ағайҙы порукаға алдылар. Бәҙри ағай ҡайҙалыр оҙатылды.

Был ваҡиғанан һуң беҙҙең тормош кәртәләнде: миңә гәзит һатырға рөхсәт итмәнеләр. Һибәт ағай матбағанан[1] ҡыуылды — бер ҡайҙан да килер ер юҡ, көнө буйы өйҙә ултырабыҙ. Мин бер нисә тапҡыр идараға барып ҡараным. Икенсе тапҡыр ундай эш эшләмәм тип ялынып та ҡараным — булманы. Башҡа кешеләр ҙә беҙгә килмәй башланылар. Ашарға аҙыҡ та бөттө, аҡса ла юҡ. Сәрби еңгәм генә, байҙарға барып эш эшләп, кер йыуып, бер аҙ ашарға тапҡан була. Өс дастуйын кешегә уның тапҡаны ғына, билдәле, етмәй. Һибәт ағай, эш эҙләп, ҡаланың аҫтын-өҫтөн ҡалдырманы, ләкин эш таба алманы. Ауылға китергә уйлашһаҡ та — булманы. Сөнки уға ҡаланан сығырға рөхсәт бирелмәй. Бер көн Һибәт ағай:

— Былай булһа, эш насар. Һеҙ икәү ауылға китегеҙ. Сәрбиҙең һөнәре бар. Йәй көнө ураҡ урырһығыҙ, ҡара эш эшләрһегеҙ, ҡыш булһа, ваҡ-төйәк эш менән шөғөлләнерһегеҙ, шунда мине лә онотмаҫһығыҙ, — тине.

Июнь урталары ине. Бәләкәй арбаға әйберҙәрҙе тейәп, сәйнүкте билгә тағып, Сәрби еңгәм менән йәйәүләп

---

[1] *Матбаға* — типография.

сығып киттек. Шул саҡта әсәйем менән Шәмсетдин бай йортона күскән ваҡыттар күҙ алдыма килде. Сәрби еңгәмдең йөҙө лә, әсәйемдең шул ваҡыттағы йөҙө төҫлө, ҡайғылы һәм моңһоу ине.

## XII

Беҙ Сәрби еңгәм менән, йәй буйы баярға ашлыҡ урып, көҙ буйы байҙарға көнлөккә иген һуғып, ҡышҡа табан Һибәт ағайҙың ауылына ҡайттыҡ һәм шунда ҡалырға булдыҡ. Сөнки Һибәт ағай киткән саҡта уҡ ҡалаға ҡайтмаҫҡа, ауылда ҡалырға ҡушҡайны.

Сәрби еңгәм ҡомған, силәк төпләргә, йөҙөк, алҡа ҡаштары эшләргә оҫта ине. Беҙ был эште мунсала эшләй инек. Ул эшләй, мин булышам. Май, ҡатыҡ мул. Тик Һибәт ағайҙың ғына юҡлығы беҙгә бик яманһыу тойола ине.

Шулай беҙҙең ҡыш үтте, яҙ етте, ҡояш, юғары күтәрелеп, беҙгә көлөп ҡарай башланы. Хәҙер инде ҡараңғы мунса эсендә оҙаҡ ултырғы килмәй ине. Ирендерә, ҡояш тышҡа тарта. Сәрби еңгәм дә яҙға табан бер аҙ үҙгәрә һәм ябыға төштө. Һәр ваҡыт моңланып, көйләп ултыра торған булды. Минең күңелем уның моңдарын күтәрә алмай. Мин, уңай табыу менән, ауыл малайҙары янына сығам. Улар менән уйын ҡорам. Оҙаҡ йөрөһәм, Сәрби еңгәм тағы күңелһеҙләнә, яманһыулай башлай.

— Китәһең дә юғалаһың, бында бер үҙемә күңелһеҙ,— ти. Бына мин уның моңланыуын яратмайым шул. Ҡалай ғына булһа ла, берәй уйын табып, уны көлдөрөргә, күңел асырға тырышам. Кис менән беҙҙең янға әбейһәбейҙәр, ҡыҙҙар килеп ҡуналар. Улар менән, билдәле, бик күңелле була. Төн буйы әкиәт һөйләп үткәрәбеҙ. Ҡайһы ваҡытта, улар йоҡлағанда ла, Сәрби еңгәм менән икәү йоҡлай алмайбыҙ. Шундай тын саҡтарҙа ул ҡайғылы була. Миңә белдермәй генә илап та ала, буғай. Ул, минең йоҡлай алмағанды һиҙеп булһа кәрәк, минең менән һөйләшә башлай:

— Насип булһа, ҡараға баҫҡас та, ҡалаға ҡайтайыҡ инде, — ти.

Шулай, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп, Һибәт ағайҙы һағынып, оҙаҡ һөйләшкәндән һуң ғына, йоҡоға китәбеҙ.



## XIII

Мин, һуң ғына йоҡоға китһәм дә, бик иртә уяндым. Тороп тышҡа сыҡҡанда, бөтә ауыл йоҡлай, ҡояш саҡ күтәрелеп килә ине. Һауа сиктән тыш матур, ҡояш тап яҙ ҡояшы булып сыҡҡан. Ауыл яҙының йәмле иртәһен күреү менең өсөн беренсе тапҡыр ине әле. Йортҡа сыҡҡас, тәнгә еңеллек йүгерҙе. Тиреҫ башында бөкрәйеп ятҡан Аҡбайҙы саҡырҙым да уның менән бик оҙаҡ шаярҙым, уны һыйлар өсөн, өйгә инеп, икмәк алып сыҡтым. Унан ҡалған валсыҡтарҙы тауыҡтарға һибеп ашаттым. Яңы сыҡҡан ҡояш йылыһына йылынып, аҡрын ғына көйшәп торған ала һыйырҙың йөнөн һыйпаным. Арҡаһы менән ҡояшҡа ҡыҙынып торған туры атҡа, хужаһы ҡушмаһа ла, әүеҫлектән йәшел бесән төшөрөп һалдым. Ул, тәүҙә йәшел бесәнде еҫкәп, бер тапҡыр бик ҡаты бышҡырҙы ла, араларынан тәмлерәктәрен һайлап, ялҡау ғына сәйнәй башланы.

Унан һуң һарай башына юғарыраҡ менеп ултырғас, яңы ғына ҡарҙан әрселә башлаған тау биттәрен ҡарағым килде.

Алыҫта, ҡарҙар эсендә, шыйыҡ ҡына томан аша күгәреп, урман күренә. Яртылаш томанға төрөлгән бе-

йек тау баштары яҙғы ҡояш аҫтында тағы ла матурыраҡ, тағы ла серлерәк булып һөҙөлөп торалар.

Мөрйәләрҙән сыҡҡан шыйыҡ төтөндәр иртәнге тымыҡ һауа менән ауыл өҫтөнә йәйелгәндәр. Уларҙың ҡайһы берҙәре, ҡояш нурына ҡаршы алтынланып, матур болоттар кеүек, ялтырап торалар. Ауыл тын, ауыл йоҡлай ине.

? 1. Апуш менән Сәрби еңгә ни өсөн ауылға ҡайталар һәм унда нисек йәшәйҙәр?
2. Апуштың ауылдағы тормошо тураһында һөйләгеҙ.

## XIV

Яҙғы юл аҡ ҡар өҫтөнән, бөгәрләнгән ҡара йылан кеүек, тау буйлап әллә ҡайҙарға, алыҫтарға, һуҙылып киткән. Ана, юлда бер йәйәүле кеше күренә. Ул, алыҫтан ҡарағанда, себен кеүек кенә ҡыбырлай: ул ашығыпашығып ауылға табан атлай.

Әле ауыл ҡуҙғалмаған. Һәр кем яҙғы тәмле йоҡо эсендә, ә ул юлсы, меҫкен, тәмле йоҡонан мәхрүм. Ул теге ауылдан бик иртә ҡуҙғалғандыр. Йоҡоһо бик тәмле булһа ла, нужаһы тыныслыҡ бирмәгәндер. Иртәнге мәлдә был юлды үтеп ҡалырға уйлағандыр моғайын, меҫкенем.

Мин уға бик оҙаҡ ҡарап торҙом. Ул һаман ҡыбырлай, һаман ауылға яҡыная. Ул ауылға килеп инде, ағаслыҡтарға йәшенде.

Минең иғтибарымды йүнәлтерлек башҡа нәмә күренмәгәс, ҡыйыҡ башынан төшөп, урамға, ҡапҡа алдына, сыҡтым.

## XV

Түбән ерҙең ҡарҙары ireп, ҡара ергә әйләнһә лә, ҡаралтылар аша урамға өйөлгән бейек көрттәр, һаман да яҙғы ҡояшҡа бирешмәгән шикелле, ҡалҡыу булып яталар. Шулар минең күңелгә ауырлыҡ бирҙеләр. Минең ҡыҙыу ҡояш булғым, шуларҙы тиҙерәк кенә иретеп бөтөргөм килде. Шул тиле уй артынан Сәрби еңгәнең: «Ҡараға баҫҡас та, ҡалаға ҡайтырбыҙ», — тигән һүҙе хәтергә төштө. Бөтә уй ҡалаға, үҙебеҙҙең таныш под-

валға йүгерҙе. Уның һәр бер кирбесе, һәр бер ватығы, емереге күҙ алдымдан үтте: бына унда Һибәт ағай яңғыҙы йөҙ түбән төшөп ятҡан, ул минең кеүек йоҡоһоҙ, ул беҙҙе һағына, яманһыулай. Бәлки, ул да, яҙ булғас, подвалдың һауаһынан тарығып, тышҡа сыҡҡандыр ҙа, ғәҙәте буйынса, ҡулын артҡа ҡуйып, һыҙғырып йөрөй торғандыр әле...

Шул минут көрт өҫтөнән берәү йүгереп төштө лә минең алға килеп туҡтаны.

— Бәй!..

Әле генә минең уйымда кәүҙәләнгән Һибәт ағай, подвалда йөҙ түбән уйланып ятҡан Һибәт ағай, ҡулдарын артҡа ҡуйып, һыҙғырып йөрөгән Һибәт ағай, минең алдымда тора ине. Минең күҙҙәрем быға ышанманы, ҡапыл артҡа һирпелдем. Ул миңә ташланды:

— Апуш!.. Һин бит!.. — тине.

Күҙ алдым томаланғайны. Бер аҙҙан һуң ғына, айнып, уны ҡосаҡлап алдым да илай башланым. Уның да күҙҙәренән бер-ике бөрсөк йәш тәгәрәп минең түшемә төштө.

Ул юлда бик ҡыҙыу килгән булһа кәрәк. Оҙон сәсе араһынан буй-буй тирҙәр ағып, яңаҡ буйлап күкрәктәренә тиклем төшкәндәр, елкәһенән пар сыға, яғалары ысҡынған, түше асыҡ, әле генә бер ҡанлы һуғыштан сығып килгән батыр төҫлө күренә. Ләкин төҫө, ниңәлер, асыҡ һәм шат, эсенән әллә нимә ташып сығып килгән шикелле.

Ул, әллә ниндәй ел менән өйрөлтөп, мине йортҡа алып инде.

— Сәрби ҡайҙа?.. — тине. Ҡабаланып, һүҙһеҙ-ниһеҙ генә Сәрби еңгәм янына индек. Ул, урынынан тороп, саҡ кейенеп кенә бөткәйне.

Ул аптырап ҡалды.

Өй эсендә шау-шыу, илау, шатланыу китте. Һибәт ағай, сисенеп бөтөр-бөтмәҫ, эсендә ташып, аҡтарылып сығып килгән нәмәһен бер юлы түгергә ашыҡты:

— Беләһегеҙме?.. Мин бит ҡаланан төнгө сәғәт 12-лә сығып киттем. Унда бөтөнләй икенсе донъя.

— Йә, йә, ни бар? — Барыбыҙ ҙа уның ауыҙына ҡараныҡ.

— Батшаны төшөрҙөләр! Хәҙер слабуда!..

— Батшаны төшөргәндәр, ти!..

Минең аҡыл быны һис бер кәртәгә һыйҙыра алмай ине.

Сәрби еңгәм, минең туҙылып киткән аҡылға өҫтәп:

— Юҡтыр ҙа, булмаҫ!.. — тине. Әле генә көтмәгәндә Һибәт ағайҙы күреүгә шашып ҡалған, йүнләп айнымаған аҡылға был да өҫтәлгәс, аңымдан бөтөнләй ситтә ҡалдым.

## XVI

Мин сәй янында ғына аҡылыма килдем. Ул Бәҙри тураһында ла һөйләй башлағас, әле мине тотҡан полицейскийҙар күҙ алдыма килде.

— Полицейскийҙар ни эшләйҙәр?.. — тинем.

Минең был беренсе һүҙем булды.

— Улар инде хәҙер быш-быш! — тине.

Һибәт ағайҙың ҡаланан алып килгән яңылығы йәшен тиҙлеге менән бөтә ауылға таралып өлгөрҙө. Беҙ, сәй эсеп, урамға сыҡҡанда, беҙҙең ҡапҡа төбөндә әллә ни тиклем халыҡ йыйылғайны. Барыһы ла Һибәт ағайҙы һырып алдылар. Йөҙҙәрсә күҙ уның ауыҙына ҡараны.

— Шулай уҡ ысынмы икән?

— Яңы батша кем булыр икән?

— Бәлки, буштыр әле ул!

— Былай булғас, һуғыш та туҡталыр инде.

— Исмаһам, һуғыш ҡына бөтһә ярар ине.

Кешеләрҙең ауыҙында шундай һүҙҙәр әүәләнә ине, ләкин уларҙың барыһы ла ниндәйҙер бер шөбһә, икеләнеү менән тамам булалар ине.

Кискә ҡарай ҡаланан тағы ла яңы хәбәрҙәр өҫтәлде. Халыҡ күңелендәге шөбһәле төйөндәр сиселә төштө. Урамда икешәр, өсәр кеше йыйылып торған ерҙә шул яңылыҡ — батша төшөрөү тураһында һөйләнә ине.

Беҙҙең өйҙән төнгә тиклем кеше өҙөлмәне. Һибәт ағай һаман һөйләй ине.

Иртәгеһен беҙ өсәү ҡала юлында инек.

Беҙҙең аҙымдар шул тиклем еңел ине. Арттан көслө ел өргән кеүек йәки ҡаланан беҙҙе бер магнит тартҡан кеүек тойола ине. Һибәт ағайҙың күҙҙәре аяҡ аҫтындағы юлға ҡарамайҙар, ҡалаға табан осалар ине. Бик алыҫтан ҡаланың көмбәҙҙәре яҙғы ҡояшҡа ялтырап күренгәс, Һибәт ағай киң бер һулыш алды ла:

— Эйе, унда революция бара, — тине.

? 1. Хикәйәлә ниндәй осор сағылдырыла?
Был осорҙа эшселәр нисек йәшәйҙәр?
2. Әҫәрҙә ниндәй ваҡиға һүрәтләнә?
3. Әҫәр ни өсөн «Бәләкәй Ҡотош» тип атала?
4. Түбәндәге план буйынса изложение яҙығыҙ:
   1) Апуш ниндәй ғаиләлә йәшәй?
      а) Атаһының кем булыуы һәм ҡайҙа эшләүе;
      б) Әсәһенең күргән ғазаптары;
      в) Апуштың етем ҡалыуы.
   2) Апуш революцион көрәшкә нисек ҡатнашып китә?
   3) Үҙенә тапшырылған эштәрҙе ул нисек үтәй?

## Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү

Кешеләр үҙ-ара аралашҡанда ҡулланыла торған ғәҙәттәге сәсмә телмәр **проза телмәре** була. Билдәле бер үлсәмгә, яңғырашҡа нигеҙләнгән, юлдарға һәм куплеттарға бүленгән телмәр — **шиғри телмәр**. Әҙәбиәттә тормош күренештәрен, геройҙарҙы һәм уларҙың яҙмыштарын ентекләберәк сағылдырғанда күбеһенсә проза телмәре ҡулланыла, ә геройҙарҙың эске кисерештәре ғәҙәттә шиғри телмәр менән бирелә. Проза телмәре менән яҙылған әҫәрҙәр нәҫер, хикәйә, роман булырға мөмкин. Шиғыр, йыр, мәҫәл, поэма кеүек әҫәрҙәр шиғри телмәр менән ижад ителә.

Проза телмәрендә һеҙ хикәйәләү менән осрашырһығыҙ. Тормоштағы ваҡиғалар, унда ҡатнашыусы кешеләрҙең эштәре һәм кисерештәре тураһында эҙмә-эҙлекле итеп һөйләү **хикәйәләү** тип атала.

Беҙ «Бәләкәй Ҡотош» әҫәрен уҡып, ундағы ваҡиғалар һәм ҡатнашыусы образдар менән танышабыҙ. Яҙыусы уҡыусыға Апуштың атаһының ҡулға алыныуы, әсәһенең ауырып үлеүе, Апуштың революцион эшкә ҡатнашыуы, листовкалар таратыуы тураһында хикәйәләй.

Рәшит Назаров

## БАШҠОРТ

*Кисәгең дә, бөгөнгөләй,*
*Күңелемә яҡын минең.*

*М. Кәрим*

Бөгөнгөләй, уның үткәне лә
Уйылып ҡалған Урал ташына...
...Ҡурай осонан һыҙылып тамған моңо
Ал ҡан булып ташҡа яғылған.
Ҡайғыларҙан ҡайылып сигелһә лә
Тирмәләрҙең һоро биҙәге,
Йөрәгендә ятҡан эйәрле ат
Шылтыратҡан, сапсып, йүгәнен.
«Уралым!» — тип оран ташлап ауһа,
Күмгәндә лә тупраҡ-ер үҙен,
Йөрәгенән сығып, эйәрле ат
Сапҡан яуға,
Ир данына биреп теҙгенен.
Үткәнеләй, бөгөнө лә данлы,
Тик ҡайымай данды ҡайғы, ҡан:
Яурынында — бәхет ҡошо һайрай,
Эйәренә ҡунып килә таң!

?

1. Шиғырҙың тәүге ике юлы ниндәй халыҡ йырҙарын иҫкә төшөрә?
2. Эйәрле ат образы шиғырҙа ниндәй мәғәнәгә эйә? Был образ менән ниндәй башҡорт халыҡ мәҡәле күҙ уңында тотола?
3. Аҙаҡҡы дүрт юлдың мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ.

Вафа Әхмәҙиев

## УҠЛЫҒАЯ

Монументтай күкрәк киреп,
Сәләм биреп болоттарға,
Мәңгелеккә төйәк булып
Ыласындай хөр ҡоштарға,
Ғорур тора Уҡлығая.

Уҡлы ҡая?!
Оҡшағанмы әллә уҡҡа,
Аталғанмы шулай юҡҡа?..
— Юҡҡа түгел, Урал өсөн
Барған саҡта ҡаты яуҙар,
Ҡалҡан булып баҫҡан икән
Йән асыуҙан хатта тауҙар.
Ҡаяларҙың күкрәгенә
Ямғыр булып уҡтар яуған.
Дошман ауған. Ҡая торған.
Ир-егеттәр яуҙы борған,
Ҡалҡан булып ҡая торған.

Ҡая торған! Уҡтарын да,
Туптарын да ҡаҡҡан кире,
Торған уға ғәйрәт биреп,
Ут эсендә ятҡан ере,
Үҙе тамыр тартҡан ере...

Халҡым кеүек, һәйкәл булып
Быуаттарҙан быуаттарға,
Төйәк булып мәңгелеккә
Ыласындай хөр ҡоштарға,
Ғорур тора Уҡлығая,
Дошманына утлы ҡая.

?

1. Башҡортостандың ҡайһы районындағы төбәк тураһында һүҙ бара?
2. «Ҡалҡан булып баҫҡан икән йән асыуҙан хатта тауҙар» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
Был һорауға яуап биреү өсөн, «Уҡлығая» риүәйәтенә иғтибар итегеҙ. «Был хәл Бүгәсәү яуы мәлендә булған. Әбей батша ғәскәре менән алышта бик күп башҡорт яугиры ҡырылған. Ни өсөн тигәндә, ғәскәр мылтыҡ, туп (пушка) менән ҡоралланған, ә башҡорттарҙа уҡ-һаҙаҡ ҡына икән. Шунан улар Еҙем һыуы буйындағы бер мәмерйәгә йыйылғандар. Йыйылғандар ҙа кәңәш-төңәш иткәндәр.
— Уҡ менән туп бер түгел, — тиешкәндәр.
— Тупҡа ҡаршы туп кәрәк,
Бергә тупланыр кәрәк,
Бергә-бергә тупланып,
Яуға ут һалыр кәрәк, — тигән бер сәсән.

Шул һүҙ буйынса, бер елле имән тапҡандар. Унының үҙәге ҡыуыш булған. Шуны таҙартып, тимер ҡоршауҙар һуғып, эсенә дары тултырып, йәҙрә һалып, төйгәндәр ҙә табын ҡәлгәһенә төҙәп, сиркәү манараһын сәсрәтә атҡандар. Хәҙер ҙә шул мәмерйәнән туп йәҙрәләре, уҡ башаҡтары табыла. Шуға уны Уҡлығаяр тип йөрөтәләр».

3. Шиғырҙың һуңғы юлдары нимәне аңлата? Шул күҙлектән икенсе бер шағирҙың, Вафа Әхмәҙиевтең яҡын дуҫы, һабаҡташы һәм ҡәләмдәше Ирек Кинйәбулатовтың «Уҡлығая» шиғырындағы түбәндәге юлдарға аңлатма бирегеҙ:

Ғорур Уҡлығая тағы-тағы
Хәтерләтеп ҡуя төҫөңдө.
Тауҙар хәтлем эштәр атҡарғанһың,
Шул ҡаялай булған өсөндөр.

Был шиғырҙың күренекле әҙип Әнүр Вахитовҡа бағышланыуын да иҫәпкә алығыҙ.

4. Шул ваҡиғалар хаҡында ололарҙан һорашығыҙ: иҫтәлектәрен (хәтирәләрен), риүәйәт, бәйет, таҡмаҡтарын яҙып алығыҙ.
Халыҡтан фольклор өлгөләрен йыйғанда шуны онотмағыҙ: ҙур әҫәрме, бәләкәйме, һәр береһенең аҫтына ҡасан, ҡайҙа, кемдән, кем яҙып алыуын теркәп ҡуйығыҙ. Өлгө:

**Алтмыш ике партизан бәйете**

Әкертен, ел, — бында ҡәбер,
Бында дуҫтар күмелгән:
Алтмыш ике партизандың
Ғәзиз ҡаны түгелгән.

Бейек тауҙың башында
Бағаналар ҡаҡҡандар.
Алтмыш ике партизанды
Аҡ бандалар атҡандар.

Еләк йыйған сағымда,
Еләктәрем түгелде.
Алтмыш ике партизан
Бында ергә күмелде.

Етәксеһе кем булған?
Төхфәтуллин Шакирйән,
Ярҙамсыһы — Фәтхелхаҡ
Алтмыш ике партизанды,
Фарман биреп, аттырған.

1950 йылда Салауат районы Таймый ауылы Зарипова Рәхимәнән Хәниф Сафин яҙып алған.

* * *

## Халыҡ йырҙарынан

Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға
Шыҡыйып та осоп талсыға.
Егет кенә булһаң, ай, батыр бул,
Батырлыҡтар менән дан сыға.

Атҡа ғына менһәң, бик сапма,
Ауыҙлығын уның ныҡ тартма.
Илкәйеңде баҫып яу ингәндә,
Атҡайыңа менмәй тик ятма.

Уймаҡ та ғына уймаҡ, ай, тау башы,
Һалҡын ғына булһа һыу башы.
Малың булмаһа ла, даның булһын,
Даны менән ҡиммәт ир башы.

* * *

Кеше ер йөҙөндә байыр өсөн йәшәмәй, ә бәхетле булыр өсөн йәшәй.

*Стендаль*

# Һигеҙенсе бүлек



*Илем бында:*
*Уның кешеләре*
*Һуңғы тынын алған сакта ла,*
*Үҙ посында калып,*
*йөрәктәрҙә*
*Бөйөк Ватан исемен һаклайҙар.*

Ғ. Сәләм

**М. ХӘЙ (Хәй Мөхәмәтйәров)**

**1911—1942**

**М. Хәйҙең көндәлек дәфтәренән**

**23/III—34.** Ишембайға килдем. Партком бюроһы булды, мине «Башҡортостан вышкаһы» газетаһының редакторы итеп билдәләнеләр.

**1/III—40.** Көндәлек бик кәрәк икән. Баштан күпме фекер, йөрәктән күпме хис үтте. Бөтәһен дә яҙа барырға кәрәк.

**3, 4, 5/III—40.** Район партконференцияһында делегат булып ҡатнаштым. Сығып һөйләнем. Бик күп иптәштәрҙән хат алдым. Иң яратҡаным Карнай хаты булды.

**12/III—40.** Ижевскиҙа дивизия политотдел газетаһында эшләй башланым.

**20/III—40.** Бикбайҙан хат алдым... Сәләмдең яңы шиғырҙарын тапҡандар. Сәләм һағындыра, уның булмауын уйлаһаң, йөрәк әрней.

**30/IV—40.** Хәрби ант ҡабул иттем. Шул тиклем шатлыҡлы һәм яуаплы. «Ант» тигән шиғыр яҙырға кәрәк.

**12/VI—40.** «Лейтенант Туимов иҫтәлегенә» тигән шиғыр яҙҙым.

**17/VI—40.** Мин әҙәбиәттән бер ваҡытта ла айырылмам. Бәлки, үлем генә айырыр мине. Шулай булғас, миңә армиянан тороп Башҡортостан әҙәбиәтенә юл алырға, армия менән башҡорт әҙәбиәте араһында Хәйҙең шиғри юлын һалырға кәрәк.

**8/IX—40.** Шиғыр яҙыу — яҙыусының ашау-эсеү кеүек кәрәк булған нәмәһе. Мин шиғырһыҙ бер ваҡытта ла йәшәй алмам. Кеше һыуһаһа, һыу эсмәйенсә, асыҡһа, ашамайынса түҙә алмай, яҙыусы яҙмайынса түҙә алмаҫҡа тейеш. Әгәр бындай түҙемһеҙлек булмаһа, бик насар, ул кеше яҙыусы түгел.

**22/XI—40.** Байрондың көндәлеген уҡыным. Ниндәй яҡшы кеше, ниндәй һәйбәт көндәлек. Әҙәбиәт уҡыу мине күтәрә, ҡанатландыра. Әҙәбиәтте уҡыуҙан өҙөлөргә ярамай, уны һәр көн уҡырға кәрәк.

**12/I—41.** Мин кисә рустың боронғо йырҙарын йырлаусы Никольская концертында булдым. Шундай гүзәл концерт. Иҫ китерлек. Рус халҡының мин белмәгән байлыҡтары күптер әле.

**14/VI—41.** Бөгөн команда приказ алды. Дивизия ҡайҙалыр бөтөнләй күсеп китә. Ҡайҙа икәне билдәһеҙ. Яҙыла башлаған шиғырҙарҙы яҙып бөтөрөп булманы... Хәрби тормош шулай инде ул... Бөгөн бында, иртәгә тегендә...

(Көндәлек ошо урында өҙөлә)

«Фәҡәт утыҙ йәше генә тулып уҙғанда шағир Мөхәмәтйәров Хәй Бөйөк Ватан һуғышы фронтында батырҙарса һәләк булып ҡалды. Ләкин тынғыһыҙ хеҙмәт, данлы ижад менән тулы ошо ҡыҫҡа ғына ғүмерендә лә ул үҙен күренекле шағир, ҙур йөрәкле кеше итеп танытырға өлгөрҙө, башҡорт поэзияһын бына тигән гүзәл поэтик әҫәрҙәр менән биҙәне». *Ғайса Хөсәйенов.*

## АУЫЛДА ҠУНАҠТА

Мин ауылда тыуҙым. Нәҡ алты йыл
Күргәнем юҡ ине ауылды.
Урман, һыуын һөйләп тораһы юҡ,
Хатта туҙанын да һағындым.
Эт, билдәле, өрөп ҡаршыланы,
Шығырланы ҡапҡа тауышы.
Ауылдың һәр кескәй күренешендә
Осраттым мин иҫке таныште.
Асыҡ сырайҙан һимеҙ ҡаҙға тиклем —

Барыһы булды минең алдымда.
Күрһен әйҙә беҙҙең тормошто, тип,
Фермаларға алып барҙылар.
Мин ауылда бары биш көн яттым,
Биш айлыҡ дәрт һәм көс алып ҡайттым.

? Шағирҙың ауылды һағынғаны һәм ҡайтып шатланғаны ҡайһы юлдарҙа айырыуса асығыраҡ бирелгән?

## ӨФӨГӘ ИҪТӘЛЕК

Ҡайһы ғына ергә барһам да мин,
Ниндәй генә һыуҙы эсһәм дә,
Йөрөгән юлым барыбер һиңә ҡайта,
Һине артыҡ яҡын һиҙгәнгә.
Детдомында үҫтем. Пионер булдым.
Тәүге мажаралы йылдарым
Һиндә үтте. Беренсе ҡат һөйҙөм.
Яҙҙым шиғырҙың тәү юлдарын.
Һиндә егет булып, вуз бөтөрҙөм,
Минең иң бәхетле уйҙарым
Тормошҡа ашты һиндә. Һаман әле
Ҙур ғүмер йәшәргә уйлайым.
Рәхмәт. Һине төҙөйөм, ҡалам, мин,
Шиғырымдан кирбес һалам мин.

? 1. Был шиғырҙа авторҙың үҙенең биографияһы ла сағыла. Шуны һеҙ ҡайһы юлдарҙа асығыраҡ күрәһегеҙ?
2. Шиғырҙың аҙаҡҡы ике юлын нисек аңлайһығыҙ?

## УЙҘАР

Халҡы күтәргән кешенән
Йондоҙҙар ҙа көнләшәләр;
Халҡы тибәргән кешенән
Йыландар ҙа ерәнәләр.

Халыҡҡа булған һөйөүҙе
Һис бер көс һүндерә алмаҫ;

Халҡы үҫтергән батырҙар
Һыуҙа батмаҫ, утта янмаҫ.

Халыҡ нәфрәте яндыра,
Һөйөүҙе ҡанатландыра;
Тик бер ҡарашы ла уның
Бәхет тауына күтәрә,
Рухландыра һәм күрһәтә
Сиге булмаған донъяны.

?

1. Яҙмышы халыҡ менән бәйле кешеләр ни өсөн шиғырҙа юғары баһалана?
2. «Һыуҙа батмаҫ, утта янмаҫ» тигән һүҙҙәрҙе тағы ҡайһы әҫәрҙә осратҡанығыҙ бар? Ҡайһы батырға ҡарата әйтелгән ул?
3. М. Хәйҙең ошо өс шиғырының йөкмәткеләрендә ниндәй уртаҡлыҡ күрәһегеҙ?

## Эпитет тураһында

Әйберҙәрҙең һәм күренештәрҙең үҙенсәлекле билдәләрен күсермә мәғәнәлә сағылдырыусы художестволы аныҡлаусылар **эпитет** тип атала. М. Хәй үҙенең шиғырҙарында түбәндәге эпитеттарҙы ҡуллана: *бәхет тауы, асыҡ сырай.*

Предметтың ябай билдәләрен генә белдергән һүҙҙәр эпитет була алмай. Мәҫәлән: *сикһеҙ донъя, һимеҙ ҡаҙ, бәхетле йылдар, ҙур ғүмер.*

Рәшит Ниғмәти

## ҠЫҘЫМДЫҢ ҺОРАУҘАРЫНА ЯУАПТАР

### I

Нисектер ҡыҙыңдың исеме,
Белмәйем, ҡорҙаш, уны.
Тик беләм: ул — алма битле
Һәм бик бәләкәй ҡулы.
Һәм беләм: һинең ҡыҙың да,
Минеке кеүек, матур,

Шулай бит: һәр ата өсөн
Үҙ ҡыҙы була алтын.
Пар алма — уның биттәре,
Ирендәр — ер еләге,
Күҙҙәре — яҡты йондоҙҙар,
Леп-леп тибә йөрәге.
Ҡайһы саҡ таңға ҡалдыра
Уның һөйләгән һүҙе,
Уйыны — ҡарап туймаҫлыҡ,
Үбеп туймаҫлыҡ үҙе.
Минең дә шундай ҡыҙым бар,
Исеме… әйҙә булмаһын,
Ошо ҡыҙҙы һәр бер ата
Үҙ ҡыҙы тип уйлаһын.

## II

Бер саҡ икәү ултырабыҙ,
Тәҙрәнән тышҡа ҡарап.
Эштән мин арып ҡайтҡанмын,
Белмәй шул уны бала.
Ул һөйләй: бөгөн көн буйы
Уйнаған улар күмәк,
Ҡара-ҡаршы әйтешкәндәр:
«Аҡ тирәк тә күк тирәк…»
— Аҡ тирәк!
— Күк тирәк!
— Күктә-күктә ниҙәр бар?
— Сыбар ала ҡоштар бар.
— Ҡанатында ниҙәр бар?
— Шәкәр менән йофар[1] бар.
— Шәкәреңде бир миңә!
— Ниңә бирәйем һиңә?
— Аҡ тирәк!
— Күк тирәк!
— Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
— Беҙгә Мәстүрә кәрәк!..
Ул һөйләй: «Мәстүрә менән
Урамға сыҡҡан инек,

[1] *Йофар* — хуш еҫле матдә.

Боецтар йырлап үттеләр:
— Йәшәһен Ватан! — тиеп».
Һәм ҡапыл үҙенән оло
Бер һорау бирҙе ҡыҙым:
— Әйт әле, Ватан ни нәмә
Була ул? — тине ҡыҙым.
Мин яуап бирҙем ҡыҙыма,
Ҡулайлы һүҙҙәр табып.
Һинең ҡыҙың да уҡыр тип,
Китапҡа ҡуйҙым яҙып.
— Ватан ул, ҡыҙым, Тыуған ил,
Бына беҙ торған урын.
Был ерҙә ғүмер кисергән
Атай-бабайҙар борон.
Йырсылар торған был ерҙә,
Сәсәндәр булған элек.
Ватандың нимә икәнен
Әйткәндәр былай тиеп:
— Эй Тыуған ил, Тыуған ил,
Тыуған ил ул — тыуған ер,
Атай кейәү булған ер,
Әсәй килен булған ер,
Кендегемде ҡырҡҡан ер,
Елеккә май тирткән ер,
Ирҙәрҙе ир иткән ер,
Яуызды хур иткән ер,
Батырға дан биргән ер,
Халҡына һан биргән ер, —
Ана шул ер — Тыуған ил,
Ана шул ил — тыуған ер.
Беҙҙең Ватан, ҡыҙым, матур,
Ҡояштай балҡып тора;
Тауҙары, зәңгәр болоттай,
Күктәргә ҡалҡып тора.
Һыуҙары, терегөмөштәй,
Йылтырап ағып тора;
Баҡсаларында емештәр
Ерҙәргә тамып тора;
Урмандар, әкиәт шикелле,
Гөр килеп, шаулап тора;
Ал, ҡыҙыл, зәңгәр сәскәләр

Күҙҙәрҙе ялмап тора;
Мөлдөрәп ятҡан күлдәрҙә
Балыҡтар уйнап тора;
Буйҙары зифа ҡамыштар
Шым ғына йырлап тора;
Күк йөҙөндә тулған айы
Йылмайып ҡарап тора;
Елдәре ағас баштарын
Иркәләп тарап тора;
Таң һайын һандуғастары
Талдарҙа һайрап тора;
Йәнлеге, аҫыл ҡоштары,
Гөж килеп ҡайнап тора;
Ҡырында уңған игендәр
Елһеҙ тулҡынып тора;
Ерендә баҡыр, көмөшө,
Алтыны тулып тора.
Һәм, ҡыҙым, Ватан ошо ул —
Һин баҫып торған урын,
Һәм һинең көн һайын иртән
Уйнарға сыҡҡан юлың.
Уй менән уйлап бөтмәҫлек
Бөйөк ул беҙҙең Ватан ,
Хыялдар менән етмәҫлек
Бейек ул беҙҙең Ватан.
Аҡ болоттарға менһәң дә,
Күренмәй уның сиге.
Бар донъяға нурын һибеп,
Яҡтыра уның бите.
Ватандың арғы сигенән
Йәйәүләп сыҡһаң әгәр,
Йыл йөрөрһөң, етә алмаҫһың
Бирге сигенә ҡәҙәр;
Өсөнсө тиҙлеккә ҡуйып,
ЗИЛ менән елһәң әгәр,
Ай елерһең, етә алмаҫһың
Сиктән сигенә ҡәҙәр;
Болоттар өҫтөнән осһаң
Самолет менән әгәр,
Көн осорһоң, етә алмаҫһың
Сиктән сигенә ҡәҙәр...

Халыҡтары беҙҙең Ватандың
Күп һанлы, төрлө-төрлө.
Берәүһе — аҡ, береһе — ҡара,
Берәүһе һары йөҙлө;
Быныһы Иван исемле,
Тегеһе Дауыт уның.
Бер ерҙә Петренко бик күп,
Бер ерҙә Шалва тулы...
Ситтәр яуыябырылғанда,
Эймәгән башын халыҡ.
Өҫтөнә ҡайғы килгәндә,
Ҡуймаған йәшен халыҡ.
Был илдә һәр ваҡыт яҡты,
Был илдә һәр саҡ ал таң —
Шул бына беҙҙең Тыуған ил,
Шул бына беҙҙең Ватан.

? 1. Әҫәрҙә Ватан төшөнсәһе нисек аңлатыла?
а) Нимә ул Ватан?
б) Сәсәндәр Тыуған илде нисек тасуирлаған?

2. Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнегеҙ. «Ватан ул, ҡыҙым, Тыуған ил» тигән еренән башлап «Көн осорһоң, етә алмаҫһың сиктән сигенә ҡәҙәр» тигән урынына тиклем ятлағыҙ.

## Йәнләндереү

Әҫәрҙәрҙә йыш ҡына йәнләндереү алымы ҡулланыла. Тәбиғәт күренештәрен һәм йәнһеҙ әйберҙәрҙе тере заттарға хас сифаттар (көлөү, ғорурланыу, йылмайыу, асыуланыу, хәрәкәтләнеү һ. б.) менән һүрәтләйҙәр. Мәҫәлән, Р. Ниғмәтиҙең «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар» әҫәрендә йәнләндереүҙе түбәндәге юлдарҙа күреп була:

Буйҙары зифа ҡамыштар
Шым ғына йырлап тора;
Күк йөҙөндә тулы айы
Йылмайып ҡарап тора;
Елдәре ағас баштарын
Иркәләп тарап тора.

? Үҙегеҙ йәшәгән ауыл, тирә-яҡ тәбиғәт — йылға, тау, урман, баҫыу тураһында бәләкәй генә хикәйә яҙығыҙ. Һөйләмдәрегеҙҙә йәнләндереү ҙә булһын.

* * *

## Тыуған ерҙең туҙаны ла ҡәҙерле...

Һәр кемгә лә үҙ иле ғәзиз.

Халыҡҡа хыянат — Ватанға хыянат.

Илен һөйгән — ир булыр.

Иле берҙәмдең көнө берҙәм.

Иле барҙың көнө бар.

Иле барҙың теле бар.

Ир — илендә ир.

Ир теләге — ил,
Ил терәге — ир.

Ерле — ерендә,
Екән — күлендә.

Ерҙән айырылған — елгә осҡан.

Ере барҙың еле бар,
Еме барҙың име[1] бар.

Иле ныҡтың биле ныҡ.

Иленән биҙгән ир уңмаҫ,
Күленән биҙгән ҡаҙ уңмаҫ.

---

[1] *Им* — яйы, мөмкинлеге.



**Рәми ҒАРИПОВ**

**1932—1977**

Ниндәй ауыр хәлгә юлыҡһаң да,
Һин йәшәргә тыуғас был ергә,
Йәшә кеше булып, ә үлгәндә
Һин белергә тейеш үлергә.

*Рәми Ғарипов*

* * *

«Илленсе йылдарҙа әҙәбиәткә килгән үҙ быуыны араһында Рәми Ғарипов ғәжәп иртә асылды, үҙ тауышын тиҙ тапты, бик йәшләй ижади өлгөрҙө. Шиғри тәбиғәтенең бар булмышы менән ул нескә тойғоло, фәлсәфәүи мәғәнәле лирик шағир ине...»

«Уның әҫәрҙәрендә хәҙерге башҡорт шиғриәтендә һис кем менән буталмаҫлыҡ үҙ стиле, үҙ һорауҙары, үҙ поэтик донъяһы бар. Рәми Ғарипов лирикаһының иң үҙенсәлекле яғы — шиғырҙарының ябайлығында һәм шағирҙың донъялағы иң ябай нәмәләрҙең, иң ғәҙәти хәлдәрҙең дә матурлығын күрә, шиғрилығын таба белеүендә...»

«Рәми Ғарипов донъяға һоҡланып ҡына ҡалманы, уны һаҡлау өсөн кешене уяулыҡҡа саҡырып оран һалды, шиғырҙарында тынғыһыҙ заман тураһында борсолоп, һыҙланып уйланды...»

«Рәми Ғарипов шиғриәте бөгөнгөнән киләсәккә ҡыйыу үтәсәк, шағирҙың һәр саҡ яҡтылыҡҡа, ғәҙеллеккә, дуҫлыҡҡа, матурлыҡҡа саҡырыусы аманатын уның әҫәрҙәре тыуыр йылдарға еткерәсәк...» *Рауил Бикбаев.*

1992 йылда Рәми Ғариповҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

## ҺАҒЫШ

Мин диңгеҙҙең оло зәңгәр шауын,
Сал тауҙарҙың ап-аҡ тынлығын
Яратһам да, ниҙер етмәй миңә,
Йәнем тоя ниҙер юҡлығын.

Аҙашҡан бер бойоҡ ҡолон һымаҡ,
Баҫып торам диңгеҙ ярында.
Тауға бағам: ниндәйҙер шом, бушлыҡ
Был мәңгелек тауҙар ҡарында.

Кипаристар елдән һығылғанда,
Ҡыштырлашҡан саҡта банандар,
Күҙ алдымда аҡ ҡайындар шаулай,
Тәлгәштәрен һуҙа баландар...

Етмәй миңә бында умырзая,
Мәтрүш сәскәһенең хуш еҫе,
Алҡаланған арыш баҫыуҙары,
Ысын йәйе, ысын ҡыш төҫө.

Мин уларҙың моңон, һүҙен беләм,
Үҙ телемдә улар һөйләшә.
Иҫ киткес һеҙ, ҡунаҡ булған ерҙәр,
Тик, тыуған ер, йәшә, мең йәшә!

?

1. Шиғырҙа ҡайһы яҡтың тәбиғәте тураһында һүҙ бара? Һеҙ быны ниндәй билдәләр буйынса әйтә алаһығыҙ?
2. Шағир тыуған яҡ тәбиғәтенең күңелгә яҡынлығын ниндәй саралар аша белдерә?
3. Аҙаҡҡы строфаның тәүге ике юлын нисек аңлайһығыҙ?

## ЯЛАН СӘСКӘЛӘРЕ

Мин яратам ҡала сәскәләрен,
Яратҡандай бала күҙҙәрен, —
Баҡсасылар, сабый һымаҡ итеп,
Наҙлап үҫтерә бит үҙҙәрен!

Иртән тороп эшкә ашыҡҡанда,
Арып ҡайтҡан саҡта кистәрен,
Сәскәләргә ҡарап ҡыуанам мин —
Сәскә атҡан төҫлө хистәрем!

Тик ҡайғырһам ғына, мин уларҙың
Тоя тороп хуш еҫ сәскәнен,
Әллә ниңә ҡапыл һағынып китәм
Ябай ғына ялан сәскәһен.

Әллә ямғыр менән йыуынып гел,
Һөртөнгәнгә улар ел менән,
Әллә инде мин үҙем дә шулай
Тиң үҫкәнгә әрһеҙ гөл менән, —

Әсе тирем тамған сәскәләрҙе
Мин нығыраҡ һөйәм шикелле.
Донъялағы бөтә гөлдәрҙән дә
Шул сәскәләр миңә һөйкөмлө!

?

1. Шағирҙың ҡала сәскәләрен ниндәй кимәлдә яратыуын белдергән һүҙҙәрҙе эҙләп табығыҙ.
2. Авторҙың ялан сәскәләренә мөхәббәтен асыҡлап, шиғырҙың мәғәнәһен асыҡларға тырышығыҙ.

## ХАЛҠЫМ ХАҠЫНДА

*Осетин дуҫтарыма.*

Була алһам ине моңло ҡурай,
Урман, далаларҙың хуш еҫе,
Була алһам ине сәсән бер тел,
Урал тауҡайҙарының күк төҫө, —
Һөйләр инем һеҙгә, көйләр инем
Бар үткәнен башҡорт иленең,
Бар киңлеген халҡым күңеленең,
Бар хикмәтен әсәм теленең.
Көсөм етмәҫ быға, хисем етмәҫ,
Тик хаҡ әйтәм халҡым хаҡында:
Бейеклек юҡ тыуған тауҙарымда,
Бөйөклөк бар кескәй халҡымда.

Һәр башҡортом минең йырсы булыр,
Ат атланып сыҡһа тауҙарға;
Һәр башҡортом минең батыр булыр,
Ҡорал алып сапһа яуҙарға...

?

1. Был шиғырҙа автор башҡорт халҡының ниндәй сифаттарын асып бирә?
2. Шиғырҙы ятлағыҙ.
3. Түбәндәге шиғырҙы уҡығыҙ. Рәми Ғариповтың шиғыры менән был шиғыр араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар? Башҡортостан тураһында шиғыр яҙып ҡарағыҙ.

*Шәйехзада Бабич*

**Башҡортостан**

...Башҡортостан — гөлбостан,
Сөнбөлостан — гөлбостан.
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!

Башҡортостан баҡсаһы —
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы —
Ҡаһармандар йөрөгән ер,
Ҡаһармандар кәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер.
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим[1] ҡылған ер.

Башҡортостан — гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.

Башҡорт халҡы тарихта
Ғәйрәт менән фаш булған;
Киң иреккә ашҡынған
Күңелдәге ташҡындан...

---

[1] *Тәрсим ҡылыу* — һүрәтләндереү.



**Назар НӘЖМИ**

**1918 — 1999**

Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры Назар Нәжми 1918 йылда Дүртөйлө районы Миңеште ауылында тыуған. Ул Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, һуғыштан һуң Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлай. Назар Нәжми поэзия һәм драматургия өлкәһендә актив эшләй. Уның «Әсә», «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Күлдәк», «Урал» һәм башҡа поэмалары уҡыусыларға киң билдәле; «Яҙғы йыр», «Хуш, Хәйрүш», «Гармунсы дуҫ», «Күршеләргә ҡунаҡ килгән», «Ҡыңғыраулы дуға» һәм тағы бер нисә пьесаһы төрлө йылдарҙа Башҡорт дәүләт академия драма театрында ҡуйылды. Бөйөк Ватан һуғышындағы батырлыҡтары һәм башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн шағир ордендар һәм миҙалдар менән наградланған.

Назар Нәжми — РСФСР-ҙың дәүләт премияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты булды.

## ТЫУҒАН ҠАЛАМА ЙЫР

Көмөш ҡайыш быуған егет кеүек,  
Ағиҙелде урап биленә,  
Баҫҡанһың һин, Урал һаҡсыһындай,  
Тыуған Өфөм минең, бергенәм...

Хәтеремдә, юл тоҡсайы аҫып,
Беренсе ҡат, ғүмерем таңында,
Ҡанатланып күккә менгән кеүек,
Менгәйнем мин һинең тауыңдан.

Күпме йылдар артта ҡалған хәҙер,
Тик һиҙмәнем ғүмер үткәнен,
Сөнки мине үҙең кеүек бейек
Тормош тауҙарына күтәрҙең.

Туған әсә улын оҙатҡандай,
Киткән саҡта ҡарап ҡалаһың.
Ҡайтҡан саҡта, һин алыҫтан күреп,
Ҡосағыңа тартып алаһың.

Бер генә көн күрмәй торһам да мин,
Күңелдәрем һинһеҙ бойоға.
Һинән китһәм, хатта таштарың да,
Сәскә атҡан төҫлө тойола.

Әллә башлап һиндә күргәнгәме
Яҡты ғүмеремдең яҡтыһын,
Әллә инде һиндә эскәнгәме
Эскән һыуҙарымдың татлыһын,
Йөрәгемә бигерәк яҡынһың.

Эштән арып ҡайтҡан саҡтарымда,
Яҙа алмаған саҡта йырҙарҙы,
Баҫҡан ерҙән һүҙҙәр эҙләгәндәй,
Урамдарың буйлап уйланып,

Мин һәр көндө үтәм. Бары ла таныш:
Һәр боролмаң, урам саттарың.
Бары ла таныш, хатта таштарыңдың
Беләм ҡайҙа, нисек ятҡанын.

Күҙ алдымда ағастарың үҫте,
Бейек йорттар теҙелеп баҫтылар.
Күҙ алдымда ҡайнар асфальттарың
Урамдарға ятты ялтырап.

Баҡсаларың суйын ҡойма кейҙе, —
Мин уларға ҡарап һоҡланам.
Һәр бер сәскәң мине ҡыуандыра,
Һәр биҙәгең өсөн шатланам.

Һөйәм, ҡалам, һинең шау-шыуыңды,
Машиналар, гудок тауышын,
Дим буйҙарын, йырҙарыңдың моңон,
Ағиҙелдең тымыҡ ағышын.

Йүкәләрең сәскә атҡан саҡта,
Йәйге кистә хуш еҫ аңҡыуын.
Йондоҙҙарҙың яҡтылығын күмеп,
Төнгө уттарыңдың балҡыуын.

Ҡайҙа барма — таныштарҙы күрәм,
Иптәштәрем һиндә, дуҫтарым.
Һәр бер кешең үҙең кеүек яҡын,
Яғымлыраҡ кеүек ҡыҙҙарың.

Һөйәм һине уңған батыр итеп,
Ғорурланам һинең даныңа.
Ағиҙелең барып ҡушылғандай,
Диңгеҙ тулҡындары шауына.

Хеҙмәтеңдә Ватан ҡеүәтенә
Ҡушып, бергә һин тын алаһың.
Һәм һин ерҙә Тыуған илдең яҡты
Бер йондоҙо булып янаһың!

Һиндә көс, һиндә хеҙмәт,
Һиндә кешегә хөрмәт,
Һиндә йыр, һиндә илһам,
Эй Өфөм, Өфөм, Өфөм!

?

1. Шиғырҙа шағирҙың Өфөнө яратыуын белдергән урындарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ.
2. Һәм һин ерҙә Тыуған илдең яҡты
   Бер йондоҙо булып янаһың!
   Был юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.
3. Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙең ниндәй һүрәтләү саралары икәнлеген иҫкә төшөрөгөҙ: «Көмөш ҡайыш быуған егет

кеүек», «Туған әсә улын оҙатҡандай, киткән саҡта ҡарап ҡалаһың».

4. Өфө ҡалаһына бәйле ниндәй тарихи ваҡиғалар беләһегеҙ?

## ТЫУҒАН АУЫЛЫМА

Илдәр күрҙем... Ләкин, ил-төйәгем,
Һинең менән икән беҙ оҡшаш.
Мин бер йырсың... Һин үҙең дә йырсы,
Йырҙарыма ләкин һин остаз.

Минең йырҙар — һинең йырҙарың ул,
Үҙ телеңдә миңә сер итеп
Һөйләйһең дә, мин уларҙы бары
Шул уҡ телдә яҙам йыр итеп.

Илдәр күрҙем... Тау илдәрен күрҙем —
Ҡаялары күккә ашыулы.
Унда тыуған йырҙар тауҙай ғорур,
Йылғалары кеүек ярһыулы.

Сикһеҙ ятҡан ҡырҙар күргәнем бар,
Даръялары тәрән, аға тын.
Шул ҡырҙарҙа микән киң ҡоласлы,
Тәрән йырҙар йәйә ҡанатын?

Ә бит, ерем, һиндә бөтәһе бар:
Ҡырҙарың бар, ләкин киң түгел;
Тауҙарың бар — улар тәпәш кенә,
Күккә ашҡандарға тиң түгел.

Йылғаларың да бар, ләкин улар
Тик шылтырап аҡҡан шишмәләр,
Күҙ күреме ерҙәр үтәләр ҙә
Туғайҙарға барып бөтәләр.

Бөтәһе лә булғанынса ғына,
Ҙур даның да илгә сыҡмаған.
Ил төйәгем, мин дә һинең кеүек,
Бар булғаным һиңә оҡшаған.

? 1. Ни өсөн шағир тыуған ерен «Һин үҙең дә йырсы...» тип атай?
2. Шиғырҙың аҙаҡҡы дүрт юлы менән автор ни әйтергә теләй?
3. Үҙегеҙҙең тыуған төйәгегеҙгә арнап ҡобайыр сығарып ҡарағыҙ. Түбәндәге тексты өлгө итеп файҙаланығыҙ.

### Ҡобайыр ҙа әйтеп данланым...

Урманы күп, тауы күп,
Ере алтын был илдең;
Йылғаһы күп, күле күп,
Һыуы һалҡын был илдең.
Һылыуы бар был илдең,
Матуры бар был илдең;
Йылғаһынан һыулаған,
Тупрағында аунаған,
Урал буйын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡаяла башаҡ ҡайраған,
Ҡыҙҙың һылыуын һайлаған,
Ир намыҫын һатмаған
Батыры бар был илдең.

* * *

Ай Уралтау, Уралтау;
Урал тигән данлы тау —
Тыуған-үҫкән илебеҙ.
Һыуын эскән еребеҙ,
Ергә тамған тиребеҙ,
Уға һеңгән ҡаныбыҙ —
Онотмайыҡ уны беҙ.
Ерҙе талап килһәләр,
Ҡорал тотоп инһәләр,
Әҙер торһон егеттәр,
Әҙер торһон инәләр,
Ҡурсаларға Уралды,
Бирмәҫ өсөн Уралды.
Урал китһә — ил китер,
Урал китһә — ил бөтөр,
Урал китһә — тел бөтөр,
Илһеҙ ҡалһаң, көн бөтөр.

## Туғыҙынсы бүлек

*Шәйехзада Бабич ижады халыҡ*
*араһында*
*тынғы белмәҫ тере шишмә булып*
*йәшәй.*
Р. Бикбаев



**Шәйехзада БАБИЧ**

**1895—1919**

Башҡорт халҡының бөйөк шағиры Шәйехзада Бабич 1895 йылда хәҙерге Дүртөйлө районының Әсән ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Ул бик зирәк бала булған, бәләкәй саҡтан уҡ Туҡайҙың «Яңы Киҫекбаш», «Һыу инәһе», «Шүрәле» кеүек әҫәрҙәрен тотош яттан белгән. Бабич, ауыл мәҙрәсәһендә белем алғас, ун биш йәшенән үк ҡаҙаҡ далаларына сығып китә, балалар уҡыта, ҡаҙаҡ аҡындары менән аралаша, үҙе лә шиғырҙар яҙа башлай. 1911—1916 йылдарҙа Өфөләге «Ғалиә» мәҙрәсәһендә уҡый.

Бабич ҙур шиғыр оҫтаһы булған. Уның әҫәрҙәре ябай ҙа, мәғәнәле лә, матур ҙа. Уларҙы хәтерҙә ҡалдырыуы һәм ятлауы бик еңел. Бабич шиғырҙары һәм поэмаларында Башҡортостанға, Уралдың гүзәл тәбиғәтенә, туған халҡына тәрән һөйөү тойғоһо сағыла, шағир шулай уҡ үҙ заманының етешһеҙлектәренән әсе көлә.

Шәйехзада Бабич 1919 йылда, граждандар һуғышы ваҡытында фажиғәле һәләк була. Егерме дүрт кенә йыл ғүмере эсендә ул илебеҙ халыҡтары әҙәбиәтендә күренекле урын алырлыҡ яҡты ижади мираҫ ҡалдырҙы.

### КЕМ ӨСӨН?

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү әй, ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.

— Һис зарар юҡ, ал, — тине ай, —
Ал да нур сәс халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым ҡояштың нурҙарын.

?

1. Шиғыр 1916 йылда яҙылған. Ул мәлдә айға күтәрелеү мөмкин булмаған. Ә ни өсөн Ш. Бабич:
Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемдә нурланым, —
ти? Бының менән ни әйтмәксе?
2. Ни өсөн шиғыр ай менән һөйләшеү формаһында яҙылған?
3. Халыҡҡа нур сәсеү нимәне аңлата?

## ХАЛҠЫМ ӨСӨН

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламыйм[1] данлыҡ өсөн;
Йырлайым алтын илем өсөн,
Үҙ туған халҡым өсөн.

Саф көмөштәй йырҙарымды
Йырламыйм алтын өсөн;
Йырлайым тик саф көмөштәй
Саф йөрәк халҡым өсөн.

Сәскә төҫлө йырҙарымды
Йырламыйм дәртем өсөн;
Йырлайым тик сәскәләй
Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.

Дәртле ҡайнар йырҙарымды
Йырламыйм зауҡым[2] өсөн;
Йырлайым тик мәңге шат,
Дәртле, көләс халҡым өсөн.

---

[1] Бабич бер үк һүҙҙең татарса әйтелешен дә, башҡортсаһын да («йырлайым») ҡулланған. Шиғырҙың ритм төҙөклөгө боҙолмаһын өсөн, «йырламыйм» формаһы шағир үҙе ҡулланғанса ҡалдырылды.
[2] *Зауыҡ* — күңел рәхәте.

Иламайым мин көндәрем
Һырғаҡ һыуыҡ, һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы, меҫкен,
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.

Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа[1] —
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

? 1. «Ант» һүҙен һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Ун туғыҙ йәшлек шағир үҙенең шиғырында нимә тип ант итә?
2. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: шағир ни өсөн илде алтынға тиңләй?
3. Шиғырҙы ятлағыҙ.

## БЕҘ

Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар,
Күп ырыуға баш йорттар.
Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр,
Беҙҙә һәр бер ашлыҡтар.

Беҙҙә тиңһеҙ сәхрәләр,
Сәхрәләр — ожмах улар;
Унда гөлдәр тибрәнеп,
Йәмләнергә саҡыралар.

Унда ҡоштар һайраша,
Күлдә ҡамыш шаулаша.
Ҡамыш буйы әрүшә[2],
Тамаша, әй тамаша.

Беҙҙә ҡалын урмандар,
Беҙҙә данлы Урал бар;

Урал аҫты алтындыр,
Өҫтә — шәфәҡ балҡыйҙыр.

---

[1] *Фиҙа ҡылыу* — ҡорбан итеү; был урында арнау мәғәнәһендә.
[2] *Әрүшә* — ҡыуаҡлыҡ.

? 1. Был шиғырҙа авторҙың ниндәй тойғолары сағыла?
2. Үҙегеҙҙең тыуған яғыгыҙҙың тәбиғәтен телдән тасуирлап бирегеҙ.

* * *

## Йомаҡ ҡойҙом...

1. Алып батыр килгән,
Ҡалҡанын түргә элгән.

2. Өй түбәмдә ебәк билбау.

3. Күк тирмәнең эсендә
Булыр ике туп,
Көндөҙ береһен тот,
Төндә береһен тот.

4. Тимгел-тимгел тимгел таш,
Тимгел-тимгел ала таш,
Күрер күҙгә күркәм таш,
Күтәрергә ауыр таш.

5. Ҡанатһыҙ — оса,
Аяҡһыҙ — саба;
Тышта өйөлә,
Өйҙә йәйелә.

6. Айға, көнгә күренмәй —
ағас менән типә-тиң.

7. «Тей!» — тиһәң, теймәй,
«Теймә!» — тиһәң, тейә.

8. Кәкре ҡайында ҡар ятмаҫ.

9. Екән төбө — ете айыры.
Ул ни булыр, туғаным?

# Унынсы бүлек

*Уралып ятҡан Уралда,*
*Аҡбуҙаттай ат менеп,*
*Ыласындай тиҙ елеп,*
*Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,*
*Кәрәк әйберен юлға алып,*
*Ил-йорт менән хушлашып,*
*Яуға ҡаршы яу сабыр*
*Батыр-батыр ирҙәр бар.*
Ҡобайырҙан



**Динис БҮЛӘКОВ**

**1944—1995**

Динис Мөҙәрис улы Бүләков 1944 йылда Мәләүез районы Арыҫлан ауылында тыуған. Мәскәүҙә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай. Байтаҡ йылдар «Пионер» (хәҙерге «Аманат») журналының баш мөхәррире, Башҡортостан телевидение һәм радио тапшырыуҙар комитеты рәйесе булып эшләй. Ул хикәйәләр, повестар яҙҙы, тиҫтәнән ашыу проза китаптарының авторы. «Килмешәк», «Ғүмер бер генә», «Туҙҙырылған тамуҡ» тигән романдары донъя күрҙе. 1988 йылдан 1995 йылға тиклем Динис Бүләков Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булды.

## ЯРАЛЫ КИТАП

Һуғышҡа тиклем Әсләмдәрҙең ауылы бигерәк тә бәләкәй булған. Өлкәндәрҙең һөйләүенә ҡарағанда, ул ни бары утыҙ биш өйҙән генә торған. Ауылдың бәләкәйлеге етмәгән, уға, кәмһетеп, исемен дә тапҡандар бит әле: Йәтимәк. Ауыл бөтөүгә барғандыр, күрәһең, шул етемлеккә ишара яһағандыр. Яҡын-тирәлә күҙ төртөп йомош-фәләнгә барып әйләнерлек башҡа ауыл да булманы шикелле. Дүрт яҡтан да Йәтимәкте тауҙар уратып алған. Ә улары, үҙ сиратында, үтеп сыҡҡыһыҙ урман менән ҡапланған. Ауыл уйһыулыҡта ятҡанға күрә, бында хатта ҡояш та иртә байып, һуң сыҡҡан.

Йәтимәк халҡы башлыса һунарсылыҡ менән көн күргән. Ирҙәр бында, ауылдары бәләкәй, тип кәмһетһәләр ҙә, бик мәргән һунарсы булып танылғандар. Улар, тиреһен боҙмаҫ өсөн, теләһә ниндәй януарҙың күҙенә тоҫҡап ата белгәндәр. Ҙур ҡала баҙарҙарында кешеләр гел генә һорар булғандар:

— Был ҡиммәтле тирене ҡайҙан килтерҙегеҙ?

— Йәтимәктән.

Ошоно ишетеү менән, уйлап та тормайынса, бигерәк тә тиренең сифатына шикләнмәйенсә, һатып алғандар тауарҙы. Ә инде һуңғараҡ, хөкүмәткә тапшыра башлағас, улар гел генә юғары сорт баһаһы алғандар. Бына ниндәй данлы булған бәләкәй генә Йәтимәктең ирҙәре, йәғни һунарсылары.

Хәҙер Йәтимәк ҙур төҙөк ауылдарҙың береһенә әүерелде. Бында кирбестән һалынған урта мәктәп, ике ҡатлы магазин, бик иркен, ҡупшы клуб, китапхана, медпункт... Хәйер, Йәтимәктең шәп яҡтарын һанай китһәң, тиҙ генә осона сығырмын да тимә. Был тирәлә нефть табылғаны бирле, ауыл үҫкәндән-үҫә. Башлыса йәштәр ғүмер итә Йәтимәктә. Ололар бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалған.

Әсләм әле онотмаған: бер ваҡыт уларҙың ауылының исемен үҙгәртергә йөрөүселәр ҙә табылды. Хатта Мәскәүгә лә хат яҙып ҡаранылар шикелле. Ләкин күпселек риза булмағас, тыйылдылар. Эш исемдә түгел — есемдә, йәнәһе.

Яҡында ғына нефтселәр ҡасабаһы үҫеп сыҡҡас, был мәсьәлә бөтөнләй көн тәртибенән төшөп ҡалды. Ҡара алтын табылған көндө лә яҡшы хәтерләй әле Әсләм. Уға ул ваҡытта нисә йәш кенә булды икән? Һәр хәлдә уҡымай ине әле. Төрлө яҡтан бында йәштәр йыйылды. Ҡасабала йәшәргә теләмәгәндәре Йәтимәк ауылына күсеп килде. Ана шулай ҡапыл ғына ҙурайҙы ла китте Әсләмдәрҙең ауылы. Хас әкиәттәге кеүек, ай үҫәһен көн үҫте. Йәтимәк кешеләре хәҙер, яйы тура килгән саҡта, ауылдары менән маҡтанып алырға ла күп һорамаҫ.

— Беҙҙең Йәтимәк берәү генә, уға еткән ауыл юҡ яҡын-тирәлә! — тип ебәрәләр. Ауылдарының исеме ни нәмәгә ишара иткәнлеген дә бында күптән онотҡайнылар инде.

Яңыраҡ Әсләмдәр синыфы «Тыуған ауылым» тигән темаға инша яҙҙы. Шунда Мәжит тигән малай хатта: «Матурлығы һәм әһәмиәте, кешеләренең шәплеге яғынан минең тыуған ауылым Йәтимәк бөтә Башҡортостанда бер генә!..» — тип ебәргәйне. Шулай ғорур ул бында кешеләр. Уларҙың хис-тойғолары яйлап Мәжит кеүектәргә лә күсә.

Әсләм, ошоларҙы уйлай-уйлай, ауыл уртаһындағы һәйкәл яғына атланы.

Һуғыш башланып киткәс, ҡайғы хәбәре Йәтимәккә лә килеп еткән. Мәргән һунарсылыҡта дандары таралған ирҙәрҙе бер ниндәй икеләнеүһеҙ яуға оҙатҡан ауыл. Утыҙ биш өйҙән утыҙ дүрт ир киткән яуға. Тик һуңғы, утыҙ бишенсе өй генә, фашистар менән алышҡа хужаһын ебәрә алмаған. Илғужа ағай бынан бер-ике йыл элек һунарҙан яраланып ҡайтып, донъя ҡуйған булған. Айыу менән алышҡанда ҡаты йәрәхәтләнгән...

Фәғилә апай ғына ике балаһы менән шул утыҙ бишенсе өйҙә йәшәй икән. Өҫтәүенә, бейеме — ире Илғужа ағайҙың әсәһе лә — уның менән бергә торған.

Йәтимәк үҙе бәләкәй генә ауыл булһа ла, Совет власы башланғыс мәктәп асты. Унда ун-ун бишләп бала уҡыған. Бына әлеге Фәғилә апай уҡытыусы икән шул мәктәптә.

Йыйылышып бер һөйләшкән ваҡытта Фәғилә апай тора ла ауылдаштарына шундай хәбәр һала:

— Ҡайғырмағыҙ, дошман менән һуғышҡа утыҙ бишенсе өйҙән дә кеше барасаҡ!

Йәтимәк халҡы элек-электән ғәрсел, ғорур булған, ә инде ил алдында ауыр һынау көндәре килеп еткәс, уларҙың был тойғолары көсәйә генә төшкән. Улар хатта район гәзитендә: «Фашист эттәргә ҡаршы нәфрәтебеҙ сикһеҙ! Йәтимәк ауылы ошоға яуап итеп, дошман менән алышҡа утыҙ биш өйөнән утыҙ биш яугирын фронтҡа оҙатасаҡ...» тип хат та баҫтырып сығарғандар. Әле бына уйламайыраҡ әйтеп ысҡындырғандарын уйлап, аңлап, ҡайғырышып ултыралар икән.

— Утыҙ бишенсе өй ҙә дошманға ҡаршы һуғышасаҡ!— тип йәнә ҡабатлаған Фәғилә апай, ауылдаштарының борсоулы күҙҙәренә ҡарап. Шунан тегеләрҙең береһе телгә килгән:

— Фәғилә, ун йәшлек улыңды ебәрергә уйламайһыңдыр бит? Ҡыҙың бөтөнләй бәләкәй...

— Мин үҙем китәм!

— Һин? Бисә кеше?..

Бөтә халыҡ аптырашып бер-береһенә ҡараған.

— Эйе, мин! — тип ныҡлап ҡабатлаған Фәғилә апай.— Илғужам урынына үҙем барам...

Бик оҙаҡ тынлыҡ урынлашҡан.

— Мин хәрби комиссариаттан рөхсәт алып ҡайттым,— тип, Фәғилә апай уларҙың алдарына ҡағыҙ һалған. — Бына, ҡыҫҡа ваҡытлы шәфҡәт туташтары курсына барам. Аҙаҡ яуға...

Бәләкәй генә мәктәп эсендә бара икән йыйылыш. Бүлмәлә ҡәбер тынлығы урынлашҡан. Йәтимәктең утыҙ бишенсе өйөн уларҙың һуғышта ҡатнаштырғылары килмәгәне күренеп тора.

— Их, Илғужа юҡ шул...

— Эйе, ир кеше булһа, икеләнеп тормаҫ инек...

Шунан сәбәп табалар:

— Юҡ, Фәғилә, һине ебәрә алмайбыҙ, — тиҙәр. — Кисер!

Фәғилә апай шундай итеп ауылдаштарының күҙҙәренә ҡарай, тегеләре ситкә боролорға мәжбүр була:

— Балаларың бар бит. Бәләкәйҙәр...

— Бейемем ҡарап торасаҡ. Һөйләшеп килешелгән. Бик тә булмаһа, һеҙ ярҙам итерһегеҙ.

— Итеүен итербеҙ ҙә... — ти аҡ һаҡаллы бер бабай, шик белдереп. Шунда Фәғилә апай артынан теремек ҡарашлы бер әбей башын күтәрә. Бейеме икән, йәғни Илғужа ағайҙың әсәһе.

— Киленемә мин рөхсәт бирҙем! — тигән инәй, ҡаты итеп. — Яуыз дошмандан беҙҙең өйҙән дә кемдер үс алырға тейеш. Бөтә ил ҡуҙғалғанда, беҙ нисек түҙеп ятайыҡ? Илғужам рухы шуны ҡуша...

Йәтимәк ҡарттарының йәнә ғорурлығы, саялығы уяна. Шулай ҙа исем өсөн генә булһа ла, икеләнеп кенә һуңғы һорауҙы бирәләр.

— Ни бит... Фәғилә килен, балалар уҡытыусыһыҙ ҡала... Ауыл йәшәргә тейеш...

Фәғилә апай өндәшмәй ҡараштары менән ишек төбөндәрәк торған йәш кенә бер ҡыҙҙы эҙләп таба. Эҙләп таба ла уға ымлай.

— Мин... моғайын, уҡытып тора алырмын балаларҙы... — ти ҡыҙыҡай. — Ете синыф бөтөрөп ҡайттым...

Был юлы бөтәһе лә баш сайҡай.

Шулай итеп, берҙән-бер көндө Йәтимәк ауылы үҙенең һүҙендә тора: Бөйөк Ватан һуғышына үҙенең утыҙ бишенсе кешеһен оҙата. Бик ауыр кисерә халыҡ Фәғилә апайҙың китеүен. Кем-кем, ҡатын кеше бит... Балалары бар... Ләкин йәтимәктәр — ғорур. Улар теш ҡыҫып түҙә. Кешеһен яуға оҙатҡанда күҙҙән йәш сығарыу уларҙа тыйылған була.

Бына ошо китеүенән һуң Фәғилә апай тыуған ауылына әйләнеп ҡайтмай...

Йәтимәк ауылының ҡап уртаһында обелиск тора. Унда һуғышта һәләк булып ҡалған ун туғыҙ ҡаһармандың исеме яҙылған. Бәләкәй баҡсала йәй буйы аллы-гөллө сәскәләр үҫә.

Обелискылағы исемлектең иң аҙағында Фәғилә апайҙың да исеме бар...

Әсләм, алтынсы синыф уҡыусыһы, әле ошо обелиск ҡаршыһында уйланып баҫып тора. Яңғыҙы ғына килде малай бында. Сөнки Фәғилә апай — уның яу ҡырында һәләк булып ҡалған өләсәһе ул.

...Еңеү байрамын ҡаршыларға әҙерләнгән көндәрҙә генә уларҙың пионер дружинаһы шундай ҡарар ҡабул итте: мәктәптә фронтовиктарға арналған музей булдырырға. Уҡыусылар бик теләп ҡатнашты был эштә. Бер буш бүлмәнең стеналарын ағартып, тәҙрәләрен йыуып, иҙәндәрен буяп ебәрҙеләр, музей иттеләр. Әсләм дә был эштә яҡындан ҡатнашты. Дөрөҫ, уның Илғужа олатаһы һуғышта булмаған, һунарҙа бәләгә осрап ҡуя. Уның ҡарауы, Фәғилә өләсәһе фашистарға ҡаршы барған үлемесле яуҙа ҡатнаша, шәфҡәт туташы булып яу юлдары үтә, күп кенә яугирҙарҙың ғүмерен ҡотҡарыша. Ләкин дошман пуляһы берҙән-бер көндө Әсләмдең өләсәһенең дә ғүмерен өҙә.

Әсләм ошо ваҡиғалар хаҡында яҡшы белә. Өләсәһе һәләк булғас, уның бер яуҙаш әхирәте уларҙың өйөнә хат

яҙып ебәрә. Ҡулына мылтыҡ тотмаһа ла, батыр һуғышсы була Фәғилә өләсәһе, йөҙәрләгән яралыны ут эсенән алып сыға. Командирын һөйрәп артҡа шыуышҡан сағында, дошман пуляһынан ғүмере өҙөлә.

Әле Әсләм обелиск ҡаршыһында баҫып, үҙенә бер асыш яһаны: һуғышта ҡулға мылтыҡ тотмайынса ла фашистарҙан үс алып булған икән дә.

Ул йәнә уйҙары менән мәктәп ваҡиғаларына әйләнеп ҡайтты. Эйе, тәүге музейҙы дәртләнеп ойоштороп ебәрҙеләр. Бүлмәлә Йәтимәк ауылының һәр өйөнән фронтҡа киткән утыҙ биш яугирға арнап, утыҙ биш айырым стенд яһап ҡуйҙылар. Стендтар ҡаршыһында быяла менән ҡаплап эшләнгән тартмалы өҫтәл. Һәр быяла аҫтында, тартма эсендә, һуғышта ҡатнашыусы фронтовиктың яу юлдарын хәтерләткән шәхси әйберҙәре, орден, миҙалдар, гимнастеркалар, пилоткалар...

Айға яҡын мәктәп музейына уҡыусылар экспонат йыйҙы. Фронт гәзиттәре, хаттар тупланды. Ҡыҫҡаһы, стенд фронтовиктарҙың ҡаһарманлығы хаҡында һөйләй ине.

Әсләмдең күҙҙәре алдында ун туғыҙ ҡыҙыл стенд тора. Улары яу ҡырында һәләк булыусыларға арналған. Шул ҡыҙыл стендтың береһенә уның өләсәһенең исеме яҙылған. Ә бына быяла менән ҡапланған тартма — буш, өләсәһенең бер ниндәй орден-миҙалдары ла булмаған, күрәһең. Бәлки, ебәрмәгәндәрҙер, һуғышта төрлө хәлдәр осрай бит...

Әсләмдең әсәһенә ул саҡта ни бары алты ғына йәш булған. Күп нәмәне ул аңлап та бөтмәгән. Шулай ҙа бер нисә өскөл хаты һаҡланып ҡалған өләсәһенең. Уларын, иҫтәлеккә тип, әсәһе бер туған ағаһы менән бүлешкән. Ярай әле, хет улары иҫән. Бөгөн Әсләм шул ике бөртөк хатты мәктәп музейына алып барҙы. Ә стендҡа, шул хаттарҙың эстәлегенә ҡарап, һүҙҙәр яҙҙылар.

Фәғилә апайға арналған стенд — иң ситтәгеһе. Ауылдан утыҙ бишенсе булып яуға киткәндәге һымаҡ, бында ла ул — һуңғы, ун туғыҙынсы. Әсләм быға шунда уҡ иғтибар итте. Эстән генә өләсәһе өсөн иптәштәренә үпкәләп тә алды. Ләкин ни хәл итһен, өләсәһе, мылтыҡ тотоп, дошманға ҡаршы атакаға бармаған, пулемёттан атмаған, граната ташламаған, танк эсендә янмаған...

Шуға ла уның исемен иң ситке стендҡа яҙҙылар. Хәйер, Әсләм шуға ла ҡәнәғәт. Уларҙың синыфында бер кеме лә һуғышта ҡатнашмаған уҡыусылар күп. Улар шул тиклем ҡыҙығып ҡарайҙар был стендтағы фамилияларға. Ә инде шул фамилияларҙы йөрөткән уҡыусылар һуң... Хәтәр ҡылананалар, әйтерһең дә, яу юлдарында үҙҙәре йөрөп ҡайтҡандар инде. Шул быяла ҡапланған тартмаларҙағы орден-миҙалдарҙы үҙҙәренең күкрәктәренә тағып йөрөтөрҙәр ине, ҡулдарынан килһә...

Фронтовиктарҙың бер нисәһе әле иҫән-һау йәшәп ята ауылда. Улары инде Йәтимәктә бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалған. Бына шул олаталарын етәкләп мәктәп музейына килгән тиҫтерҙәрен күреп, ныҡ көнләште Әсләм. Бигерәк тә үҙе менән бер партала ултырған Мәжит хәтәр ҡыланған була.

— Һинең өләсәйеңдең фамилияһын фронтта һәләк булған өсөн генә ҡыҙыл стендҡа яҙғандар, — тине бөгөн Мәжит. — Ә минең олатайымдың түше тулы орден-миҙал! Хатта командиры бүләк иткән исемле сәғәте лә бар. Кавалерист булған минең олатайым... Батыр һуғышҡан... — Әй һөйләй Мәжит, әй һөйләй, һис туҡтатыр әмәл юҡ.

Дөрөҫ, Ҡотлобулат бабайҙы Йәтимәктә бик ихтирам итәләр. Әсләм дә гел генә уның менән иҫәнләшеп йөрөй. Ә инде бер мәртәбә пионер сборына килгәнен әле лә онота алмай: ниндәй генә ордены, миҙалы юҡ ине Ҡотлобулат бабайҙың. Мәжиттең, әлбиттә, маҡтанһа ла хаҡы бар. Тик уның Фәғилә өләсәһе ятып ҡалған шул...

Әсләмдең уйын уҡығандай, Мәжит шунда:

— Ә минең олатайым, дошманды еңеп, иҫән ҡайтҡан! — тип ҡысҡырҙы. Әсләм һиҙеп тора, теге күҙенең сите менән генә уның өләсәһенә арналған стенд алдындағы буш быяла тартмаға ҡарап ала.

Әсләмдең дә бирешкеһе килмәй.

— Ә минең өләсәйем — ауылда һуғышта ҡатнашҡан берҙән-бер ҡатын кеше, — тине ҙур ғорурлыҡ менән.

Мәжит аптырап ҡалмай:

— Уныһына риза мин, — ти, — ләкин ҡайҙа уның наградалары? Юҡ бит. Ә минең олатай — ҡаһарман!.. Үт... — Ошо һүҙҙәр менән бөгөн Мәжит музейға алып килгән яңы экспонатты күрһәтте: ып-ысын фронт бинок-

ле! Малайҙарҙың күҙе дүрт булды. Дөрөҫ, биноклдең ике быяла күҙе лә сатнаған, тик был уның әһәмиәтен арттыра ғына төшә ине.

— Музейға килтерҙем, — тине Мәжит. Шунан асыла төштө: — Олатайым уны күптән миңә биргәйне инде. Тәүҙә үҙемә кәрәк булыр тип алып ҡалғайным. Ана бит, тартмала урын да юҡ. Аҙаҡ уйланым-уйланым да, бөтәһе лә күрһен өсөн, әпкилдем.

Малайҙар биноклде тотоп-тотоп ҡараны. Хатта мәктәп директоры ла, уның һәлмәклеген тоҫмалларға тырышҡандай, ҡулында һелккеләне, баш сайҡаны. Әсләм дә түҙмәне, биноклгә үрелде. Һүҙ юҡ, шәп экспонат ине бинокль. Директор хатта Мәжитте маҡтап ҡуйырға ла онотманы:

— Мол-лодец, егет, шәп нәмә килтергәнһең мәктәп музейына! — Ҡуҡырайырға әҙер торған Мәжиткә был етә ҡалды. Маһайып ҡына ҡарап Әсләм янынан үтеп китте.

Иртәгә мәктәп музейын асыу буласаҡ. Унда бик күп ауыл кешеләре киләсәк. Шулай уҡ фронтовиктар үҙҙәре лә ҡатнашасаҡ.

Әсләм бөгөн, мәктәптән ҡайтышлай, үҙе лә һиҙмәҫтән, ошо обелиск ҡуйылған кескәй баҡсаға инде. Өләсәһенең исеме яҙылған мәрмәр плитәгә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Үҙе эсенән генә шундай фекергә килде. «Юҡ, уның өләсәһе лә батыр йөрәкле кеше булған».

Ошолай тип уйлап та өлгөрмәне Әсләм, артында тауыш ишетеп, терт итеп ҡалды. Әйләнеп ҡараһа — Мәжит. Саҡ тын алып баҫып тора теге. Ни һүҙен, ни үҙен аңларлыҡ түгел ҡапыл ғына.

— М-мине... ол-олатайым... ни... әс-әс-әсәйеңде ау-ауыл Сов-советына...

Әсләм аптырап ҡалғайны.

— Йүнләберәк һөйлә! — тип ҡысҡырҙы. — Ни булды? Ниндәй ауыл Советы?

Мәжит саҡ тын алды.

— Саҡ таптым һине. Олатайым ауыл Советына китте. Фронтовиктарҙы йыялар. Һинең... һинең әсәйеңде лә саҡырттылар. Унда... өләсәйең тураһында нимәлер килгән...

Ауыл Советы янында ветерандар комитеты эшләгәнен яҡшы белә Әсләм. Ошо Еңеү байрамы алдынан яуҙа һәләк булыусыларҙы эҙләп, улар төрлө ойошмаларға, хәрби архивтарға, айырым кешеләргә мөрәжәғәт иткәйне. Әллә берәй хат бармы икән?

Әсләмдең йөрәге жыуланы. Тиҙ генә баҡсанан сыҡты ла, бәләкәй ҡапҡаны ла ябырға онотоп, ауыл Советына сапты. Уның артынан бер тотам ҡалмай, Мәжит йүгерҙе.

Аһылдашып килеп ингәндә, ауыл Советында байтаҡ кеше йыйылып өлгөргәйне. Уртала — Әсләмдең әсәһе баҫып тора. Бөтәһе лә тантаналы тынлыҡта ҡалған. Ҡотлобулат бабайҙың ҡулында ниндәйҙер китап. Бөтәһе лә шуға текләгән.

Ауыл Советы председателе хат уҡый ине:

«— Фәғилә менән беҙ бергә хеҙмәт иттек... Ҡыйыу санитарка булды ул. Иң ҡаты яуҙарҙа ла ҡурҡып ҡалмай торғайны. Бик күп совет яугирҙарын һуғыш яланынан алып сыҡты башҡорт ҡыҙы. Улар, яңынан сафҡа баҫып, аҙаҡ әллә күпме ҡаһарманлыҡтар күрһәтте. Шулай булғас, Фәғилә лә — ысын мәғәнәһендә ҡаһарман! Тик бер фашист пуляһы уның ғүмерен өҙҙө... Уның ҡарауы, командирҙы ҡотҡарҙы.

Ҡәҙерле иптәштәр! Батыр һуғышсының туғандары иҫән булһа, минән боевой сәләм тапшырығыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик оҙаҡ мин яугир әхирәтемдең адресын белмәй яфаландым. Хатығыҙ өсөн рәхмәт. Бына иҫтәлеккә уның юл тоҡсайында йөрөгән берҙән-бер китапты һалам. Мин уны, Фәғиләнең туғандары табылыр тип, оҙаҡ йылдар һаҡланым. Уның ғүмерен киҫкән фашист пуляһы ошо китапты ла тишеп үткән...»

Шулай тип уҡыны ауыл Советы председателе йыраҡ Украинанан килгән хатты. Ә китап ҡулдан ҡулға китте. Әсләмдең әсәһе һарғайып, күп нужа күргән китаптың тәүге битен асты ла ҡапыл илап ебәрҙе:

— Әсәкәйем!.. Бында яҙыуы ла бар...

Әсләм артыҡ түҙеп тора алманы, китапҡа үрелде. Елкәһе аша Мәжит тә ынтылып-ынтылып ҡарай ине. «Ҡорос нисек сыныҡты» тип уҡыны Әсләм китаптың исемен һәм бармағы менән китаптың ҡап уртаһындағы йәрәхәтте ҡәҙерләп һыйпаны. Ул, гүйә, тиҫтә йылдар аша батыр йөрәкле Фәғилә өләсәһенең тауышын

ишеткән кеүек ине: «Кешегә ғүмер бер генә бирелә...» Үлемһеҙ китап ижад иткән Николай Островскийҙың һүҙҙәре яңғырай ине Әсләмдең ҡолағы төбөндә.

— Яралы китап... — тип ихлас бышылданы Мәжит,— вәт мәктәп музейына бүләк.

Китап урап ҡайтҡас, Ҡотлобулат бабай, бөтәһенә мөрәжәғәт итеп, былай тине:

— Фронт тоҡсайында ошо китапты йөрөткән беҙҙең Фәғиләбеҙ фәҡәт батырҙарса һәләк булған. Беҙ уның менән сикһеҙ ғорурланабыҙ. Ауылыбыҙҙа өс йөҙ ҙә илле йорт. Ләкин Йәтимәктең ул саҡтағы һуңғы утыҙ бишенсе өйөнән фронтҡа киткән Фәғилә, ауылыбыҙҙың беренсе батыры булып, мәңге хәтеребеҙҙә ҡалыр...

Был мәлдә Әсләм менән Мәжит, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, ныҡ итеп бер-береһенең ҡулын ҡыҫып тотҡайны.

?

1. Йәтимәк ауылының элеккеһе һәм бөгөнгөһө тураһында һөйләп бирегеҙ.
2. Йыйылышта ауыл халҡы Фәғилә апайҙы ни өсөн һуғышҡа ебәрмәҫкә тырыша?
3. Фәғилә апай фронтта ниндәй батырлыҡ күрһәтә?
4. Нисек уйлайһығыҙ, Әсләм менән Мәжиттең музейҙағы һөйләшеүендә хаҡлыҡ кем яғында? Ни өсөн?
5. Ауыл Советындағы ваҡиғанан һуң был ике малайҙың ҡул ҡыҫышыуын нисек аңлайһығыҙ?

Әнүр Вахитов

## ӨС БӨРТӨК БОЙҘАЙ

Ҡаты һуғыштан бик ныҡ яраланып ҡайтып төштөм. Яранан бигерәк, йөрәк һыҙлай, эс боша. Ауылда бер ир йораты юҡ. Ҡайтыу менән, колхоз идараһы миңә, ярҙам итеп, өс бот бойҙай бирҙе. Мин бит әле эштең асылын ул ҡәҙәре асыҡ белмәйем. Барҙым. Ат ҡараусы Мөхәмәтулла бабай үҙе, ярҙамлашып үлсәшеп, арбаға һалышып йөрөнө. Келәт ишеге төбөндә ике малай тора ине. Кем малайҙары икәнен дә таныйрлыҡ түгел, ябыҡтар, йонсоғандар. Малайҙар гәрәбәләй күренгән ҡыҙғылт һары бойҙайға әллә нәмәгә ҡараған кеүек ҡарайҙар. Аңлатып биреүе ҡыйын, шундай илаһи бер ҙурлау бар ине

уларҙың күҙендә. Бына Мөхәмәтулла бабай тоҡто күтәрҙе лә арбаға алып китте. Малайҙар ҡапыл уның артынан ташланды. Баҡһаң, тоҡтоң ҡабырғаһында бәләкәй генә тишектән берәмтекләп кенә бойҙай ҡойола. Малайҙар келәт алдындағы тапанды туҙанына түгелгән шул бойҙай бөртөктәренә ташланғандар икән. Минең эстә ниҙер өҙөлгәндәй булды, күҙ алдарым ҡараңғыланды. Мин, аяҡтарым ауыртыуын да онотоп, арбаға ташландым һәм пилоткама тултырып бойҙай һалдым.

— Мә, туғаным, ҡыҙҙырып ашағыҙ...

Бер кем бер нәмә өндәшмәне. Малайҙарҙың өйҙәренә йүгереүен ҡарап торған һәр кемдең күңелендә әллә ниндәй буран, дауыл ҡупҡайны.

Ошо мәл минең күңелемдә мәңге онотолмаҫлыҡ булып уйылып ҡалды. Ошонан һуң мин икмәктең — был бөйөк һәм изге нәмәнең — ҡәҙерен аңлағандай булдым. Икмәк — кешенең аҙығы ғына түгел, ә ғорурлығы, бөйөклөгө, байлығы ул. Икмәк — кешене кеше иткән, уға тәбиғәт алдындағы көсөн, аҡылын байраҡ иткән нәмә ул. Икмәк — тормош ул. Бына мин нәмәгә төшөнгәндәй булдым. Ә беҙ бит уны асыҡҡанда ғына иҫкә төшөрәбеҙ, ҡәҙерләй белмәйбеҙ, иҫ киткес ғәмһеҙлек күрһәтәбеҙ. Әлеге бер пилотка бойҙай ваҡиғаһынан һуң мин, аяҡтар юҫыҡ йөрөргә эшкинмәһә лә, Әфҡәт менән Әхәтте генә түгел (ул малайҙар ошо Әхәт менән Әфҡәт булып сыҡты), бөтә ауылды, бөтә тирә-яҡ кешеләрен, бөтә донъяны туйҙырырҙай булып эшкә егелдем. Ауылдаштарым мине бригадир итеп ҡуйҙылар. Бригадирҙың хәле билдәле бит инде: өй беренсә йөрөйһөң. Кем нисек йәшәй, ҡалай тын ала, кемдә ниндәй шатлыҡ бар ҙа, кем ниндәй ҡайғыға тарыған. Һуғыштың иң ҡыҙыу саҡтары. Ауыр хәбәрҙәр йыш килә. Бындай саҡта, уртыңды сәйнәй-сәйнәй, тол ҡалған ҡатынға йылы һүҙ әйтәһең, етем балаларының башынан һыйпайһың. Шундай көндәрҙең береһендә әлеге Әхәттәргә барып керҙем. Өйҙәге ауыр тынлыҡ мине шунда уҡ шом эсенә алып инде. Малайҙар түрбашта ултыра. Алдарында ҡатыҡ. Тик береһе лә ҡатыҡҡа ынтылмай. Ниндәйҙер бер һағайыу менән әсәләренә ҡарап шаҡ ҡатҡандар. Йөҙҙәрендә әйтеп бөтөргөһөҙ һағыш, һорау, ғазап бар ине. Кескенә ошо ике бала йөҙөнә донъя

үҙенең аяуһыҙ ҡаты ҡанаты менән ҡағылған. Мин кергәс, элеккесә шатланыу, ығы-зығы түгел, ҡуҙғалыусы ла булманы. Мин оло яҡта өҫтәл янында баш эйеп ултырған Мөзәйәнә еңгә янына барҙым. Уның ауыр ҙур ҡулдары дәфтәр битендәй генә ҡағыҙ өҫтөндә ята ине.

— Икенсе тапҡыр бит инде, ышанмаҫлыҡ та түгел, — тип ҡуйҙы ниндәйҙер ят тауыш менән Мөзәйәнә еңгә.

— Мөзәйәнә еңгә, — тинем мин, тауышыма ягымлылыҡ, ышаныс бирергә тырышып, — икенселәй килгәс, бигерәк тә ышанырға ярамай.

Мөзәйәнә еңгә минең һүҙҙәрҙе ишетмәне лә буғай, тағы үҙенекен ҡабатланы.

— Икенсе тапҡыр...

Мин тиҙ генә малайҙарҙы сығарып ебәрҙем. Шуны ғына көткән кеүек, Мөзәйәнә еңгәнең башы өҫтәлгә һалынып төштө, ярһыулы тауыш тағы әлеге һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

— Икенсе тапҡыр...

Уның ҡарайып ҡатҡан, ҙур шараҡ ҡул бармаҡтары әлеге дәфтәр битендәй генә ҡағыҙҙы тырнап бөгәрләнеләр ҙә ике усҡа йомдолар:

— Икенсе тапҡыр... ҡайғыһы яңыра торһон тигәндәй, икенсе тапҡыр...

Мин ни эшләргә белмәй, әле егерме ете йәшендә генә көйө сикәләре салланған ошо ике бала әсәһе — тол ҡатындың сәстәрен һыйпап йыуатырға маташтым. Бер аҙҙан ул тынысланғандай булды. Ҡулын яҙҙы. Теге ҡағыҙҙы һыпырғыланы. Йөҙөнә ғәйепле кешеләрҙә генә була торған зәғиф кенә йылмайыу ятты. Ҡағыҙҙы ипләп бөкләне лә, карауатҡа баҫып, өрлөккә ҡыҫтырҙы.

— Малайҙарым белмәһен...

О, ниндәй ғәжәп һин, әсә йөрәге!

Мин урамға сыҡтым.

Әхәт менән Әфҡәт соланса баҫҡысының аҫҡы таҡтаһына ултырғандар ҙа аҡрын ғына һөйләшәләр. Ишек тауышына улар күтәрелеп ҡаранылар. Йөҙҙәрендә сабый ғына көйө тормоштоң ығы-зығыһын ғына түгел, ҡайғы-һағышын да етерлек күрергә өйрәнгән ҙур ҡара күҙҙәрендә мең төрлө һорау, борсоулы ҡайғыртыу, кем өсөндөр аҙарыныу ярылып ята ине. Мин, уларға ҡарап, яҡты йөҙ менән йылмайырға һәм килешергә тырышып

күҙ ҡыҫтым. Әфҡәттең ҡалынсараҡ ирене тартылып алды ла йәйелеп китте. Йөҙөнә нур ҡалҡты. Сабый йылмайыуы минең һағыш тулы күңелемә шифа булып инде. Мин үҙем дә һиҙмәҫтән ихлас итеп тағы ла йылмайҙым. Был юлы Әхәт тә йәнләнде.

— Зиннур ағай, әйҙә бер нәмәкәй ҡарарға.

Әфҡәт мине етәкләп тә алды. Беҙ баҡсаға индек. Кишер, сөгөлдөр, һуған түтәлдәре араһынан үтеп, кәртә буйындағы ҙур ғына түтәлгә килдек. Ул ваҡ ҡына сыбыҡ менән йәнә кәртәләп алынған. Күрәм: баҡсала малайҙарҙың иң ҡәҙерләгәне ошо түтәл икән. Ә түтәлдә ҡалаҡ буйындай ҡурпы һымаҡ йәм-йәшел булып ниҙер тулҡынып ултыра. Малайҙарға ҡарайым. Йөҙҙәре көләс, шаттар.

— Беҙҙең бойҙай күп буласаҡ, — ти Әфҡәт.

— Бойҙай?!

— Эйе. Теге бер пилотка бойҙайҙың яртыһын сәстек.

Минең күҙ алдыма тағы ла бер бойҙай тулы тоҡ килә. Тишек ҡабырғаһынан берәмтекләп кенә гәрәбә ҡойола. Ике сабый тупраҡ араһынан сүпләй уларҙы...

Көҙ килде. Колхозда эш күп. Игендең арыу уҡ өлөшө һабаҡта ултыра, картуф ята. Ошондай көндәрҙең береһендә Мөзәйәнә еңгә эшкә сыҡманы. Ҡояш түбәнәйгәйне инде. Мин, был йә иртәгә лә сыҡмай ҡалыр тип, Мөзәйәнә еңгәләргә килдем. Инһәм, Әфҡәт, бәләкәйерәк биҙрәләр менән көйәнтәләп, тыҙрайып картуф ташый.

— Әсәйең ҡайҙа?

— Баҡсала.

Баҡсаға индем. Мөзәйәнә еңгә картуф ҡаҙый ине. Күңелһеҙ генә иҫәнләште был.

Ҡулынан көрәген алдым да картуфын ҡаҙырға тотондом. Тырышып, баш күтәрмәй ҡаҙам. Мөзәйәнә еңгә йүгерек ҡулдары менән картуфтарҙы бер ергә өйә бара. Күп тә үтмәне, бышлығып, ахылдап төштөм. Минең хәлемде күргән Мөзәйәнә еңгә көрәгемде алды ла:

— Өй беренсә кергән һайын былай эшләшеп йөрөһәң, кәкрәйеп тә ятырһың, — тине. Үҙе көйәнтәләп өйгә картуф алып инеп китте. Мин дә эйәрҙем. Мөзәйәнә еңгә биҙрәләрен бушатты ла түргә уҙҙы.

— Тамағың ҡатманымы? Башың ауыртыуы баҫыла төштөмө инде? — тип йомшаҡ ҡына өндәште ул.

— Кем ул, әллә Әхәт ауырып киттеме?

— Эйе, әллә һары булған инде...

Мин Әхәт янына килдем.

Әхәттең йөҙө янып бара. Күҙҙәре ҙур асылған, ниңәлер рәнйеүле ҡарай.

— Бойҙай беҙҙең үҫмәне бит. Гел башағы буш, — тип һөйләнеп ҡуйҙы Әфҡәт, — Әхәт шуға ауырыны ла китте.

Миңә уңайһыҙ булып китте. Ни эшләргә белмәй, мин баҡсаға сығып керҙем. Ысынлап та, баҫыу бойҙайынан бер айға тиерлек һуңлап сәселгән түтәл бойҙайы буйға үҫеп еткән, әммә оҙон яҫмаҡ башаҡтарында бер генә орлоғо ла юҡ ине. Мин, уның һайын борсолоп, һәр башаҡты тотоп ҡарарға керештем.

— Бик көткәйне шул бойҙайын. Баш ҡоҫа башлағас, түбәһе күккә тейеп йөрөгәйне, — тип һөйләнде ҡайһы аралалыр минең арттан килеп еткән Мөзәйәнә еңгә.

Мине бойҙайҙың өлгөрмәүе түгел, ә уны баланың аяҡтан йығылырлыҡ ауыр кисереүе таң ҡалдырҙы.

— Борсолма, Мөзәйәнә еңгә, һауығыр улың. Һауығыр... Кем белә, бәлки атаҡлы игенсе булып китер әле ул.

?

1. Бригадир ағай ни өсөн балаларға бойҙай бирә?
2. Мөзәйәнә апайҙарҙың ғаиләһе ниндәй ҡайғы кисерә?
3. Әхәт ниндәй сәбәптән ауырып китә?
4. Икмәк һәм уның ҡәҙере тураһында әңгәмә үткәрегеҙ.

Ғайнан Әмири

## ӘСӘ ЙӨРӘГЕ

Сталинградта булды был хәл,
Ҙур һуғыш барған саҡта,
Илдәй ҡиммәт тойолғанда
Волга ярында һәр таш.

Кескәй генә бер ҡыҙ бала
Яу тынған минуттарҙа

Ҡунаҡ булып килә ине
Көн һайын окоптарға.

Был сабыйҙың һыңар ҡулын
Фашист йәҙрәһе, килеп,
Аямайса, бөтөнләйгә
Алып киткәйне өҙөп...

Окоп буйлап ҡулдан ҡулға
Баланы беҙ йөрөттөк,
Иркәләнек һәм һаҡланыҡ
Уның изге өмөтөн.

Бәп-бәләкәс был баланың
Тауҙай ине өмөтө;
Ҡыҙыҡай һөйләй ине беҙгә
Татлы хыял-сер итеп:

«— Әсәйем әйтә: «Ҡайғырма,
Беҙҙекеләр еңәсәк»,
Әсәйем әйтә: «Шул саҡта
Ҡулың һинең үҫәсәк».

Буш еңен һелтәй ҙә бала
Ышаныс менән һорай:
— Шулай бит? Һуғыш бөткәс тә
Ҡулым үҫер бит, ағай?

...Сталинградта еңеп сыҡтыҡ,
Берлинға бәреп индек.
Бала өмөтөн беҙ Еңеү
Байрағы итеп элдек.

Ышанам, был кескәй ҡыҙҙың
Үтәлгәндер теләге.
Мөғжизәләр эшләй һөйөү
Тулы әсә йөрәге!

? 1. Шиғырҙың йөкмәткеһенә иғтибар итегеҙ. Бүтән гәзәттәге шиғырҙарҙан ул нимәһе менән айырыла?

2. Сталинград һуғышы тураһында нимәләр беләһегеҙ?

3. «Илдәй ҡиммәт тойолғанда Волга ярында һәр таш», «Бәпбәләкәс был баланың тауҙай ине өмөтө», «Бала өмөтөн беҙ Еңеү байрағы итеп элдек» тигән һүҙбәйләнештәрҙең һәм аҙаҡҡы строфаның мәғәнәләрен аңлатып бирегеҙ.

## ӘМИР БАҪЫУЫ

Рамазан Өмөтбаев

Был бик күптәнге ваҡиға инде... Уның еп осо ҡаты һуғыш осорона барып ялғана.

...Ҡәһәрле һуғыштың аяуһыҙ ялҡыны Ағиҙел йылғаһының ҡултығына һыйынып ҡына ятҡан Һалабаш ауылын да ялмап үтте. Кисә генә колхоз баҫыуҙарын гөрләтеп комбайнда иген урған ирҙәрҙе, ҡеүәтле тракторҙар менән ер аҡтарған егеттәрҙе һуғыш упҡыны һөйрәп алды.

Колхоз идараһының ҡуңалтыҡ бүлмәһендә һыңар ҡулы менән сикәһен ҡыҫып, «Ҡыҙыл туғай» колхозына кисә генә райком тәғәйенләп киткән яңы рәйес Туғанбаев ултыра. Уның эскә һурыҡҡан яңаҡтарын ҡара мыйыҡ төктәре баҫа башлаған. Туҙғыған сәсен ул аратирә уң ҡулы менән өҫкә һыйпай, ләкин салғы аҫтында боҫоп ҡалған үлән шикелле, уның шырт сәсе тырпайып яңынан өҫкә ҡалҡып сыға. Гимнастеркаһының һул яҡ буш еңе киң ҡайышына ҡыҫтырып быуылған. Сусайып торған осло яурын башы, ул һөйләшкәндә раҫлап торғандай, берсә ҡалҡып, берсә аҫҡа төшөп хәрәкәтләнә.

Уның алдында ҡултыҡ таяғына таянып, кисә генә дауахананан ҡайтып төшкән 12—13 йәштәрҙәге түңәрәк ҡара янған мөләйем ҡарашлы теремек кенә бер малай баҫып тора. Уны был заманда «малай» тип атауы ла ҡыйын, сөнки улар — колхоздың кендеге, ауыл яҙмышы уларға терәлеп ҡалған. Колхоз йөгөн уртаға егелеп, ошо малайҙар һөйрәй хәҙер. Быны аңлап өлгөргән яңы рәйес Туғанбаев ағалары улар менән итәғәтле, ихлас булырға тырыша.

— Йә, Әмир Фәйзрахманович, имен-һау ҡайттыңмы? Таяҡты ҡасан ташлап, йүгереп китергә самалайһың? — тине колхоз рәйесе, аҫтан өҫкә күҙ ҡарашын һирпеп. —

Мә ултырғыс, ултырып һөйләшәйек. Атлы казактар шикелле, тормайыҡ әле, — тип өҫтәне.

Әмир, таяғын ҡаҡ иҙәнгә таҡылдатып, уға этелгән бүкәнгә килеп ултырҙы. Яланғас бүлмә эсе тын ҡалды.

Тик рәйес башы осонда ҡыҫығыраҡ күҙҙәренең мәкерле ҡараш ташлап, колхоз эшен даими күҙәтеп торған Сталин ғына, былАрҙан яуап көткәндәй, йылмайып ҡуйҙы һымаҡ тойолдо.

Дауаханала оҙаҡ ҡына ятыуҙан йонсоп, ҡобараһы осҡан, яңаҡ һөйәктәре ослайып сыҡҡан Әмирҙең башынан ниндәй фажиғәле ваҡиға үтеүен яңы рәйес ишеткәйне инде.

Ағиҙелдең юғары яғынан ҡыуғын төшкән саҡта, Һалабаш ауылы ҡаршыһындағы йылғаның тарлауығына бүрәнәләр килеп тығылды. Шаршы урында шатыр-шотор килгән бүрәнәләр сатай-ботай — ҡайһыһы арҡыры, ҡайһыһы буй тигәндәй тығылып, йылғаны бөтөнләй бикләп, быуа яһап ҡуйҙы. Көнө-төнө туҡтауһыҙ аҡҡан ағас был урында өйөлгәндән өйөлдө. Тап ошо мәлдә өҫтән «Һалабаш ҡаршыһында тығылған ағасты ике ярға сығарып, йылғаны асырға» тигән фарман килеп төштө. Был эшкә аяғынан баҫҡан бөтә кеше йәлеп ителде.

Йылғаның өҫкө яғынан ағастарҙы ат менән ярға тарттырып, штабелдәргә һалыу эше башланды. Тығылған ағастарҙы яр башына күтәреү тамамланып, йылға үҙәне таҙарғас, Ағиҙелдән иң ҙур һал ағып үтергә тейеш була. Ләкин ағастарҙы сығарып бөтөр-бөтмәҫтән: «Һыу үренән һал килә!» — тигән хәбәр Һалабашҡа килеп етә. Ике-өс урында һалдың арҡанын бәйләп туҡтатыу ниәте менән яр башына бүрәнә ослап ҡағалар.

Һалды ҡаршыларға кешеләр тәғәйенләнә, ләкин ни сәбәп менәндер, өҫтән ағып килгән һал күренгән мәлдә был бүрәнәләр янында Әмирҙән башҡа бер кем дә булмай сыға. Тарлауыҡҡа килеп ингәс тә, ҡойроғо әллә ҡайҙарға һуҙылған һал үҙенең тиҙлеген шәбәйтә. Һал өҫтөндә ғауға күтәрелә. Бына-бына һал тығылып ятҡан бүрәнәләргә бәрелеп, селпәрәмә килеүе мөмкин, уның өҫтөндәге бөтә мөлкәттең, һалсыларҙың һыу аҫтына китеү ҡурҡынысы тыуа. Һалдың алғы ишкәксеһе: «Һалды тотоғоҙ, ҡотҡарығыҙ!» — тип ҡысҡыра ла һал бәйләгән

йыуан сүс арҡанды ҡағылған бүрәнә эргәһендә торған малайға ырғыта. Арҡандың осон ҡулына эләктереп, Әмир бүрәнәне бер генә ҡат әйләндерергә өлгөрә, ҡалғанын ул хәтерләй алмай... иҫе китеп йығыла, тик һул аяғының һум итен үткер балта менән һылып алған төҫлө йөрәк өҙгөс ауыртыу ғына иҫендә уйылып ҡала.

Уның бөтөнләй яланғас ҡалған һәм бүрәнәгә ҡыҫылып бер нисә урынынан һынған аяғын район табиптары бик оҙаҡ дауалай. Ахырҙа аяҡ бармаҡтарын иҙәнгә терәй башлағас, ҡултыҡ таяғына атландырып, уны ауылына ҡайтарып ебәрәләр.

Бына бөгөн үҙ йәнен аямай һал ҡотҡарған Әмир колхоз идараһында, рәйес эргәһендә. Колхоз хужаһы үҙ һорауына яуап бирмәй, шыраулы усы менән таяғын һыйпап ултырған Әмиргә яңынан өндәшә. Шул саҡта ғына ул иҫенә килеп:

— Ә... ә... — тип һуҙа ла, — Ағай, хәҙергә ҡасан аяҡҡа баҫыу билдәле түгел, ҡалаға ҙурыраҡ больнисҡа барырға ҡушалар.

— Бына нимә, Әмир ҡустым, — тине яңы рәйес, етдиләнеп. — Хәҙер дауаханаларға йөрөр ваҡыт түгел, һөйәген тоташтырһалар, уға ит үҫер. Бына һөйәге булмаһа ғына ҡыйыныраҡ, — тип ул үҙенең буш ҡуллы һурайып торған яурынын һелкеп ҡуйҙы.

— Иртәгәнән атайың кырандасын ек тә колхозда бригадирлыҡ эшенә тотон. Аяғың шул бригада кырандасында йөрөп төҙәлер әле.

«Тиҙ генә ризалыҡ белдерһәм, яңы түрә алдында әҙәпһеҙ булып күренермен», — тип Әмир баш тартырға сәбәп эҙләне.

— Грамыт бик һай бит әле, ағай, атай киткәс, мәктәпте ташларға тура килде, — тине.

— Бына һуғыш бөткәс, икәүләп белем алырға тотонорбоҙ, — тип мәрәкәләне рәйес.

Әмирҙең атаһы Фәйзрахман ағай ҙа фронтҡа китерҙән алда оҙаҡ йылдар колхоз бригадиры булып эшләгәйне.

Шулай итеп, ун өс йәшкә сыҡҡан Әмир, ҡултыҡ таяғын да ташламайынса, колхоз бригадиры булып китте.

Үрге остан иренең йөнтәҫ ҡолаһын егеп ҡайтып килгән улын күреп, әсә шатлығының сиге булманы, ул

ҡаҡса бите буйлап тәгәрәгән әсе йәштәрен ҡул һырттары менән һөртә-һөртә, беренсе тапҡыр яңы бригадирға ҡапҡа асты. Ашъяулыҡ йәйеп, улына ҡыҫыр ғына сәй яһап эсерҙе. Улының тамаҡ төбө менәнерәк, атаһына оҡшатып ҡайҡайынҡырап эшлекле хәбәр һөйләп ултырыуы әсә күңеленә хуш килде, эске шатлығынан уның йөрәге күкрәгенә һыймай туланы. Нурлы йөҙөнә сыҡҡан ҡыуаныс һыҙаттарын улына һиҙҙермәҫкә тырышып, әсә кеше:

— Улым, атайың кешегә алъяһыҡҡа ҡағылыпһуғылып барманы. Эш кешеһен бер ҡасан да әбижәнийәгә бирмәне. Былай ҙа күңеле китек кешеләрҙе йәберләмә, бинахаҡҡа кеше рәнйетеүҙең гонаһы бик ҡаты, яҡшы һүҙ — йән аҙығы, насар һүҙ — йән ҡаҙығы, тигән боронғолар, — тип теҙҙе.

— Ул мәсьәлә, әсәй, уйланылған ул.., — тип ебәрҙе Әмир эшлекле генә. «Нимәһе уйланылғандыр?» Унының әсә кеше, әлбиттә, аңлап еткерә алманы.

Әмир атаһы бригадаһын ҡабул итеп алған саҡ ҡыҙыу бесән әҙерләү ваҡыты ине. Косилкаға ултырырлыҡ ирҙәр ҡалмағас, ул бөтә бригадаһына тиерлек ҡул салғыһы тотторҙо. Эшкә тотоноп китерҙән алда атының теҙгенен талға эләктерҙе лә, һылтыҡлай-һылтыҡлай, унан күрһәтмә көтөп торған бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға эргәһенә килде. Ҡултыҡ таяғының ергә батҡан осон тартып сығарҙы ла, ҡатҡан суҡраҡҡа терәп, уның тотҡаһына үҙенең кепкаһын элде. Таяғына уңайлыраҡ таянып, һүҙ башланы.

— Бына, апайҙар, еңгәйҙәр, бесән мәле лә етте. Ошо Ағиҙел ҡултығындағы тирмән болонлоғон йыл да косилка менән саба торғайныҡ, ә быйыл ундай мөмкинлектән мәхрүм булып торабыҙ. — Ошо урында ҡайһы бер нескәрәк күңелле ҡатындар танауҙарын мыш-мыш тартып алды. — Шулай булғас, беҙгә был бесәнлекте ҡул менән сабырға тура киләсәк. Һәр кешегә сабыу заданиеһы 30 сутый. Әгәр ҙә ки кем дә кем үҙ заданиеһын арттырып үтәһә, уға колхоз биргән ярты ҡаҙаҡ икмәктән тыш берәр стакан арыш оно бүлеп сығарам. Идара менән ул хаҡта һөйләшелгән, — тип ашараҡ һуҡтырҙы яңы бригадир. — Ә бына, Сәлимйән олатай, — тип ул алғараҡ сығып шыма һаҡалын кәкре бармаҡтары менән

тарап, ниҙер уйланып торған ҡартҡа мөрәжәғәт итте, — арбама һалып түшке, яныуыс алып килгәнмен, һинең бурыс, олатай, салғы тапап, ваҡытында салғы янып тороу булыр, — тине. — Колхоздың бесән әҙерләү буйынса эш планында быға бер ярым труддин ҡаралған, олатай, — тип өҫтәне яңы бригадир.

— Ә уныһы, улым, ҡасмаҫ ине әле, бына йәй башында колхозға ғына түгел, үҙебеҙгә лә етерлек бесән эшләп ҡалырға кәрәк. Ҡапылда үлергә йыйынмайбыҙ ҙа баһа, — тине ҡарт. — «Йә, балалар, хәйерле сәғәттә!» — Ҡарт беренсе бакуйға юл башланы.

Бөтә кеше араһынан имсәк балаларын күтәреп бакуйға ыңғайлаған бер нисә ауыл ҡатынын күреп, бригадир уйға ҡалды. «Был нисек була инде? Миһырбаныу еңгәйҙең был бишенсе балаһы, ул бөгөн сабыйын күтәреп, колхоз эшенә килгән, ә ҡалған береһенән-береһе вағыраҡ балалары уның ярты ҡаҙаҡ икмәген көтөп, өйҙә тилмереп ултыра. Ә уның менән йәнәш атлаған Мәстүрә әле тормошҡа сыҡмаған, дәрте һәм көс-ғәйрәте артылып торған йәп-йәш ҡыҙ. Әлбиттә, ул Миһырбаныу еңгәгә ҡарағанда нығыраҡ та, яҡшыраҡ та эшләйәсәк, сөнки, балалы ҡатын бер бакуй сыҡҡас та, өйҙә ҡарауһыҙ ҡалған сабыйҙарҙың яҙмышы уға күңел тыныслығы бирмәйәсәк, кәүҙәһе болонда, ә йәне өйҙә буласаҡ. Шулай булғас, колхоз ҡалдауынан алған ике бот арыш онон стаканлап ғаиләһе ишле ҡатындарға таратырға кәрәк, буйҙаҡ ҡыҙҙар нисек тә түҙер», — тигән фекергә килә колхоз бригадиры. «Ә уларҙың эшен нисек күрһәтергә?» — тигән уй тағы борсой. Кемдер уның ҡолағына: «Арттырып яҙырға кәрәк, бригадир иптәш», — тип бышылдағандай була.

Ун өс йәшлек бригадир тартып-һуҙып стаканлап он бүлеп, «Ҡыҙыл туғай» колхозының күп балалы ғаиләләрен аслыҡ тырнағынан ҡотҡарып алып ҡала. «Тик тиҙерәк арыш бешеү көнөн күрергә насип булһа ярар ине», — тип ҡайғыра ул. «Арышҡа төшөп китһәк, унда ҡурмас ҡурып, арыш талҡанын тартып аяҡҡа баҫып китер инек», — тип өмөтлө хыял менән йәшәй ул. Бына тере кешегә уныһы ла килеп етә.

Арыш урағының башланыуы бригадир Әмир башына шатлыҡтан күберәк ҡайғы-хәсрәт килтерә. Башаҡ

ҡырҡып алып ҡайтыусылар өсөн 1932 йылдың 7 авгусында уҡ сыҡҡан 7 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү язаһы уның йөрәгенә оло ҡурҡыу һала. Ураҡҡа төшкән тәүге көн үк уның ҡурҡыуы дөрөҫ икәнен күрһәтә. Кис эш бөтөп ҡайтырға сыҡҡан үҙ колхозсыларының ҡулында ул ҡырҡылған, ыуылған башаҡтар тултырылған төрлө төҫтә, төрлө ҙурлыҡта моҡсайҙар күрә. Уның йөрәге жыу итеп китә, сөнки бының аҙағы яҡшылыҡ менән бөтмәйәсәген йәш булһа ла асыҡ күҙ алдына килтерә.

Хәбәрҙең ҡайғылыһы ла, ҡыуаныслыһы ла халыҡ күңелендә оҙаҡ ятамы ни? «Бына кисә генә күрше «Ҡыҙыл ялан» колхозында арыш урлауҙан ҡайтып килгән ҡатын-ҡыҙҙарға тентеү ойоштороғандар. Балалы ике ҡатынды суд язаһына тарттырып, НКВД-ға алып киткәндәр икән»,— тигән хәбәр Һалабаш ауылына ла килеп ишетелә. Ләкин бригадир нисек кенә һаҡ булырға кисәтһә лә, ил өҫтөнә килгән аслыҡ халыҡты яза алыуҙан да ҡурҡытмай, ул законға ҡарағанда көслөрәк булып сыға. Ә ул арала «Кисә НКВД башаҡ ҡырҡҡан өсөн фәләнде алып киткән, шул ауылда халыҡҡа тентеү үткәргәндәр», — тигән шомло хәбәр ҡуйырғандан-ҡуйыра.

Был хәбәрҙәр бригадирҙың башын ҡайғылы уйға һала. «Нишләргә? Һуғылған арышты хеҙмәт көнөнә таратып биреп булмай, бөртөгөнә тиклем дәүләткә тапшырырға», тигән ҡәтғи күрһәтмә бар. Көнөнә һәр кешегә бирелгән бер ҡаҙаҡ икмәк менән көн итеү мөмкин түгел. Бригадир баҫыу башында ултырыусыларҙы эш бөткәс бер көн йыя ла:

— Апайҙар, еңгәйҙәр, мин һеҙҙең көн дә башаҡ урлап алып ҡайтҡанығыҙҙы күреп йөрөйөм, ләкин башҡаса бер ниндәй ҙә сара юҡлығын да беләм. Ғаиләләрегеҙ асыға — уныһы ла миңә мәғлүм. Нишләп ҡарайбыҙ? Берәр аҡыллы кәңәшегеҙҙе бирһәгеҙсе, — тип үтенә бригадир.

Ләкин моҡсайҙарын ҡулына тотоп, яурындарына ураҡтарын һалып торған бригада халҡы, бер нисек тә кәңәш бирә алмай, тынып ҡала. Бөтәһенең талған күҙ ҡараштары барлыҡ затлы ниғмәттәрҙән ҡыйбатыраҡ башаҡлы моҡсайҙарға төбәлә. «Бөгөн бригадир беҙҙең ба-

шаҡтарҙы тартып алырға итә, күрәһең», — тигән шомло уй һәр кемдең йөрәген өйкәй. Бер ниндәй ҙә һүҙ ала алмай аптырауға ҡалған бригадир яңынан телгә килә:

— Апайҙар, еңгәйҙәр, нишләп шул ҡәҙәре батыр ҡыланаһығыҙ, исмаһам, закондан ҡурҡмаһағыҙ, балаларығыҙҙың тере етем ҡалыуын уйлағыҙ. Ҡылған енәйәтегеҙ өсөн төрмә ишеге алдында тороуығыҙ һеҙҙе әҙ генә лә борсомаймы ни? Ул тиклем кемгә ышанаһығыҙ? — тип бригадир, алдан үҙе илап ебәреүҙән ҡурҡҡандай, ҡарашын ергә төбәй.

Сафта торған һалдаттар шикелле, уның алдында баҫҡан күмәк ҡатын-ҡыҙ бер ауыҙҙан:

— Әмир ҡәйнеш, бар ышанысыбыҙ тик һин генә. Бала булһаң да, һиндә атайың холҡо бар. Ул да бер ваҡытта ла кешене ғәйепһеҙгә НКВД ҡулына тотоп бирмәне.

— Эй, Әмир ҡустым, бар ышанысыбыҙ һиндә генә. Астан үлтерһәң дә, алып ҡалһаң да, тик һин генә — һиңә баш һалабыҙ, — тип шаулашты халыҡ.

Бригада кешеләренең ышанысынан Әмирҙең күңеле тулды, башын ситкә бороп, тамағына тығылған төйөндө йоторға тырышты, ләкин йөрәкте телгеләгән ул төйөн ары ла, бире лә китмәне. Көс-хәл менән үҙен ҡулға алған бригадир, күптән уйлап йөрөгән фекерен үҙенә төбәлеп торған кешеләргә асыҡтан-асыҡ әйтергә мәжбүр булды.

— Ағай-эне, улай булһа, бына минең һүҙҙе тыңлағыҙ: хәҙер мин һеҙҙең ҡулығыҙға химик ҡәләм тоттором. Шуның менән моҡсайҙарығыҙ тышына исемегеҙҙе яҙығыҙ ҙа анау торған минең арбаға алып барып һалығыҙ. Тик аҙаҡтан үпкәләштән булмаһын: мин уны өйгә алып ҡайтҡас, һәр кемдең ғаилә һанына ҡарап, яңынан бүләсәкмен. Әгәр инде ошоға риза булмаһағыҙ, теләгәнегеҙҙе эшләгеҙ, үҙегеҙ тотолғанса, һәр кемегеҙ айырым ташығыҙ, — ти ҙә бригадир яуап көтә. — Мин, сүтәки бригадир кеше, мине идара НКВД-нан тентетергә бирмәҫ, — тип өҫтәп ҡуя Әмир.

— Әмир ҡәйнеш, Әмир ҡусты, беҙ риза. Белгәнеңде эшлә, — тип риза була халыҡ.

Ҡырандасына һалынған бер өйөм башаҡлы моҡсайҙарҙы Әмир бесән менән баҫыра ла өҫтөнә ултырып, ауылға ҡайтып төшә. Шулай ураҡсылар йыйған башаҡты ул үҙ өйөндә һуҡыр шәм яҡтыһында көн дә

яңынан бүлеп, кешеләргә таратып бирә. Бер аҙ тамағы туйған халыҡтың эшкә дәрте арта, болонлоҡтан өҫкә күтәрелгән Оҙонһырт битендәге арыш баҫыуының майҙаны күҙгә күренеп кәмей, — эш ырап ҡала.

Колхоздың яңы рәйесе Туғанбаев йәш бригадирҙы маҡтап бөтөрә алмай. Идарала йыйылған һайын уның исемен әйтмәй китмәй. Тик уны бер генә нәмә аптырата: бөтә тирә-яҡта ураҡ урыусыларға тентеү төшөрөп, НКВД кешеләре көн дә бер-ике кешене алып китеп тора. Ә уның колхозында хәҙергә именлек, эш тә ырамлы ғына алға бара. Был ваҡиға уны ғына түгел, район түрәләрен дә ғәжәпкә ҡалдыра. Һиҙҙермәҫтән колхозға баҫып инеп, Әмир бригадаһы кешеләренә, эш бөткәс, тентеү ойоштороп та ҡарайҙар, ләкин бушҡа ғына... Уларҙың береһендә лә башаҡ таба алмайҙар.

Улының хилаф юлға баҫыуын көн дә күреп йөрөгән әсәһенең йөрәге өҙгөләнә, ул ҡат-ҡат улын был эштән баш тарттырырға ла юл эҙләй, уның кистәрен башаҡ бүлеп ултырыуын күреү әсә кешегә ғазапҡа әүерелә. «Улым, буш менән булма, йәш кенә көйөңә үҙеңде һәләк итеп ҡуйырҙар. Ошо уҡ ауыл кешеләренең һине тотоп биреүе мөмкин», — тип илай-илай киҫәтә.

Ә Әмир әсәһе һүҙенә ҡул ғына һелтәй. «Мин уны үҙемә алмайым да баһа. Кеше өсөн эшләйем. Ас халыҡтан мин нисек ураҡ урҙырайым? Ҡамыт кейҙерерҙән алда ана атты ла ашатып-эсереп алалар. Был бит кеше, әсәй?», — тип Әмир һаман үҙенекен эшләй. «Ярай, улым бөтөнләй башһыҙ түгел, улай-былай килеп сыҡһа, халыҡ та, идара ла берҙәй тороп, яҡлап алып ҡалырҙар әле», — тип әсә күңеле лә тынысланғандай була, улының эшен яҡшыға юрай.

Ураҡты яртылағас, «Ҡыҙыл туғай» колхозының Оҙонһырт баҫыуында көпә-көндөҙ болотһоҙ зәңгәр күктә йәшен йәшнәне. Колхоздағы ниндәйҙер шымсының ошағы буйынса баҫыу ҡырынан бесән менәнябылған моҡсайҙар өҫтөнә ултырып ҡайтып килеүсе бригадирҙы НКВД-ның ике кешеһе юлда ҡаршы ала. Колхоз бригадирын арбанан һөйрәп төшөрәләр ҙә тентеү яһайҙар. Уның таянып торған ҡултыҡ таяғын һыпыра тартып алып, береһе ҡап уртаға һындыра ла юл ситендәге сауҡалыҡҡа ырғыта. Юлда талаш-тартыш барғанын

күргән ураҡсылар эштәрен ташлап, бригадир эргәһенә йүгерә. Һыңар аяғы менән сатанлап, улар юлына Әмир ҡаршы сыға.

— Апайҙар, еңгәйҙәр, ураҡтарығыҙҙы ташлағыҙ. НКВД кешеләренә тейә күрмәгеҙ, барыбыҙ ҙа һәләк буласаҡбыҙ. Самосуд ойоштормағыҙ, — тип ҡысҡыра, үтенә, ялбара.

— Ул ғәйепле түгел!

— Уның тырнаҡ ҡараһындай ҙа ғәйебе юҡ!

— Беҙ минауат, беҙҙең барыбыҙҙы ла ултыртығыҙ! — тип халыҡ ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, НКВД кешеләрен этеп-төртөп улар арбаһында ятҡан үҙ моҡсайҙарын таратып алырға тотона. Бал ҡорто кеүек ҡуҙғыған кеше араһына Әмир инеп китә.

— Зинһар өсөн, моҡсайҙарығыҙҙы улар арбаһына кире һалығыҙ. Ураҡтарығыҙға тотонмағыҙ, ҡан ҡоймайыҡ, апайҙар, барыбыҙ ҙа һәләк булмайыҡ, — тип үҙ кешеләрен өгөтләй. Бер аҙ тыныслана төшкән халыҡ алған моҡсайҙарын арбаға кире тейәй башлай, ураҡтарын ергә ҡаҙай, бер урынға өйөлөшөп, инде нәмә булырын көтә башлай. Шул саҡ бригадир Әмир башында йәлпәшеп ятҡан кепкаһын ала ла:

— Хушығыҙ, апайҙар, еңгәйҙәр, минең ауылдаштарым. Мине насар итеп иҫкә алмағыҙ. Бына фашистарҙы тар-мар итеп, беҙҙең атайҙар әйләнеп ҡайтһа, ҡурмас түгел, күпертеп ҡалас ашап ятырбыҙ әле. Әгәр һеҙгә берәр насарлыҡ ҡылһам, түбәнселек менән ғәфү үтенәм,— ти ҙә бер аяғы һынған ҡош шикелле, ырғыйырғый НКВД арбаһына үҙе барып ултыра.

— Хуш, балам, мир өсөн башың һәләк булды, — тип уның менән беренсе булып салғы яныусы Сәлимйән бабай барып хушлаша.

Күҙ йәштәрен тыя алмай арба өҫтөндә бойоғоп, әллә ниндәй күңелһеҙ уйҙарға дусар булып ултырған бригадирҙары менән бөтә халыҡ һуңғы тапҡыр күрешеп ҡалырға, устарындағы йөрәк йылыһын уға бүләк итергә тырыша.

— Барыһы өсөн дә рәхмәт һиңә, беҙҙең бригадирыбыҙ.

— Һалабашҡа имен-аман кире әйләнеп ҡайтырға насип булһын! — тип хушлаша уның менән ауыл халҡы. Артҡа әйләнеп боролоп ултырған йәш бригадир ҙа

күҙенә тығылған йәштәрен йотоп, ҡалтыранған тауышы менән:

— Әсәйемә минән сәләм тапшырығыҙ, минең ауылдаштарым алдында бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ, тип әйтә күрегеҙ, — тип үтенә. Унын һуңғы һүҙе шул була.

Әмир оҙаҡ өйөлөшөп, илай-илай уны оҙатып ҡалған ауылдаштарына күҙҙән юғалғансы ҡулын болғаны, ҡараштары талғансы уларға ҡарап барҙы. Яңы ғына таҙа дегет менән майланған, сылтлап барған НКВД арбаһының тәгәрмәстәре уны тормош билдәһеҙлегенә алып китте.

Яңғыҙ улы ҡулға алынып киткәндән һуң ярты йыл үтеүгә әсәһе Вәрәкә апайға иренең дә ҡара ҡағыҙы килде.

Йылдар үтте, ләкин һыу төбөнә батҡандай ғәйеп булған колхоз бригадирынан бер ниндәй ҙә хәбәр-хәтер булманы, ул аты-юлы менән юғалды.

Хәҙер улар ғаиләһенән бер кем дә юҡ инде. Бер нисә йыл үтеүгә юғалған ике ир кеше өсөн көнө-төнө илап һары ҡайғыға юлыҡҡан Вәрәкә ике күҙенән дә мәхрүм булып ҡалды, һағыш хәсрәте унын аҡылын да юйҙы, ул эҙһеҙ юғалған улы менән көнө-төнө һаташты. Ағиҙелдең ташҡан миҙгелендә «Улымды сығып ҡаршы алам», — тип яр буйынан китеп барған Вәрәкәне лә Ағиҙел упҡыны йотто.

Үҙ бригадирҙары хөрмәтенә Һалабаш ауылы халҡы Оҙонһырт ҡырын «Әмир баҫыуы» тип атаны. Бригадирҙың тере ҡалған ауылдаштары йыл һайын арыш урағы башланыу менән беренсе уңыштың игененән күпертеп ҡалас бешереп ғәйепһеҙгә башын һалған ун өс йәшлек Әмирҙе иҫкә төшөрә, был көндө тәбиғәт тә, унын яҡты йәш сырайын хәтергә алғандай, үҙенең ләйсән ямғырын һибеп үтә, әйтерһең дә, ул да йәш Әмирҙе һаман һағынып көтә, баҫыуҙа осрашыуҙан өмөтөн өҙмәй... Ғәйепһеҙ ҡорбандар өсөн тәбиғәт тә һыҡтай...

**?** Хикәйәлә ниндәй осор тасуирлана? Был осорҙа кеше тормошо, балаларҙың фажиғәле яҙмышы һәм быны сәбәптәре нисек тасуирлана?

## Хикәйә тураһында

Тормошта ҡыҫҡа ваҡыт эсендә булып үткән бер генә ваҡиға алынып, уның нимә менән башланып, нисек тамамланғанын бөтөн килеш күрһәткән әҙәби әҫәр хикәйә тип атала. Хикәйәлә ҡатнашыусы персонаждар күп булмай, уларҙың тормошо тураһында ентекле, оҙон итеп һөйләнелмәҫкә лә мөмкин. Мәҫәлән, Әнүр Вахитовтың «Өс бөртөк бойҙай» хикәйәһе һуғыш ваҡытында Әхәт менән Әфҡәт исемле малайҙарҙың аслыҡтан интегеүҙәре, бригадир биргән бер пилотка бойҙайҙы үҫтереп уңыш алырға тырышыуҙары ваҡиғаһына нигеҙләнә.

* * *

## Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы халыҡ йырҙарынан

Ниңә ашыға егет, ниңә ашҡына,
Ни ишеткән егет, ни күргән?
Намыҫы бар егет нишләп ятһын,
Ил өҫтөнә бөгөн яу кергән.

Ҡиблаларҙан өргән ҡаты елгә
Урал ағастары ла шаулаша.
Түшкәйҙәрен киреп, батырҙарса,
Урал егеттәре яулаша.

Пуляң тейһен фашист күкрәгенә,
Үҙ яфаһы ҡайтһын үҙенә.
Беҙҙең илдән киткән ыласындар
Шатлыҡ менән ҡайтһын иленә.

# Ун беренсе бүлек

*Эй, замандың ярһыу аты!*
*Елең бәрһә биттәремә,*
*Үкенмәмен был донъяға*
*Килгәнемә, киткәнемә.*



**Мостай КӘРИМ**

**1919**

Мостай Кәрим — Башҡортостанда ғына түгел, башҡа илдәрҙә лә киң танылған шағирҙарҙың береһе. Уның әҫәрҙәре илебеҙҙәге күп халыҡтарҙың теленә тәржемә ителгән.

Мостай Кәрим 1919 йылда Шишмә районы Келәш ауылында тыуған. Тәүҙә ауыл мәктәбендә, унан һуң Өфөлә уҡый. Күңелле балалыҡ тураһындағы тәүге шиғырҙары «Йәш төҙөүсе» гәзитендә баҫыла. Юғары уҡыу йортон тамамлағас та, Бөйөк Ватан һуғышына китә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн бер нисә орден һәм миҙал менән бүләкләнә.

Мостай Кәрим шиғырҙар, поэмалар, проза һәм драма әҫәрҙәре ижад итә. Уның балалар өсөн яҙылған «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс таған» исемле повестарын уҡыусылар яратып уҡый.

1963 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. Мостай Кәрим — Социалистик Хеҙмәт Геройы, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы, РСФСР һәм СССР Дәүләт премиялары лауреаты. 1984 йылда ул Ленин премияһы менән бүләкләнде.

# ӨС ТАҒАН

(Повестан өҙөк)

## Бөркөтлө

Һеҙҙең Бөркөтлөлә булғанығыҙ бармы? Юҡмы ни? Донъялағы иң матур ауылдарҙың береһен күрмәй нисек түҙәһегеҙ икән? Ҡыйындыр, әлбиттә. Ә бит Бөркөтлөнө күреү генә түгел, шунда тыуып, шунда үҫкән кешеләр бар. Уларға рәхәт, исмаһам, тыуҙыңмы, рәхим ит: Бөркөтлө.

Шулай ҙа кешеләрҙе аңламаҫһың. Бөркөтлөләр үҙ ихтыярҙары менән ҡайҙағылыр алыҫ ҡалаларға, күҙ күрмәҫ, ҡолаҡ ишетмәҫ илдәргә барып йөрөп ҡайталар. Күргәндәрен мәрәкә итеп һөйләйҙәр. (Мин һуғышты әйтмәйем. Унда берәү ҙә мәрәкә күрәйем тип бармаған.)

Йорттан сыға алмағандары лимон-әфлисундар үҫкән йыраҡ ерҙәр, шаулы диңгеҙҙәр, ҡыш булмай торған илдәр, төн булмай торған яҡтар тураһында хыялланалар. «Их, шуларҙы барып күрһәң ине!» — тиҙәр. Ә бына: «Их, Бөркөтлөнө күрһәң ине!» — тип уфтанған кешене, ниңәлер, осратырға тура килмәне. Кешеләрҙең шундай ҡыҙыҡһынмаусан булыуына аптырарһың. Ҡыҙғаныс, әлбиттә.

Бөркөтлөлә, әйткәнемсә, донъя күргән кешеләр байтаҡ. Күрмәгәндәре лә сей наҙан түгел. Аҡты ҡаранан айыралар. Ана, һарыҡ көтөүсеһе Шәрифулланы ғына тыңлап ҡарағыҙ. Иллегә етеп, ситкә аяҡ атлағаны юҡ, ә үҙе ер шарын биш бармағы кеүек белә. «Ҡыҙыл буяуҙы Ҡыҙыл диңгеҙ һыуынан, аҡ буяуҙы Аҡ диңгеҙ һыуынан яһайҙар, йәнә Һары диңгеҙ, Йәшел диңгеҙ, Зәңгәр диңгеҙ бар...— ти ул.— Йылы яҡта шундай тигеҙ далалар бар, ҡояш сыҡҡанда, йомортҡа тәгәрәтеп ебәрһәң, ҡояш батҡансы туҡтамай барасаҡ», — ти.

Ә Бөркөтлө ҡарағас, ҡайын, ҡарағай урмандары менән ҡапланған тауҙар араһында — Урал итәгендә ултыра. Уның ике яғында ике ҙур күл. Береһен Ҡалҡанкүл, икенсеһен Ҡылыскүл тип атап йөрөтәләр. Ҡалҡаны алыҫыраҡ. Ҡылысы ауыл эргәһендә генә. Тау битләүендә үлән йәшәреүгә, Ҡалҡандың һыуы йылы-

нып та өлгөрә, ә Ҡылыстың һыуы йәй уртаһында ла боҙ кеүек һалҡын була, инһәң, тәнде ҡурып ала.

Донъяла һис нәмә үҙ-үҙенән генә яралмай. Әлеге күлдәрҙең барлыҡҡа килеүе тураһында ошондай әңгәмә йөрөй. Имеш, борон-борон заманда, Уралды илбаҫарҙарҙан һаҡлағанда, бәһлеүәнгә уҡ тейгән. Ул гөрһөлдәп ергә ауған. Уң ҡулындағы ҡылысы бер яҡҡа, һул ҡулындағы ҡалҡаны икенсе яҡҡа барып төшкән. Ҡалҡан төшкән ерҙә йылы күл, ҡылыс төшкән ерҙә һалҡын күл ҡалҡҡан. «Ни өсөн шулай ике төрлө һыу сыҡҡан?» — тип һораһағыҙ, баяғы Шәрифулла былай тип яуап бирер: «Сөнки ҡылыс йән ҡыя торған ҡорал, ә ҡалҡан йән һаҡлай торған яҡшы нәмә», — тиер.

Бөркөтлөнөң күрке күлдәр генә түгел. Уның тирәһендә кем уҙарҙан ярышып күккә үрләгән тауҙар, тау араларындағы йәшел үҙәндәр, ҡаяларҙан урғылып сыҡҡан шишмәләр, таштан ташҡа һикереп уйнаған ҡоралайҙар, яҙғы шарлауыҡтарҙан көҙгө ҡырауҙарға тиклем тынмай һайраған ҡоштар йәм өҫтөнә йәм өҫтәй. Яҙғы күкрәүҙәр ваҡытында бында тауҙар гөрһөлдәп тора. Әйтерһең, улар үҙҙәре күкте күкрәтәләр. Урмандарҙа беләк йыуанлығы көпшәләр үҫә, аҡландарҙа турғай башы ҙурлыҡ еләктәр бешә. Кеше аяғы баҫмаған түбәләрҙә бөркөттәр бала сығара. Улар йыш ҡына, саңҡ-саңҡ итеп, ауыл өҫтөнән осоп үтәләр. Ана шул бөркөттәр инде бынан бик күп йылдар әүәл ауылға исем биргәндәр: Бөркөтлө.

? 1. Бөркөтлө ауылының күркәмлеген автор нисек тасуирлай?
2. Күлдәрҙең барлыҡҡа килеүе тураһындағы әңгәмәнең (легенданың) йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Яҙыусы был легенданы ни өсөн индергән?
3. Үҙегеҙҙең тыуған төйәгегеҙҙең матурлығын нисә күрәһегеҙ?
4. Йорттарынан ситкә сығып йөрөмәгән бөркөтлөләр бүтән ерҙәрҙе нисек күҙ алдына килтерәләр? Һеҙ уларҙың хыялдарына нисек ҡарайһығыҙ?

### Күкрәктауҙағы әңгәмә

Ҡылыскүл эргәһендәге бейек түбәне Күкрәктау тип йөрөтәләр. Уның төньяҡ битләүен ҡуйы ҡарағай урма-

ны ҡаплаған, ул яртылаш сәсе алынған малай башына оҡшап ҡуя. Был яҡта ул гел шулай: ағастар тауҙарҙың төньяҡ итәктәренә һыйынып үҫәләр. Әйтерһең, улар тауҙарҙы һалҡын елдәрҙән ышыҡлар өсөн шулай итәләр.

Күкрәктау башына менеп ҡараһаң, күк сите әллә ҡайҙа алыҫҡа күсеп китә. Түбәндә Йайыҡ буйына ултырған Тирмә ауылының йорттары умарталыҡтағы умарталар саҡлы ғына күренә. Ә Урал итәгендә көтөүселәр яҡҡан усаҡтың төтөнө Шәрифулла төрөпкәһенән сыҡҡан төтөн саҡлы ғына. Тик әллә ҡайҙа ятҡан Кирәмәт кенә аяҙ көндәрҙә ҡараған һайын яҡынайған һымаҡ күренә. Тулҡын-тулҡын булып күгәреп ятҡан бүтән түбәләр араһында уның ғына башы, ҡояшҡа ялтырап, ағарып тора. Йәйге селләгә тиклем унда ҡар ята.

Кирәмәт башына менеү тураһында күп малайҙар хыяллана. Ләкин унда менеү өсөн ҡара урмандар, текә ҡаялар, тәрән соҡорҙар аша уралып-уралып киткән тар, хәтәр һуҡмаҡ менән бер көн, бер төн барырға кәрәк. Ирмен тигән кеше Кирәмәткә менмәй ҡалмаҫ, әлбиттә.

Ә хәҙергә Күкрәктауҙың көньяҡ битләүендә Шәрифулланың һарыҡтары керт-керт үлән ашап йөрөй. Тау башында эреле-ваҡлы биш кеше ултыра. Һары мыйыҡлы, ас яңаҡлыһы Шәрифулла ағай үҙе инде. Ә ҡалған дүртеһе тураһында һеҙҙең хатта ишеткәнегеҙ ҙә юҡтыр. Ғәжәп тә түгел. Уларҙың әлегә һис ни менән дан ҡаҙанғандары юҡ. Өсөһө кисә генә төрлө-төрлө билдәләр менән бишенсе синыфты тамамлап сыҡты. Тәртип яғы ла ал да гөл генә булманы. Шулай ҙа ҡойроҡ-фәлән эйәрмәне.

Ыҫмала төҫлө ҡуйы ҡара сәсле, ҡылыс танаулы, сандыр малай Ғабдулла исемле. Уның сәсенә ҡулыңды тейҙерһәң, бармаҡтарың сатнап йәбешер һымаҡ. Йәмшек танаулы, табаҡ битле йыуаны — Вәзир. Һыуыҡта ла, эҫелә лә уның ике бит алмаһы гел ҡыҙарып янып тора. Вәзирҙең күҙҙәрен сылт-сылт йома торған ғәҙәте бар. Бер саҡ яңы килгән уҡытыусы апай, үсекләшә тип уйлап, ошо ҡылығы өсөн уны синыфтан да ҡыуып сығарҙы. Үҙе шундай булһа ла, рогатканан һәләк мәргән ата ул. Өсөнсөһө — Бөркөтлөлә берҙән-бер ерән



сәсле, һипкелле малай — Айҙар. Уның «Ҡыр кәзәһе» тигән ҡушаматы ла бар. Шәп йүгергән өсөн шулай тип йөрөтәләр. Дүртенсеһе саҡ ҡына ситтәрәк ултыра. Уның әле етеһе лә тулмаған. Сысҡан ҡойроғо кеүек кенә толомона матур ҡыҙыл таҫма ҡушып үргән. Исеме лә матур уның — Гөлнур. Тик алғы тештәре генә юҡ. Теш булмағас, ауыҙында һис кенә лә һүҙ тормай.

Шәрифулла ағай бик серле тауыш менән нимә тураһындалыр әңгәмә һөйләй. Ҡалған дүртеһе тын да алмай тыңлап ултыра. Байыр яҡҡа тәгәрәгән ҡояштың һарғылт нурҙары Шәрифулланың ыҫланған мыйыҡ остарына төшөп йымылдайҙар. Йымылдайҙар ҙа уның аҫҡы иренենә һикереп төшәләр. Шуға күрә ағайҙың ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙе ниндәйҙер бер яңы серҙе аса һымаҡ.

Нимә һөйләй икән ул? Әйҙәгеҙ, ҡолаҡ һалып ҡарайыҡ.

— ...Кирәмәт башына менеү — бөркөт осор бейеклеккә күтәрелеү тигән һүҙ ул. Төндәрен уның өҫтөндә, — ти Шәрифулла, — усаҡ тирәһендә әйләнгән күбәләктәр төҫлө, йондоҙҙар һикерешеп уйнай. Улар түбән үк төшәләр, үрел дә тот үҙҙәрен! Ҡайһы бер үтә шуҡтары, яңылыш ҡаяға һуғылып, селпәрәмә лә киләләр. Ана шуны инде йондоҙ атылыу тиҙәр.

Әммә Кирәмәттең ҙур хәсрәте бар. Уның башындағы кескәй генә күлдә әүәл заман алтын-көмөш балыҡтар мыжғып торған. Бәлки, йондоҙҙар улар менән шаярыр өсөн тау түбәһенә төшкәндәрҙер ҙә. Балыҡтарҙың күптән

инде заты ҡороған, ә йондоҙҙар иҫке ғәҙәттәрен һаман да ташламағандар. Балыҡтарҙы бер яман кеше һәләк иткән. Улар күлгә бер нисә суртан ебәргән. Шул суртан аҙмы-күпме ғүмер итеүгә алтын-көмөш балыҡтарҙы йотоп бөтөргән. Тау быға ҡайғырған. Шул ҡайғынан түбәһендәге күле лә кибә башлаған. Ул кибеп бөтһә, Кирәмәт дөм-һуҡыр булып ҡаласаҡ. Ҡояш яҡтыһын да, болоттар аҡҡанын да, йондоҙҙар йымылдауын да күрмәйәсәк. Теге ҡомһоҙ суртан да дөмөгөүен дөмөккән, тик күлдәге йән эйәләрен бөтөрөп дөмөккән.

Әгәр батыр егеттәр табылып, беҙҙең Ҡылыстағы төҫлө алтын-көмөш балыҡтарҙы шунда илтеп ебәрмәһәләр, ул күл кибәсәк. Кирәмәт хәсрәтенән ишелеп төшәсәк. Көндәрҙән бер көндө анау аҡ нур сәсеп торған бейек тау урынында бушлыҡ тороп ҡалһа, бик күңелһеҙ буласаҡ. Шулай түгелме ни, егеттәр?

«Егеттәр» өндәшмәне.

**?**

1. «Ирмен тигән кеше Кирәмәткә менмәй ҡалмаҫ» тигән һөйләм нимә аңлата?
2. Кирәмәт башында әңгәмәләшеүселәрҙең һәр береһенә хас сифаттарҙы асығыҙ.
3. Шәрифулла ағайҙың Кирәмәт тураһындағы әңгәмәһенең мәғәнәһен һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

## Башлыҡ һайлау

Ҡояш алыҫтағы урманға барып төртөлгәндә, Шәрифулла һарыҡтарын фермаға табан ҡыуып китте. Малайҙар ҙа ҡайтыр яҡҡа ыңғайланы. Башлап Вәзир өндәште:

— Кирәмәттең хәле мөшкөл икән...

— Бер суртан арҡаһында... — тип ҡушылды Айҙар.

— Суртан түгел, бер яман кеше арҡаһында, — тип төҙәтте Ғабдулла. — Кирәмәтте был хәлдә ҡалдырырға ярамай.

— Күп итеп ыуылдырыҡ йыяйыҡ та, — тип кәңәш бирҙе Вәзир, — илтеп һалайыҡ. Балыҡ ул ыуылдырыҡтан ярала.

Айҙар уны ҡырт киҫте:

— Ыуылдырыҡ түгел, тере балыҡ ебәрергә кәрәк!

— Ҡыҙыл ыуылдырыҡ магазинда ла бар, — тип хәбәр итте Гөлнур.

Малайҙар бер-береһенә ҡарашып алдылар. Шундай ҙур эш тураһында кәңәш барғанда был «артыҡ баштың» бында урынһыҙ булыуы асыҡ ине. Ҡарышырға урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп, Айҙар һеңлеһенә бойороҡ бирҙе:

— Ысҡын бынан!

Ләкин Гөлнур ҡарышты:

— Ысҡынмайым!

— Шыл, тиҙәр һиңә!

— Шылмайым, үҙең шыл.

Айҙар ҡаты бойороҡто ҡапыл йомшаҡ вәғәҙәгә алмаштырҙы.

— Тыңлаһаң, турғай балаһы тотоп бирермен, һылыуым, хатта икене.

— Антмы?

— Ант!

Гөлнур шунда уҡ ауыл яғына тороп йүгерҙе. Сыбар күлдәге генә елберләп ҡалды.

Беҙҙең яҡта кешеләр етди нәмәләр тураһында аяҡ өҫтө баҫып һөйләшмәйҙәр. Аҡылды ултырып йыялар. Малайҙар йәшел үлән өҫтөнә аҡыл йыйырға ултырҙылар.

— Кирәмәтте ҡотҡарырғамы, юҡмы? — тигән һорауҙы ҡабатлауҙың кәрәге юҡ ине. Ул, һис шикһеҙ, ҡотҡарылырға тейеш. Ә ҡотҡарыу юлдары тураһында фекер төрлөсәрәк булды. Айҙар колхоздың балыҡсылар бригадаһына барып ярҙам һорарға кәңәш итте. Вәзир уны үсекләргә үк кереште:

— Ярҙам, ярҙам, имеш... Бар, бөтә ауылға сығып ҡысҡыр, ярҙам һора. Бахыр. — Ул теш араһынан серт итеп төкөрөп ҡуйҙы.

— Башта уҡ ант итәйек, малайҙар, — тине Ғабдулла. — Был — сер. Өндә лә, төштә лә, аҫһалар ҙа, киҫһәләр ҙә, серҙе сисмәҫтән булһын. Кем дә кем телен тыя алмай, ул һатлыҡ йән тип аталасаҡ. Антмы?

Үҙе ҡуш ҡулын маңлайына ҡуйып ант итте:

— Ант!

Уның артынан Вәзир менән Айҙар ҡабатланы:

— Ант!

— Ант!

— Ыуылдырыҡлыһын һайлап ҡына беҙгә ҙур бер күнәк балыҡ тоторға кәрәк, — ти Ғабдулла.

Вәзир һикереп үк торҙо:

— Ниңә уны тотоп торорға? Мин Ҡылыстағы балыҡсыларҙың балығы ҡайҙа торғанын беләм. Эңер төшкәс, бер түгел, ике күнәк сәлдереп килтерәм мин һеҙгә. Тик һалып торорға мурҙа ғына булһын.

— Батмай. Тура эште кәкре ҡул менән эшләмәйҙәр! — Был һүҙҙәрҙе Ғабдулла әйтте. Ләкин улар баяғы Шәрифулла һүҙҙәре ине.

Вәзир ҙә тиҙ генә ҡойолоп төшмәне:

— Ҡалайыраҡ эре сирттергән була, — тине ул, һуҙа биреп, — әйтерһең, башлыҡ...

— Малайҙар! — тип ҡысҡырҙы Айҙар. — Беҙгә ысынлап та бер башлыҡ кәрәк. Кем башлыҡ була?

Ҡалған икәү, йәнәһе, төптән уйлаған булып, байтаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Сөнки кәңәш ваҡытында һәр һүҙгә тиҙ үк ҡушылып барыу ир кешегә килешмәй. Шулай ҙа Айҙар тәҡдимен иғтибарға алмау мөмкин түгел ине.

— Башлыҡты һайларға кәрәк, — тине һайлау-һайланыуҙарҙың рәтен яҡшы уҡ белгән Ғабдулла.

Шул саҡ Вәзир үҙенең барлы-юҡлы баҫалҡылығын бөтөнләй юғалтып ташланы. Ул, ҡыҫыҡ ҡара күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, ялбарырға тотондо:

— Малайҙар, ә, малайҙар, минең бер генә лә башлыҡ булғаным юҡ... — Хатта уның тауышы ҡалтыранды. — Айҙар ҡыш буйы синыфта староста булды. Ғабдулла стена гәзитенә һайланды, район слетына барҙы. Бер мин генә...

Вәзирҙең уң күҙенән бер бөрсөк йәш бына-бына тәгәрәп төшәм тигәндә, Ғабдулланың тау еле кеүек һалҡын тауышы уны тыйып ҡалды:

— Башлыҡты һорап алмайҙар!

Ләкин Вәзир өмөтөнән тиҙ генә баш тартманы. Ул үҙенә шундай хәйләкәр юл уйлап тапты:

— Шыбаға! Кем өҫкә сыға шул башлыҡ була.

Инде уға Айҙар ҡаршы төштө:

— Шыбағаны уйында ғына тоталар. Тапҡан уйын! Кем уҙарҙан ярышырға ла, уҙған кеше башлыҡ була.

Хәҙер Вәзир арҡа терәберәк һүҙ башланы:

— Харап икән. Йүгеректе башлыҡ итергә, имеш. «Башлыҡ» ул «аяҡ» түгел «баш» һүҙенән алынған — белмәһәң, бел. Иң йәтеше уның — мәргәнлектә ярышыу. Кем мәргән ата, шул командир. Ана, Ғабдулла әйтһен!

Ғабдулла, әлбиттә, үҙ фекерен әйтеүҙән баш тартманы:

— Иң дөрөҫөн әйтәйемме?

— Әйт!

— Иң дөрөҫө — көрәштә көс һынашыу. Кем алышта еңә, шул башлыҡ.

Ғабдуллаға ҡаршы төшөү урынһыҙ булһа ла, малайҙар оҙаҡ бәхәсләштеләр. «Ҡоро көс күрһәтеп кенә башлыҡ булыу замандары үткән инде», — тигән өсөн Вәзирҙең саҡ-саҡ ҡына яңағына эләкмәне. Шулай ҙа, аҙаҡ килеп, ғәҙеллек еңде. Өсөһөнөң дә һүҙе һүҙ булды.

Башта малайҙар үҙҙәре ултырған ерҙән ауыл ситендәге яңғыҙ ҡарағасҡа тиклем йүгереп уҙышырға булдылар. Өсөһө лә, балаҡтарын төрөп, Айҙар таяҡ менән һыҙып билдәләгән һыҙыҡҡа баҫтылар.

Вәзир команда бирҙе:

— Раз, два, пли!

Йәйәнән ысҡынған уҡ шикелле, Айҙар шунда уҡ атлығып алға сыҡты. Их, йүгерә лә һуң! Табандары ергә лә теймәй, тик үксәләре генә алмаш-тилмәш ялтырап бара. Байтаҡ ара Ғабдулла ла унан артыҡ ҡалышманы. Вәзир, инәһенә эйәрер-эйәрмәҫ барған ялҡау ҡолон һымаҡ, артта уҡ тороп ҡалды. Уның Айҙарға асыуы килде: «Ерән шайтан! — тине ул эсенән. — Ботон таш менән бәреп һындыраһыңмы ни? Һөрлөгөп тә китмәй бит, исмаһам!» Айҙарҙың һөрлөгөргә самаһы юҡ ине. Ул, Ғабдулланы дилбегә буйы артта ҡалдырып, ҡарағасты килеп ҡосаҡланы. Ғабдулла икенсе урынды алды.

Ярты юлға еткәс, Вәзир лап итеп ергә ултырҙы. Ул, аяғын күтәреп, нимәлер соҡсонорға тотондо. Күрәһең, табанына сүп кергәндер. Бер аҙҙан ул, аҡһай бирәп, иптәштәрен ҡыуып етте.

— Ниңә шул тиклем йән-фарман сабаһың, аяҡтарыңды ҡыҙғаныр инең саҡ ҡына, — тип көлдө унан Айҙар.

— Аяғыма сүп керҙе, — тине Вәзир. — Мине ярышта ҡатнашмаған тип иҫәпләгеҙ!

Вәзирҙең аяҡ табанына, белгестәрсә ентекләп, тикшереү үткәрҙеләр. Ләкин унда былтырғы яраларҙың йөйҙәренән башҡа телгә алырлыҡ һис нәмә табылманы. Вәзир, бәхәскә инмәй генә, үҙенең еңелеү оятын күтәрергә мәжбүр булды.

Эште оҙаҡҡа һуҙмай, ярыштың яңы төрө башланды. Тәүҙә өсөһө лә һәр саҡ янда йөрөй торған ҡоралдарын — рогаткаларын салбар кеҫәләренән һурып сығарҙылар. Бер тауыштан ярыштың шарттары раҫланды. Ҡарағастың түбәндә генә һерәйеп торған ҡоро ботағына Айҙарҙың сигелгән түбәтәйен ҡуйҙылар. Ҡарағастан утыҙ аҙым үлсәп, таяҡ ҡаҙанылар. Ошонан тороп атырға тейештәр. Кеҫәләрҙә һәр саҡ йөрөй торған запастан иң йомро, иң шыма өсәр таш алдылар. Өс атыуҙа түбәтәйгә кем күберәк тейҙерә, тимәк, шул ота. Сиратты алфавит буйынса билдәләнеләр. Беренсе булып Айҙар атты. Тәүге таш выжлап осоп китте, ләкин ҡайҙа барып тейгәнен берәү ҙә күрмәне. Икенсеһе — шап итеп ҡарағастың үҙенә һуғылды. Өсөнсөһөн Айҙар бик оҙаҡ тоҫҡаны. Инде быныһы түбәтәйҙе осороп алып китергә тейеш ине. Ләкин таш юлына китте, түбәтәй ҡымшанмай тора бирҙе.

Икенсе булып майҙанға Вәзир сыҡты. Башта бик етди ҡиәфәт менән бер талай сәпкә ҡарап торҙо. Ашыҡмай ғына рогаткаһын ҡорҙо. Бына ул тоҫҡай башланы. Тап шул ваҡытта уның йәлпәк танауына бер серәкәй килеп ҡунды. Ләкин Вәзирҙең уға иҫе китмәне. Быны күреп торған Айҙарҙың эсе бошто. «Ҡурҡаҡ һин, серәкәй, — тип әрләне ул эсенән генә оҙон морондо. — Танауына ҡунғансы, күҙенә килеп инһәң, ни ереҙ кәмер ине, йүнһеҙ... Етмәһә, минең сигелгән түбәтәйгә ата». Айҙар һуҡранып та бөтә алманы, түбәтәй осоп та китте.

— Бер ҡоймаҡты майланыҡ, — тине Вәзир эре генә. Ғабдулла йүгереп барып түбәтәйҙе кире урынына ҡуйҙы. Икенсе атыуҙа түбәтәй, йәмшәйеп, тағы ла килеп төштө. Был юлы Айҙарҙың башы сатнап китте. Таш, әйтерһең, уның түбәтәйенә түгел, маңлайына килеп тейҙе. Вәзир үҙенекен ҡабатлай бирҙе:

— Ике ҡоймаҡты майланыҡ!

Өсөнсө атыу бәхәсле булып сыҡты. Түбәтәй төшөүен төштө, ләкин ул ботаҡ һелкенеүҙән генә төштө. Таш был

юлы түбәтәйгә түгел, ботаҡҡа тейгәйне. Вәзир тағы ла тантаналыраҡ итеп йәнә ҡысҡырған булды.

— Өс ҡоймаҡты майланыҡ!

— Майламайыраҡ тор әле... — тине Айҙар, эстән һөйөнөп, — майың етмәҫ!

— Күҙең ҡыҙамы? Эсең әрнейме? — Өсөнсө атыуҙың буш булыуын Вәзир үҙе лә белә ине. Ләкин маҡтансыҡ йүгеректе үсекләгеһе килде. — Бына шулай атырға кәрәк, Айҙар мырҙам, — тип кәпрәйҙе ул. — Был һиңә тыр-тыр йүгереү түгел.

— Шул тиклем маҡтаныуҙан нисек сыҙап телдәре талмай, — тип бошондо Ғабдулла. — Вәзирҙең өсөнсө ташы барыбер иҫәпләнмәй. Харамлашма ла!

Вәзир ҙә артыҡ ныҡышманы. Сөнки ул Ғабдулланың уҙа алмаҫын яҡшы белә ине. Ысынлап та, Ғабдулла, өс атыуҙан бары бер генә тейҙереп, икенсе урынға сыҡты.

Яңғыҙ ҡарағастың күләгәһе Вәзирҙәрҙең картуф баҡсаһына барып еткәндә көрәш майҙаны асылды. Шыбаға буйынса, тәүҙә Вәзир менән Айҙар, устарына төкөрөп, ҡара-ҡаршы килеп баҫтылар.

— Алыш бармы, еңеш бармы? — тине Айҙар.

— Алыш та бар, еңеш тә бар! — Вәзир тағы ла бер тапҡыр усына төкөрҙө.

Һабантуй майҙанындағы көрәшселәргә оҡшатып, улар яурынға-яурын һуғып алдылар. Шунан һуң ғына, бер-береһенең күлдәген арттан бөрөп тотоп, билдән алыштылар, икеһе лә мышнап төштө. Ләкин берәү ҙә бил бирмәне. Малайҙарҙың көсө бер сама булһа ла, Айҙар киҫкә кеүек ауыр Вәзирҙе күтәреп сөйөргә иҫәп тотмай ине. Ул бер нисә тапҡыр үҙе ҡырын йығылып, Вәзирҙе баш аша осорорға маташып ҡараны, әммә теге гөрҫ итеп уның өҫтөнә ауып торҙо. Хатта бер ваҡыт Айҙарҙың үпкәһе боғаҙына килгәндәй булды.

Алыш тауыш-тынһыҙ дауам итте. Аяҡ салыу кеүек харамлашыуға берәү ҙә барманы. Бер саҡ иҫләмәгәндә генә Вәзир Айҙарҙы бөрөп алды ла, билен өҙөрҙәй ҡыҫып, күкрәгенә күтәрҙе. Айҙарҙың яҙғы себешкенән яңы ғына ҡотолоп килгән аяҡтары ерҙән өҙөлдө. Улар, таяныс эҙләгән шикелле, тыпырсынырға тотондолар, тик таяныс таба алманылар. Вәзир, ҡырын йығыла би-

реп, оҙонса буйлы сибек Айҙарҙы баш аша ырғытты. Шул ваҡыт нимәлер пыр-р-р итеп йыртылып китте.

Тәгәрәп ятҡан Айҙарҙың ике усында Вәзир өҫтөндәге зәңгәр күлдәктең ике итәге ине. Хужа өҫтөндә бары ике еңе менән яғаһы ғына эленеп ҡалған. Вәзирҙең ғәҙәттән тыш батыр ҡиәфәтен баштa күргән Ғабдулла ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Ҡабырғаһы менән осло ташҡа барып төшкән Айҙар, ауыртыныуын онотоп, Ғабдуллаға ҡушылды:

— Юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир! Ха-ха-ха!

Әлегә бер нәмә лә аңламаған Вәзир, битендәге тирен һөртмәксе булып, күлдәк итәген ҡапшаны. Ләкин ҡулы яланғас ҡорһағына тейҙе. Ул бары шунда ғына Айҙар усындағы сепрәктәрҙең ҡайҙан йолҡоноп алынғанына төшөндө.

Вәзир бына хәҙер йә ҡысҡырып илар, йә Айҙар менән һуғыша башлар тип көтәһегеҙҙер, бәлки. Көтмәгеҙ, көтөүегеҙ бушҡа сығасаҡ. Вәзир донъяның ваҡ-төйәгенә иҫе китеп бара торған малай түгел. Йәнә шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, кейем-һалым һандығы уның бөтөнләй үк буш та түгел. Өйҙә тағы бер күлдәге бар. Тик бына төҫөн генә хәтерләүе ҡыйын. Дөрөҫөрәге, уның төҫө юҡ. Көн ашаған.

Шулай ҙа «юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир» иптәштәренә ҡушылып көлмәне. Ниңәлер, көлгөһө килмәне. Танауын йыйыра биреп, ғорур ғына әйтеп ҡуйҙы:

— Баш һау булһа, мал табылыр әле. — Был саҡ ул үҙендә дейеүҙе еңерлек көс һиҙҙе. Автомобиль тәгәрмәсенә тын өргән шикелле, кемдер уның беләктәренә көс өрөп тултыра, уның мускулдары ҡабарып тулыша ла таш булып ҡата, имеш.

Көрәш әле бөтмәгәйне. Вәзир Ғабдулла ҡаршыһына килеп баҫты:

— Алыш бармы, һалыш бармы?

— Алыш та бар, һалыш та бар!

Сәмләнеүҙең сигенә еткән Вәзир йән асыуы менән Ғабдулланың салбар ҡайышынан эләктереп алды. Ләкин Ғабдулла көрәште ҡабул итмәне. Сөнки «дошмандың» өҫтөндә күлдәге лә, билендәге ҡайышы ла юҡ ине. Етмәһә, салбары ла өлтөрәп кенә тора. Ҡыҫҡаһы, уның

тотонор нәмәһе юҡ ине. Айҙар ҡайышын сисеп Вәзиргә бирҙе. Баштарын сайҡай-сайҡай һөҙөшөргә килгән йәш үгеҙҙәр кеүек ғәйрәтләнеп, малайҙар бер-береһенә ташландылар. Алыш был юлы баяғынан да яманыраҡ барҙы. Хәйләкәр Вәзир, бил бирмәҫкә тырышып, осаһын һуҙып, гел әйелеп йөрөнө. Ул башта Ғабдулланың хәлен бөтөрөргә иҫәп тотто. Ләкин беше имән кеүек Ғабдулла тиҙ генә әлһерәп төшә торғандарҙан түгел ине. Ул Вәзирҙең хәйләһенә ирек ҡуйҙы. Бара торғас, улар алышҡан ер, үләне тапалып, тап-таҡыр булып ҡалды.

Үҙәнгә һалҡынса шыйыҡ эңер төшә башланы. Ә «батырҙар», йән-фарман килеп, һаман алыша бирҙе. Вәзирҙең итләс арҡаһына бөрсөк-бөрсөк тир бәреп сыҡты. Ә Ғабдулланың күлдәгендә әле дым күренмәй ине. «Уңған аттың тире сыҡҡансы, ялҡау аттың йәне сығыр» тигәндәре ошо булалыр инде.

Вәзир көйөнә йөрөп, Ғабдулла ялҡыуҙың сигенә сыҡты. Ул, ҡапыл теҙләнеп, Вәзирҙең күкрәк аҫтына инде. Күҙ асып йомғансы тегене яурынына алды ла зырылдап әйләнергә тотондо. Әйләнеп-әйләнеп йөрөнө лә, үҙе йығылып, Вәзирҙе баш аша тәгәрәтеп ебәрҙе. Оҙаҡ барған ҡаты алыш шулай кинәт кенә тамам булды.

Нимә тип былай көс һынашыуҙарын малайҙар онотоп та өлгөргәйнеләр инде. Арала иң зирәк иҫәпләнгән Айҙар, беренсе булып, бәхәстең башын хәтергә төшөрҙө.

— Һайлауҙар бөттө, — тине ул. — Башлыҡҡа суҡмарҙы тапшырырға ваҡыттыр инде.

Дүрт күҙ Ғабдуллаға төбәлде. Иң күп отош, әлбиттә, уның яғында ине. Хәтер ҡалыуҙың йәки үс һаҡлауҙың нимә икәнен белмәй торған Вәзир тәү башлап Ғабдулла алдына килеп баҫты:

— Теләһәң утҡа, теләһәң һыуға алып ин! Беҙ һинең тоғро юлдаштарың.

— Малайҙар, — тине Ғабдулла, — экиәттә лә бит батырҙар өсәү булған: береһе йүгерек, береһе мәргән, береһе көрәшсе. Ҡалай һәйбәт булып сыҡты.

— Юҡ инде, иптәшкәй, баш берәү генә була. Һин — башлыҡ. Һиңә — ура! — Айҙар тауҙарҙы яңғыратып һөрән һалды.

Башлыҡҡа хас етди тауыш менән Ғабдулла үҙенең беренсе фарманын халыҡҡа иғлан итте:

— Кирәмәтте ҡотҡарыу өсөн төҙөлгән отрядҡа «Өс таған» тип исем ҡушырға. Ризамы?

— Риза. Артистар бейей торған шундай бейеү ҙә бар хатта, — тип өҫтәне Вәзир. Айҙар баш ҡына ҡаҡты.

Ошо тарихи фарманды ҡабул иткәндән һуң, малайҙар ҡосаҡлашып ауыл яғына атланылар. «Өс таған» был мәлдә үҙен мәңге ҡаҡшамаҫлыҡ итеп һиҙә ине.

?

1. Малайҙар күлде ҡотҡарырға ниндәй план ҡоралар?
2. Башлыҡты улар ниндәй һәләтлектәр буйынса һайлайҙар?
3. «Өс таған» нисек барлыҡҡа килә?

## Вәзирҙең беренсе һәләкәте

Уң ҡулы менән Башлыҡты ҡосаҡлап барғанда, Мәргәндең күңеле үҫеп китте. Ун ике йәшкә тиклем башлыҡ булмай йәшәгән икән, бынан һуң да йәшәр. Быны тигән итеп йәшәр. Уның ҡарауы Вәзир — «Өс таған»дың бер терәүе. Унан башҡа таған һә тигәнсе ҡолап төшәсәк. Бына ниндәй кәрәкле кеше ул!

Вәзирҙең кемгәлер яҡшылыҡ эшләгеһе, кемделер ҡыуандырғыһы килде. Ул салбарының һул кеҫәһендәге һалҡын ғына тос нәмәне ҡапшап ҡараны.

— Малайҙар, ә, малайҙар, туҡтағыҙ әле, — тине ул. — Башлыҡҡа ҡоралһыҙ йөрөү килешмәҫ. Мә, Ғабдулла, ал. — Ул, кеҫәһенән һөйәк һаплы боронғо бәке сығарып, Ғабдуллаға һуҙҙы.

Башлыҡ менән Йүгерректең дүрт күҙе һигеҙ булды. Бындай затлы нәмәне улар беренсе тапҡыр күрәләр ине.

— Ҡайҙан ҡулға төшөрҙөң быны?

— Һорашып торма, биргәндә ал.

Ләкин Башлыҡ бүләкте алырға ашыҡманы. Бәке оҡшаны уға, бик оҡшаны. Тик: «Был нәмә Вәзирҙең ҡулына яҙып-яңылышып килеп инмәнеме икән», — тигән шик уны тыйып ҡалды. Сөнки Мәргән ҡулына ундай малдар кереп сыҡҡылай ине шул.

— Ҡайҙан алдың, дөрөҫөн әйт. Юғиһә бәкеңә бармаҡ осомдо ла тейҙермәйем.

— Дөрөҫө ни инде уның... Биргәс, ал да ҡуй.

— Ҡайҙан алдың, тиҙәр һиңә?

— Ҡайҙан тип ни... Дөрөҫө генә... — Вәзир ҡапыл төйөлөп ҡалды.

— Нимә, дөрөҫө генә?

— Дөрөҫөн генә әйткәндә, бая мин уны Шәрифулланың сумкаһынан сәлдерҙем. Ниңә, оҡшамаймы ни? — Был ваҡыт Вәзир үҙенең яҙа атҡанын һиҙеп ҡалғайны инде.

— Урланыңмы? — Башлыҡ ике юлдашын ике яҡҡа этәреп ебәрҙе. Күҙҙәренән уның уҫал осҡондар сәсрәп сыҡты. — Урланыңмы, эт ҡайышы?

— Урламаным, сәлдерҙем, — тип аҡланды Вәзир, — һабы күренеп тора ине.

— Ух, бәке ҡарағы! — Ғабдулла уға бер ҡунып та төштө. Икенсе һелтәнгәндә уның ҡулын Айҙар тотоп ҡалды.

— Ҡулыңды бысратма, шуға һуғып, — тине ул.

Башлыҡ шунда уҡ үҙенең икенсе фарманын иғлан итте:

«Көтөүсе Шәрифулланың һөйәк һаплы бәкеһен урлаған өсөн, ҡараҡ Вәзирҙе «Өс таған»дан сығарып ташларға. Бынан һуң уға ҡул бирмәҫкә, һүҙ ҡушмаҫҡа. Мәсхәрә!»

— Ҡараҡҡа мәсхәрә! — тип ҡабатланы Айҙар.

Вәзир, үҙ хәлен ең бөтә әшәкелеген аңлап, башын түбән эйҙе. Уның күҙҙәре үлән төбөндәге үҙенең бәләкәс кенә өңөнән имгәкләп сығып килгән ҡуңыҙға туҡталды. Ҡуңыҙ, тишектән сыҡҡас, тирә-яҡҡа һынаулы ҡараш ташлағандай, саҡ ҡына туҡтап торҙо ла үҙ юлына китеп барҙы. Уның эштәре Вәзирҙекенә ҡарағанда шәберәк ине.

Мәргән өҫтөндәге зәңгәр һәләмәләрҙе киске һалҡынса ел тарткылай. Буй-буй ҡара эҙ ҡалдырып, маңлайынан тир аға, күҙҙәре ғәҙәттәгенән дә йышыраҡ сылтлап йомола. Тик иҙеүендәге ҙур аҡ төймә генә, һис нәмә булмағандай, үҙ урынында тыныс ултыра. Был минутта Вәзирҙәге берҙән-бер аҡ тап ана шул төймә ине. Ошо мәлдә ситтән генә берәй кеше ҡарап торһа, ул былай тип әйтер ине: «Ер йөҙөндә хәҙер иң ҡайғылы кеше — Вәзир. Ҡыҙғанығыҙ уны, ғәфү итегеҙ», — тиер ине. Ләкин Мәргәндең элекке иптәштәре уға ситтән генә ҡараманы-

лар. Ҡыҙғаныу, ғәфү итеү кеүек йомшаҡлыҡтарға улар күңелендә урын ҡалмағайны.

Был кистә «Өс таған» буйынса өсөнсө фарман яңғыраны:

«Бәкене хәҙер үк хужаһына илтеп бирергә, Шәрифулланың аяғына йығылып, ғәфү үтенергә! Әгәр ҡарышһа, «ҡараҡ» тигән яманатты бөтә ауылға таратырға!»

Башлыҡ икенсе фармандың аҙағын яңынан ҡабатланы:

— Ҡараҡҡа ҡул бирмәҫкә, һүҙ ҡушмаҫҡа! Мәсхәрә!

— Мәсхәрә!

«Өс таған»дың икеһе, ҡапыл боролоп, ҡайтыр яҡҡа китте. Бер-ике аҙым атлағас, улар, артҡа әйләнеп, Вәзиргә мыҫҡыллы ҡараш ташланылар һәм теш араһынан төкөрөп ҡуйҙылар.

Өсөнсө «таған» һерәйеп баҫып ҡалды. Оҙаҡ торҙо ул. Бөгөн донъя бөтһә, ул Башлыҡтың һуңғы фарманын, бәлки, үтәмәҫ тә ине. Ләкин иртәгә лә көн бар бит. Шуны уйлап, Вәзир туп-тура ферма яғына йүгерҙе. Шәрифулла, эшен бөтөрөп, ҡайтырға сыҡҡайны.

— Бына, ағай, Күкрәктауҙа таптым... — тине ул. Дөрөҫөн әйтеп, ғәфү үтенергә уның көсө етмәне.

— Вәт, маладис, мырҙам! Ғәҙел егет икәнһең. Рәхмәт үҙеңә, — тине Шәрифулла.

Ләкин ындай маҡтауҙар һәм рәхмәттәр «ғәҙел егетте» ҡыуандырманы. Сөнки был юлы бер рәхмәт Вәзирҙе мең бәләнән түгел, бер бәләнән дә ҡотҡарасаҡ түгел ине[1].

?

1. Ни өсөн Вәзирҙе «Өс таған»дан сығаралар?
2. Вәзирҙең кисерештәрен һүрәтләгәндә, автор ни өсөн ҡуңыҙ һәм аҡ төймә образдарына мөрәжәғәт итә?
3. Башлыҡтың фарманының мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Шәрифулла ағайҙың рәхмәте ни өсөн Вәзирҙе бер бәләнән дә ҡотҡара алмаясаҡ?
5. Дуҫлыҡ менән намыҫлылыҡты һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

---

[1] *Боронғолар:* «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр», — тигәндәр.

## Өсөнсө терәү

Ғабдулла йоҡонан уянғанда, өләсәһе өйҙә юҡ ине. Унының ҡарашы иң тәүҙә ҡаршы стеналағы йылтыр түңәрәккә төштө. Ул һикереп торҙо ла миҙалға йүгерҙе. Ләкин ҡапыл тыйылып ҡалды. Сөнки Нәғимә инәй уға ҡағылырға берәүгә лә рөхсәт итмәй ине. Әсәһенең муйынсаһындағы иң ҙур тәңкәнән дә дәүерәк көмөш түңәрәктәге яҙыуҙы Ғабдулла яттан белә. Шулай ҙа уны бөгөн һәр ижегенә баҫым яһап, тағы бер ҡат ҡысҡырып уҡыны: «За от-ва-гу». Һәм малай ҡапыл был һүҙҙәрҙең оло мәғәнәһенә төшөнөп алды. Әлегә тиклем Ғабдулла уларҙың мәғәнәһе тураһында уйламағайны.

«Батырлыҡ өсөн!» Тимәк, унының атаһы батыр булған! Ниңә һуң уны «Мөхәммәт батыр» тип һөйләмәйҙәр? Күрәһең белмәйҙәрҙер.

Әкиәттәге батыр үлһә, ул үҙенең ҡылыс-ҡалҡанын, уҡ-һаҙағын улына васыят иткән. Бәлки, Ғабдулланың атаһы ла: «Миҙалымды улыма бирегеҙ, төҫөм итеп, күкрәгенә таҡһын», — тигәндер. Моғайын, шулай тигәндер. Юғиһә, ул миҙалды ебәреп тә тормаҫтар ине.

Ғабдулла атаһы мираҫын һаҡлыҡ менән генә алды ла күкрәгенең уң яғына таҡты. Стенаға беркетелеп ҡуйылған тутлы көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты.

Башлыҡ кешегә миҙал килешеп тора икән. Бынан һуң ул гел генә тағып йөрөйәсәк уны. Өләсәй менән килешеү әллә ни ҡыйын булмаясаҡ. Бер һуҡраныр ҙа бөтөр.

Миҙалын ялтыратып, Ғабдулла урамға сыҡҡанда, ҡапҡа төбөндә тоғро юлдашы Айҙар ултыра ине. Күптән килгән булһа ла, өйгә инеп, Башлыҡты борсоманы. Ул әрһеҙ, сабырһыҙ малай түгел ине. Миҙалды күргәс тә, Айҙарҙың артыҡ иҫе китмәне. Киреһенсә, атай кешенең миҙалын уйынсыҡ урынына тағып сығыуҙы килештереп етмәне. Ләкин, Башлыҡтың хәтерен һаҡлап, был турала өндәшмәҫ булды. Тик көләмһерәп былай тине:

— «Батырлыҡ өсөн» миҙалын һул яҡҡа, йөрәк тураһына тағалар...

Дуҫының шаҡ ҡатмауына аптыраған Ғабдулла миҙалды һүҙһеҙ генә һул яҡҡа күсереп таҡты. Айҙарға унының хатта бер аҙ асыуы ла килде. «Белмәгәне юҡ ошоноң», — тип эсенән һуҡранып ҡуйҙы.

— Дөрөçөн генә әйткәндә, Кирәмәт емерелә тип Шәрифулла ағай арттыра. Ерле юҡҡа емерелмәй ул, ер тетрәмәһә...

— Нимә һин, «Өс таған»ды емерер өсөн, ҡотҡо таратаһыңмы? — тип ҡыҙып китте былай ҙа кәйефе ҡырылған Башлыҡ. — Шөрләйһеңме, ҡурҡаҡ?

— Мин ҡурҡаҡмы?

— Һин!

— Ә һин сәпсәләнмә, — тине Айҙар тыныс ҡына. — Мин ситләтеп кенә атайымдан һораштым. Кирәмәт башында, ысынлап та, күл бар, ти, тик балығы ғына юҡ, ти; балыҡһыҙ күл дә ул һуҡыр күҙ ише, ти. Белдеңме?

— Нимәне?

— Нимәне, нимәне? Беҙ шунда балыҡ ебәреп үрсетһәк, ҡалай һәйбәт буласаҡ. Күлдең эсенә йән кереп китәсәк.

— Һин шулай тип атайыңа ла әйттеңме?

— Әйтте, ти, ана.

Тоҡ-томалға дуҫына ҡаты бәрелгәне өсөн, Ғабдулла эстән үкенеп ҡуйҙы. Уның тауышы йомшаҡ, яғымлыға әйләнде.

— Беләһеңме, Айҙар, — тине ул. — Кирәмәт емерелмәһен дә, ти. Ә кешеләргә бер күл тултырып балыҡ үрсетеп бирһәк, ул да ярап ҡалыр. Иң тәүҙә беҙгә мурҙа үрергә кәрәк. Тотҡан балыҡты шунда һалырбыҙ. Ҡылыстың арғы башында һәләк йәтеш ҡамышлыҡ бар. Балыҡ унда илереп ҡаба.

— Мурҙаны мин уны һә тигәнсе үреп ташлайым, — тине Айҙар.

Малайҙар бөгөн үк Ҡылыстың арғы башындағы таллыҡҡа барып мурҙа үрергә булдылар. Ләкин «Өс таған»дың икегә ҡалыуы уларҙы һаман борсой ине әле. Эште боҙҙо бит тинтәк Вәзир. Нисек кенә булһа ла өсөнсө терәүҙе табырға кәрәк ине.

Малайҙар көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп ултырғанда, Яҡуп, ҡулына оҙон сыбыҡ тотоп, күл яғына ҡаҙҙар ҡыуып бара ине.

Уны күргән Ғабдулла менән Айҙар бер-береһенә ҡарашып алды.

— Эй, Яҡуп, кил әле бында! — тип ҡысҡырҙы уға Айҙар.

— Ҡаҙҙар ҡыуамсы, — тине тегеһе, үҙе ниндәйҙер меҫкен йылмайыу менән йылмайҙы.

— Ҡаҙҙар юлды үҙҙәре лә беләләр. Кил, тиҙәр бит һиңә!

Кеше саҡырғас, Яҡуп тыңламай булдыра алманы. Сыбығын һөйрәп, йүгереп килеп тә етте.

— Ултыр! — тип бойорҙо уға Башлыҡ. Яҡуп тубыҡланып ергә ултырҙы. — Һинең батыр булғың киләме?

— Килә лә... Нисек булырға һуң? — Яҡуп, күҙҙәрен йылтыратып, Ғабдулла күкрәгендәге миҙалға ҡарап алды. «Их, бәхетле кешеләр була бит...» тигәндәй, көрһөнөп ҡуйҙы.

Башлыҡ Яҡупты тағы бер ҡат баштан-аяҡ һынап, тикшереп сыҡты. Ғабдулланың һынаулы үткер ҡарашын күргән Яҡуп, бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып ҡалды. «Нимә эшләтерҙәр икән?» тип тынын да алмай ултырҙы. Әммә шөрләүе бушҡа булды. Ғабдулла, үҙ тиңдәше менән һөйләшкәндәй, уға етди һәм тыныс тауыш менән мөрәжәғәт итте:

— Һинең, Яҡуп, Күкрәктауға менгәнең бармы?

— Ниңә, бар.

— Ағарып торған Кирәмәтте күргәнең бармы?

— Ниңә, бар.

— Ана шуның башында түңәрәк күл бар. Ә күлдә балыҡ юҡ.

— Ҡуй, балыҡһыҙ күл булмай ҙа ул.

— Була шул. Беҙ, «Өс таған» тигән отряд, шунда балыҡ ебәреп үрсетергә булдыҡ. Өсөнсө булып беҙгә ҡушылаһыңмы? Отрядтың башлығы — мин.

— Ҡалай ирмәк! — Яҡуп көлөп үк ебәрҙе. Башлыҡ һорауын ҡабатланы:

— Ҡушылаһыңмы?

— Ярай, — тип Яҡуп баш ҡаҡты.

Ошо сәғәттән алып ҙур сәйәхәткә әҙерлек башланды. Һөйләшеп килешеү буйынса, Ғабдулла менән Айҙар Ҡылыстың арғы башындағы таллыҡҡа мурҙа үрергә китергә булды.

?

1. Ғабдулланың күкрәгендәге миҙалға ни өсөн Айҙарҙың иҫе китмәне?
2. Өсөнсө терәү нисек табыла?

### Ҡаптыңмы, балыҡ ҡарағы!

Көн тыуғанда, беҙҙең Ҡылыскүлде күргәнегеҙ бармы? Юҡтыр шул. Бер генә тапҡыр күрһәгеҙ ҙә, хайран ҡалыр инегеҙ. Мин был хаҡта маҡтаныр өсөн һүҙ ҡуҙғатмайым. Ҡылысты ла, уның таңдарын да беҙ яһамаған, уларҙы тәбиғәт шулай яратҡан. Беҙҙең маҡтаныр урыныбыҙ юҡ. Мин тик шуның өсөн генә әйтәм: ошо матурлыҡтан һеҙгә лә өлөш сығарғы килә.

Яңы көндөң тәүге нурҙары башта Ҡылыс аръяғындағы бейек текә ҡаяға килеп бәреләләр. Шунан һуң, сәселеп, тирә-яҡҡа тарала. Был ваҡыт әле күл, ап-аҡ томандан һырылған йомшаҡ юрғанын баштан-аяҡ ябынып, йоҡлап ята. Таң яҡтыһы ғына уны рәхәт йоҡоһонан уята алмай, киреһенсә, күл юрғанын тағы ла нығыраҡ бөркәнә төшә. Беҙҙең тау яғында иртәләр һалҡынса була шул. Тик ҡояш үҙе күренгәс кенә, Ҡылыс, ҡынынан һурып алынған ҡылыс төҫлө, ялтырай башлай.

— Оҙаҡ йоҡлайһың, Ҡылыс, — тип шелтәләй уны ҡояш. — Ниндәй төштәр күрҙең?

— Замандар имен ваҡытта, ҡылыс йоҡларға тейеш,— тип шаяра күл. — Яҡшы төштәр күрҙем, ҡояш. Рәхмәт!

Ҡояш, уға башҡаса һүҙ ҡушып тормай, үҙ юлына китә. Ерҙәге һәр нәмә менән оҙон-оҙаҡ әңгәмәләшеп торһа, бер көн эсендә күкте нисек урап сыҡһын, ти, ул!

Был мәлдә күл өҫтө тигеҙ, яғымлы була. Шул тигеҙлектә ялан аяҡ йүгереп уйнағы, һикерге килә. Яңы көн тыуғанда, яңы шатлыҡтар, яңы өмөттәр ҙә тыуа. Тик томандар ғына бойоҡ, сөнки уларҙың ғүмерҙәре ҡыҫҡа. Шулай ҙа, яр ситендәге ҡамыштарға, тал ҡыуаҡтарына, томбойоҡ япраҡтарына уралып булһа ла, күл эргәһендә ҡалырға тырышалар улар. Әммә юҡҡа. Ҡояш менән томан һыйышып оҙаҡ йәшәй алмай. Быны һәр кем белә.

Бөтә ауылды бер итеп әтәстәр ҡысҡырғанда, өс малай кәмәгә ултырҙы. Ғабдулла менән Айҙар бесәнлектә бергә йоҡланылар. Уларҙың торғанын да, киткәнен дә күреүсе булманы. Ләкин Яҡуп тауыш-тынһыҙ ғына ысҡына алманы. Ул таң һыҙыла башлағас та уянғайны. Байтаҡ ара

ҡуҙғалмай ятты. Унан һуң шым ғына кейенергә кереште. Салбарының бер балағын кейгәс тә, әсәһе уянды.

— Ниңә иртә уяндың, улым? Әллә яман төш күрҙеңме?

— Күрмәнем. Беҙ бөгөн малайҙар менән балыҡҡа барабыҙ.

— Балыҡҡа? Күлгәме? — Гөлйемеш апай һикереп үк торҙо.

— Балыҡ күлдә була инде ул, әсәй.

— Ауыҙыңды ла асма. Шул ғына етмәгәйне тағы.

— Мин иптәштәремә вәғәҙә бирҙем, әсәй. Вәғәҙәне боҙорға ярамай.

— Ярамағаны бар, ярағаны бар. Аяғыңды ла атламайһың. Бына шул.

— Мин кемдән кәм, әсәй? Бүтәндәргә яраған ниңә бер миңә генә ярамай ул?

— Бүтәндәрҙә эшем юҡ. Минең балам берәү генә.

— Беләһеңме, әсәй, әгәр иптәштәрем менән бергә ебәрмәһәң, олатайымдың кәмәһенә ултырам да бер үҙем күлгә инәм дә китәм. Бына күр ҙә тор. Гел генә мине тыйып тора алмаҫһың, мин хәҙер ҙур инде.

Гөлйемеш апайҙың күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Ни булды был балаға? Ниндәй генә зәхмәттәр ҡағылды икән? Өй тауығы кеүек йыуаш малай ике-өс көн эсендә бөтөнләй ҡулдан ысҡынды. «Әгәр уны хәҙер ебәрмәһәң, барыбер һүҙен һүҙ итер, тәки кәмәгә ултырып сығып китер», — тип уйланы әсә.

— Иптәштәрең кем һуң? Шул Вәзирҙер әле, — тине ул, бер талай һүҙһеҙ торғас.

— Ғабдулла ла Айҙар! — тип ғорурланып яуап ҡайтарҙы Яҡуп.

Байтаҡ һатыулашҡандан һуң, әсә илай-һыҡтай ғына риза булды. Был Яҡуптың ҙур ғына еңеүе ине.

— Алдыңды-артыңды ҡарап йөрөй күр инде, балам, — тип ҡалды әсә.

Бына хәҙер Яҡуп, ишкәк тотоп, кәмәнең артына баҫты, Ғабдулла уртаға, Айҙар осҡа ултырҙы. Ишкәксе арыу, һолло ғына ишә башланы. Кәмә яр буйлап яй ғына алға шыуҙы, бер аҙҙан ул бөтөнләй томан эсенә инеп юғалды.

Ҡылыстың арғы башына, мурҙа тапҡырындағы ҡамышлыҡҡа еткәс, кәмәне туҡтатып, ҡармаҡ һала башланылар. Был ваҡыт инде ҡояш сығып, күл өҫтөндәге томандарҙы ҡыуып ебәргәйне.

Тәүҙә балыҡ арыу сиртте. Айҙарға матур ғына һигеҙ сабаҡ, ике алабуға, бер ҡыҙылғанат эләкте. Ғабдулла ла вағыраҡ булһа ла алты-ете баш ҡаптырҙы. Яҡуп ҡына берҙе лә ала алманы. Сөнки ул балыҡ емде ҡымтығас та, ҡармағын ҡапыл тарта.

Эләккән һәр балыҡ кәмә ситенән һыуға төшөрөлгән селтәр тоҡҡа һалына барҙы. Улар, яңынан күлгә ҡайттыҡ тип, рәхәтләнеп, йөҙәләр, һикерешәләр.

Балыҡ ҡаптырғанда шауларға ярамай. Ләкин ҡармаҡ ташлағанда тылсымлы һүҙҙәр әйтеү беҙҙең яҡта йолаға кергән. Ул шаулауға ла иҫәпләнмәй.

— Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр, төкөрөп һалдым, һикереп сыҡ, бер сабағын алып сыҡ, — тип һәр юлы ҡармағын сихырлай Ғабдулла.

Тәүге ҡыҙылғанат эләккәс, Айҙар башта уның ауыҙына төкөрҙө, шунан таҡмаҡларға тотондо:

— Ҡыҙылғанат, Ғәҙелбанат, әсәйеңде саҡыр, атайыңды саҡыр, ағайыңды саҡыр, апайыңды саҡыр. Саҡыр ҡат-ҡат! Ҡыҙылғанат, ҡап, ҡап!

— Ҡап, ҡап ҡармаҡҡа, эләгерһең бармаҡҡа, эләкмәһәң ҡармаҡҡа, әйләнерһең һармаҡҡа, — тип тегеләргә ҡушылды Яҡуп. Күрәһең, балыҡтар ҡармаҡҡа эләгеүгә ҡарағанда һармаҡҡа әйләнеүҙе яҡшыраҡҡа һанағандарҙыр. Улар Яҡуптың янауҙарына ҡолаҡ та һалманылар. Бәлки, ҡолаҡ һалырҙар ине лә, уларҙың ҡолаҡтары юҡ бит.

Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгән һайын, һирәгерәк сиртә башланы. Балыҡсылар бер нисә тапҡыр күсеп тә ҡаранылар, барыбер балыҡтар, һүҙ берләшкәндәй, ҡармаҡҡа ҡағылмаҫҡа булдылар. Артыҡ ултырыуҙың файҙаһы юҡ ине. Бар балыҡты, иҫән-һау сығарып, мурҙаға ебәрергә кәрәк. Юғиһә эстә лә эттәр өрә башланы.

Мурҙа турыһындағы ҡамыштарҙы ярып, кәмә ярға килеп төртөлдө. Ғабдулла менән Айҙар, салбарҙарын сисеп, мурҙа эргәһенә ашыҡтылар. Ул тап үҙ урынында тора. Туҡта, туҡта! Мурҙа тирәһендә ҡамыштар һелкенә

түгелме? Малайҙар мурҙаны күреп алды. Ни тамаша был? Мурҙа эсендә эре-эре сабаҡтар, ҡыҙылғанаттар, алабуғалар сәпелдәшеп ята. Ун биш-егерме баш булыр. Нисек кергәндәр улар? Бына һиңә мәрәкә! Мурҙаның ауыҙы нәҡ элек ябып киткәнсә. Тимәк, был эште ниндәйҙер әҙәм ҡулы эшләгән.

Ауҙан балыҡ сәлдереү ғәҙәте бар ул беҙҙә. Әле иҫәрерәк саҡта Ғабдулла менән Айҙар үҙҙәре лә кеше ауына бер-ике тапҡыр ҡул һалғайнылар. Вәзирҙе әйтеп тораһы ла юҡ. Әммә сит мурҙаға балыҡ килтереп һалған кешене уларҙың күргәндәре лә, ишеткәндәре лә юҡ ине. Бөркөтлөлә бындай хәл булғанын хәтерләүсе табылмаҫ. Һөйләһәң, әҙәм ышанмаҫлыҡ мәрәкә был.

— Бына һиңә, өләсәйем әйтмешләй, бирәһе килгән ҡолона, сығарып ҡуйған юлына! Әйҙә, иш янына ҡуш булыр, — тине Ғабдулла.

— Йә берәйһе үҙемдең мурҙам тип, яңылыш һалып киткәндер әле, — тигән фекер әйтте Айҙар.

— Китте, ти, ана, тот тоҡсайыңды.

— Улайһа, бер-бер хәйлә барҙыр, — тип йәнә шик белдерҙе Айҙар.

— Һинең өсөн бөтәһе лә хәйлә инде.

— Беләһегеҙме, быны кем эшләгән? — тине яр башындағы Яҡуп. — Балыҡсыларға ҡот килтереүсе изге рух эшләгән.

— Изге рух, имеш. Етмәһә, үҙе пионер тағы, — тип Айҙар уның һүҙен бушҡа сығарҙы.

Малайҙар аптыраушта ҡалдылар шулай ҙа. Хатта, Башлыҡ үҙе лә бының серенә төшөнә алманы. Йомаҡ сиселмәй ҡалды.

Икенсе көндө балыҡсыларҙың кәсебе уңышлыраҡ булды: ярты күнәк самаһы балыҡ тотоп сыҡтылар. Ләкин уларҙы кисәгегә ҡарағанда ла ныҡыраҡ борсоу алды. Мурҙала балыҡ тағы ла арта төшкән. Етмәһә, арала өс һары табан да бар. Был юлы малайҙар бөтөнләй телдән ҡалды. Шатланырғамы быға әллә ҡайғырырғамы? Мурҙала балыҡ кәмеһә бер хәл ине. «Ниндәйҙер бер кәкре ҡулдың эше», — тиерҙәр ине. Шик иң тәүҙә Вәзиргә төшәр ине.

— Малайҙар, — тине Яҡуп, — әйҙәгеҙ яҡшыға юрайыҡ. Тимәк, беҙгә ҡот килгән. Беҙ кешенекен урламаған да.

— Күс түкмәй табылған нәмә барыбер урлау менән бәрәбәр ул, — тине Башлыҡ.

— Беҙ үҙебеҙ тотҡандарҙы таныйбыҙ бит. Әләйһә, сит балыҡтарҙы сығарайыҡ та ебәрәйек. Эше лә бөттө. — Был ҡыйыу тәкдимде Айҙар индерҙе.

Шулай ҙа ҡыйыу һүҙҙән ҡыйыу эшкә күсергә малайҙарҙың ҡулы барманы. Бынау йылҡылдап торған балыҡтарҙы үҙ ҡулдары менән кире күлгә ебәр, имеш. Был ахмаҡлыҡ булыр ине.

— Төптән уйлап ҡараһаң, беҙ ни өсөн балыҡ тотабыҙ? Табала ҡурып, кетерләтеп ашар өсөнмө ни? — тигән һорау ҡуйҙы Башлыҡ.

— Кетерләтеп ашар өсөн түгел.

— Шулай булғас, тора бирһендәр. Аҙаҡтан күҙ күрер.

— Әгәр харамдан ҡурҡһағыҙ, минең өлөштән булыр. Миңә бит барыбер балыҡ ҡапмай, — тип Яҡуп яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алмаҡсы булды.

— Бында һинеке-минеке юҡ! — тине Ғабдулла. — Бөтәһе лә уртаҡ.

Нисек кенә булмаһын, серле мажара малайҙарҙың маҙаһын китәрҙе.

Әммә беҙҙең балыҡсылар асыҡ ауыҙҙарҙан түгел ине. Өсөнсө көндө улар, бер күл уртаһына инеп, бер ҡамышлыҡҡа һуғылып, аҙ ғына ҡармаҡ һалып йөрөгән булдылар ҙа мурҙанан байтаҡ ситтә ярға сыҡтылар. Кәмәләрен ҡамыш араһына йәшерҙеләр ҙә малайҙар, мурҙа тапҡырына килеп, күрән эсенә боҫтолар. Был хәйләне улар кисә үк ҡорғайнылар. Нисек тә серҙе сисергә кәрәк ине. Уларҙың башҡаса сыҙар хәле ҡалманы.

Мурҙа яғынан күҙ ҙә алмайынса, малайҙар байтаҡ яттылар. Ләкин шылт иткән тауыш та ишетелмәне. Ҡамыш һабаҡтары, ағас япраҡтары, үлән ҡыяҡтары әле иртәнге йоҡоларынан уянмағайны. Ә ҡыуаҡ һайын үҙ йырҙарын йырлаған ҡоштарға малайҙар иғтибар итмәне. Ҡоштарҙа уларҙың эше юҡ ине.

Бына бер саҡ күл өҫтөн шаҙралатып ел йүгереп үтте. Ҡамыштар, «ниңә уяттың?» тигән һымаҡ, бер-береһен әрләп, ҡыштырлашып алдылар. Ә ағас япраҡтары яҙын

йомшаҡ күңелле булалар. Улар әрләшмәнеләр. Кирәһенсә, бер-береһенә яғымлы итеп сәләм бирҙеләр. Ел үтеп киткәс, тирә-яҡ йәнә тып-тын булып ҡалды. Хатта күбәләк осҡаны ла ишетелә ине.

Бәлки, ике, бәлки, өс сәғәт үткәндер. Малайҙарҙың ҡул сәғәте лә, кеҫә сәғәте лә юҡ ине. Бала саҡта сәғәт ҡорһаҡта була ул. Асыҡтыңмы, ана шул сәғәт, йә иртәнгене, йә төшкөнө, йә кискене ашарға ваҡыт еткәнен күрһәтә. Балыҡсыларҙың ҡорһағындағы сәғәте, иртәнгене күптән һуғып, төшкә табан ыңғайлай ине. Бындай саҡта түҙемлек тигән нәмәнең дә рәте китә башлай.

— Юҡты бушҡа бушатып ят инде, — тип бошоноп ҡуйҙы Яҡуп. Айҙар шунда уҡ түбәтәйе менән иптәшенең ауыҙын ҡапланы. Унан йоҙроҡ күрһәтеп алды. Яҡуп бөтәһен дә төшөндө һәм шымып ҡалды.

Яҡында ғына ағасты ағас ҡырған тауыш ишетелде. Был тауышты балыҡсы булған кеше тиҙ таный. Кәмә ситенә ишкәк тейгәндә сыға ул. Унан һыу сапылдауы, ҡамыш ҡыштырлауы ҡолаҡҡа салынды. Әммә был ишкәксе йүнле юлда йөрөмәй ине. Ул, нимәнәндер шикләнеп, үтә һаҡ ҡылана ине.

Ҡамыш араһынан, ялғаш дәүмәле генә кәмәгә баҫып, Вәзир килеп сыҡты. Ул башта алан-йолан ҡаранып алды. Кеше заты юҡлыҡҡа ышанғас ҡына, кәмәһенән һикереп төштө. Кәмә ҡойроғона нимәлер таҡҡан түгелме һуң? Эйе шул. Вәзир ҡойроҡтан һөленеп йөҙөп килгән шул нәмәне сисеп алды. Ул ҙур арыш тоғо булып сыҡты. Тоҡ төбөндә нимәлер сәпелдәргә тотондо. Вәзир тоҡто яңынан һыуға батырҙы ла мурҙа эргәһенә һөйрәп китте. Тимәк, уға үҙе тотҡан балыҡ ҡына етмәгән. Ниндәй ҡомһоҙ! Хәҙер мурҙалағын сәлдерергә самалай. Барып сыҡмаҫ, һинең һәр аҙымыңды алты күҙ күҙәтеп тора. Тейеп кенә ҡараһын! Кемдер берәү йәшерен ярҙам итә, ә Вәзир уларҙы таларға маташа.

Ғабдулланың башынан ана шундай уйҙар йүгереп үтте. Ҡалғандар ҙа ҡараҡ тотоп фашлау тантанаһын кисерә башлағайнылар инде. Ух, эләгәсәк тә һуң Вәзиргә!

Вәзир мурҙаның ҡапҡасын асты. Ул ярға арты менән баҫҡайны. Уның кәүҙәһе ҡулдары менән эшләгәндә күҙәтеүселәрҙән ышыҡланы. Балыҡ сәпелдәгән тауыш



«Ҡамыр батыр» әкиәтенән



**«Ҡамыр батыр» әкиәтенән**



*Ҡ. А. Дәүләткилдиев.* **«Башҡорт һунарсыһы»**



«Әминбәк» әкиәтенән



«Әминбәк» әкиәтенән



*Ә. Ф. Лотфуллин.* **«Өс ҡатын»**



*Р. Б. Нурмөхәмәтов* **«Нефть сыҡҡан ерҙә»**



*Б. Ф. Домашников.* **«Ҡар яуғас»**

ишетелде. Әһә, мурҙалағы балыҡтарҙы берәм-берәм тоғона күсерә түгелме һуң? Ҡараҡ, үҙ эшен еренә еткереп, ҡапҡасты элеккесә ябып, нығытып ҡуйҙы. Тап шул ваҡыт ярҙан Ғабдулланың зәһәр тауышы яңғыраны:

— Ҡаптыңмы, балыҡ ҡарағы!

Вәзир һиҫкәнеп китте. Башта ул ҡарашы менән тирә-яҡты байҡап алды. Иптәштәрен күргәс, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, йылмайып ебәрҙе. Был йылмайыу малайҙарҙың асыуын ғына килтерҙе. Ғабдулланың килеп етеүе булды, Вәзирҙең яңағына ҡунып төшөүе булды.

Айҙар ҙа берҙе өҫтәп алды. Ләкин Вәзир яуап ҡайтарманы, төп кеүек ҡымшанмай тик торҙо.

— Балыҡ ашағың килдеме, тәмле тамаҡ? — тип ярһыны Башлыҡ.

— Мә, улайһа, тағы бер суртанды! — Ул Вәзиргә йәнә киҙәнде. Шул саҡ Вәзир ҡулындағы буш тоғон күтәрҙе. Уның төбөнән сөбөрләп һыу аға ине. Әммә тоҡ эсендә ҡыймылдаған нәмә һиҙелмәне.

— Ҡайҙа иттең балыҡты? Беҙгә үсләшеп, күлгә ебәрҙеңме?

— Ана мурҙаны ҡара, ышанмаһаң...

Ғабдулла менән Айҙар мурҙаға ташланды. Күтәреп ҡараһалар, уның төбө туп-тулы тиерлек балыҡ ине. Баяғыға ҡарағанда ла күберәк. Яр башындағы Яҡуп ҡыуанысынан хатта һыҙғырып ебәрҙе.

Малайҙар мурҙаны кире һыуға батырҙылар. Дөрөҫөрәге, ул үҙе ҡулдан төшөп китте лә аҡрын ғына бата башланы. Бына нисек булып сыҡты! Ғабдулла менән Айҙар, телдән яҙып, Вәзиргә ҡарап ҡаттылар. Тегеһе, «их һеҙ» тигән һымаҡ, башта йылмайып ҡуйҙы, һуңынан шарҡылдап көлөргә тотондо. Көлгәндә, уның яланғас ҡорһағы, һыу өҫтөндә ваҡ тулҡын сығарып, бейеп тора ине. Быны күргәс, Айҙар көлөүенән тыйылып ҡала алманы. Уларға Башлыҡ үҙе лә ҡушылды.

Билдән һыуҙа торған өс малай, бөтә күл буйын яңғыратып, шулай байтаҡ хахылданы. Ситтән ҡарап торған берәү: «Был ниндәй иҫәрҙәр?» — тип уйлар ине.

Бөтәһенән дә бигерәк Яҡуп ҡыуанды. Быға тиклем ул үҙен гел ике ут араһында һымаҡ һиҙә ине.

— Ҡалай ирмәк булып сыҡты! — тип һикереп ҡуйҙы ул.

— Кисә лә һин һалдыңмы? — тип һораны Ғабдулла, ярға сыҡҡас.

— Эйе, — тип баш ҡаҡты Вәзир.

— Элекке көндө ләме?

— Эйе.

— Ә ни өсөн?

— Тик, былай. Һеҙҙең мурҙағыҙ тиҙерәк тулһын өсөн. Шулай ҙа йоҙроғоң тос икән, малай, — Вәзир яңағын һыйпап алды.

— Йә, ярар инде, — тине ғәйебен таныған Ғабдулла.

— Бөтһөн дә ҡуйһын ошонда. Үҙең бит...

— Вәзирҙең балыҡтан ҡото бар, — тип һүҙҙе икенсегә борҙо Яҡуп. — Гел эреһен генә ҡаптырған.

— Ыбыр-сыбырын мин уның кире ебәрә барҙым да...

Башлыҡтың башына бынамын тигән бер фекер килеп төштө:

— Тағанда нисә терәү була?

Ғабдулланың был кинәйәле һорауын зирәк Айҙар шунда уҡ аңлап алды:

— Нисәне терәһәң, шул саҡлы була. Терәүсенең үҙ ҡулында ул. Теләһәң, унды терә.

Был юлы Башлыҡ ғәҙәтенсә бойороҡ иғлан итмәне, ә иптәштәренән кәңәш һораны. Вәзирҙе нахаҡҡа йәберләүе өсөн, ул эсенән бик бошона ине. Шуға күрә бойороҡ бирергә үҙен хаҡһыҙ һананы. Башлыҡ кеше сабырыраҡ, тотанаҡлыраҡ булырға тейеш ине.

— Малайҙар, — тине ул, — Вәзирҙе «Өс таған»ға яңынан алһаҡ, ҡалай йәтеш булыр ине. Кем дә кем риза, шул ҡул күтәрә.

Малайҙар берҙәм ҡул күтәрҙе. Иптәштәренә ҡушылып, хатта Вәзир үҙе лә күтәрҙе. Бөтәһе лә эстән үтә шат ине. Тик уны тышҡа сығарыуҙы һәр кем урынһыҙ һананы.

Байтаҡ михнәттәр күргән «Өс таған», шулай итеп, яңынан ныҡлап аяҡҡа баҫты. Был юлы ул ҡаҡшамаҫ дүрт терәүгә таянды.

Малайҙар кейемдәрен бороп кейҙеләр. Вәзир бөтәһенән дә алдараҡ өлгөрҙө. Уның бар кейеме — бер ҡат салбар ине.

— Ниңә, һинең бүтән күлдәгең юҡмы ни? — тип хәстәрлек күрһәтте Башлыҡ. — Ямғырҙа ла яланғас йөрөйһөң.

— Бар, һандыҡта ята. Мин, тән сыныҡтырып, юрамал күлдәкһеҙ йөрөйөм.

Иптәштәре уның тән сыныҡтырыуын белмәйҙәр ине.

Кирәмәт күленә йәӊ индереү сәғәте алыҫ түгел ине инде. Юлға сығыу берһегөнгә билдәләнде. Көндө лә көтөп тормайынса, улар таң атҡансы уҡ ҡуҙғаласаҡтар. Ә хәҙергә ике кәмә ауыл яғына ҡарай йөҙөп китте. Алдағыһына өсәү, арттағы кескәйенә берәү ултырған. Кәмәләр күл уртаһына еткәс, бик моңло йыр яңғыраны. Беҙҙең Айҙар шулай моңло йырлай. «Бигерәк моңло балаһың, бәхетһеҙ булмаһаң ярар ине», — ти торғайны уға өләсәһе. Ни эшләп бәхетһеҙ булһын, ти ул? Кешеләр күңелен йыр менән иркәләү үҙе ҙур бәхет түгелме һуң?

Бына әле лә уның матур тауышы күл өҫтөнә һибелә лә ярҙарға килеп бәрелә. Юҡ, ярҙарға ғына түгел, кешеләр ҡолағына барып һуғыла ла йөрәктәргә үтеп инә.

Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

?

1. Малайҙар йылғала ниндәй серле мажараға тап булалар?
2. Һеҙгә ҡайһы малай ныҡыраҡ оҡшаны? Ни өсөн? Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙенә генә хас сифаттары хаҡында һөйләп бирегеҙ.
3. Үҙегеҙҙең туған тәбиғәт именлеген һаҡлауҙа ҡатнашыуығыҙ хаҡында әңгәмә үткәрегеҙ.

## АП-АҠ МӨҒЖИЗӘ

(«Ғүмерем миҙгелдәре» китабынан)

Биштәр тирәһендә булғанмындыр. Ҡыҙамыҡ менән ауырып яфаланам. Хәлем йүнәлә буғай инде. Оло инәйем, урынымды һикегә арҡыры түшәп, башымды ян тәҙрә яғына бороп һалды. «Көн яҡтыһын күрергә күпме зар булды. Исмаһам, донъяға ҡарап ятһын...» — тине. Башты күтәрерлек ҡәр юҡ юғын, шулай ҙа байтаҡ нәмәне күреп, күҙәтеп була. Ана, баҡса кәртәһенә эленгән һөлгөнөң семәкәйле башын ала быҙауыбыҙ ки-

леп сәйнәргә кереште. Күрмәйҙәр микән ни? Көйшәп бөтөрә бит инде! Ҡара әле, бөтөнләй һөйрәп төшөрөп, икенсе осон тапарға кереште. Етмәһә, семәренең уртаһына ғына көлсәһен һалып ҡуйҙы. Тәрбиәһеҙ нәмә. Көлсә эргәһенә генә бер һоро турғай килеп ҡунды. Суҡышын да тейҙермәй, кире осоп китте. Оҡшатманы. Талымһыҙ түгел икән үҙе. Биҙәкле пар күнәген көйәнтәләп, Кесе инәйем һыуҙан ҡайтты. Бәләкәй ҡапҡа ябылып бөтмәй ҡалды. Минең Кесе инәйем ишекҡапҡаны гел шулай ябып бөтөрмәй. Атайым уға: «Артыңа ҡулың етмәй», — ти.

Быҙау, һөлгөнө сәйнәй-сәйнәй, лапаҫ аҫтына инеп китте. Тышта хәҙер ҡыймылдаған да нәмә юҡ. Буш ихатаға ҡарап, күҙем тала башланы.

Бәләкәй ҡапҡа шар асылып китте. Тәүҙә Мортаза ағайым күренде. Унан ап-аҡ ат килеп инде. Атлап түгел, бейеп инде. Ағайым уның теҙгенен ҡыҫҡа ғына тотоп алған. Шулай ҙа аҡбуҙ, тәҙрә турыһына еткәс, бер тапҡыр үрәпсеп ҡуйҙы. Ятһыныуымы, ҡыуаныуымы шул булды. Бығаса ат күрмәгән шикелле, әллә нишләп киттем. Шомло ла, рәхәт тә миңә. Ергә баҫып килмәне ул, күктән осоп төштө. Оло инәйем һөйләгән әкиәттәге шикелле. Ағайым ҡалай таҫыллы баһадир икән, тегенең теҙгенен ныҡ эләктереп алған. Аттың килеп инеүе булды, бөтә нәмә яҡтылыҡҡа сумды, уның ҡуйы оҙон ҡойроғонан, туҙғаҡ ялынан, әйтерһең, ап-аҡ нурҙар ергә ағыла. Мин хайран ҡалдым. Мин сихырландым. Юрғанымды атып ташлап, тышҡа йүгерҙем. Мин сыҡмаһам, кире осоп китер тип, ҡотом ҡалманы. Күтәрмәлә мине Оло инәйем күтәреп алды: «Иҫәр, торорға яраймы ни һиңә. Өҙләгерһең бит», — ти.

— Өҙлөкмәйем! Өҙлөкмәйем! — тип сарбайланым. Келәт яғынан атайым да килеп етте.

Ихата уртаһында, аттың ялын һыйпай-һыйпай, ағайым йылмайып тора.

— Төклө аяғың менән килеп ин, малҡай... — тине атайым, аҡбуҙҙың яңағынан һөйҙө. — Яңы төйәктә тәү тапҡыр һыртына сабый тәне ҡағылһын. — Ул Оло инәйем ҡулынан мине тиҙ генә эләктереп алды ла атҡа атландырҙы.

— Сырхау баланы яфаламаһаң шулай...

— Ат өҫтөндә сирле егеттәр ҙә һауыға ул. Ат шауҡымы шифалы.

Баяғыса шомло ла, рәхәт тә миңә. Юҡ, шомдар таралды, рәхәте генә тороп ҡалды. Хайуан тәненең йылыһын һиҙәм. Был йылылыҡтың тылсымынан йөрәгем талпына, еңелсә генә башым әйләнә. Өнөм төшкә күсә. Ә төшө күреп туйғыһыҙ: ҡанатлы толпар мине күктәргә ашыра...

Шулай итеп кергҙе беҙҙең ҡураға, беҙҙең донъяға ат сифатындағы илаһи бер йән.

Үҫә төшкәс, мин шуны белдем: ул яҙҙы беҙҙең ауыл ирҙәре, кескәй генә бер артель булып, Урал яғына ат һатып алырға барғандар. Атайым, тәүәккәлләп, күршебеҙ сулаҡ Хәтипйәнгә эйәртеп, ун һигеҙ йәшлек Мортаза ағайымды ебәргән. Хәтипйән менән ағайым бер төрлө үк хаҡҡа ике ат алғандар. Береһе ерән байтал, икенсеһе ошо ап-аҡ дүнән булған. Ғәҙел йәнле Хәтипйән үҙенә оҡшаған малды былай ғына алмаған. Мортаза ағайым менән шыбаға тотҡандар. Өҫкә сыҡҡанға аҡ айғыр тейгән. Беҙҙең бәхеткә. Шундай һомғол, сапсан, нескә күңелле, ғорур зат булып сыҡты дүнәнебеҙ. Хатта атайым бестерергә лә ҡыҙғанды. Исемен, төҫөнә ҡараптыр инде, Аҡсал тип ҡуштылар. Шуны ла әйтеп үтәйем, күршебеҙ Хәтипйән дә ерән бейәһенән зарланманы. Йылдам уҡ булмаһа ла, күндәм булды. Ике йыуаш пар килде.

Мин бына ошо Аҡсалдың һыртында ун ике йәшемә тиклем йөрөнөм, йәғни көн иттем. Тәненә сыбыртҡы-ҡамсы тейҙертмәне ул. Ғәрсел булды. Бер саҡ туғайға ҡуна барышлай малайҙар менән уҙышҡанда, тышау һелтәп, абайламаҫтан атымдың осаһына тейҙерҙем. Теге ҡапыл ситкә тайпылып, мине ергә ҡолатты. Өҫтөмдә ҡалын көпө ине. Имгәнмәнем. Шулай ҙа һыным ҡатып, бер аҙ яттым. Аҡсал кире боролоп минең эргәмә килгән дә башын сайҡап тора, әйтерһең, битәрләй: «Миңә шулай ҡул тейҙереүеңде көтмәгәйнем. Рәнйеттең», — ти. Минең дә уға хәтерем ҡалды. Ныҡлап ҡалды. Һуғам тип һелтәмәнем дә инде. Яңылыш ҡына тейҙе. Хәл кергәс тә, күҙҙәремде йомоп, байтаҡ заман ҡуҙғалмай яттым. Әйҙә, мине ни көнгә төшөргәнен күреп, үкенһен, эсе әрнеһен әле тим. Бер мәл мороно менән мине төрткөләргә тотон-

маҫмы теге. Мин ҡымшанмайым да. Аптырағас атым, көпөмдән тешләп тартҡылай башланы. Шунан ғына аяҡ үрә баҫтым. Аҡсал минең яурыныма матур ҡаҡ башын һалды. Мин уның маңлайынан һыйпаным. Малҡайымдың моңһоу ике күҙенән ике бөртөк йәш тәгәрәне. Ат күҙендә йәш күреп мин ҡойолоп төштөм...

Мин ҡуна барғанда йыш ҡына ике ат менән йөрөйөм. Икенсеһе — оло башлы һоро алашабыҙ. Үҙе үшән, моңһоҙ, үҙе сиктән сыҡҡан тиҫкәре. Тамаҡҡа талымһыҙ тип кенә аҫрайбыҙ инде. Иртә таңда, ҡайтыр мәлде һиҙеп, Аҡсал беҙ ятҡан ҡыуыш эргәһенә үҙе килә, теге ғибрәтте эҙләй-эҙләй аяҡтарым ҡалмай. Етмәһә, томан баҫҡан берәй соҡор эсенә төшөп ятҡан була. Ә бына Аҡсал менән Кесе инәйемдең ятып торғанын күргәнем дә юҡ. Улар һәр саҡ аяҡ өҫтөндәләр. Үшән һоро алашабыҙ Түбән остоң хөрәсән ялҡауы Бәҫәргән Миңлеәхмәт һыңары. Миңлеәхмәт бит йоҡлай-йоҡлай бәҫәреп бөткән. Шуға күрә янмай ҙа, туңмай ҙа. Аттың да, кешенең дә йүнһеҙе бер иш уның. Быныһын мин белеп, һынап әйтәм.

Ә яҡшы аттар менән затлы ҡатындарҙың бер рухтан яралыуы тураһында мин ғүмер баҡый тылҡыйым. Юҡ, бәғзе ҡатындарҙың яҡшы нәҫел-нәсәбе тураһында ғына әйтмәйем. Хәйер, нәҫел дәрәжәһе үҙе бер бәрәкәт: тамыры баҡыр ағастың сатыры алтын булмаҫ. Әммә шундай ҡатындар килә был донъяға, уларҙың яралыуында, бар булыуында илаһи көстөң, илаһи уттың ҡатнашы күҙгә бәрелеп тора. Улар иң бейектә саҡта ла ерҙән айырылмайҙар, иң түбәнгә төшкәндә лә түбәнлеккә төшмәйҙәр, хурлыҡҡа батмайҙар, юғалтыуҙар кисергәндә, юғалып ҡалмайҙар, ҡайғылар күргәндә, шартлап һынмайҙар; уларҙы хатта аслыҡ-яланғаслыҡ та кәмһетә алмай, сибәрлектәренә ҡағылырға ҡартлыҡ үҙе тартына. Илһамланған миҙгелдәремдә миңә Аҡйондоҙҙо төҫмөрләткән Гөлзәбирә еңгәмде уйлайым. Йәнә йылдар монары аша үткән һирәк-һаяҡ бүтән һындар алдыма, эргәмә килеп баҫа. Заманалар алмашыныуы, әҙәп-әхлаҡтарҙың үҙгәреүе, изгелек менән яуызлыҡ алыштары, оло фажиғәләр, ваҡ ығы-зығылар уларға ҡағылмай. Күп хәҡиҡәттәрҙе инҡар итеп, күп ҡанундарҙы юҡҡа сығарып, тәкәббер хакимдарҙы тәхеттәренән ҡолатып

була икән. Ә бындай ҡатындарҙы инҡар итеп тә, юҡҡа сығарып та, тәхеттән ҡолатып та булмай. Йөҙ йыл әүәл, мең йыл әүәл, ун мең йыл әүәл нисек йәшәгәндәр, шулай йәшәй бирәләр. Сөнки улар — даһиҙар.

Аҡсалды мин ниндәй генә хәлдәрҙә күрмәнем. Һоро алаша менән икеһен егеп һабан һөргәндә, тырыша торғас, бер күлемгәсә[1] аҡ күбеккә, киске яҡҡа ҡара тиргә бата, теге ялҡау ыжламай ҙа. Миңрәү булһа ла хәйләкәр. Ағайым һабан һабы тота, мин ат әйҙәйем. Ләкин күпме тырышһам да оло башты рәтләп тыңлата алмайым, һайтлауға ла ҡолаҡ һалмай, сыбыртҡыға ла иҫе китмәй, баҫайыммы-баҫмайыммы тигәндәй, бураҙнанан саҡ атлай. Ҡайтҡанда, ағайым менгән Аҡсал ваҡ-ваҡ баҫып бейергә керешә, минең алашам, бышҡырып, ике тарафтан да тын сығара-сығара арттан һөйрәлә. Уның һыртында ултырыу оят белгән кеше өсөн үҙе бер мәсхәрә.

Тыумышы менән Аҡсал тикәй көндө эш аты, байрам көндө байрам толпары ине. Йонсоу оҙон юлдарҙа арыу-талыу белдермәне, ҡаты бурандарҙа әҙҙән яҙманы, күпме йөк тейәһәләр, шуны тартты, күпме ныҡ ҡыуһалар, шул тиклем йылдамыраҡ барҙы. Йәне ярылып сығыр саҡтарҙа ла һынатманы, йәнәһе, уның ни бары тире генә атылып сыҡҡан...

Ә байрамдарҙы ул нисектер алдан һиҙә ине. Бына мин күтәрмәлә баҫып торам. Мортаза ағайым Аҡсалдың ап-аҡ итеп йыуылған, таҙартылған йылҡылдап торған һыртына дүрткә ҡатланған семәрле балаҫ йәйҙе, балаҫ өҫтөнә еҙ тәңкәләр менән биҙәлгән күн эйәр һалды, айылдарын тартты. Баянан бирле, дәртенә сыҙай алмай, башын сайҡап торған айғыр, һыртына эйәр тейгәс, оторо ирегеп китте, ер тырнарға кереште. Әсе кешнәп ебәрҙе. Ағайымдың осоп эйәргә ҡуныуы булды, Аҡсал үҙе генә белгән таҡмаҡҡа бейей ҙә башланы. Бейер ҙә шул. Ҡара Яҡуп һабантуйына китәләр бит улар. Ағайым менән икәүһе.

— Ҡара уны, Мортаза, сәмләнеп китеп, бәйгегә ынтылаһы булма. Ишетһен ҡолағың. Рөхсәт юҡ! — тине атайым.

---

[1] *Күлемгәсә* — күлем: ҡыр эштәрендә бер ял иткәндән икенсе ялға тиклемге ваҡыт; бер һыуһын йәки бер тына эшләп алыу.

Тиҙ ярһыусан шул айғырыбыҙ. Йә көстән тайыр, йә бөтөнләй яныр, тип бәйгегә бер тапҡыр ҙа ебәрмәнек. Ә минең ысын ярышта сапҡым килә ине.

Йылдан-йыл нәҫел-ырыуға, күрше-күләнгә килен төшөргәндә кейәү менән кәләш кырандасына Сәмиғулла еҙнәмдең тимер күк бейәһе менән Аҡсалды парлап егәләр. Тимер күк — төптә. Аҡсал — мисәүҙә. Икеһенең дә ҡойроҡ-ялдарын аллы-гөллө таҫмалар менән биҙәйҙәр, ҡолаҡтарына ҡайыған суҡлы ҡулъяулыҡтар тағалар. Дуғала эреле-ваҡлы өс еҙ ҡыңғырау сыңлай, затлы ҡайыш-сбруйҙарҙың баҡыр биҙәктәре йымылдап тора. Кырандасҡа тәүҙә кейәү менән кейәү егете менеп ултыра. Мортаза ағайым кузлаға саҡ һикереп өлгөрә, пар ат алға ынтыла. Тимер күк, бәлки, йыбаныр ҙа ине. Ул сабырыраҡ мал. Аҡсал уны үҙ дәрте менән шулай ҡапыл тоҡандыра. Кәләш артынан күрше йортҡа, күрше урамға баралармы, әллә егерме-утыҙ саҡрымдағы сит ауылға китәләрме — килен төшөрөү ғәҙәтен еренә еткереп башҡара беҙҙең келәштәр. Ҡоҙа-ҡоҙағый, егет-елән, туған-тыумаса тейәлгән биш-алты кырандас һәм арба теҙелешеп, ауыл буйлап елдерә. Кемдер шунда әсе иттереп һыҙғырып ебәрә. Тамаша башлана. Килен күрше-күләндән генә булһа ла, барыбер бөтә ғәләмде аяҡҡа баҫтырып, саң болоттары борҡотоп, Келәштең бөтә урамдарын урап сығалар. Фарсит итеп ҡалалар.

Ялынан ҡойроғона тиклем биҙәлгән ҡупшы Аҡсалдың мисәүҙә нисек барғанын күрһәгеҙ ине. Берсә ул үҙенең матур башын, наҙланып, ҡырын һала, берсә уны ғорур күккә сөйә, берсә, сайҡап, үҙ ялын үҙе туҙҙыра. Тояҡтары иһә ергә тейеп-тейеп кенә ҡала. Ырғып сапмай ул, елдереп кенә бара. Йүгәне лә, ҡамыты ла, ыңғырсағы ла, ышлыяһы ла нисек килешә уға. Ҡойған да ҡуйған. Бәғзе кешегә бына шулай кейем килешә бит...

1931 йылда беҙ айырылыштыҡ. Тәндәребеҙ түгел, йәндәребеҙ айырылышты. Атайым Аҡсалды колхоз көтөүенә илтеп ҡушты. Тәүге мәлдәрҙә бик күптәрҙең аттары кире ҡайтып ыҙаланы. Былтыр башҡа сыҡҡанда Мортаза ағайыма тейгән һоро алаша көндөң көнө ҡаса ла килә. Иртә тимәй, кис тимәй. Аҡсал иһә ете йыл ғүмер иткән төйәгенә әйләнеп тә ҡараманы, өйөбөҙ тирәһенән үтергә тура килгәндә, башын хатта ситкә борҙо. Үҙ атта-

рына һыныҡ-мыныҡ ҡаптырырға йөрөгән малайҙарға эйәреп, аттар аҙбарына мин дә бер тапҡыр барҙым. Усымдағы ризыҡты хайуаным теләр-теләмәҫ кенә алды. Тамаҡ ялғар өсөн түгел, әҙәп һаҡлап ҡына эшләне булыр быны. Сөнки рәхмәт белдереүҙең әҫәрен дә һиҙмәнем. Ә бит әүәл бәләкәс кенә бер һыныҡ өсөн ҡыуанып, ҡулды ялай-ялай биш төрлө рәхмәт яуҙыра ине. Ә хәҙер... Йортонан айырғаныбыҙ өсөн беҙгә үтә үпкәләне, үтә рәнйеүле булыр Аҡсал. Беҙҙән күҙе биҙҙе, күңелле ҡайтты. Нескә күңелле ғорур зат хыянатты ғәфү итмәне. Былай ҡарағанда артыҡ бойоғоп, мәлйерәп төшмәне. Сер бирмәне. Әммә беҙҙән ваз кисте. Мин үҙем дә уның күҙенә күренергә тартына, ояла башланым. Аҡсалдың ҡылығы тураһында Оло инәйемә һөйләгәйнем, ул былай тине: «Бөтәбеҙ ҙә бер тәңре мәхлүктәре, тере йән эйәләребеҙ. Рәнйеүе лә ихтимал, хоҙа эшкәртһә...»

Ул саҡта был һүҙҙең мәғәнәһен аңлап еткермәнем, ә тылсымын һиҙҙем.

Аҡсалдың донъя ҡуйыуы үҙәк өҙгөс аянысլы булды. Иҫемә төшкән һайын хәсрәтем яңыра.

1934 йылдың март аҙаҡтары ине буғай. Юлдар өҙөлгән саҡ ине. Ни арба, ни сана. Бригадир, кистән килеп, атайыма әйтеп китте: «Биш ат менән иртә таңда Шишмәгә бойҙай орлоғона китергә кәрәк. Һүҙемде йыҡма инде, ағай. Тейәр-бушатыр кешеләр һинән башҡа ла бар. Күҙ-колаҡ ҡына булырһың». Төндә атайымдың биле ҡуҙғалды. Шуға күрә мин киттем.

Алыҫ юлға сыҡҡанда йәки ауыр йөк ташығанда кешеләр элекке аттарын екмәҫкә тырыша ине. Үҙ атың ҡыҙғаныс, ҡағып-һуғырға ҡул бармай. Ә сит малды кем аяһын...

Тоҡтарҙы тейәп, Шишмәнән ҡайтырға сыҡтыҡ. Иң алда Аҡсалды әйҙәп алабарман Хәлфетдин бара, уның артынан мин, минең арттан тағы өс сана килә. Ҡара Яҡупҡа тиклем ара — уйпат ер, юлда әле ҡар ҙа иреп, боҙ ҙа муртланып бөтмәгән. Ырамлы ғына киләбеҙ. Көн үҙәгендә Димгә еттек. Боҙ өҫтөндә һыу күренә башлаған икән. Иртәнге һыуыҡта һиҙелмәй ине әле. Хәҙер ат бәкәленә етә. Шулай ҙа йылғаны имен уҙҙыҡ. Ҡара Яҡупты сығып, Үгеҙ үрен күтәрелгәндә аттар ныҡ йонсоно. Сана эҙенән ҡара йылғасыҡтар юл ярып аға.

Етмәһә Аҡсал егелгән сананың табандары тимерле. Урыны-урыны менән уның әҙҙәре ҡара балсыҡты ялтыратып, һыҙылып ҡала. Үрҙең яртыһын менеүгә бер атыбыҙ бөтөнләй хәлдән тайҙы. Уның йөгөн дүрт санаға бүлеп һалдыҡ. Өсәүһенә берәр тоҡ тейҙе, Аҡсалға икәү эләкте. Намыҫсан хайуан ҡарышманы, һаман юлында булды, дәртләндереп бүтәндәрҙе эйәртте. Ярты юлды уҙғас, туҡталып аттарҙы тын алдырҙыҡ.

Кискә табан ғына Назиязға килеп төртөлдөк. Һаҙлыҡ араһынан ағып ятҡан был йылғасыҡ яман мәкерле. Йәйен-ҡышын ситтәре гел күтер уның. Көн йөҙөндә Назияздың ярҙары ныҡ ҡына бәлтерәгән икән. Әммә алабарман Хәлфетдин санаға менеп баҫты ла, уны-быны ҡарамай, һайтлап атына сыбыртҡы менән һуҡты. Бер аҙым киңлегендәге генә болғансыҡ ағымды аша һикерәм тип, Аҡсал алға ынтылды, алғы тояҡтары менән теге ярҙы эләктереп алды, тик арт һаны йылғала тороп ҡалды. Хәлфетдин әшәке һүгенеп, ҡайыш сыбыртҡы менән тегене ярырға кереште. Минең йөрәгем туҡталып, тыным ҡыҫылды, ҡысҡырырға тауышым юҡ. Ҡолағымда тик сыбыртҡы шыйылдауы ғына: шый... шый... шый... Ат, йән асыуы менән үрәпсеп, тағы алға ташланды. Сана, урынынан ҡуҙғалып, үрәсәһе менән күтерле ярға килеп төртөлдө. Шул саҡ өмөтһөҙлөктөң сигенә еткән айғыр, әллә ниндәй ғазаплы, зарлы тауыш сығарып, кешнәп ебәрҙе. Кешнәне лә муйынын күккә һондо. Күтәргән башын түбән эймәй, ҡапыл һул яғына ҡоланы. Шартлап ике тәртә бер юлы һынды. Мин билдән күтергә батып, Аҡсалдың сөйөлдөрөгән сисәйем дә, ҡамытын бушатайым тип, теге ярға ташландым.

Сөйөлдөрөк сисеүҙең хәжәте ҡалмағайны инде. Хайуандың аҡ тештәре араһынан ҡан һарҡып сыҡты. Леп итеп ике күҙе берсә һүнде. Тештәрен ныҡ ҡыҫҡайны. Мин ауыҙын аса алманым. Ниңә асырға кәрәк булғандыр инде? Уға бит яңынан йән өрөп булмай... Ошо мәхлүктең фажиғәле әжәлен иҫкә төшөргәндә, үҙ тәҡдирем күҙ алдыма килгәндәй булды. Ҡанһыҙ хәлфетдиндәр мине лә шулай йөгөм-ниемә менән берәр һаҙлыҡҡа килтереп батырырҙар ҙа, ҡамсылар менән ярырға керешерҙәр. Теге йонсоған, ас Хәлфетдин, бахыр, ошо ҡылыҡты үртәлеүҙән, йәне әрнеүҙән ҡылғандыр. Шулай булған-

дыр. Ә был хәлфетдиндәр уны үстәре ҡаныуҙан рәхәт сигеп эшләйәсәктәр. Мин, хәлемдән килеп, һуңғы минутымда, Аҡсал һымаҡ, бер үрәпсей алырмынмы икән?..

...Аҡсал минең рухыма дүрт аяҡлы януар булып түгел, аңлы йән эйәһе булып керҙе. Бик ауыр саҡтарымда иң яратҡан, иң ышаныслы кешеләрҙе уйлағанда, Аҡсалды хәтеремә алам. Ыҙаланған күңелемә таяныс була...

?

1. Аҡсал менән малайҙың (хикәйәләүсенең) осрашыуын текстҡа яҡын итеп тасуири һөйләп бирегеҙ.
2. Хикәйәләүсенең һөйләү теле хикмәтле, тәрән фекерле. Ошо фекерҙе, текстан миҫалдар һайлап, раҫлап ҡарағыҙ.
3. Хикәйәнең иң һуңғы абзацын яңынан уҡып сығығыҙ. Ниңә автор «иң яратҡан, иң ышаныслы кешеләрҙе уйлағанда» Аҡсалды хәтеренә төшөрә? Ошо хәлгә бәйле уй-фекерегеҙ менән уртаҡлашығыҙ.

Мостай Кәрим

## ҺОРО ТУРҒАЙ

Быйылғы ҡыш үтә зәһәр булды,
Зәңгәрләнеп туңды күктәре.
Ҡыш яфаһын анау һоро турғай
Беҙҙең менән бергә күтәрҙе.
Нисә тапҡыр, туңып, ергә ауҙы,
Хәл эсендә булды хәлдәре.
Нисә сығып, нисә керҙе йәне...
Һоро турғай! Ҡоштоң хәтәре...
Беҙҙән былай зарығып, яҙҙы көттө.
Көтә белгәс, бына килтерҙе.
Ун дүртенсе мартта төш еткәндә,
Тәү тамсыны татып, иҫерҙе.
Иҫерҙе лә йырлап ебәрҙе был,
Осоп ҡунғас тәҙрә һырына.
Эй йырлай ҙа! Ләкин бисараның
Ҡолаҡ һалыусы юҡ йырына.
Ә бер аҙҙан йылы елдәр иҫте,
Яландарҙы ҡарҙан ҡотҡарып.
...Әҙер яҙға килгән сыйырсыҡты,
Кәпәс сөйөп, шул саҡ ҡотланыҡ.

? **1.** Турғайҙың ҡышты нисек үткәреүен һөйләп бирегеҙ.
**2.** Был шиғыр менән авторҙың ни әйтергә теләгәнен бергәләп асыҡлағыҙ.

* * *

Кеше үҙенең әсәһен һәм Ватанын һайламаған шикелле, үҙенең заманын, йәшәгән дәүерен дә һайлап алмай. Ниндәй әсәнән ниндәй илдә тыуыу, ҡайһы заманда йәшәү һинең үҙеңдән тормай. Ләкин тыуған ереңә, йәшәгән йылдарыңа ниндәй эҙ ҡалдыраһың, ер йөҙөндә нисек һәм нимә өсөн йәшәйһең — былары инде шәхестең үҙенән тора, уның түккән тире, йөрәк ялҡыны, аҡыл көсө менән һуғарыла.

Мостай Кәримдең барлыҡ тормош һәм ижад юлы — оло мөхәббәттең тыуыуы һәм үҫеүе, яңынан-яңы буяуҙарҙа балҡып йәшәүе ул. Был һоҡландырғыс һөйөүҙең йәне — Башҡортостан.

*Р. Бикбаев*

Республикабыҙҙың халыҡ шағиры әҙәбиәтебеҙҙең данын бөтә ил, хатта бөтә донъя киңлегенә алып сыҡты, халыҡ күңеле күгенең, оло поэзияның яҡты йондоҙо булып балҡыны.

*F. Хөсәйенов*

Мостай Кәрим беҙҙең күп милләтле сәнғәттең, шул иҫәптән урыҫ сәнғәтенең дә, кимәлен билдәләгән һүҙ оҫталары иҫәбенә инә һәм дөйөм хазинаға үҙ халҡының әүәл туплаған һәм хәҙер байыҡтырған иң яҡшы рухи тәжрибәһен өҫтәй.

*Н. Рыленков*

## Ун икенсе бүлек

*Уралып ятҡан Уралда*
*Болот keүек тауҙар бар;*
*Айыу, бүре, төлкөһө... —*
*Теләгән бер януар бар.*
*Сөйәм тиһәң, шоңҡар бар,*
*Менәм тиһәң, толпар бар.*

Ҡобайырҙан

Зөлфәр Хисмәтуллин

### УРМАН ҠУНАҒЫ

Элек беҙ урманда йәшәнек. Бик күңелле ине ул ваҡытта. Олатайым урман ҡарауылсыһы булып эшләне, атайым менән әсәйем колхозға ағас әҙерләнеләр, үсентеләр үҫтерҙеләр. Ә мин күп ваҡытымды улар менән бергә йөрөп үткәрә торғайным. Миңә һигеҙ йәш тулғас, беҙгә ауылға күсеп китергә тура килде: уҡырға кәрәк ине. Тик олатайым ғына урманын ҡалдырып китә алманы. Беҙ күпме генә өгөтләп ҡараһаҡ та, уны ауылға ҡайтырға күндерә алманыҡ.

— Минән башҡа был ағастарҙы кем тәрбиәләп үҫтерер? — тине ул. — Һәр бер нәмәнең тәртибе бар. Белмәгән кешене ебәрерҙәр ҙә бөтә ағастарҙы һәләк итерҙәр.

Ағас үҫтереү буйынса ул, ысынлап та, бик яҡшы белгес. Йәш сағынан уҡ шул эш менән шөғөлләнгән. Ҡайҙа ниндәй ағас ултыртырға кәрәклеген дә, йәш үсентеләрҙе нисек итеп бөжәктәрҙән һаҡлап буласағын да — бөтәһен дә белә. Хатта үҫеп ултырған ағастың нисә йыл йәшәүен дөрөҫ әйтә ала.

Ләкин уның ауылға күсергә теләмәүенең сәбәбе бында ғына түгел ине. Бәләкәйҙән өйрәнгән, яратҡан, һәр бер ташын, һуҡмағын, йәнлектәрен белгән урманды ташлап китә алмай ине ул. Ә уның бик оҫта һунарсы булыуы тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Беҙҙең ауылда уны «айыу

батшаһы» тип кенә йөрөтәләр. Үҙ ғүмерендә ул алтмышҡа яҡын айыу атып алған. Ә ул аулаған бүреләрҙең, төлкөләрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Һунарға сығып китһә, бер ваҡытта ла буш ҡайтмай.

Беҙ олатайымды мөмкин тиклем яңғыҙһытмаҫҡа тырыштыҡ. Өлкән синыфтарҙа уҡый башлағас, мин уның янына элеккегә ҡарағанда ла йышыраҡ йөрөй башланым. Әсәйем әҙерләп ҡуйған нәмәләрҙе алам да китәм. Ағастар араһынан ике тау һыртын төшһәң, барып та етәһең. Биш-алты саҡрым ер.

Бына был юлы ла, яҙғы каникул башланыу менән, олатайым эргәһенә килдем.

Үткән аҙнала, үҙем менән һунарға алып барырмын, тигәйне. Ләкин мин аҙна буйына юҡҡа ғына өмөтләнеп йөрөгәнмен икән.

— Булмаһа, ана бер көбәкле мылтыҡты ал да үҙең генә бар. Икәүләп башҡа ваҡытта барырбыҙ. Тау баштарында ҡар иреп бөткән. Исмаһам, ер-һыу күреп ҡайтырһың, — тине олатайым.

Мин бер үҙем барырға ла риза. Мылтығын биреүе лә еткән.

— Ярар, — тинем мин.

— Бына һиңә биш патрон, бишеһе лә ваҡ дроп менән яһалған. Һиңә болан атырға түгел, ә бүре һинән өс саҡрымдан ҡасасаҡ. Беренсе тапҡыр һунарға барған кешене белә ул, — тине йылмайып. — Ҡор, һуйыр осраһа, атырһың.

Олатайымды тел төбөнән үк һиҙеп торам инде. Урманда уның кеүек һаҡ йөрөй алмам да, йәнлек осрамаҫ, тип уйлай ул.

Мылтыҡты иңбашыма аҫтым да тауға киттем.

Уның итәге беҙҙең йорт эргәһенән үк башланып китә. Ә һыртына менгәнсе, тулҡын-тулҡын булып торған биш-алты бәләкәй тауҙы үтергә кәрәк. Менәһең дә төшәһең. Түбәһенә күтәрелгәнсе шулай. Бик оҙаҡ барырға кәрәк. Уның ҡарауы, башынан әллә ниндәй таныш булмаған ауылдар күренә.

Барған һайын тәбиғәт тә үҙгәрә бара. Бер-береһенә һырығышып ултырған ҡуйы ағастарҙы түбәләре күккә һуҙылған ҡая таштар алыштыра. Ниндәйҙәре генә юҡ уларҙың. Ике-өс өй дәүмәле, башҡа төшөрҙәй булып

аҫылынып торғандары ла, стена кеүек текә һәм бейектәре лә бар. Таштар араһынан бер аҙ барғас, тағы ла урман башлана. Бында үҙенде икенсе донъяла итеп һиҙәһең: йәй көнө көндөҙ ҙә ҡараңғы була; ел юҡ, тик ҡарт ағастар ғына серләшкән һымаҡ, бер туҡтауһыҙ тирбәлешеп шыбырлашалар. Ә унан да өҫтәрәк мәшһүр Урал һырты. Унда йәйге селләгә тиклем ҡар ята.

Өйҙән сыҡҡанға байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Ә мин һаман тауға күтәреләм. Оҙаҡ ҡына төрлө йәнлек эҙҙәрен ҡарап торам, уларҙың иҫкеме, яңымы икәнлеген белергә тырышам. Ә эҙҙәр бик күп. Ҡайһыларының ниндәй йәнлектеке икәнлеген дә айырыуы ҡыйын. Бына төлкө эҙе. Күп нөктәләр кеүек теҙелеп киткән. Уны яҡшы беләм. Улар ауылға тауыҡ урларға бик йыш йөрөйҙәр. Эҙ яңы. Туҡтап, тирә-яҡҡа ҡарап алам. Юҡ, бер нәмә лә күренмәй. Элеккесә бер туҡтауһыҙ урман шаулай, алыҫта тумыртҡа туҡылдаған тауыш ҡына ишетелә. Бер нәмә лә күренмәгәнгәлерме, әллә юҡ-бар тураһында уйлағанғалырмы, урман шомло һәм серле булып тойола башланы. Ҡайҙалыр нимәлер йәшеренеп ятҡан кеүек. Бына өҫтө ҡар менән ҡапланған ҙур түңгәк. Ул башына аҡ кәпәс кейгән айыу һымаҡ булып күренә. Ә арыраҡ йығылған йыуан ҡарағай ята. Ни өсөндөр бүре тик шуның кеүек ағас аҫтына өң яһай, тип күҙ алдына килтерәм. Уның эргәһендә генә тамыры менән ҡуптарылған, ләкин йығылмаған, икенсе бер ағасҡа терәлеп торған ҡайын ағасы. Ситтән үк хәлдән тайып һөйәлеп торған кешене хәтерләтә...

Йыуан ҡарағай эргәһенә килеп етеү менән, мин туҡтап ҡалдым. Олатайым менән үткән йыл мин уның эргәһендә булғайным инде. Ошо ҡарағайҙан аҙ ғына аҫтараҡ Һаҡмар үҙенең башын ала. Ә бер аҙ барғас, Ҡаҙыш йылғаһы башланған ер. Шулай яҡын ғына булһалар ҙа, улар бер-береһе менән ҡушылмаясаҡтар. Сөнки уның береһе Урал йылғаһына, икенсеһе Ағиҙелгә ҡоя.

Бында минең өсөн бөтә нәмә таныш. Аҙ ғына өҫтәрәк көньяҡтан төньяҡҡа табан һырт һуҙыла. Үткән йыл, олатайым менән һунарҙан ҡайтышлай, шунда ултырып сәй эсеп алдыҡ. Тап «Европа — Азия» тип яҙылған бағана эргәһендә. Олатайым бағананың «Европа» тип

яҙылған яғында, мин «Азия» тип яҙылған яғында ултырам.

— Азияға йүгереп барып ҡоро сытыр йыйып алып кил әле, — ти олатайым, йылмайып.

Мин сәй эскән ерҙе барып ҡарарға булдым. Тауҙың түбәһенә менеп еттем тигәндә генә, күҙемә ниндәйҙер ҡарасҡы салынып ҡалғандай булды. Бер нисә аҙым атланым. Тау һыртының ҡарҙан әрселгән урынында ҡоралай тора ине. Ул башын күтәреп тыңланы һәм ҡауҙан ашай башланы.

Мин, ағастар араһынан һиҙҙермәйенсә генә яҡын барып, уны күҙәтергә булдым. Беҙҙең яҡта осрай торған иң матур йәнлек бит ул.

Ағас баштарынан ҡар бәҫтәре төшә лә бер тауышһыҙ ғына ергә барып бәрелә. Көн йылына төшкән, күрәһең. Ә миңә хатта эҫе. Арҡанан тир аға. Ҡоралай ҡуҙғалды. Ул һауала йөҙгән һымаҡ. Һоро арҡаһы әле ауҡалыҡтар араһында, әле таштар араһында емелдәй. Ул тауҙан түбәнгә табан бер нисә тапҡыр һикерҙе лә туҡтап ҡалды; оҙон, матур башын юғары күтәрҙе, үткер күҙҙәре менән тирә-яҡты һөҙөп сыҡты. Һәм тағы ла ғәмһеҙ генә үлән ашай башланы.

Шул ваҡытта ҡоралайҙан алыҫ түгел бүре күреп ҡалдым. Ул, таштарға ышыҡланып, боҫоп ҡына ҡоралайға табан килә ине. Йыртҡыс ҡоралайҙы күптәнән бирле һағалап йөрөгән, күрәһең. Асыҡ урындарҙа ул бөтөнләй боҫоп ҡына бара. Минең йөрәгем сығырҙай булып тибә башланы. Ни эшләргә? Атыуҙың файҙаһы юҡ. Ара алыҫ. Етмәһә, минең пуля менән яһалған патроным да юҡ.

Ләкин ни эшләп һөжүм итмәй һуң ул? Ниңә ҡоралайға яҡын бармай.

Ҡоралай туҡтау менән бүре лә туҡтап ҡалды.

Бүренең хәйләкәрлеген мин шунда ғына аңланым. Асыҡ тау башында, ҡар иреп бөткән урында, ҡоралайҙы ҡыуып етеүе ҡыйын. Шуға күрә йыртҡыс буласаҡ ҡорбанының тау итәгенә, ҡар тәрән урынға, төшкәнен көтә һәм шунда ғына һөжүм итергә теләй ине.

Ҡоралайҙың шул тиклем һаҡһыҙлығына минең асыуым килде. Ел икенсе яҡтан иҫкәндер инде. Юғиһә дошманын һиҙгән булыр ине.

Ҡоралай, бөтә һаҡлығын онотоп, аҫҡа табан төшә башланы. «Ҡайҙа бараһың һин? — тип әрләнем мин эсемдән. — Бүренең ауыҙына үҙең инәһең бит».

Бүре берәй төрлө һаҡһыҙлыҡ күрһәткәндерме, әллә ел арттан иҫә башлағандырмы, ҡоралай башын күтәрҙе лә ҡатып ҡалды. Унан кәүҙәһен һуҙҙы, бер аҙ сүгә төшөп, бик бейек һикерҙе һәм бөтә көсөнә саба башланы. Бүре лә, хәҙер йәшеренеп тормайынса, уның артынан төштө. Ҡоралай бер нисә тапҡыр артҡа һикерҙе, унан һуң туҡтап, тау битләүе буйлап ҡасты. Ләкин барған һайын уларҙың аралары ҡыҫҡарҙы. Ҡоралай боролған һайын, бүре уның юлын киҫеп алдына сығырға тырышты. Көтмәгәндә ҡоралай, йүнәлешен үҙгәртеп, тауға табан ынтылды һәм тар ғына һырт буйлап сапты. Ҡоралай барған һырт бейек ҡая менән бөтә, һәм ситкә һикерергә бер ниндәй мөмкинлек юҡ — текә. Миңә ҡоралай ҡая башына барып етер ҙә туҡтар, һәм йыртҡыс уны шунда уҡ ботарлап ташлар кеүек тойолдо.

Бына улар ҡыуышып бер-бер артлы бейек ҡая эргәһенә барып еттеләр һәм, туҡтап та тормайынса, башта ҡоралай, уның артынан бүре упҡынға һикерҙе. Унан һуң мин бөтә көсөмдө йыйып улар яғына табан йүгерҙем. Тауҙы урап, һәләкәт булған урынға килеү менән, аптырап ҡалдым. Был ни хәл? Бүре өҫтөндә ҡоралай баҫып тора. Яҡыныраҡ барҙым. Эйе, ысынлап та, шулай. Йыртҡыстың тәне әкрен генә ҡалтыранып ҡуйҙы. Был бүренең һуңғы һулышы ине. Ләкин ҡоралай ни өсөн бүре өҫтөндә баҫып тороуын һис тә аңлай алманым. Мин уның алдына уҡ килеп баҫтым. Ә ул һаман шаҡ ҡатҡан килеш тора. Мин уның башын һыйпап ҡараным, һәм ул торған урынынан ергә ауҙы. Икеһе лә үлгән булып сыҡты, тип уйланым мин.

Шул ваҡытта артымдан ҡыштырлаған тауыш ишетелде. Әйләнеп ҡараһам... олатайым. Яурынына үҙенең ике көбәкле мылтығын аҫып алған. Көтмәгәндә уның килеүенә ғәжәпләнеп ҡалдым.

— Ҡоралай ҙа имгәнгәнме әллә? — тип һораны ул бер нәмә лә булмаған шикелле.

— Үлгән...

— Үлмәҫкә тейеш ине. Ҡурҡҡандыр ул. Ҡоралай һикереүҙән генә үлмәҫ.

— Һин уның һикергәнен ҡайҙан беләһең?

Олатайым яуап биреү урынына йылмайып ҡына ҡуйҙы. Күрәһең, ул минең артымдан күҙәтеп йөрөгән.

— Олатай, ни эшләп ул бүре өҫтөндә баҫып тора ине?

— Үлемдән ҡотолор өсөн, — тине олатайым. — Ҡоралайҙың нисек һикергәнен күрҙеңме?

— Күрҙем.

— Ул башта бәләкәй ҡаяға, унан һуң ғына ергә һикерҙе. Бүре ҡоралайҙың хәйләһен аңламаны. Бик шәп сабып килеп, ул үҙен-үҙе туҡтата алмай, тау башынан йығылып төштө. Ҡоралайға шул ғына кәрәк ине. Йыртҡыстың ятҡанын күреү менән, бәләкәй ҡаянан туп-тура уның өҫтөнә һикерҙе. Юғиһә бүренең үлмәй ҡалыуы ла ихтимал ине.

Беҙ икебеҙ ҙә ҡоралайға ҡараныҡ. Ул, олатайымдың һүҙен раҫлаған кеүек, башын күтәрҙе; торорға тырышып ҡараны. Ләкин ерҙән күтәрелә алманы, тағы ла башын ергә һалды.

— Ҡурҡҡан, һаман һушына килә алмай, меҫкен, — тине олатайым. — Ярар, беҙ уны терелтербеҙ әле. Өйгә алып ҡайтырға тура килә инде.

Мин бик шат инем. Уны үҙем тәрбиәләйәсәкмен.

— Һин ни эшләп бүрене мылтыҡтан атып ҡурҡытманың? — тине олатайым.

— Ҡоралай, ҡурҡып, көрткә инеп китер, тип уйланым.

— Бик дөрөҫ. Атҡан булһаң, бүрегә уны тоторға ғына ярҙам итер инең. Дөрөҫ эшләгәнһең. Һинән бик яҡшы һунарсы сығасаҡ...

Беҙ, ҡоралай менән бүрене һөргөгә һалып, өйгә алып ҡайтып киттек.

Иртән йоҡонан уяныу менән, ашыҡ-бошоҡ кейендем дә ҡоралай эргәһенә сыҡтым. Таң яңы беленә башлағайны. Һарай эсендә бөтөнләй ҡараңғы. Мин һарайҙың эсенә индем, һәм шунда уҡ ҡыштырлаған тауыш ишеттем. Ҡоралай аяғына баҫып тора ине. Ул башын юғары күтәргән, үҙе йыш-йыш тын ала.

— Ҡурҡма, — тинем иркәләгән тауыш менән, — мин һинең ҡотҡарыусың бит, танымайһыңмы ни?

Ләкин ҡоралай мине аңларға уйламай ҙа. Яҡынлаша башлау менән, ҡорт саҡҡан кеүек, һарайҙан сығып уҡ

китте һәм өс аяҡлап кәртә буйлап һикергеләп саба башланы. Бер аҙҙан һуң ул тынысланды, ләкин элекке кеүек үк үҙенә яҡын ебәрмәне. Мин күрмәгәндә генә ул ышығыраҡ урынға барып тора ла теле менән йәрәхәтен ялай башлай.

Олатайым торғас, дарыулап, йәрәхәтен бәйләне һәм, аҫтына бесән түшәп, һарайға бикләп ҡуйҙы.

— Ашарға ҡуй ҙа сыҡ, — тине ул миңә. — Бимазалап йөрөмә.

Мин бөтәһен дә олатайым әйткәнсә эшләнем. Ишекте асып ашарға ҡуям да сығып китәм. Ләкин ҡоралай мин биргән нәмәләрҙең береһен дә ашаманы. Әгәр ул тиҫкәреләнеп ашамаһа, бер нисә көндән үләсәк бит. Урманға ебәреп булмай. Бүре уны шунда уҡ тотоп ашаясаҡ. Мин бөтәһен дә олатайыма һөйләп бирҙем.

— Асыҡһа ашар, — тине ул тыныс ҡына.

Ул йәнлектәрҙең ҡылыҡтарын яҡшы белә. Шулай ҙа был юлы ышанып етмәне. Биш көн ваҡыт үтеп китте, ә ҡоралай һаман ашаманы. Йөндәре йәмһеҙ булып төйөрсөләнде, эсе бөршәйҙе, мороно тағы ослая төштө. Ул тәүге көндәрҙәге кеүек һарайҙан сығырға ла атылып тормай, миңә әйләнеп тә ҡарамай. Көндән-көн ябыға, ҡойолдороҡҡа әйләнә барған йәнлеккә ҡарап тороу миңә бик йәл ине.

Бер көн ғәҙәттәгесә бесән һалдым, һауытты йыуып һыу ҡойҙом һәм ек аша уны шым ғына күҙәтә башланым. Ул ҡыйыуһыҙ ғына бесән эргәһенә килде, уны еҫкәп ҡараны һәм теләр-теләмәҫ кенә бер нисә үләнде ҡапты. Мин шатлығымдан ҡысҡырып ебәрерҙәй булдым.

Ошо көндән башлап ҡоралай ашай башланы. Һуңынан ул миңә шул тиклем өйрәнеп китте, ишекте асыу менән йүгереп килеп тә етә һәм, биргәнде лә көтөп тормайынса, ҡулымдан ашарға тотона.

Йәрәхәте лә күренеп төҙәлде, хәле яҡшырҙы, иртәнән алып кискә тиклем үҙ алдына уйнап йөрөнө. Тик тормаҫ өсөн әллә ниндәй хәйләләр таба. Ихатала тыныс ҡына атлап йөрөй ҙә көтмәгәндә, башын юғары күтәреп, ҡолаҡтарын һикертә һәм бышҡырып ебәрә. Унан һуң ихата буйлап саба башлай, әйтерһең дә, артынан бүре ҡыуа. Ә иң ҡыҙығы — уның һикергәнен ҡарап тороу.

Тик торған урындан ул шул тиклем бейек һикерә ала, әгәр мин уның яртыһы тиклем генә һикерһәм дә, мәктәптә беренсе урынды алған булыр инем. Һикереп арыһа, бағана эргәһенә килеп һөҙөшөргә тотона. Бер-ике аҙым артҡа сигенә лә бөтә көсөнә бағананы килеп һөҙә. Унан һуң тағы ла артҡа сигенә.

Бер көн олатайым ҡоралайҙың яраһын ҡараны ла:

— Сығарырға кәрәк, урманын һағынғандыр, үҙ көнөн үҙе күрһен инде, — тине.

Тау битләүҙәрендә, яландарҙа ҡар ireп бөттө. Тау баштарынан шарлауыҡтар аға. Яҙ ҡояшы ағас араларында йәшеренеп ятҡан ҡарҙарҙы ла шәфҡәтһеҙ иретә. Ә уйһыулыҡтарҙа һәм тау битләүҙәрендә йәшел үләндәр күренә башланы. Хәҙер ҡоралайға бер ниндәй йыртҡыс та ҡурҡыныс түгел ине. Мин ҡапҡаны астым да, үҥәсенән тотоп, уны тышҡа сығарҙым. Ул аҡыллы ҡара күҙҙәре менән миңә ҡараны һәм, рәхмәт әйткән һымаҡ, башын һелкте лә тигеҙ аҙымдар менән, ашыҡмайынса, урманға табан атланы. Урман янына еткәс, ул башын бороп беҙҙең яҡҡа ҡараны һәм, һикереп, ағастар араһына инеп китте.

— Хәйерле юл! — тип ҡысҡырҙым мин. — Һаҡ бул, урманда бүреләр күп!

?

1. Олатай ни өсөн урмандан китергә теләмәй?
2. Малай һунарға сыҡҡас, урманда ниндәй эҙҙәр, ниндәй кейектәр күрә?
3. Бүренең ҡоралайға һөжүме тураһында һөйләгеҙ. Ҡоралайҙың бүренән ҡотолоуында малайҙың ярҙамы бармы?
4. Ҡоралай ҡурала тәүҙә ни өсөн бер ни ҙә ашамай? Ашай башлағас, нисек үҙгәрә?
5. Малай ҡоралай менән нисек хушлаша?
6. Тәбиғәтте, йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы һаҡлау буйынса һеҙҙең мәктәп уҡыусылары ниндәй эш алып бара?
7. Бәләгә осраған йәнлектәргә, ҡош-ҡорттарға һеҙҙең ярҙам иткәнегеҙ бармы? Булһа, шул турала телдән хикәйә төҙөгөҙ.

Рәшит Низамов

## ҠАШҠАРЫМ МИНЕҢ

— Үлән күләгәһе ошо соҡорға етһә, Фәнил өйөнән сыға. Мин әйтте тиерһең, – тине Әсләм.

— Юҡ, ошо әрем күләгәһе икегә оҙонайғас, Фәнил «цирк» күрһәтә башлай, — тип бәхәсләшергә йыйынды Риф.

— Иң дөрөҫөн минең күләгә әйтә...

Ауыл осондағы сирәмлектә уйнаған бәләкәс малайҙар, ҡыҙҙар ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшергә тотондо. Улар бишенселә уҡыған Фәнилде зарығып көтә. Сөнки ул бәләкәстәр менән уйнарға, уларҙың күңелен күтәрергә ярата. Бөгөн улар Ҡашҡар ҡушаматлы эте менән «цирк» күрһәтергә тейеш ине. Бәләкәстәр бик инәлеп һорағанға күрә, ул айына бер булһа ла цирк тамашаһы ойоштороп ала. Ул Ҡашҡарҙы төрлө күнегеүҙәр яһарға өйрәткән. Ана шуға ла бәләкәстәр:

— Ул Ҡашҡарын циркка бирергә итә икән! — тип, шаштырып уҡ ҡуялар.

— Ура! Фәнил килә! — тип ҡысҡырып ебәрҙеләр малайҙар, уның ауыл осона ыңғайлауын күргәс. Уның аҡ күлдәге, күкһел салбары әллә ҡайҙан күренә.

Фәнил бәләкәстәр алдына килеп баҫты ла Ҡашҡарҙың башын һыйпап, һөйләргә тотондо.

— Хәҙер беҙ Ҡашҡар менән цирк номерҙары, фокустар күрһәтәбеҙ. Һәр номер, фокус фәнгә нигеҙләнә. Быны бер ҡасан да онотмағыҙ! Ҡашҡар ни өсөн мине тыңлай, тиһегеҙме? Сөнки уның шартлы рефлексы бар...

Шунда бәләкәс ҡыҙҙарҙың береһе:

— Ана тағы рефлекс, тине. Их, шул рефлексын алып торһаҡ, беҙҙең Муйнаҡ та фокус күрһәтер ине, — тине күршеһенә үкенгәнерәк тауыш менән.

Фәнил тантаналы тауыш менән беренсе номерҙы иғлан итте:

— Ҡашҡар үләндә һеҙҙең кеүек тәгәрәп күрһәтә. Тик һеҙ ҙә уның менән бергә тәгәрәгеҙ!

Шул ыңғайға Фәнил Ҡашҡарға шым ғына: «Ят... Тәгәрә», — тине лә ҡулы менән әйләнеү яғынараҡ төрттө. Шул ыңғайға Ҡашҡар сирәм өҫтөнән биш

тапҡыр әйләнде. Малайҙар, ҡыҙҙар ҙа көләшә-көләшә сирәмдә тәгәрәште. Фәнил иртән генә ҡармаҡлап тотҡан балығының бәләкәс киҫәген Ҡашҡарға һоғондорҙо.

Икенсе номерҙа эт артҡы аяғында биш тапҡыр әйләнеп сыҡты, таяҡ аша һикерҙе. Фәнил атлап киткәс, Ҡашҡар уның аяҡ араһынан һис яңылышмай атлап барҙы. Һәр номерҙан һуң Фәнил этте балыҡ киҫәге менән һыйланы.

Ул тағы бер-ике номер менән бәләкәстәрҙе ҡыуандырырға йыйынғайны, тик уның эргәһенә әсәһе, Мәһиямал апай, килде. Ул Фәнилгә гәзит бирҙе лә:

— Балам, бынау һүрәткә ҡара әле. Берәй нәмә күрмәҫһеңме икән? — тигән булды.

Фәнил, шырт ҡара сәсен һыйпап, бер аҙ тын торғас:

— Күрҙем, әсәй! Күрҙем! — тине тулҡынланған тауыш менән.— Минең һүрәтте гәзиттә баҫып сығарғандар!

— Балам, һүрәтең конкурста өсөнсө урынды алған. Шәп булған! — тип маҡтаны уны әсәһе.

Фәнил республика балалар гәзите үткәргән конкурсҡа һүрәттәрен ебәргәйне. Бер һүрәте хатта гәзиттә баҫылған, өсөнсө урынды алған. Малай быға эстән бик тә ҡыуанды. Күңел түрендә йөрөткән хыялы уның йөрәген йыш-йыш тибергә мәжбүр итте.

Фәнил бәләкәйҙән һүрәт төшөрөргә әүәҫ булды. Мәктәпте биҙәгән һүрәттәрҙең, лозунгыларҙың күбеһе уның оҫта ҡулы, үткер күҙе аша үтә.

Бөгөн гәзиттә сыҡҡан һүрәткә тәүҙә эстән ҡыуанды, һуңынан ныҡ уйланды. Ул һүрәт яһарға һәләтле балаларҙы ҡабул иткән интернаттың барлығын ишеткәйне. Фәнил ана шунда барыу хаҡында эстән гел уйлап йөрөнө. Тик был хаҡта әсәһенә әйтергә баҙнат итмәне. Бөгөн ул үҙенең күптән һаҡлап йөрөткән серен сисергә булды.

— Әсәй, Ҡарағайлы интернатында һүрәт төшөрөргә өйрәтәләр, ти.

— Эйе шул. Мин дә ишеткәйнем.

— Шунда уҡырға инеп булырмы икән?

Мәһиямал апай яһарға һонған сәйнүген өҫтәлгә кире ҡуйҙы ла Фәнилгә ҡараны:

— Балам, беҙ икәү генәбеҙ. Яңғыҙым бер өйҙә ни эшләйем? Үҙебеҙҙең мәктәп бер тигән.

Ул әсәһен борсорға теләмәне, шуға ла башҡаса һүҙ әйтмәне.

Уҡыуҙар бөткәс, Фәнил илап тигәндәй инәлгәс кенә, әсәһе уға интернатҡа барырға ризалыҡ бирҙе.

Фәнил мәктәптән үҙенең документтарын алырға йыйынды. Ул өй эргәһендә йоҡомһорап ятҡан Ҡашҡарҙы саҡырҙы.

— Ҡашҡар! Кил әле. Серләшеп алайыҡ.

Маңлайында йомро ғына аҡ табы булған эт, хужаһының тауышын ишеткәс, тәүҙә уң күҙен асты, шунан һикереп торҙо ла малай ҡаршыһына килеп тә етте, уның аяҡ-ҡулдарын еҫкәштереп алды.

— Әйҙә, киттек, — тине Фәнил.

Ул ҡапҡаны асты ла этте алдан сығарҙы. Эт шунда уҡ баҫыу яғына боролдо. Фәнилгә ауыл осондағы бойҙай баҫыуына күҙ-ҡолаҡ булырға әйткәйнеләр. Унда ингән кәзәләрҙе ҡыуырға кәрәк. Был эштең күбеһен Ҡашҡар үтәй. Уның абалап өрөп килеүен күрһәләр, кәзәләр шунда уҡ баҫыуҙан сығып ысҡыналар.

Фәнил Ҡашҡарҙы мәктәп яғына борҙо.

Тәүҙә ул шәп кенә атланы. Бер аҙҙан аҙымын аҡрынайтты. Үҙе китһә, Ҡашҡар ни эшләр?

Ошо уйҙар менән Фәнил мәктәпкә килде. Уҡыу-уҡытыу бүлеге мөдире, документтарын биргән саҡта, уға:

— Әйҙә, туған, тырышып уҡы инде, — тигән булды...

Фәнил кепкаһын батырып кейҙе. Сәсен алдырмауына байтаҡ ваҡыт үткәндер инде. Уның былай ҙа ҙур ауыҙы бәлшәйә төшкән. Бәләкәй күҙҙәре менән малай юл буйындағы үләндәргә, аяҡ аҫтындағы сүп-сарға асыуланып ҡараған һымаҡ. Ҡашҡар килеп һарылһа ғына, уның оҙонса йөҙө асылып китә.

Ҡарағайлыға китер көн килеп тә етте. Унда тиклем пароходта барырға кәрәк. Фәнил менән әсәһе пристангә йүнәлделәр. Ауыл осондағы өйҙә йәшәгән тракторсы Фазлетдин ағай Фәнилгә ҡаршы сыҡты:

— Уҡырға киттеңме, улым? Һәйбәт урынға бараһың. Һөнәр алырға тырыш. Телевизор йүнәтергә лә өйрән. Уҡығас, үҙебеҙҙең ауылға ҡайтырһың. Телевизорыбыҙ ни эшләптер бәлтерәп тора...

Күк төçтәге ыҡсым сумаҙан күтәргән Фәнил пароходтың алғы яғына үтте, өçтәге эскәмйәлә урын алды. Ҡашҡар яр буйына ултырған да Фәнилгә «Йә, эшең бөттөмө? Тиҙерәк төш инде» тигән һымаҡ ҡарай, сабырһыҙланып, алғы аяҡтарын алмаштыра. Мәһиямал апай баçмаға баçҡан да ҡулъяулығы менән күҙ тирәләрен һөрткөләй. Көләргә тырыша, тик күҙ йәше быға ҡамасаулай. Ул йәнә ҡулъяулығына тотона.

Пароход һуҙып-һуҙып ҡысҡыртты. Ҡашҡар урынынан торҙо ла бер алға, бер артҡа йүгергеләне. Пароход ҡуҙғалды. Фәнил ни эшләргә белмәне. Уның йөрәге һыҙлап ҡуйғандай булды. Йүгереп ярға сығаһы, әсәһе, Ҡашҡар менән бергә тороп ҡалаһы килде уның... Тик яр күҙ алдында артҡа сигенә, алыçлаша бара. Эт өрә-өрә яр буйынан саба, пароходтың үҙ тәңгәленә килеп еткәнен көтөп тора.

— Ҡашҡар! — тип Фәнил ҡысҡырһа, ул бер алға, бер артҡа һикерә. Ике саҡрым самаһы юл үтелде. Ағиҙелгә Ҡыуғынлы йылғаһы ҡойған тамаҡҡа килеп етте пароход. Йылғаны күреп, Ҡашҡар туҡтап ҡалды. Шунан ул ярҙан шыуышып тигәндәй төштө. Фәнил уны күҙҙән юғалтты.

...Яңы урында тәүге көндәрҙә Фәнил өсөн бөтәһе лә әллә нисек ине. Күрше ауылдан килгән Радик тигән малай менән дуçлашты. Радик гел генә күңелһеҙ төç менән йөрөй. Бер һыуыҡ көндө мәктәп баҡсаһына сыҡҡас, Фәнил иптәшенең илап ултырғанын да күрҙе.

— Ниңә илайһың? Берәйһе бәйләндеме әллә?

— Юҡ... Ҡайтҡы килә. Әсәйемде һағындым...

Бер аҙ торғас, Фәнил:

— Мин дә... — тине.

Ләкин һүҙен әйтеп бөтмәне. «Һағындым», — тип әйтергә ҡыйманы ул. Әллә һағыныуҙың нимә икәнен белмәнеме?

Радик менән һөйләшкәс, нимәгәлер уның күңеле әрнене. Нимәгә шулай булды һуң әле? Ул ауылын, әсәһен һис кенә лә күңеленән сығарманы. Ауылы бер хәл. Ҡашҡар... Ул һис кенә лә онотолмай. Бүлмәгә ингәс, Фәнил тәҙрәгә ҡараны. Тышта бөгөн һыуыҡ. Көҙгө көндә һирәк була торған эре күҙле ямғыр тәҙрәгә туп-туп итеп һуғыла. Һыуыҡ һыу тамсылары, бер-береһенә

ҡушылып, быяланан шәп итеп аҫҡа тәгәрәйҙәр. Был тамсылар хәҙер Ҡашҡарҙы күшектерәләр, тип уйланы ул. Солан аҫтындағы ояһын боҙманылармы икән? Былтыр көҙ Фәнил шул ояны үҙе яһағайны. Бәләкәй генә ҡыуышҡа оҡшатып эшләгәйне ул. Һыуыҡ көндәрҙә Ҡашҡар унда бөгәрләнеп кенә йылынып ята торғайны.

Нисек итеп ауылға ҡайтырға? Ҡайтарырҙармы икән? Хәҙергә пароходтар йөрөй бит. Шулай булғас, рөхсәт һорап ҡарарға кәрәктер.

...Фәнилгә йәкшәмбе көндө ауылына ҡайтып килергә рөхсәт бирҙеләр. Ул шәмбе көн кисен пристангә йүгерҙе. Пароходтың ҡуҙғалып китеүен көтә-көтә, ялҡып бөттө ул. Йылға буйындағы ағастар хәҙер һирәкләнеп ҡалған һымаҡ: күбеһенең япраҡтары ҡойолған. Ошондай саҡтарҙа Фәнил Ҡашҡар менән урманда йөрөргә ярата торғайны. Йәй көнө үтеп керә алмаҫлыҡ шырлыҡтарға еңел генә инәһең дә китәһең. Тын алыуы ла иркен кеүек тойола көҙ көнө. Томра түгел шул.

Ҡараңғы төшөүгә, пароход килеп туҡтаны. Фәнил ярға беренсе булып сыҡты ла шунда уҡ ауыл яғына йүгерҙе. Ҙур тирәк тәңгәленә етте. Хәҙер ауылға яҡын ҡалды. Һыйыр, быҙау мөңрәүҙәре ишетелә. Ул сумкаһын ергә һалды ла, ике ҡулын да ауыҙына ҡуйып, ҡысҡырҙы:

— Ҡаш-ҡа-а-ар! Ҡашҡа-а-ар!

Элек урман-маҙарға барһа, шулай саҡыра торғайны этен. Хәҙер ишетелерме икән тауышы? Яңы ғына сығып килгән ай тирә-йүнде һүрән генә яҡтырта. Малай ауыл яғындағы юлға ҡараған да ҡатып ҡалған. Бөтә кәүҙәһе менән тыңлай тиерһең: алға эйелә төшкән. Ҡашҡар... Саҡырыуҙы ишеттеме икән? Алға тағы ла текләберәк ҡараны Фәнил.

Ул сүгеберәк ултырҙы. Алда тыпырлаған тауыш ишетелеп ҡалды. Ниндәйҙер ҡараҫҡы сыйылдап Фәнилгә ташланды.

— Ҡашҡар... Ҡашҡарым... — тине ул ҡалтыранып сыҡҡан тауыш менән. Ҡараңғыла малайҙың күҙ йәштәрен берәү ҙә күрмәне. Шуға ла ул һис тә тартынманы.

Ә эт ни эшләргә белмәй, әйтерһең, шашынған: Фәнилдең түшенә һикерә, битен яларға маташа, ситкә бер-ике

аҙым йүгерә лә йәнә тиҙ генә малайҙың түшенә килеп һарыла.

Фәнил ергә ултырҙы. Сумкаһын асты. Унан төргәк сығарҙы. Ҡарап торған эт сабырһыҙланып еҫкәнә, ялана. Фәнил төргәкте һаҡлыҡ менән генә һүтте лә бер киҫәк колбаса сығарҙы. Ҡашҡар уны бер генә һоғоноп ҡуйҙы.

— Әһә, тәмлеме беҙҙең аш, — тип һөйләнде малай, ауыҙ һыуын йота-йота. — Әйҙә, ашап ҡал һыйлағанда.

Ул, ауылға ҡайтырға йыйынғас та, Ҡашҡарға күстәнәс әҙерләргә керешкәйне. Иртән үҙенә ашарға бирелгән колбаса киҫәктәрен төрөп кенә һалып ҡуйғайны. Ә бына хәҙер ошо күстәнәсе менән дуҫын һыйлай, ҡыуанып бөтә алмай.

Малай сумкаһын ҡулына алды ла ауылға табан атланы. Эргәһендә уралған эттең башын һыйпай. Ә тегеһе уның усын ялай, шыңшып та ала: үҙенсә нимәлер һөйләй, һөйләп һүҙен бөтөрә алмай һымаҡ.

— Ҡашҡар... Һиңә бик ҡыйынмы? — тип иркәләне малай.

...Фәнил шатланып ишекте шаҡыны. Бер аҙҙан Мәһиямал апайҙың һаҡ ҡына өндәшкән тауышы ишетелде:

— Кем бар унда?

— Мин! Фәнил! Ҡайттым!

— Һинме ни... Уф, балам... — тип ҡабаланып ишекте асты әсәһе. Ҡулын һондо ла Фәнилде үҙенә тартып алды. Күкрәгенә ныҡ итеп ҡыҫты. Малай әсәһенең илауын тойҙо.

— Бөтөнләй ҡайттыңмы ни? — тип ҡабатлап һораны әсәһе.

— Юҡ, бер көнгә генә, — тине Фәнил.

— Эй, ҡунаҡҡа ҡайтҡанһың икән, балам. Бөтөнләй ҡайтһаң ине! — тине әсәһе, шатланып. — Ҡайҙа, үҙеңде һыйлайым әле!

Ул соланға сығып китте. Ҡаймаҡ, тауыҡ ите алып инде.

— Эй балам, ҡалай өҫтөңдә бөтәйткәндәр. Бөтәһе лә үҙеңә үлсәп тегелгән кеүек. Рәхмәт инде шул хәтлем тәрбиәләүҙәренә! — тип ҡыуанып һөйләнде әсәһе.

Әсәһе шатлана, йылмая. Улына ҡарап туя алмай. Фәнил үҙе иплəп кимермәгән һөйәктәрҙе Ҡашҡарға алып сыҡты.

Ҡашҡар шыңшый-шыңшый уға килеп һырылды. Малай, уны ҡосаҡлап, күтәрмәлә бик оҙаҡ ултырҙы. Бер аҙҙан ул Ҡашҡарҙы солан аҫтына индереп ебәрҙе. Үҙе ишекте бикләне. Өйҙә ул бик оҙаҡ йоҡлай алмай ятты. Тыуған йортта ниндәй рәхәт!

...Ҡашҡар өргән тауышҡа уянды ул. Ҡашҡар күтәрмә төбөндә яланып, алғы аяҡтарын алмаштырып баҫып, ҡыуанып ултыра... Ҡапҡа төбөнә бәләкәс малайҙар, ҡыҙҙар йыйылған. Улар инде Фәнилдең сығыуын күҙҙәрен ялтыратып ҡарап торалар.

Фәнил ишектән сығыу менән, улар:

— Цирк күрһәт!

— Ҡашҡар беҙҙе тыңламай!

— Рефлексын үҙең менән алып киткәнһең! — тип ҡысҡырырға тотондо Әсләм менән Риф.

Малай был бәләкәс дуҫтарын үҙе лә һағынғайны. Шуның өсөн дә бик ҡыуанып риза булды. Ҡашҡар Фәнилдең һәр әмерен үтәргә әҙер генә тора. Хатта инде артҡы аяҡтарында һикергәндә, башын һелкеп, ҡыуанып көлә кеүек күренде.

— Рефлексы бына ошо була! — ти ҙә Фәнил алып ҡайтҡан колбасаһын ваҡлап этенә ҡаптыра.

— Әсләм ниндәй билдә алған? Йә, һанап күрһәт! — ти хужаһы.

Эт биш тапҡыр өргәс, уға колбаса ҡаптырҙы. Бәләкәстәр ҡул сапты.

— Ә хәҙер беҙ хушлашабыҙ, — тип, Фәнил Ҡашҡарҙы алып китте.

— Эй-й-й-й! — тип үкенеште бәләкәстәр.

Ул өйҙә солан иҙәнен асты. Былтыр ҡаҙыған ояны яңынан төҙәтте. Өҫтәп йыуан ғына бағаналарҙан ҡыуыш яһаны, унда иҫке сепрәк-сапраҡ түшәне.

Китергә лә ваҡыт етте. Нисек Ҡашҡарҙан айырылырға? Фәнил ҡалған ашамлыҡтарҙы ояға һалды, шәпшәп атлап, әсәһе янына килде. Уның кәңәштәрен тыңланы. Шунан икеһе лә пристангә йүнәлде. Бер аҙ барғас, артына боролоп ҡарап торҙо. — Ҡашҡар күренмәне.

— Бахырҡайым, тамағына алданып ҡалды... — тип көйәләнде.

* * *

...Буранлы һәм ҡолаҡты семеткән ҡыш үтеп бара. Күңелде ашҡындырған яҙғы каникул көттөрә-көттөрә яҡынлаша. Бер көндө Фәнил ауылынан хат алды. Әсәһе яҙған уны: «Балам, яҙғы каникулда өйҙә ҡунаҡ булырһың. Аҡман-тоҡман сығып китмәһә, өйгә ҡайтырға әҙерлән».

Бик ҡыуанды малай был хатҡа. Ҡашҡарҙы күрергә лә бер сәбәп булды бит әле.

Өйҙә уларға төрлө темаға этюдтар төшөрөп килергә ҡуштылар.

Бер иртәлә интернаттың завхозы район үҙәгенә ат менән йомошҡа китергә йыйынды. Фәнил дә уның кашовкаһына ултырып китте, саңғыларын да һалып алды.

Ауылға яҡынайғас, ул юл сатында төшөп ҡалды.

Саңғыларын кейеп алғас, Фәнил урман аша ауылға тура тартылды. Яңыраҡ үткәрелгән саңғы ярышында ул бер аяғын ауырттырғайны. Шуға күрә хәҙер уға ҡулдары менән нығыраҡ эшләргә тура килә. Туңғаҡ ҡарҙа саңғы шәп шыуа. Урман ауыҙына килеп сыҡҡас, малай хәл алып торҙо. Шунан: «Ҡашҡа-а-ар!» — тип һуҙып-һуҙып ҡысҡырҙы. Саңғы таяғы менән үҙенең исемен ҡарға яҙҙы, алғараҡ үткәс, эт һүрәте лә төшөрҙө. Ҡашҡарҙы тағы ла саҡырҙы. Оҙаҡ ҡына көтөп торҙо. Тик дуҫы, ниңәлер, килмәне. Ни эшләп былай инәлтә икән?

Фәнил шарфын сисеп, кеҫәһенә һалды. Саңғылар, туңғаҡ ҡарҙы ҡыштырлата-ҡыштырлата, алға елдерә. Ауылға етергә аҙ ғына ара ҡалды.

Дуҫының күренмәүе Фәнилде борсоуға төшөрҙө. Ни эшләп һуң әле Ҡашҡары был юлы ишетмәй? Әллә соланда ашаймы икән? Малайҙың күңеле шомлана төштө.

Ул туҡталды ла, устарын ауыҙы янына ҡуйып, этен саҡырҙы: «Ҡашҡар!»

Был юлы уның тауышы, нисектер, йөрәкте өҙөрҙәй булып сыҡты. Ул урман төпкөлөнән шаңдау булып йөрөп ҡайтты ла йәнә Фәнилдең зиһененә һуғылды.

һағайып та, һағынып та көттө малай үҙенең бәләкәс дуҫының килеп сығыуын.

Фәнил саңғы таяҡтарын алды ла ауыл урамына табан шәп итеп шыуып китте.

Тыуған йортона ингәс, әсәһе Мәһиямал апай уны ҡосаҡлап алды.

— Һағындырып ҡына ҡайтаһың, балам. Аяғың өшөмәнеме? Хәҙер сәй эсерһең, йылынырһың, — тип уны иркәләне.

— Әсәй, Ҡашҡар күренмәй. Ҡайҙа йөрөй ул? — тип һораны Фәнил.

Мәһиямал апай улына күҙен мөлдөрәтеп ҡараны.

— Эй балам, — тине лә тынып торҙо. — Ҡашҡарыбыҙ хәҙер юҡ инде...

— Ҡайҙа булды? Кем алды? — тип һағайҙы Фәнил.

— Эттең кешегә эйәргәнен беләһең бит. Анауы ҡарауылсы Лоҡман бабайың менән баҫыуҙарға йөрөнө. Бер төндө күрше ауыл кешеләре ауыл осондағы люцерна бесәне өйөлгән эҫкерткә килгән. Бесән сәлдерергә тип инде. Ҡашҡарҙың эҫкерт яғына ҡарап һауалап өрөүен ишеткән Лоҡман бабайың нимәлер һиҙенгән. Ул, Ҡашҡарҙы эйәртеп, шунда киткән. Эт, алдан барып, бесән тейәүселәргә ташланған...

Мәһиямал апай, күҙҙәрен һөрткөләп, туҡтап ҡалды.

Фәнил дә, әсәһенең һүҙен тыңлаған һайын, төңөлә барҙы.

— Шунан ни булды? — тине ул әсәһенә.

— Урлашҡан кеше аяп торамы ни? Ҡашҡарға һәнәк менән сәнскән. Лоҡман бабайың уны күтәреп алып ҡайтты. Шунан туң ерҙе ҡаҙып ерләне...

Фәнил был һүҙҙәргә түҙмәне. Күҙ йәштәре субырҙап ағып китте. Ҡулъяулығы менән күҙҙәрен һөрткөләне.

Улының хәлен аңлаған Мәһиямал апай уны тынысландырырға тырышты.

— Балам, нык ҡайғырма. Йәйгә тағы берәй көсөк алып үҫтерерһең. Ҡашҡар кеүек итеп өйрәтерһең. Өйөбөҙгә күҙ-колаҡ булыр...

...Ҡайтыуына өс көн үтте тигәндә, бурай-бурай ҡар яуырға тотондо. Аҡман-тоҡман ғәрәсәте башланды. Фәнил тәҙрә төбөндә моңайып ултыра. Мәһиямал апай

улының хәлен еңеләйтергә теләй. Төрлөсә һүҙ ҡушып та ҡарай. Тик малайҙың күңелен һис тә аса алмай.

Ҡапыл Фәнилдең ҡолағына эт өргән тауыш салынып ҡалғандай булды. Ул хатта һиҫкәнеп китте. Урынынан йәһәт кенә торҙо. Урамға сыҡҡас, ҡар бөртөктәре, Ҡашҡарҙың маңлайындағы һымаҡ йомшаҡ ҡына аҡ таптар, малайҙың моңһоу йөҙөнә иркәләп кенә килеп һарылдылар...

?

1. Ҡашҡар ниндәй һөнәрҙәр белә? Уны Фәнил нисек өйрәткән тип уйлайһығыҙ?
2. Фәнил уҡырға киткәндә Ҡашҡар менән нисек айырылышыуы тураһында һөйләгеҙ.
3. Фәнил интернат-мәктәптә тәүге көндәрен нисек үткәрә?
4. Уның Ҡашҡар менән яңынан осрашыуы хаҡында һөйләгеҙ.
5. Ҡашҡарҙы кемдәр үлтерә? Был хәбәрҙе Фәнил нисек кисерә?
6. Ҡашҡарҙы үлтереүселәргә ҡарата һеҙҙә ниндәй тойғолар тыуҙы?
7. Халыҡтың «эт — кешенең иң яҡын дуҫы» тигән әйтеменә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ?
8. Үҙегеҙҙең яратҡан этегеҙ тураһында бәләкәй генә инша яҙығыҙ.

Тимер Йосопов

## ЕРӘН ҠАШҠА

Ерән ҡашҡа, ниңә ятһынаһың,
Мин шулай уҡ һиңә ятмы ни?
Ҡолағыңды ниңә ҡайсылайһың,
Тәүге тапҡыр күргән атмы ни?!

Елдәй атым, ниңә өндәшмәйһең?
Үҙ иттеңме әллә башҡаны?
Тайҙар көткән саҡта бер үҙеңә
Йырлай инем «Ерән ҡашҡа»ны.

Ялдарыңды һинең тарайым мин,
Тышауыңды, килсе, сисәйем,
Сисәйем дә һинең тышауыңды,
Үҙең менән Иҙел кисәйем.

? 1. Шағирҙың атҡа яратып өндәшеүен ниндәй юлдарҙа күрәһегеҙ?
2. «Ерән ҡашҡа» йырын беләһегеҙме? Унда нимә тураһында һүҙ бара?

Сәғит Агиш

## ТУРЫҠАЙ

Бөтә йылҡылар, ҡышҡы ҡураға ҡайтыр алдынан, ҡар менән ҡапланған яланға һуңғы тапҡыр сығып киттеләр. Бында ҡарт малдар ҙа, шулай уҡ ҡолондар ҙа бар. Оло малдар, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, һуған кеүек йәшел, йомшаҡ үләндәрҙе ашарға, тамаҡтарын туйҙырырға тотондолар. Йәш ҡолондарға нимә, улар үҙҙәренең әсәләренең һөттәре менән туйынғандар, арҡалары, янбаштары ике бәләкәй мендәр кеүек күпереп тора. Үләнгә артыҡ иҫтәре китмәй, ҡойроҡтарын буйға һуҙып, муйындарын кәкрәйтеп алалар ҙа ялан буйлап сабалар, һикерәләр, уйнайҙар.

Турыҡай башта, уларға ҡарап, һоҡланып торҙо. Үҙенең йәш саҡтары, бала саҡтары иҫенә төштө. Уның да шулай сапҡыһы, уйнағыһы, киң яланды бер итеп һикергеһе килде. Тик ул бала түгел; уға быйылғы яҙ, дүртте тултырып, бишенсе йәште килтерҙе. Йылҡылар араһында ундайҙарға «егет» тип йөрөйҙәр. Шуға күрә ул үҙен ҡарттарҙы һәм йәштәрҙе һаҡларға бурыслы итеп һананы. Быларҙы ул бөтә ҡурҡыныстарҙан һаҡларға тейеш.

Турыҡайҙа көс юҡ түгел. Уның йөндәре, ҡояш нурҙарына сағылып, йылҡылдап тора. Ҡара ҡойроғо һәм ике яҡҡа һалынып төшкән ялдары ҡуйы, ауырҙар. Улар уға матурлыҡ бирәләр.

Бейәләрҙе һәм ҡолондарҙы, һис шикһеҙ, ул һаҡларға тейеш. Быны ул бик яҡшы төшөнә. Шуға күрә уларҙың янынан китмәй. Аҙ ғына тарала башлаһалар, бөтәһен дә йүгертеп бер урынға алып килә. Унан, ҡолаҡтарын торғоҙоп, тирә-яҡты ҡарай. «Берәй нәмә юҡмы икән?» — тип шикләнә. Шикләнмәҫ ине, ул бабаларының, аталарының «бүре» тигән уҫал йыртҡыс тураһында һөйләгән ваҡиғаларын, әкиәттәрен хәтерләй.

Быларҙы һуғарырға ла үҙе алып барҙы. Һыу буйына барып еткәнсе, бәләкәйҙәр аҙашмаһын тип, арттан ҡарап килде. Йылғаға барып еткәс, алға сығып, башҡаларҙы туҡтатты ла төшә торған урынды үҙе ҡарап сыҡты. Кире ҡайтҡас, тағы ла уларҙы күҙәтергә тотондо. Сөнки ул үҙен бөтә йылҡылар алдында яуаплы һанай, һәм бөтә йылҡылар, ҡолондар, ҡарттар: «Беҙҙең Турыҡай бар», — тип ышанып торалар.

Бына көнбайыш яҡтан ниндәйҙер ҡара нөктәләр күренде. Турыҡай, ҡолаҡтарын торғоҙоп, шул яҡҡа ҡарай башланы. Был нөктәләр туп-тура уларға табан киләләр. Яй ғына түгел, шәп киләләр. Турыҡай уларҙың һандарын белергә тырыша. Береһе алдан килә. Уның артынан тағы ла дүртәү күренә.

Юҡ, былар, һис шикһеҙ, бүре булырға тейештәр. Эттәр ни эшләп ул яҡтан килһендәр? Эттәр булһа, ауыл яғынан килерҙәр ине. Былар, әлбиттә, бүреләр.

Турыҡай бөтә йылҡыларҙы бер ергә килтереп ҡуйҙы:

— Берегеҙ ҙә, — тине, — бер ҡайҙа ла китмәгеҙ! Ҡолондарҙы, ябағаларҙы уртаға алығыҙ, ҙурҙар, баштарығыҙ менән түңәрәктең эске яғына ҡарап, ҡойроҡтарығыҙ менән түңәрәктең ситенә боролоп баҫығыҙ.

Бөтәһен дә шулай урынлаштырып бөтөргәс, үҙе ҡойроғон торғоҙҙо, муйынын дуғаландырып, матурлап ебәрҙе. Күкрәген киреберәк ҡуйғандай булды. Тамам һоҡланғыс ыҫпай бер баһадир хәленә килде.

Теге биш нөктә бөтөнләй яҡынлашты. Уларҙың бөтәһе лә һоролар, ҡыҫҡа йыуан муйынлы бүреләр ине.

Турыҡай уларҙың яҡын килеүҙәрен көтмәне. Баҫып торған ерендә йәшен тиҙлеге менән боролдо ла бүреләргә табан уҡ төҫлө атылды. Ул баҫҡан урындағы үләндәр, тамырҙары менән ерҙән һурылып, һауаға һикерҙеләр. Уның тулы көс менән баҫыуынан тупылдаған тауыштар ғына ишетелеп ҡалды.

Йылҡылар: «Ни булыр икән?» — тип аптырап киттеләр. Ҡолондар һәм ябағалар әсәләре янына һыйындылар. Турыҡай менән бүреләр араһында буласаҡ ҡот осҡос бәрелеште көттөләр. Уларға был бүреләр Турыҡайҙы ҡырҡҡа ботарлап ташлар төҫлө күренде. Әсәләр, был күренеш була ҡалһа, күҙҙәрен асмаҫҡа, йомоп торорға булдылар. Йәшерәк «егеттәр», әгәр Ту-



рыҡай башына шундай ҡурҡыныс хәл килерҙәй булһа, яҡлашырға, бәрелештә ҡатнашыу өсөн үҙҙәре ташланмаҡсы булдылар.

Йылҡылар ошоларҙы уйлап бөтөүгә, Турыҡай бүреләр янына барып та етте һәм ниндәй етеҙлек менәндер алдан килгән ҡарт бүренең елкәһенән алып, уң яҡҡа ырғытып та ебәрҙе. Ошо мәлдә икенсе бүре Турыҡайҙың ҡойроғона йәбешмәксе ине, ләкин Турыҡай быны һиҙеп ҡалды һәм артҡы аяҡтары менән уның яңағына бик ныҡ итеп тондорҙо. Бүренең күҙҙәренә бейешеп йөрөгән иҫәпһеҙ күп йондоҙҙар күренде, ҡойроҡ төбөнә ултырып, күккә ҡарап олорға тотондо. Турыҡай ошо арала тағы ла бер нисәһенең елкәһенән алып ырғытырға һәм тояҡтары менән яңаҡтарына тибергә өлгөрҙө. Яңаҡтарына алған һайын, бүреләр ултырып олойҙар.

Был күренеш, һуғыштан бигерәк, баҫыуҙа тәртипһеҙ аунап ятҡан көлтәләрҙе тейешле урындарға ултыртып йөрөү күренешенә оҡшай ине.

Йылҡыларҙың эстәренә йылы инеп китте. Бәләкәйерәк ҡолон һәм ябағалар кеткелдәп көлә башланылар. Ололар үҙҙәренең йәш саҡтарындағы ғәйрәттәрен хәтерҙәренә төшөрҙөләр. Күренеш ҡурҡыныс һәм ҡыҙыҡлы төҫкә әйләнде.

Бүреләр, бөтә көстәрен йыйып, тағы ла ынтылмаҡсы булдылар. Быныһы ла уңышлы сыҡманы, хатта Турыҡай берәүһенең ҡойроғон да өҙөп сығарҙы. Аптырағас, улар ҡасырға булдылар — үҙҙәренең килгән яҡтарына һыҙҙылар. Турыҡай уларҙы сигендереү менән генә сикләнмәне, ҡайҙан килеп сыҡҡандар, шунда уҡ илтеп ташларға теләне.

Ул ҡойроҡло дүрт, ҡойроҡһоҙ бер бүрене ҡыуып китте. Еткән һайын һәр береһенең йә ҡойроғонан, йә елкәһенән алып ырғыта, йә тояғы менән яңаҡтарына, баштарына тибә ине.

Ун биш минуттан ул бөтөнләй күҙҙән юғалды.

Йылҡылар тағы ла ҡурҡыуға төштөләр, ләкин ҡарттар: «Бер нәмә лә булмаç, беҙҙең батыр Турыҡай улар менән генә көрәшә алыр», — тип тынысландылар.

Ваҡыт байтаҡ үтте. Ҡояш байыу, һалҡын төшә башлау менән, үҙе ҡыуып киткән яҡтан Турыҡайҙың ҡайтып килгәне күренде. Хәҙер ул ҡыҙып сапмай, аҡрын ғына юрта. Ике яҡҡа һалынып төшкән ҡара ялдары, һалмаҡ ҡына булып, бер юғары күтәреләләр, бер түбән төшәләр.

Йылҡылар янына килеп етеү менән, ул туҡтаны. Арыған һәм тирләгән, аҡ күбеккә батҡайны ул.

Йылҡылар иркенләп тын алып ебәрҙеләр, үҙҙәрен һаҡлаған батырға ҡарап һоҡландылар.

— Һыу эсергә ине! — тине Турыҡай.

— Юҡ, — тинеләр ҡарттар, — ярамай, тирең ҡатһын, унан һуң эсерһең. Тирең ҡатмайынса эсһәң, янырһың.

?

1. Хикәйәлә Турыҡай нисек тасуир ителә?
2. Бүреләр яҡынлашҡас, Турыҡай йылҡыларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн ниндәй саралар күрә?
3. Хикәйәнән Турыҡайҙың бүреләр менән алышҡан урынын табып уҡығыҙ һәм һөйләп бирегеҙ.
4. Бүреләр менән алышҡа ни өсөн башҡа аттар түгел, ә Турыҡай ташлана?

Али Карнай

## ТУРҒАЙ

Бер көндө ҡоштар араһында ошондай хәбәр таралды:

— Илдәрҙең иле булған йәмле ошо ил уртаһында ҡалаларҙың ҡалаһы булған бер таш ҡала бар икән. Яҙғы байрамдарҙың иң матуры ошо ҡалала була икән. Унда бик матур музыка уйнала икән, кешеләр бик шат йырҙар йырлайҙар икән. Был ҡала эргәһендә ҙур-ҙур урмандар бар икән. Был урмандарҙа бик дәртле, матур һайрай торған ҡоштар бар икән. Яҙғы ҙур байрамдарға улар бөтә илдәге ҡоштарҙың вәкилдәрен саҡыралар, ти. Беҙҙең яҡтан да бер ҡошто ебәрергә ҡушҡандар. Тик бик яҡшы ҡошто, бөтә ҡоштар яратҡан ҡошто ебәрһендәр, тип әйтәләр икән. Ҡоштарҙың да, кешеләрҙеке кеүек, бик ҙур байрамдары буласаҡ икән.

Бөтә ҡоштар ҙур йыйылышҡа йыйылдылар. Бик күп ҡоштар килделәр. Ҡара ҡарға, ала ҡарға, сәүкәләр, һайыҫҡандар, ыласын, ҡарсығалар килгәндәр. Ала ҡарға, үҙен башҡаларға ҡарағанда өлкәнерәк һанап, ереләнеберәк иң уртала урын алды. Уның тирәһендә сәүкәләр, һайыҫҡандар урынлаштылар. Сыйырсыҡ, сәпсектәр, тумыртҡа, урман тауығы, һандуғас, беснәк кеүектәр ситтәрәк урын алдылар. Хатта көнө буйына ағас ҡыуышында йәшенеп ултырған ябалаҡ та килде. Кешеләр менән йәшәй торған ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ, күркә кеүек ҡоштар йыйылышҡа күгәрсенде вәкил итеп ебәргәндәр. Ул ҡоштар:

— Беҙ инде ғүмерлеккә кешеләргә бәйләнеп ҡалғанбыҙ. Кешеләрҙән башҡа йәшәй алмайбыҙ. Шулай ҙа беҙ ҡош иптәштәрҙе онотмайбыҙ, улар шатланғанда, беҙ ҙә шатланырға теләйбеҙ, — тинеләр.

Ҡарға бик эре генә тамағын ҡырып һүҙ башланы. Ҡоштар белмәйҙәрҙер әле тип, яңы хәбәрҙе һөйләргә тотондо. Ләкин сыйырсыҡ:

— Беләбеҙ, беләбеҙ, — тип ҡысҡырҙы. — Һин асыҡ әйт: ни әйтергә теләйһең?

Үҙенән ҙурыраҡ ҡоштарға ялағайланырға, үҙенән көсһөҙөрәк ҡоштарға ҡарата бик эре ҡыланырға яратҡан һайыҫҡан шыҡырларға тотондо:

— Ҡарға ағай һөйләгәндә тик торорға булмаймы ни? Һиңә ни етмәй тағы ла? — тип ҡысҡырҙы.

Бына ошо ваҡытта ҡоштар араһында тартыш китте. Ваҡ ҡоштар араһынан кемдер:

— Ҡыҫылма, һайыҫҡан, бөтә ҡоштарҙың йомортҡаларын урлап эсеп йөрөгән башың менән һөйләнгән булаһың! — тине.

Унан һайыҫҡанды яҡлап сыҡҡан кәкүккә ябырылдылар.

— Килешкәндәр барыһы ла! Береһе башҡаларҙың йомортҡаһын урлай, ә быныһы — ялҡау, үҙе оя ҡора алмағас, йомортҡаһын башҡалар ояһына һалып, бала сығарта! Шул көйҙәренә оялмай ни ҡыланалар бит!

— Һөйләмәһендәр шулар!

Ҡарға, ғәҙәттәгесә, көслөлөк күрһәтте:

— Шауламағыҙ әле! Бына шул һеҙгә: ҙур байрамға беребеҙгә вәкил булып барырға тура килер. Теләһә кем бара алмай, әлбиттә, илдәрҙең иле булған ошо илдә һәр ваҡыт йәшәүселәрҙән көслөрәк берәү барырға тейеш. Ҡышҡы һалҡындар килеп еткәс тә, был илдән сығып китеүсе, йылы урын эҙләүселәрҙән ебәрә алмайбыҙ.

— Дөрөҫ! — тип ҡысҡырҙы һайыҫҡан. — Ҡарға ағайҙыҡы дөрөҫ. Күсәбәләрҙән ебәрмәйбеҙ!

Сәүкәләр сарҡылдарға тотондолар:

— Ҡарға ағай барһын!

— Әлбиттә, ул барһын!

— Беҙҙең арала унан да көслө, унан да өлкән ҡош юҡ, ул барһын! — тиештеләр.

Шул ваҡытта, тәүҙә йәшкелт төҫтә йылтырап торған ҡанаттарын елпеп сығып, сыйырсыҡ һөйләй башланы:

— Беҙ бит ҡоштар, иптәштәр! Улар күсәбәләр ҙә һәр ваҡыт бер урында тороусылар, йә булмаһа, эреләр ҙә ваҡтар тип айырмайыҡ. Ҡайһы берәүҙәр һыйырҙай ҙур кәүҙәле булһалар ҙа, баштарында бер суҡып алырлыҡ та аҡылдары булмай. Эш бит кәүҙә ҙурлығында, көстә түгел! Йөрәк тигән нәмә бар бит әле! Ана беҙ йөрөгән яҡта дөйә ҡоштарын күрҙек. Шундай ҙур кәүҙәләләр, алыҫтан ҡарағанда, бик күп һыбай кешеләр килә икән, тип тораһың, ҡурҡыныс та була. Шулай ҙа оса алмайҙар. Ҡанаттарын карап елкәне кеүек ҡуялар ҙа ел ыңғайына һыпырталар ғына — әй ҡурҡаҡтар үҙҙәре! Уларҙың ни уйы, ни башҡа һөнәре юҡ. Ҡош исеме тағып шундай бу-

лыу эшме ни ул? Мин шулай тәҡдим итәм: ҡоштар булғас, ҡоштар булайыҡ. Иң бейек осоусыға ярыш асайыҡ. Кем дә кем уҙа, шул ҙур байрамға беҙҙең вәкил булып барыр...

Ҡоштар араһында тағы ла шау-шыу китте... Ләкин күпселек сыйырсыҡ тәҡдименә ҡушылды.

...Матур йәйге иртә ине. Колхозсылар, шаулашып-шаулашып, яҙғы сәсеүгә йөрөйҙәр. Кешеләр, үҙ эштәре менән булып, һауала гөр килеп осошҡан ҡоштарға иғтибар ҙа итмәйҙәр. Тик бик матур һайрап йөрөгән һабан турғайын күрергә тырышҡан һымаҡ, юғарыға ҡараптыралар, ләкин турғай күренмәй, тик бик яҡында уның көмөш кеүек тауышы ғына ишетелеп тора. Әйтерһең, был һайрау ергә ҡояштың яғымлы нурҙары менән бергә һибелә.

Турғай кисә йыйылышҡа килә алмай ҡалғайны. Ул өс-дүрт көн инде оя яһау менән булды. Тик бөгөн генә ояһының эсенә аҙаҡҡы ҡылдарҙы һалып тигеҙләне. Ул, бөгөн шул шатлыҡ менән шатланып, сырылдап, һайрап йөрөгәндә ҡоштар араһында барған ярыш тураһында осраҡлы ғына ишетте. Турғай үҙенең йыйылышҡа килә алмауына бик үкенде. Ярыш барғанын ҡарап торорға булды.

Бер ваҡыт бөтә ҡоштар барыһы бергә һауаға күтәрелделәр. Ҡарға ла, сәүкә лә, һайыҫҡан да, күкүк тә, тумыртҡа ла, ҡор ҙа, сәпсектәр ҙә, ҡарлуғастар ҙа, сыйырсыҡ та — бөтәһе лә бар. Ишетеп ҡалған да, оҙон муйынын һуҙып, торна ла килгән. Түҙемһеҙләнеп ҡарсыға йөрөй. Ләкин ул юғарыға ҡарап оса алмай — ергә параллель яһап, һыҙғыртып үтә лә китә. Бөтә ҡоштар шаулап осҡан ваҡытта бер ябалаҡ ҡына, ағас ҡыуышында ултырып, моңайып ҡалды. Сөнки көндөҙ уның күҙе күрмәй ине.

Турғай, юғарыла осоусы иптәштәрен күргәс, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Осоғоҙ, юғарыраҡ, бик юғары күтәрелегеҙ, болоттарҙы үтеп китегеҙ, ниндәй рәхәт бит ул осоу, иптәштәр!

Ләкин бер күренеш турғайҙы аптырашта ҡалдырҙы: осоусылар араһында иң юғарыла ҡарлуғас бара. Ә ҙур кәүҙәле ала ҡарға унан ҡалышмаҫҡа тырыша. Ҡайһы ваҡыт ҡарлуғасты ҡыуып етә лә уны суҡырға тотона.

Ҡарлуғастың йөндәре туҙышып, түбәнгә талпынып төшөп китәләр. Турғай төшөндә: ҡарға ҡарлуғастан көнләшә, үҙе юғары менә алмағас, башҡаларҙың да юғары менеүен, үҙенән уҙып китеүен теләмәй... Турғай, оҙаҡ уйлап тормаҫтан, атлығып барҙы ла ҡарғаның күҙен суҡыны. Ҡарға йәмһеҙ тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе, уның суҡылған күҙенән ҡан аға башланы. Төшөп киткән күҙ алмаһы артынан ҡарға үҙе лә ергә төшөргә ашыҡты.

Ләкин ҡарлуғас та ныҡ ҡына яраланырға өлгөргәйне инде! Ҡарға уның түшен, муйынын ҡанға туҙҙырып бөтөргән. Шулай ҙа ҡарлуғас йылмая ине әле, турғай уның күңелен күтәрергә тырышты:

— Бирешмә, дуҫ, ҡайғырма! Яраларың төҙәлер әле. Ниндәй рәхәт бит ул осоуы! Ана, күрәһеңме, башҡалар ҙа ҡалышмайҙар!

Ысындан да, уларҙан алыҫ түгел сыйырсыҡ, сәпсектәр һәм башҡа бик күп ҡоштар осалар ине. Улар ҡарлуғасты ҡарғанан ҡотҡарған турғайға ҡарата шатланып ҡысҡыралар:

— Йәшәһен турғай! — тиҙәр.

Ләкин ҡарлуғастың хәле бөткәйне инде. Ул юғары күтәрелә алмай башланы. Турғай бер генә минут аптырашта ҡалды. Ҡарлуғастың бер үҙен генә ҡалдырырға ярамай, ул ергә төшөп, бәрелеп үлергә мөмкин. Икенсе яҡтан, турғай башҡалар менән һаман юғарыға күтәрелеү дәрте менән янды.

Шул ваҡытта улар өҫтөндә, уларҙан күп кенә юғарыла, бер сатыр күренде. Сатыр кеүек нәмәнең түбән яғына кеше аҫылынғайны. Турғай быңдай юғарылыҡта бындай нәмәне беренсе тапҡыр күрә ине. Ул тәүҙә бер аҙ ҡурҡты: ниндәй хәл был? Кеше һауала ни эшләп йөрөй икән?

Шулай ҙа турғай өмөтләнде. Ни булһа ла булыр, тип, шул күренгән нәмәгә тиҙерәк менеп етергә ашыҡты. Сөнки ҡарлуғастың хәле насарланғандан-насарлана бара ине. Турғай уны батырландырырға тырышты.

— Түҙ инде аҙ ғына, туғанҡайым!

Ярай әле, бәхеткә ҡаршы, теге нәмә түбәнгә ҡарай төшә икән. Бына ул ҡоштар менән тигеҙләнде. Ҙур ал сатырҙан бик күп ептәр менән аҫылынған кеше ҡоштарға ҡул болғаны.

Турғай ҡарлуғасҡа:

— Ултыр бына бында, — тип ҡысҡырҙы һәм бер аҙ ваҡыт улар икәүләп ал сатыр өҫтөнә ултырып төштөләр. Бер аҙ төшкәс, иң тәүҙә сыйырсыҡ, унан башҡалар осрай башланы. Ҡоштар, шаулашып, бөтәһе лә сатыр өҫтөнә ҡундылар. Ҡарлуғасты ҡыҙғандылар, турғайҙы маҡтанылар. Сыйырсыҡ шунда, турғайға ҡарап:

— Турғай, һин, бар, ос, бик юғары мен, барыбыҙ осоп дә ос, ә ҡарлуғасты мин ҡарармын, кешеләргә ышанырға ярамай. Улар араһында ҡарға кеүектәр аҙ түгел... Шулай ҙа, бәлки, яҡшы кешеләргә тап килербеҙ... — тине.

Турғай, шатланып, сырылдап, һайрап, тағы ла осоп китте. Уның артынан башҡалар остолар. Ә кешеләр, юғарыға ҡарап, турғайҙы күрергә тырыштылар.

Икенсе көндө ҡоштар тағы ла йыйылдылар. Бөтә ҡоштарҙың телендә ҡарлуғас менән турғай булды. Турғайҙы маҡтанылар.

— Йәшәһен турғай! — тинеләр.

Бөгөн турғай ҙа йыйылышта бар ине. Ләкин ул әле бер нәмә лә аңламай. Шул ваҡытта сыйырсыҡ тағы ла һүҙ башланы:

— Илдәрҙең иле булған ошо илдең, ерҙәрҙең ере булған ошо ерҙең ҡалаларынан ҡалаһы янында иртәгә ҙур байрам була. Байрамдарҙың байрамы булған был өлкән байрамға беҙҙән бер вәкил һорайҙар...

— Беләбеҙ, беләбеҙ! — тип ҡысҡырыштылар ҡоштар. Ә сыйырсыҡ былай тип дауам итте:

— Ә һеҙ шуны белдегеҙме, турғай кисә ниндәй батырлыҡ эшләне?

Ҡоштар тағы ла ҡысҡырыштылар:

— Беләбеҙ, беләбеҙ!

— Турғай беҙҙең арала иң матур һайраусы ҡош, турғай ҡарлуғасты ҡотҡарҙы!

— Турғай бик юғары оса ала торған уңған ҡош!

— Йәшәһен турғай!

— Беҙҙең вәкилебеҙ булһын турғай!

Турғай тик хәҙер генә үҙенең ҙур байрамға, яҙ тантанаһына барыуға һайланғанын белде. Ул шатлығынан бер ни ҙә әйтә алманы. Тик күҙҙәре генә ҡош иптәштәренә мөхәббәт менән мөлдөрәп ҡарап торҙолар. Ни әйтергә

белмәй бер аҙ торғандан һуң, ул, үҙенә үҙе әйткән кеүек, бер кемгә лә ҡарамай ғына:

— Мин менгән бейеклектә бик һалҡын икән. Шулай ҙа ҡыҙыҡ. Шундай иркен... — тип һөйләнеп ҡуйҙы.

Бер көндө ҡыҙарып ҡояш сыҡҡан саҡта, турғай, үҙенең ояһы турыһында күккә юғарыға уҡ менеп, кешеләрҙе ғәжәпкә ҡалдыра торған күңелле һайрауы менән һайраны ла илдәрҙең илендә ҡалаларҙың ҡалаһы булған ҙур таш ҡала яғына осоп китте. Ҡоштар уны оҙатып ҡалдылар, һәр ҡайһыһы бер яратыу һүҙе әйтергә тырышты.

— Үҙең кеүек үк батыр, ирек һөйә торған ҡоштарға беҙҙән сәләм әйт, турғай!

**?** 1. Ҡоштар йыйылышып нимә тураһында һөйләшәләр?
2. Байрамға ниндәй ҡошто ебәрергә булалар?
3. Ярышта кем еңеп сыға?
4. Турғайҙың ҡарлуғасҡа ярҙамға килеүе тураһындағы юлдарҙы табып уҡығыҙ. Һеҙ бында кешеләр өсөн дә хас булған ниндәй һыҙаттарҙы күрәһегеҙ?
5. Һеҙ үҙегеҙҙең дуҫтарығыҙға, кескәйҙәргә нисек ярҙам итәһегеҙ?

Абдулхаҡ Игебаев

## ЯҘ БАШЫНДА

Сағылдарҙа яҙғы елдәр
Әкрен генә ҡумыҙ сиртә,
Яңы тыуған күбәләктәр,
Ҡанат елпеп,
бейеп китә.
Йомро тал бөрөләре
Ярылырға тора бүртеп.
Бәпес кенә күк үләндәр
Сығып килә морон төртөп.
Йөрәкһенеп, сыйырсыҡтар
Ниҙер һөйләй үҙ телендә.
Белһәң ине, ниндәй ғәм бар
Шул ҡошсоҡтар күңелендә?...

**?** 1. Шиғырҙа һүрәтләнгән яҙғы күренештәрҙе һанап бирегеҙ.

2. Был күренештәр яҙ миҙгелдәренең ниндәй үҙенсәлеге тураһында һөйләй?

Назар Нәжми

## ЯҠТЫ ЯҘ

Быулана ер, ҡайнар икмәк һымаҡ,
Йылыһында ҡояш нурының.
Эй, яҡты яҙ, беҙ күрәбеҙ һиндә
Күпме яңы ғүмер тыуыуын!

Киткән ҡоштар ҙа бит һиңә ҡайта,
Күпме өндәр биҙәй ер өҫтөн,
Шиңгән гөлдәр ҡабат сәскә ата,
Һиндә илһам, һиндә йыр көсө.

Ярҙарына һыймай йылғалар ҙа,
Күңел ярһый, ташҡын һыу кеүек...
Киң ҡырҙарға байлыҡ булып тама
Орлоҡтарҙың һәр бер бөртөгө.

Һәр бөртөктә беҙҙең хеҙмәт йәшәй —
Һинең хеҙмәт, иптәш, минең дә;
Улар башта, ергә төшмәҫ борон,
Шатлыҡ булып шыта күңелдә.

Эй яҡты яҙ, һәр бер бураҙнаңда,
Һулышыңда йәшәү йәме бар.
Ерҙе алтынға манған батырҙарға
Алып кил һин тағы яңы дан!

?

1. Яҙғы шатлыҡлы йәнләнеү шиғырҙың ҡайһы юлдарында асыҡ күренә?
2. Автор ни өсөн яҙ күренешен хеҙмәткә бәйләгән?
3. «Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың» тигән мәҡәл шиғырға ҡайһы яғы менән тура килә?

Гөлфиә Юнысова

## УМЫРЗАЯ

Аҡ йомортҡа ҡабығынан
Моронлаған бәпкә һымаҡ,
Ҡарҙы тишеп үҫеп сыҡҡан
Һары сәскә, йәшел ҡыяҡ.

Ҡыҫҡа ғүмерле булырын
Белмәйенсә, умырзая,
Ҡыуаныстан тирә-яҡты
Һоҡландырып, эй, йылмая.

Бүләк итә кешеләргә
Яңы йырҙар, өмөт, шатлыҡ.
Таждарының һәр бәбәге
Үҙе илһам, үҙе сафлыҡ.

Ҡояш һәм Ер һөйөүенән
Яралған һин тәүге гөлһөң,
Тәүге булыуың менән дә
Сикһеҙ яҡын, ҡәҙерлеһең.

?
1. Умырзая яҙҙың ҡайһы көндәрендә тәү башлап күренә, күпме ваҡыт үҫә?
2. Умырзая «бүләк итә кешеләргә яңы йырҙар, өмөт, шатлыҡ» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
3. Тәбиғәттең умырзая ҡалҡҡан саҡтағы мәлен күҙ алдығыҙға килтерегеҙ ҙә, шиғыр юлдарына ныҡлап иғтибар итегеҙ. Авторҙың ҡайһы һүҙҙәре һеҙҙең күңелдәрҙә тыуған хистәргә айырыуса яҡын?

* * *

Хәҙерге көндә ер шарында 500 мең төр үҫемлек һәм 1,5 миллион төр йәнлек бар.

*Башҡортостандың Ҡыҙыл китабынан*

Хайуандарҙы ҡулға өйрәтеү менән кешелек үҙенең яңы баҫҡысына күтәрелгән.

*И. Акимушкин. «Хайуандар донъяһы» китабынан*

* * *

Аттар кешеләрҙең тауышын ғына түгел, нисек өндәшеүен дә бик һәйбәт айыра. Әгәр атҡа ҡысҡырһаң йәки әрләһәң, уның йөрәк тибеше йышая.

*В. Мөрсәлимов менән В. Сатыевтың «Башҡорт аттары» китабынан*

**Туғыҙынсы бүлектә бирелгән йомаҡтарҙың яуаптары:**

1. Ҡояш. 2. Йәйғор. 3. Ай менән ҡояш. 4. Күк йөҙө. 5. Ҡар. 6. Ағас үҙәге. 7. Ирен. 8. Мөгөҙ. 9. Ете ағай, ете башҡорт ырыуы.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### Беренсе бүлек

**Рәшит Ниғмәти** *(белешмә)* . . . 3
Хәйерле юл һеҙгә! . . . 3
«Төндә ҡарап торҙом...» . . . 8
**Баязит Бикбай** *(белешмә)* . . . 9
Туған тел . . . 9
Рус теле . . . 10
**Рәми Ғарипов.** Туған тел . . . 11
Атайҙар һүҙе — аҡылдың үҙе... *(мәҡәлдәр)* . . . 12

### Икенсе бүлек

**Ғ. Рамазанов.** Ураҡ өҫтө . . . 13
**З. Ҡотлогилдина.** Игенсе . . . 14
**Али Карнай** *(белешмә)* . . . 15
Урманда . . . 15
*Тасуирлау тураһында* . . . 20
**К. Кинйәбулатова.** Күҙ еткәс . . . 20
**Ш. Бабич.** Беҙҙең баҡса . . . 21
**Н. Иҙелбай.** Дүрт миҙгел . . . 22
*Сағыштырыу тураһында* . . . 23
Иген төбө — ҡыуаныс... *(мәҡәлдәр)* . . . 23

### Өсөнсө бүлек

Башҡорт халыҡ ижады . . . 24
Әкиәттәр. Ҡамыр батыр . . . 25
Әминбәк . . . 37
*Синоним һәм омонимдар* . . . 45
Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән . . . 47
*Антонимдар* . . . 55
*Әкиәттәр тураһында* . . . 55
Йомаҡтар . . . 56
Мәҡәлдәр . . . 60
Башҡорт халыҡ йырҙары . . . 62

## Дүртенсе бүлек


**Салауат Юлаев** *(белешмә)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 66
Ҡайтып киләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 66
Яуҙа яраланғас... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 67
Йырҙарҙан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 67
**Ғәбдрәхим Усман.** Егет булһаң... . . . . . . . . . . . . . . . . . . 68
Ҡармасан менән Сәрмәсән (*«Һуңғы һартай» әҫәренән өҙөк*) . 69
**Сафуан Яҡшығолов.** Дим буйында яҙғы таң . . . . . . . . . . . 72
**Ямалетдин Юмаев.** Шәкерт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 72


## Бишенсе бүлек


**Ғ. Туҡай.** Иҫемдә ҡалғандар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 75
*Биография һәм автобиография* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Шүрәле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 86
*Халыҡ ижады һәм әҙәбиәт* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 89
Аҡыллыға ишара... *(мәҡәлдәр)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 90


## Алтынсы бүлек


**Мәжит Ғафури** *(белешмә)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 91
Һарыҡты кем ашаған? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 91
Ат менән Эт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 94
*Аллегория һәм мәҫәл тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . 95


## Етенсе бүлек


**Дауыт Юлтый** *(белешмә)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
Бәләкәй Ҡотош . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
*Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү* . . . . . . . . 115
**Р. Назаров.** Башҡорт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116
**В. Әхмәҙиев.** Уҡлығая . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116


## Һигеҙенсе бүлек


**М. Хәй** *(белешмә)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 120
Ауылда ҡунаҡта . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 121
Өфөгә иҫтәлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 122
Уйҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 122
*Эпитет тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 123
**Р. Ниғмәти.** Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар . . . . . . . . 123
*Йәнләндереү* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 127
Тыуған ерҙең туҙаны ла ҡәҙерле... *(мәҡәлдәр)* . . . . . . . . 128
**Рәми Ғарипов** *(белешмә)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 129
Һағыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 130
Ялан сәскәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 130
Халҡым хаҡында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 131

**Назар Нәжми** *(белешмә)* .................... 133
Тыуған ҡалама йыр .................... 133
Тыуған ауылыма .................... 136
Ҡобайыр ҙа әйтеп данланым... *(өҙөк)* .................... 137

Туғыҙынсы бүлек

**Шәйехзада Бабич** *(белешмә)* .................... 138
Кем өсөн? .................... 138
Халҡым өсөн .................... 139
Беҙ .................... 140
Йомаҡ ҡойҙом .................... 141

Унынсы бүлек

**Динис Бүләков** *(белешмә)* .................... 142
Яралы китап .................... 142
**Ә. Вахитов.** Өс бөртөк бойҙай .................... 151
**Ғ. Әмири.** Әсә йөрәге .................... 155
**Р. Өмөтбаев.** Әмир баҫыуы .................... 157
*Хикәйә тураһында* .................... 167
Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы халыҡ йырҙарынан .. 167

Ун беренсе бүлек

**Мостай Кәрим** *(белешмә)* .................... 168
Өс таған .................... 169
Ап-аҡ мөғжизә *(«Ғүмерем миҙгелдәре» китабынан)* .................... 195
**М. Кәрим.** Һоро турғай .................... 203

Ун икенсе бүлек

**З. Хисмәтуллин.** Урман ҡунағы .................... 205
**Рәшит Низамов.** Ҡашҡарым менең .................... 213
**Т. Йосопов.** Ерән ҡашҡа .................... 222
**С. Агиш.** Турыҡай .................... 223
**А. Карнай.** Турғай .................... 227
**А. Игебаев.** Яҙ башында .................... 232
**Н. Нәжми.** Яҡты яҙ .................... 233
**Г. Юнысова.** Умырзая .................... 234

**Дәреслекте файҙаланыу тураһында мәғлүмәттәр**

| № | Уҡыусының фамилияһы һәм исеме | Уҡыу йылы | Дәреслек ниндәй хәлдә | |
|---|---|---|---|---|
| | | | йыл башында | йыл аҙағында |
| 1 | | | | |
| 2 | | | | |
| 3 | | | | |
| 4 | | | | |
| 5 | | | | |

4470





Бөркөттәй күктә осорға,
Балыҡтай һыуҙа йөҙөргә,
Боландай ҡырҙа елергә —
Теләгебеҙ шул булһынсы!

* * *

Эйәрләгеҙ, ирҙәр, арғымаҡтар,
Эйәрләгеҙ быуаҙ бейәләр,
Йәлләмәгеҙ, һуңынан ҡолонларҙар,
Йәлләмәгеҙ, намыҫҡа эйәләр.

* * *

Иҫтәремдән сыҡмай Уралҡайым,
Шишмәләре, сәхрә, туғайы.
Йәннәт төҫөн биргән сәскәләре,
Һандуғастай моңло ҡурайы...

*Салауат Юлаев шиғырҙарынан*